# Ағиҙел

Өфө,
апрель
2013

4(1080)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***,

Рауил БИҠБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат ҠӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Риф ТОЙҒОНОВ,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Юлай Янбаев *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары)*,
Гүзәлиә Тутаева, Тәнзилә Сәлихова (корректорҙар),
Рәйсә Ҡамалетдинова, Айһылыу Мофазалова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Зөлфиә Биктимерова, Рима Нәзифуллина *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августында теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС77-37206.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.04. 2013. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 200 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0041.13.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel-rb.ru.

---

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республикаһының Өфө полиграфкомбинаты дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан Уфимский полиграфкомбинат.
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2013 (4,1080)**

# БЫЛ ҺАНДА:


СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Рәйлә Сабитова.** Артыҡбикә. П о в е с т ь - м о н о л о г. ..................5
**Зифа Ҡадирова.** Һағынырһың – мин булмам. П о в е с т ь . Аҙағы. .46

ШИҒРИӘТ

**Хәлисә Мөҙәрисова.** Кем булһаң да. Ш и ғ ы р ҙ а р. ....................83
**Рамай Ҡаһир.** Урмансылар. Ш и ғ ы р ҙ а р. .................................88

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Гөлфирә Гәрәева.** Яңы фекерҙәр, төплө күҙәтеүҙәр емеше. ...........94
**Айнур Хужәхмәтов.** Эш күрһәткән улын ил онотмай. ....................98

КӨНДӘЛЕКТӘР

**Рауил Бикбаев.** Уҙған ғына ғүмер, ҡалған хәтер... Аҙағы. ............101

БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР

*Академик Ғайса Хөсәйеновҡа – 85 йәш*

**Фәнил Күзбәков.** Башҡорт әҙәбиәте һәм әҙәбиәт ғилеме хаҡында әңгәмә. ..........................................................................125
**Гөлнур Хөсәйенова.** Ғ. Б. Хөсәйенов һәм башҡорт фольклористикаһы. ......................................................................129
**Фирҙәүес Юнысова.** Фән азаматы Ил азаматтары тураһында. .....................................................................................135
**Гөлнара Абдрафиҡова.** Поэтик оҫталыҡ, таһыллыҡ өлгөһө. ......145

БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ

**Гөлназ Ҡотоева.** Аяныслы ғүмер
*(Дауыт Юлтыйҙың тыуыуына – 120 йыл)* ...................................152

ДУҪЛЫҠ КҮПЕРҘӘРЕ

**Әхәт Сәлихов.** “Ни күрһәм дә – Алаш өсөн күргәнем,
Миңә бәхет – халҡым өсөн үлгәнем!”
**Мағжан Йомабайулы.** Алыҫтағы бауырыма. Ш и ғ ы р ҙ а р. .......155

*2013 – Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы*

**Мәхмүт Хужин.** Миһырбанһыҙлыҡ. .............................................164

САТИРА ҺӘМ ЮМОР

**Мөнир Вафин.** Пародиялар. .........................................................175

“АҒИҘЕЛ”ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПРОЗА

**Р. Сабитова.** Отчуждение. *Повесть-монолог.*
**З. Кадырова.** Затоскуешь по мне... *Повесть. Окончание.*

ПОЭЗИЯ

**Х. Мударисова, Рамай Кагир.** *Стихи.*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Г. Гареева.** Плод новых идей и глубоких наблюдений.
**А. Хужахметов.** Родина не забывает достойных сыновей.

ДНЕВНИКИ

**Р. Бикбаев.** Жизнь проходит, а память остаётся. *Продолжение.*

НАШИ ЮБИЛЯРЫ

*Академику Гайсе Хусаинову — 85 лет*

**Ф. Кузбеков.** Интервью о башкирской литературе и литературной критике.
**Г. Хусаинова.** Г. Б. Хусаинов и башкирская фольклористика.
**Ф. Юнусова.** Сыны отчизны.
**Г. Абдрафикова.** Пример поэтического мастерства и служения науке.

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**Гульназ Кутуева.** Сломанная судьба
*(120 лет со дня рождения Даута Юлтыя).*

МОСТЫ ДРУЖБЫ

**А. Салихов.** «Счастье умереть за народ!».
**Магжан Юмабайуглы.** Далекому сородичу. *Стихи.*

*2013 — Год охраны окружающей среды*

**М. Хужин.** Бессердечность.

САТИРА И ЮМОР

**М. Вафин.** Пародии.

ПИСЬМА В «АГИДЕЛЬ»

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА...

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир — 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип — 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары —292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре —277-87-73
Проза бүлеге — 277-87-50
Бухгалтерия — 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



Рәйлә
САБИТОВА

# АРТЫҠБИКӘ

## ПОВЕСТЬ-МОНОЛОГ

Шулай итеп, мин йәнә мәркәздә, йәғни Өфөлә. Юҡ, әлбиттә, ауылдан сыға белмәгән "ҡырағай" башҡорт бисәһе түгелмен түгеллеккә. Элек тә килгеләп торҙом баш ҡалаға, хатта бер-ике төн ҡунып ҡалырға ла насип итте. Әммә әлеге килеүем ул саҡтағы ваҡ-төйәк мәшәҡәттәр менән йөрөү ише түгел. Әлеге сәйәхәтте минең бында тәүге килеүем менән генә сағыштырырға мөмкин. Мәркәз үҙе бер ҡарағай джунгли һымаҡ ҡаршыланы мине. Ул саҡтағы мин – 16 йәшлек үҫмер ҡыҙыҡай... Саманан тыш бәреп торған мин-минлегем менән бер рәттән, биләүҙән үк тыҡып-тыҡып баҫалҡылыҡ һеңдерелгән төшөнсәләрҙең ниндәйҙер бер шикле йыйылмаһы. Сәнғәткә уҡырға килгән берәү, йәнәһе. Әсәй бахыр, мәркәздең аппетиты хаҡында ғүмерҙә лә хәбәрҙар булмаған ябай ауыл ҡарсығы, 50 мең аҡса биргән булды. Барып-ҡайтыу хаҡы ул саҡ 30 мең ине. Ҡалғанына мин ҡайҙалыр, нисектер йәшәргә, нимәләр ашарға тейешмен. Бесәй балаһы һауытынан да бәләкәйерәк бер шәшке сәй менән ваҡ бәлеш мең һум ярым тора ине ул саҡта. Шулай булғас, уйлап ҡарағыҙ, оло бесәйҙән дә апаруҡ дәү ун алты йәшлек үҫә торған организм нимә эшләй ала ине? Юҡ, әлбиттә, ниндәйҙер мөғжизә менән ятаҡ хаҡы түләгенә 5 мең булмаһа, консультация һәм имтихандарға йөрөүҙә уҙған аҙнаны уйламай ҙа йәшәргә мөмкин ине. Әммә... Әммә мин бахыр ғүмер буйы ниндәйҙер уңышһыҙ юлдарҙа йөрөр кеше булдым, буғай. Өфөлә күпме уҡыу йорто бар, һәм һәр береһендә абитурҙарға йәшәү бушлай булғанда, бер миңә нишләп шулай тура килгән? Бүлмәләш ҡыҙҙар һөйләшә: "Әсәйгә шылтыраттым, асыҡмайһыңмы, тип һорай, мин шунда уҡ прибедняться иткән булам, ашханала әҙерәк туйынам да ул, тип." Ә үҙенең кеҫәһендә 250 мең һум аҡсаһы бар, минең әсәй ҡарсыҡтың бер айлыҡ пенсияһы!

---

*Рәйлә Сабитова (1978) Ғафури районының Сәйетбаба ауылында тыуып үҫкән, бөгөн дә шунда йәшәй. Урта мәктәпте тамамлағас, Өфөләге 64-се профессиональ лицейҙа, БДУның филология факультетында белем ала. «Табын» район гәзитенең И. Фархшатов исемендәге премияһы лауреаты, өс бала әсәһе, бер проза китабы авторы. Был — йәш әҙибәнең «Ағиҙел»дә тәүге күләмле әҫәре.*

Улар миңә бик йәлләп ҡарайҙар ине, аслыҡҡа түҙмәй, имтихандар бөтөүен дә көтмәйенсә ҡайтырға йыйынғас, береһе юлға дүрт пәрәник бирҙе. Юлға аҡса юҡ ине. Ятаҡта йәшәүгә түләгәндән һуң янсыҡ төбөндә 1 мең 800 һум аҡса ҡалды. Район үҙәгенән ауылға тиклем билет та 3 мең тора...

Автовокзалға тиклем бер туҡталыш ҡалғас, арып, эскәмйәгә ултырҙым. Автобусҡа тиклем ике сәғәт самаһы ла барҙыр, ашығаһы юҡ. Тормоштоң тәүге һынауында уҡ юғалып ҡалыуым йөҙөмдә сағыла ине микән? Таяҡҡа таянып йөрөгән ҡотһоҙ бер ҡарт хәлем менән ҡыҙыҡһынды. Һөйлә лә бир беренсе осраған бәндәгә хәлемдең бөтә аяныслығын. Тиктомалдан, киң күңеленә сыҙаша алмай, аҡса бирер, тип өмөтләндемме? Иҫәр ҡыҙыҡай. Теге ҡартлас паспортымды ҡараны. "Хәҙер нишләйһең инде, – ти. – Попуткаға сыҡһаң, хәҙер үҙеңде берәй ерҙә көсләп, урман буйына ырғытып китәсәктәр". Мин әлбиттә, кеше тигән хайуандың ни дәрәжәлә түбән була алыуы менән осрашҡаным юҡ, әммә телевизор ҡарап, гәзит уҡып быңдай хәлдәрҙең булып тороуон бик яҡшы беләм. Асығыуҙан, арыуҙан шул тиклем миңрәүләнгәнмен, әлеге хәлемдән тағы ла ҡот осҡосораҡ, тағы ла ҡурҡынысыраҡ хәл-ваҡиғалар була алыу мөмкинлеген мейем бөтөнләй ҡабул итә алмай. Аңра кеше кеүек, ҡартты йөпләйем. "Эйе шул". "Әйҙә миңә, – ти "яңы таныш", – мин, әлбиттә, инде булдыра алырлыҡ йәштә түгелмен, тотоп ҡына ҡарай алам, ҡурҡма". Һүҙҙәрен дәлилләптер, тубығыма тотона. Минең миңрәүләнгән башта эмоциялар шулай ҙа бөтөнләй үлеп бөтмәгән булғандыр – ғәжәпләнеүҙән күҙҙәрем аҡайҙы, "Мин һиңә сәй эсерермен, – ти теге ҡомо ҡойолған ҡарт. Минең ихтыярҙы сәпсим һындыра алырҙандыр инде, үҙенсә "көслө" дәлил килтерә: – Колбасалап". Шулай. Минең мәркәзгә тәүге сәйәхәтем бик уңышлы булды. "Был донъяла кеше кешегә дуҫ һәм иптәш" тигән өлкәндәр тарафынан аңға һеңдерелгән бер алдаҡсы фекер һабын ҡыуығы булып шартланы. Эйе, иллюзиялар ул теш кеүек ҡойола – ҡойола һәм яңыһы үҫеп сыҡмай. Яһалманы ғына ҡуйырға мөмкин. Бер ҡасан да ирҙәр күҙенә һәм һүҙенә ышанмау, һәр саҡ уяу, һиҙгер булыу шул көндән ҡалды, ахыры. Мин тороп киттем, әйләнеп тә ҡараманым, вокзалға атланым. Теге бабай артынан эйәреп китеп, кешелек ғорурлығын юғалтмауҙан мине бер өмөт араланы: миһырбанлы шофер осрап, район үҙәгенә тиклем алмаҫ микән, тип уйлағайным. Бөтөнләй өлөшһөҙ бала түгелмендер: шофер ысынлап та миһырбанлы булды: аҡсам юҡлығына ышанманы-ышаныуын, әммә алды. Тиҫтә йылдан ашыу ваҡыт үтте, мин уға рәхмәт уҡыйым. "Башҡа улай алдашып йөрөмә", – тип мине алдаҡсыға тиңләп кәмһетте-кәмһетеүен, әммә был бәләкәй кәмһетеү менән ул мине оло түбәнлектәрҙән араланы.

Район үҙәгендә ике туған апайға барып ҡундым, аҡса һораным, ауылға ҡайтырлыҡ, тип, бирмәне. Шулай уҡ ышанманы шикелле. Һуңғы меңемде түләп попуткаға – боролошҡа сыҡтым. Машиналарға ҡул да күтәрмәйем, тик торам. Ә ниңә улар мине ултыртырға тейеш, барыбер аҡсам юҡ бит?! Шул тиклем был яҡты донъяға, тормошҡа, саҡ башланып торған йәш ғүмеремә битараф инем... Тағы ла бәхет йылмайҙы: ауылдаш агроном ағай танып, туҡтап, саҡырып алды. "Ниңә ҡул күтәрмәйһең?" – тип аптырай үҙе. Бығаса теплица шарттарында ғына үҫкән нәфис гөлдө ҡырыҫ, асыҡ тәбиғәткә күсереп ултырт әле, ерегер микән? Ерекһә лә, апаруҡ ваҡыт шиңеп, хәлһеҙләнеп ҡалыр. Мин инем шул гөл. Ҡаланың ҡырыҫ, ауаһыҙ тәбиғәте ҡырау урынына бөгөп һалды. Ай самаһы уйнаманым-көлмәнем, ниҙәр кисергәнемде бер әҙәм затына һөйләмәнем. Күңелемдең бер өлөшө туңып ҡалды. Һәм ул өлөш әсәйгә ҡарата ине. Ул бит аҡсаны күберәк тә бирә ала ине. Күпме кәмһенеүҙәрҙән азат була инем мин?

Йәнәһе, донъя күрмәгән йәш ҡыҙыҡай, аҡса тота белмәй, берәүҙең хәләл аҡсаһын һағыҙ сәйнәп, газировка-маҙараға туҙҙырып бөтөр, тип уйлағандыр инде әсәй. Һа, үҙенсә ул да хаҡлы.

Ваҡыт үтеп, күңел тынысланғас, ҡабат юлландым мәркәзгә. Уҡырға кереп, ваҡытлыса булһа ла пропискалы, йәшәр урыны булған үҙ-үҙенә ышанған туташ булып еткәс, теге ҡартты тағы шул уҡ туҡталышта осраттым. Был юлы мин уның күҙенә тәкәббер һәм кәмһетеүле баҡтым: күрҙеңме, ҡартлас, һин мине кешелек намыҫымдан яҙҙырырға, ҡыҙ ғорурлығымды аяҡ аҫтына һалып тапарға теләгәйнең, нисауа, бирешмәне әле был апайың! Ул, таяғына таянып, шәп-шәп атлап китеп барҙы. Кейем-фәләнендә бер үҙгәреш бар ине: кепкаһын сисеп, сигеүле түбәтәй кейеп алған. Ике ҡуллап битен һыпырып, ауыҙ ҡыймылдатҡан булып, кемдәрҙелер алдап йөрөйҙөр инде. Уның ҡарауы, мин уның ысын йөҙөн күрҙем. Ул шунан ҡасты – үҙенең ысын йөҙөн күреүсенән. Ә мин тантана итеп тороп ҡалдым. Ғәжәп, аҙаҡ был һөнәрҙән мин тәм таба башланым. Йәғни кеше алдында төкөрөк сәсеп хаҡ тоғролоҡ, рухи ҡиммәттәр тип боғаҙ йыртҡан булып сибәр ҡатын-ҡыҙ менән аулаҡта ябай ғына бер хайуани теләктең мәхлүк ҡолона әүерелеп, кеше тигән субъекттың иң түбән яғын йылан тәпәйен күрһәткән кеүек сығарып күрһәтеүен тамаша ҡылыуҙан тәм таба башланым.

Тиҫтәгә яҡын йылдар элек шулай бер ижади конкурста ҡатнашырға дәрт иткәйнем. Нимәгә кәрәк булды ул? Миңә унда ҡатнашыуҙың ғына түгел, еңеүҙең дә бер ниндәй ҙә профессиональ уңыш килтерәсәге юҡ ине бит! Тәүге турҙан уҡ үтмәнем. Торам фойела ҡатып, аптырап. Тәкәбберлегем көслө булғандыр, үтмәҫемә ышанмағайным, юғалып ҡалдым. Килде яныма сал сәсле бер уҙаман, ҡыҙыҡһынды – сәбәбен әйттем. Ярҙам итер, тип уйланыммы?" Бәлки, киләһе йыл килеп, тура миңә мөрәжәғәт итерһең? Әҙерләрбеҙ", – ти. Төҫкә танымағас, исемшәрифен һорайым, улары таныш, билдәле генә бер режиссер, имеш. Машинаһына саҡырҙы, ултырҙым. Ниндәйҙер дуҫына квартира һорап шылтырата башланы, юлда берәй магазиндан шарап алырға булып китте. Мин алйотҡа шунда саҡ барып етте был «бейәҡаҙанған» бәндәнең бушлай сыр һалып йөрөүе. Көлдөм дә тәүге туҡталышта уҡ төшөрөп ҡалдырыуын һораным. Абзыйым мине, баҫалҡы ауыл ҡыҙы булғанға инәлтә, тип уйланы, күрәһең. Тотондо минең "комплекстарым менән көрәшергә". "Раскрепощайся, – ти. – Нимәһе бар уның, это нормально. Киләһе йыл лауреат итербеҙ. Күпме перспективалар асыласаҡ, раскрепощайся!" Һәм үҙенең боҙҙай һалҡын һәм еүеш устары менән ҡулымды ҡармай. Ерәнгес һыуыҡ тәлмәрйен, тип тертләгән ҡулымды саҡ тартып алманым. Ағайҙың буйтым талантына, оло йәшенә, сал сәстәренә ихтирамым хаҡына түҙҙем. Әммә хахылдап көлөүҙән тыйыла алманым. "Абзыйым, – тинем. – Әгәр мин, һеҙҙең уйығыҙса, закрепощенный булһам, эйәреп китер инем. Әммә мин тап комплекстарҙан азат. Азат кеше – ул, тимәк, һайлау мөмкинлегенә эйә кеше. Иремә хыянат итергә теләһәм, мин, пардон, һеҙҙең һымаҡты түгел, ә бер 17-18 йәшлек боҙолмаған егетте һайлар инем. Миңә тоже йәш тән оҡшай, һеҙҙе аңлайым», – тинем. Битенә сәпәгәндән дә көслөрәк тейҙе, әлбиттә, һүҙҙәрем. Тормош – ул үҙе лә апаруҡ бәғерһеҙ нәмәкәй. Күпмелер ваҡыттан был абруйлы абзыйҙың ниндәйҙер төҫлө металл юбилейы булды. Уның ижадына ах та ух килеп дан йырланылар, фотоһын гәзит һайын баҫтылар. Берәүһендә ҡатыны менән әңгәмә ойоштороғандар. Ирен иҫ киткес яҡшы ир, шәп атай итеп һүрәтләгән. Бөтә ғәм алдына "өҫтөмдән йәш, сибәр актрисулькалар менән йөрөүен һаман дауам итә" тимәҫ инде, билдәле. Уҡып, хихылдап көлдөм дә тирә-яҡтағыларға

сәбәбен аңлатып торманым. Ниңә кәрәк ул? Кешенең йөҙөн йыртыу ҡәнәғәтлек килтермәй, ә артыҡ таралмаған информацияны белеүем ҡәнәғәтлек уята. Үҙенә күрә тәкәбберлек инде. Булһа һуң. Минең кеүек сибәр, аҡыллы ханымдың ниндәйҙер етешһеҙлеге булырға тейеш тәһә. Ә тәкәбберлек ул кәкре аяҡ йәки икенсе эйәк түгел – тәүге ҡараштан уҡ күренмәй. Шулай булғас, ҡалһын әйҙә.

Был юлы мәркәзгә шәхси мәнфәғәттәрем түгел, оло бурыс әйҙәне. Әммә ул "оло бурыс" шәхси ҡиәфәтемә турана-тура бәйле, ҡыҙғаныска ҡаршы. Бер миңә түгел, туранан-тура ауыл яҙмышына ҡағылышлы төҙөлөштө туҡтатып торған бер имза хаҡына "ҡорбан" ише һайландым мин. Сөнки ниндәйҙер бер чиновник ниндәйҙер сәбәп менән беҙҙең төбәкте бик яратмай. Былай ҙа етеш йәшәмәгән халыҡҡа йәлсеп китергә бөтөнләй мөмкинлек юҡ. Ниндәйҙер оҙон ҡолаҡтар аша беҙҙең начальство ул бәндәнең йөрәгенә юлдың тәпән-тәпән балдар, шаҡтай буралар аша үтмәгәнен белеп ҡалған. Төргәк-төргәк банкноттарға ла битараф, ти, ул бәндә. Абруйлы ағайҙар, таныш-тоноштар аша ла эш сыҡмағас, һуңғы сара ҡалды – көсһеҙ зат ярҙамында абордаж. Сибәрҙәр күп беҙҙә, белемлеләр ҙә бар. Әммә йәрәбә миңә төштө. Сөнки мин бер нисә йыл инде ирһеҙ бисә статусында йәшәп ятам. Ҡаса-боса күңел күреүсем дә юҡ. Тимәк, мин, күптәрҙең аңлауынса, иргә "һыуһаған" булырға тейеш. Тейеш һәм – вәссәләм. Ә минең үҙ ғүмеремдә, ниндәй генә оятһыҙ тәҡдимдәр ишетеп тә, иремдән башҡа берәү менән хатта үбешеп ҡарамаған юғары әхлаҡлы ҡатын икәнем бер кемде лә ҡыҙыҡһындырмай. Сибәр – тимәк, кәнтәй. Әле бер кемде лә яҡын юллатмай, тимәк, – һайлана, ҡимmәтен арттырмаҡсы. Әммә утыҙҙы уҙҙы, ике балаһы бар, тимәк – үтмәҫ тауар. Үҙе лә шуны аңларға һәм һайланыуҙан туҡтарға тейеш. Ә ниңә әле шул барыбер тик ятҡан "тауар"ҙы ҡулланып ҡарамаҫҡа? Килеп сыҡмаһа ла, үкенес түгел, килеп сыҡһа – йәмғиәткә файҙа. Улар шулай уйланы һәм тиҙ генә миңә рәсми делегатмы, депутатмы, тағы әллә ниндәй "гад"мы мандаты әҙерләп, кәрәкле макулатураны күн папкаға тығып, бер аҙ "командировочный" тамыҙып, сығарып та ебәрҙеләр. Ә отпуск, әлбиттә, ҡаҙнанан түгел, үҙемдең елкәнән. Улар нимә уйлаһалар ҙа, минең ваще-то мораль принциптарым барлығы хаҡында ауыҙ асып, телемде арытып торманым. Суҫҡаға мәрйен мунсаҡ кейҙермәйҙәр, улар быны аңларлыҡ түгел, тип үҙ-үҙемде йыуаттым да сығып олаҡтым.

Вокзалда арлы-бирле ҡаранып, тапанып торҙом да әхирәтемә саптым. Уның, менән сер бүлешеүгә өҫтәп, тағы файҙаһы тейерҙәй өлкә бар. Ул – косметолог. Ә миңә профессиональ белгес кәңәше, ай-һай, кәрәк. Мәрмәр иҙәндәрҙән генә тәпәйләп оҙон тырнаҡлы, төҫө-башы күркәм ханым вә туташтар араһында ғүмере үткән чиношаны һыйыр һауып, бәрәңге ҡаҙып тупаҫланып бөткән ҡулдар, биҙәнгесте, ғөмүмән, урыҡ-һурыҡ файҙаланған йөҙ менән шаҡ ҡатырып булмаҫын аңламайыммы ни мин? Гардероб та моданан бер-ике саҡрым артта тороп ҡалған. Ауыл еренә кәп кенә булған "галуштың яҡшыртылған варианты" – туфлиҙар ҙа офистың көҙгөләй ялтыраған иҙәндәренең "бите"нән көлөү булыр һымаҡ.

Әхирәт ҡолас йәйеп ҡаршы алды. Әлдә ҡала бисәһе булып танау сөймәй торған холҡо бар. Даланын күтәрә белгәне өсөн тағы ла нығыраҡ хөрмәт итәм үҙен. Республикала билдәле әллә күпме шәхестәр ятаҡта йәшәп пенсияға сыҡҡанда, ул инде утыҙ йәшен ҡала уртаһындағы фатирында билдәләне. Кейәү балаҡай бик уңған егет булып сыҡты. Сибәр ҙә, буйсан да, эшсән дә булыу өҫтөнә, эсмәй ҙә, тартмай ҙа. Бер нисә эштә бер юлы эшләй. Ҡағыу-һуғыу түгел, ҡатыны яғына ҡырынырaҡ ҡараш ташлағаны юҡ. Бергә үҫкән яҡын серҙәшемдең бәхетенә шатланып бөтә алмайым. Ул был бәхеткә лайыҡ та бит инде. Өйләнешкәндәренә

тиҫтә йылдан артыҡ ваҡыт үтһә лә, ирен иркәләп, үбеп кенә уята, кеше алдында ғына түгел, былай ҙа кәпкәкләп-битәрләп тормай. Үҙ ваҡытында береһенән-береһе матур, аҡыллы, һөйкөмлө ике ҡыҙ бала табып бирҙе. Улары ла ата-әсәһенә мөхәббәтле, етмәһә, бик талантлы балалар булып үҫеп килә. Үҙемдең ҡыҙҙарым булмағас, көнләшеп тә ҡуям. Рушаннаның, йәғни әхирәтемдең үҙ-үҙен тәрбиәләүе һуң? Ванна бүлмәһенә керһәм, әйләнеп сыға алмайым. Ниндәй генә таҙартҡыс, йәшәрткес, ағартҡыс, дауалағыс крем-майҙар юҡ! Биҙәнгестәренең ҡиммәтлелеге иҫ киткес. Минең косметичкамдың эсендә ятҡан, йылдар буйы яҙҙыртылмаған косметикамдың хаҡын бергә ҡушһаң да, Рушаннаның помадаһының хаҡына етмәҫ. "Нисек итеп арзанлы нәмәне битең хәтле ҡәҙерле ереңә оялмай һөртәһең? Йәшлекте йәш саҡтан уҡ һаҡлайҙар, аңлайһыңмы? Арзанға риза булырға арзан ҡатын-ҡыҙмы ни һин!" – Эй, әрләп бөтә мине. Маркетинг менән дә шөғөлләнә, төп эшенән тыш арыу ғына тамып торған килеме лә бар. Бай һәм эшлекле ханымдарға ҡыйбатлы косметика һата ул, етмәһә дизайнер. Яҡшы-яҡшы фирмаларҙың сығарған пробник помада, хушбуй майҙарын миңә лә көсләп бүләк итеп өлгөрә.

Маҡсатлы, оҙайлы хеҙмәт үҙ емешен бирмәй ҡалмай икән ул, әй! Үҫмер саҡта уртаса ғына ҡыҙҙар рәтендә йөрөгән Рушанна әле класташ ҡыҙҙар араһында иң сибәре. 5 –10 йылға бер йыйылышып осрашыуҙан ул һәр саҡ һушы китеп ҡайта. Кластың иң сибәр ҡыҙҙарының ҡот осҡос ҡартайған, йәмһеҙләнгәнен күреп шаңҡый инде.Талсыбыҡтай билдәр күптән инде ҡыяр тоҙлау мискәһе размерына еткән, ебәктәй сәстәр төҫө уңып, йылтыры бөтөп, быҙау сәйнәп ташлаған ҡәҙерһеҙ сепрәкише һалынып-һалынып тора. Алма биттәр янып ҡарайып, кибеп бөткән емеш ише, йыйырсыҡлана башлаған... Ә иң мөһиме, күҙҙәр инде йондоҙҙай балҡып-баҙрап тормай. Һүнгән улар, баштар түбән эйелгән. Рушанна менән бер өҫтәл артында ултырғанда күбеһе ҡулдарын өҫтәл аҫтынан да сығармай. Ауыр эштән, сифатһыҙ көнкүреш химияһын йыш ҡулланыуҙан шағирҙар аҡҡош ҡанаты менән сағыштырған нәфис бармаҡтар ҡармаҡтар булып ҡарайып ҡатҡан.

Рушанна был осрашыуҙарҙан һуң ныҡ әсенеп йөрөй. Үҙеңдең йәш, сибәр ҡалыуың ғына етмәй шул күңелгә. Әле генә бергә дискотекаларҙа күңел асҡан, егеттәр күҙләгән, тормошҡа ғәмһеҙ һәм шаталаҡ ҡараш менән баҡҡан тиҫерҙәреңдең туҙып-таушалып, әбейгә әйләнә башлауын тыныс ҡына күҙәтеп буламы... Замандаштарың шундай икән, тимәк, йәшлек һинән дә киткән, киткән... Был әсенеүле тойғо беҙҙең икебеҙҙе тағы ла нығыраҡ яҡынайта, буғай. Беҙ төҫ ташламаныҡ бит әле. Йәшлектең һуңғы йылдарына йәбешеп ятҡан булабыҙ. Рушаннаның үҫмер саҡтан уҡ бит тиреһе бик наҙлы булды. Һытҡы-фәлән сығырға ла әҙер тора. Ҡояш нурына ла тигеҙ генә түгел, мотлаҡ ала-йола булып янып бара. Шуға кремдары ла әллә нисә төрлө. Битенең бер еренә – майлай торғаны, икенсе ергә – киптерә, өсөнсөһөнә – дымлай, дүртенсеһенә – ағарта һәм башҡа әллә ниндәй төрлөһөн һөртөп сыға. Крандан аҡҡан һыуҙы йөҙөнә тейҙергәне юҡ. Тоник-лосьондар, махсус таҙартҡыстан үткән саф һыу ғына. Иртәнгеһе – айырым, төнгөһө – айырым. Ҡышҡа – бер төрлө, йәйгә – икенсе. Бина эсендә буласаҡ сараға – бер төрлө, асыҡ һауалағыһына – икенсе... Сит телдә генә яҙылған һауыттарҙы яңылышмай айырыуын әйт! Донъя көтөү араһында бер нисә йылға бер генә килеп киткән сағында уның кәңәшен теүәл генә үтәп, шул иҫәпһеҙ һауыттарҙан минең дә буянып сыҡҡаным бар. Ғәжәп тәьҫораттар! Үҙемде ҡатын-ҡыҙ итеп, ҡәҙерле ҡатын-ҡыҙ итеп тоя башлайым. Бер нисә крем һатып

алырға теләк тә уянғылай. Әммә, хаҡтарын самалау менән үк, кикерек шиңә. Ярамағанмы миңә шунда ҡатыҡ-ҡаймаҡтан, бәрәңге-ҡыярҙан битлек? Мәркәзгә килеп, ялтыр витриналарын театр урынына тамаша ҡылып йөрөү ҙә – минең өсөн ҡыйбатлы күңел асыу сараһы ине ул саҡта. Билет хаҡына ауылда ғаиләмде аҙна буйы тәм-том менән һыйлай ала инем бит. Әммә шул ваҡытта яңғыҙыма шундай сәйәхәттәр ойоштормаһам, аҡылдан яҙылыр ине. Үҙемде өй тауығы тормошо менән йәшәргә мәжбүр итһәм дә, күңел кәлбем башҡа булғандыр, тим. Тәнем өй-йорт эсендә йөрөй, ә күңел әллә нимәне һағынып көтә. Ул һағышҡа түҙә алмай, тамаҡ йыртып ҡысҡырғы, олоғо килә. Нимәлер етмәй, тынғыһыҙлай, йәшәргә ирек бирмәй. Әйтерһең дә, йөрәгем – ситлектәге турғай. Бәреләм-һуғылам, үрһәләнәм, ә ҡайҙан килеп сыҡҡан был тойғо – аңлай алмайым. Тәүҙә мауығып ултыртҡан сәскәләремдең шау гөлгә күмелеп ултырғаны ла һөйөндөрмәй. Бәрәңгем уңып, тәңкәйешеп ятһа ла – шатланмайым. Сереп бөтһә лә ҡайғырмаҫ инем, моғайын. Үҙем ҡорған донъяға шул тиклем битарафлыҡ тыуҙы бер заман. Өйөмдө йыйыштырғым да килмәй, хатта сәсемде лә тарағым килмәй, иремдең эшен-хәлен һорашырға, һөйләшергә лә хәлем юҡ. Бөтә күңелемде бер үлтергес тойғо биләй – үҙ тормошом түгел был. Мин – мин түгел. Мин тормош урманында тәки аҙаштым. Аҙаштым. Аҙаштым. Ҡайҙа күрмәй ҡалдым икән, ҡасан? Шулай уҡ ғүмер буйы ошо һыҙланыуҙарға түҙергә тейешменме икән? Нимә икән ул күңел тыныслығы? Был һорауҙарҙан шаңҡып, башым эшләмәй башлай. Ғаиләмдә лә тыныслыҡ ҡалмай, холҡом сыҙап торғоһоҙ рәүештә боҙола. Шул ваҡытта сығып китәм мин мәркәзгә. Ҡомһоҙланып һаҫыҡ һауаһын еҫкәйем, асфальтын арып йығылғансы тапайым, алдаҡсы ялтыр-йолтор нурҙарына иркәләп танһығымды ҡандырам. Күргәҙмә-театр тирәһенә барып эләкһәм, күңелем урынына ултыра. Әхирәтемдең палантинына уранып, ялтыр клатчын ҡыҫып тотоп, яй ғына ялтыр мәрмәр иҙәндәрҙән уҙам, белгес кешеләй, стеналарҙағы төҫлө таптарҙы тикшерәм. Күптәренең исем-шәрифен белмәгән, әммә һәр береһенең төҫөнән үк интеллигентлыҡ, юғары зауыҡ бөркөлөп торған матур кешеләр менән фекер алышҡан булам. Ауылға ҡайтҡас та әле ниндәйҙер бәхет тойғоһо мине буйтым оҙатып йөрөй. Уйнай-көлә башлайым, бәғерем йомшара. Ғаиләмә наҙ бирерлек хәлгә киләм, ниһайәт. Ләкин күпмелер ваҡыттан үҙ-үҙемде тағы эстән кимерә башлайым, тағы көн бөтә. Эргәмдәгеләргә лә – беренсе сиратта, әлбиттә, үҙемә... Шуға әлеге мәжбүри командировкама бер яҡтан асыуым килһә лә, төптәге "мин"ем бәхеттән үрле-ҡырлы һикерә ине. Бығаса үҙ-үҙемде ғаиләмдән, мәшәҡәттән "урлап" алып ҡына киткәнемә ниндәйҙер ғәйеп тойғоһо ла тыуып, тулы бәхеткә ҡамасаулай килде. Ә әле ул тойғо юҡ. Үҙ-үҙемде нимәнәндер азат итеп тоям – ғәжәп.

***

– Тимәк, Алланың ниндәйҙер ҡашҡа тәкәһенә ҡорбанға салынаһы бәрәс итеп һайланылар инде? – Тураһын әйтмәһәм дә, зирәк әхирәтем хәлде бик дөрөҫ аңланы. – Тоже мне ауыл хужаһы. Вазифалы сутенер! Эш килеп сығып, төҙөлөш башланһа, ул – ил арыҫланы, халҡына хеҙмәт итеүсе, ә һин – ҡулланып ташланған простыня булып тороп ҡалаһың инде...

Иренемде ҡымтып, баш ҡағып ҡына ҡуям.

– Берәй бәйләнеп, отворот-поворот алғайнымы әллә? – Рушанна тишеп ҡарай.

Тағы баш ҡағып ҡына ҡуям.

– Үс ала инде, хайуан. Йәнәһе, барыбер бәҫеңде башҡалар ҡулы менән булһа

ла һыпырып, ҡойоп түшөрәсәк. Әле шул яҡҡа этәрә лә, киләсәктә риза булғаның өсөн битәрләп бер булыр әле... Әпәт эшһеҙ ҡалаһың инде. Ауылдан күсеп кенә китмәһәң, белмәйем. Ғәйбәтеңде сәйнәп, бәғереңде ашап бөтөр ул бәндә!.

Минең был хаҡта уйланғым килмәй. Тормоштоң аяуһыҙ икәнен Рушанна сәйнәмәһә лә беләм дә инде. Әллә ниндәй йөрәк эсендәге һыҙлауыҡ, әрнеү менән яратам бит шул төйәгемде. Яратыуым ғына яуапһыҙ. Урыҫтарҙың, ҡайҙа тыуғанһың – шунда ярағанһың, тигән әйтеме бар. Ә мин нишләптер яраманым. Бер кәрәгем юҡ минең уға. Артыҡмын. Утыҙҙан уҙҙым, ә йөрәгемдең, аҡылымдың, һәләтемдең бөтә көсөн һалып ауылымдың яҡшыраҡ яҙмышы хаҡына хеҙмәт итерлек урыным юҡ. Минең кеүек кәрәкһеҙлегенән алйып, бәрелеп-һуғылып йөрөгән күпме ауылдашым, ситкә сығып, солтан булды? Яҡташтарының ҡайҙалыр алыштырғыһыҙ оҫта, иҫ киткес белгес атын күтәреп йөрөүен ишетһәләр, бындағылар аптырап бер була: "Вәт һин уны, йүнһеҙ бәндә ине. Шул да күтәрелгәс, тфү..." Республикала билдәле генә бер яҙыусы әйткән: үҙебеҙҙә олтан ғына булыр өсөн дә, ситтә солтан булып йөрөп ҡайтырға кәрәк... Минең һымаҡ әрнеп, әсеп йөрөгән сағы булғандыр инде. Сит яҡ түгел, тыуған яғың мәнфәғәте өсөн йәш, дәртле энергияңды, хеҙмәтеңде бирә алһаң ине ул! Шулай уҡ ҙур, үтәй алмаҫлыҡ хыял микән ни был? Ғәжәп. Уйлап ҡараһаң, кемгә үпкәләргә? Бойомға ашҡан даһа бер хыялым – ауылымда йәшәйем. Тик был хыял миңә бәхет, күңел тыныслығы бирмәй, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы!

– Ул ҡашҡа тәкә ниндәйерәк әҙәм инде?

Яурын ғына һелкетәм.

– Исем-шәрифенән башҡа бер нәмә лә белмәйем. Беҙҙекеләрҙең дә күргәне юҡ. Ҡайһы райондан икәндәрен ишеткәс тә, секретаршаһына тиклем һырт йөнөн ҡабарта, ти.

– Вазифалы түрә булғас, ул-был сараларҙа ҡатнашҡаны барҙыр бит, хет фотоһы баҫылғанмы?

– Юҡ, ти. Камералар алдында бөтөнләй ялтырап йөрөмәй, интервьюлар бирмәй. Кабинет кырнисаһы...

– Туй генералы түгел, ә һоро кардинал... Быныһы ҡурҡыныс. Тимәк, ул властың ысын тәмен белә. Кешеләрҙең яҙмышы менән үҙҙәренә лә һиҙҙермәй генә уйнарға ярата. Вазифаның тышҡы ымһындырған ҡиәфәте түгел, ә мөмкинлеге генә ҡыҙыҡтыра уны. Прям ҡурылған кукәй какой-то – үҙе крутой, үҙенең бер йөйө юҡ...

Уфтанып, байтаҡҡа шымып ҡалабыҙ.

– Бына нимә, Томасик, һин уға приемға барып тормайһың, аңланыңмы? Барыбер үткәрмәйәсәктәр, таныша алмаясаҡһың. Танышҡан хәлдә лә һин уже еңелеүсе булаһың. Иҫләйһеңме "Мастер и Маргарита"ла? "Үҙеңдән көслөләрҙән бер ҡасан да бер нәмә лә һорама". Минең ҡайҙа эшләгәнде беләһең, шәт. Унда ярлыябағай бисәләре йөрөмәй. Клиенткаларҙан ипләп кенә һорашып, кем икәнен асыҡларбыҙ, белербеҙ, ҡоралланырбыҙ. Һинең үҙеңде тәртипкә килтерәһе бар. Ауыл һауаһын яратмаған кеше янына барыу өсөн үҙеңә "мәркәз саңы" ҡундырып алырға кәрәк.

Мин инде Рушаннаның иҫәпһеҙ банка-тюбиктарында бутанып, уларҙы кәметеп, хуш еҫле ваннала аунап сыҡҡайным. Төшкән ҡанаттарым яҙыла башлағайны. Болоттай күпереп торған йомшаҡ махровой халатҡа төрөнөп, иҙрәп ултырам. Рушаннаның "тәртипкә килтерербеҙ" тигән һүҙҙәре ҡолаҡҡа май булып яғыла. Бер ике-өс көн уның матурлыҡ салонындағы кушеткаларҙа аунау – ниндәй шатлыҡ. Беләм, уның ниндәйҙер шикле, бысраҡ ҡына бер батҡағын нисәлер

минутҡа биткә һылап тороуҙың хаҡы – минең зарплатаның өстән бер өлөшө. Әммә Рушанна үҙе әйткәс, моғайын, сараһын табыр. Әндрэй ҡаҙнам юҡлығын белә лә инде. Ул уйҙарымды "уҡып" ултыра.

– Морду нарисуем, упакуем, подарочный бантик бәйләп ҡуйырбыҙ, уларын вис өҫтөмә алам. Әммә интеллектыңдың бөтә ҡырҙарын ялтыратып һушын алырға, извини, ярҙам итә алмайым. Ул яғы тулыһынса үҙеңдән генә тора. Шылдымы?

– Шылды.

Рушанна «информация» йыйырға салонына киткәс, мин дә, бушты-бушҡа ауҙармаҫтан, ниһайәт, "мәҙәни ял итергә" – күргәҙмә залдарының береһенә юлландым. Асылған ғына мәленә тура килһәң, ифрат ҡыҙыҡлы кешеләр менән осрашырға мөмкинлек тыуа. Әле лә бер күҙем литографиялар, гравюралар, офорттарҙың бормалы-бормалы линияларын тамаша ҡыла, икенсеһе менән тамашасыларҙы байҡайым. О-о-о, өмөтөм аҡланды; Шәрифә Ҡәҙимовна үҙе! Ғәжәп ҡыҙыҡ ҡарсыҡ. Йәше алтмыш тирәләре, әммә ундағы энергия – егерме йәшлектәргә биргеһеҙ. Нимә генә белмәй, кемде генә белмәй! Оҙаҡ йәшәгән кеше, ғөмүмән, күпте белә инде ул. Әммә Шәрифә апай, телмәрендә башҡа бер кем дә әйтә алмаҫ әйләнештәр ҡулланып, шундай ҡыҙыҡлы әңгәмә ҡора белә – ауыҙ асып тыңлайһың. Аҡыллы ла, хәтере лә үткер, ә теле тағы ла үткерерәк. Алыҫ йәшлегендә ул актриса булған. Төп театрҙарҙың береһендә төп ролдәрҙе алып барған. Ҡырҡҡа етеп барғанда, тәүге һәм һуңғы балаһын донъяға килтереү хаҡына, артистка карьераһын тамамлай. Хыял иткән ролдәре үкенескә ҡалмағанғалыр инде, йәшлеген дә һағынмай, көсәнеп матурланырға ла тырышмай. Бөтөнләй үткәндәргә барырға ваҡыты ла юҡ, буғай. Һәр саҡ эсе тулы идея, яңынан-яңы шөғөл... Етмәһә, ул бер кемдән дә, бер кем фекеренән дә ҡурҡмай. Шул тиклем әсе теле менән туп-тураһын ярып һала – ҡайһы саҡта һүҙҙәренән минең ҡолаҡ ояла. Актриса сағында ниндәйҙер спектаклдәге төп ыңғай героиняны тиҫкәре образ итеп уйнай. Режиссер кулиса артынан, йоҙроҡ күрһәтеп, ни эшләйһең, тип тызандай башлағас, тегене биш хәрефкә ебәрә. Сәхнәнән, тамашасы алдында! Зал шаҡ ҡата. Ә ул ваҡытта – Советтар Союзы тигән илдә йәшәгән саҡ... Шунан ни булыуы ҡыҙыҡмы? Башта әйтеп үтәйем, был ролде режиссер башҡа актрисаға биргән була, уның менән эшләй. Шәрифә Ҡәҙимовна ул ролде ғариза яҙып ҡына алып, дублер сифатында ғына үҙ аллы әҙерләй. Биш хәрефкә ебәргән көндән һуң спектаклдең популярлығы ҡот осҡос арта, һәм бөтә сығыштарҙа ла Шәрифә апай ғына эшләй, теге актрисаны иҫкә алыусы ла булмай. Ниндәй дыуамал холоҡ һәм рух ныҡлығы булған кеше менән танышыуымды аңлағанһығыҙҙыр. Шуға өҫтәп: түрә ни, ҡара ни, кеше икән – аралаша, кеше түгел икән – әллә ниндәй вазифа биләһә лә, әҙәмгә һанамай. Шәрифә апай алдында ҡылансыҡланып тороу артыҡ ине, хәлде уның стилендә ҡыҫҡа һәм яланғас дөрөҫлөк сағылған һүҙҙәр менән генә аңлатып бирҙем. Ул, әлбиттә, аптыраған да, йәлләмәшеш тә булманы. Күпме матурлыҡҡа төрөүле боҙоҡлоҡ донъяһында йәшәгән, барыһын да күргән-белгән кеше ләһә.

– Исем-аты кем тинеләр, тиң әле?

– Искәндәр Сәғитович шикелле.

О, Шәрифә Ҡәҙимовна был кеше хаҡында, күрәһең, хатта бик хәбәрҙар. Хәтеренә төшөрмәксе булып уйланып та торманы. Әлеге һүҙһеҙ ҡалыуы уның мөмкин тиклем хәҡиҡәткә яҡыныраҡ һүрәтләмә өсөн теүәлерәк һүҙҙәр эҙләүелер. Әллә ни күп ваҡыт үтмәһә лә, миңә бик оҙаҡ көтәм кеүек тойолдо. Үҙем Шәрифә

Ҡәҙимовнаның йөҙөнә ҡарап, уның ни уйлағанын күҙалламаҡ булам. Апайҙың һүҙе, дөрөҫөн әйткәндә, хөкөм ҡарары уҡыған судьяныҡы дәрәжәһендә мөһим. Нисә йылдар аралашыу дәүерендә белеп бөткәнмен – ул бер ҡасан да яңылышмай. Бер-ике һүҙ ҡатыуҙан уҡ кемдең кем икәнен айыра торған һәләте бар уның.

– Һин миңә шуны әйт әле, Тамара: үҙеңә нисек тойола? Был эште атҡара алырһыңмы-юҡмы?

Яурын һелкетәм.

– Ә мин әйтәм: атҡарасаҡһың. Юҡ, һин аҙғын ҡатын түгел. Иҫәп-хисапҡа ҡоролған мөнәсәбәттәргә лә шулай уҡ һәләтле түгелһең. Һин просто – идея кешеһе. Һин нишләптер, ниндәйҙер идеяға үҙ-үҙеңде ҡорбан итергә тейешһең, тип уйлайһың. Был осраҡта идея – тыуған төйәгеңә ошондай ысул менән булһа ла файҙа килтереү, хеҙмәт итеү. Мин дөрөҫ аңланыммы? Был хужаң нисектер шуны тойомлаған микән инде... Әгәр улай икән – ифрат үтә күреүсән мужик, хатта аптырата.

– Аптырарлығы юҡ, минеңсә. Ул быны бер ниндәй ҙә "үтә күреүсәнлек" арҡаһында түгел, ә хаслыҡҡа барып эшләй.

– Мәҫәлән?

– Минең уйымса, былай: ул отпуск хаҡында ғаризамды йыртып кәрзингә ырғытты һәм бер нисә көндән мине "за прогулы" эштән бушатты. Урыныма шым ғына, шыма ғына рәүештә үҙенең ҡыҙынмы, ҡәйенбикәһенме эшкә алды. Әлеге моментта коллектив эсендә мине бик әүҙем "сәйнәйҙәр" һәм боҙоҡлоғом кимәле хаҡында һүҙ йөрөтәләр.

– Һин артыҡ ҡара төҫтәр гаммаһында фекер йөрөтмәйһеңме?

– Юҡ, Шәрифә апай. Мин артыҡ ныҡ яҡшы күрәм. "Үтә күреүсәнлек" – ул миңә хас сифат.

– Кеше, әлбиттә, – иң аҡыллы хайуан. Эйе, аҡыллы, ләкин хайуан. Бәлки, һин хаҡлылыр ҙа...

– Кеше хайуан икән, тимәк, мин – терпе.

– Ха-ха-ха, бик ҡыҙыҡ фекер, ә ни өсөн?

– Сөнки дуҫтар һәм дошмандар арҡама шул тиклем дәрәжәлә күп энәләр төрттөрҙөләр, беҙҙәр, бысаҡтар ҡаҙанылар – мин инде терпенән бер ерем менән дә айырылмайым.

– Ну, Тамара, һиндә тел... Мин, әлбиттә, һине хайуанға түгел, ниндәйҙер бер аҫыл ҡошҡа тиңләр инем тиңләүен. Аҡҡошҡамы, торнағамы... Моғайын, һуңғыһыналыр – аҡҡоштарҙың аяғы оҙон булмай. Ә Искәндәр Сәғитовичҡа килгәндә, былай...

Мин Искәндәр Сәғитовичтың үҙен ныҡ яҡшы уҡ белмәйем. Әммә улар – юғары мөхиттә билдәле ғаилә. Минең бер коллегам, йәғни актриса инде, оҙаҡ йылдар уның атаһының һөйәркәһе булды. Береһе – сибәр, икенсеһе – бай һәм дәрәжәле. Ҡәҙимге союз, аңлап тораһың. Йәшлеге ирһеҙ ҙә, балаһыҙ ҙа үтеп китә башлағанын тойғас, теге артистка, быны ҡатынынан айырып, үҙенә өйләндермәксе, ауырға ҡала. Теге был хәбәрҙе тыныс ҡабул итә, бала булһа, әлбиттә, бергә булырбыҙ, тип вәғәҙәләй. Уның шундай мөнәсәбәтенән күҙе томаланған йәш ҡатын һыпырта поликлиникаға, иҫәпкә баҫырға. Гинеколог быны ҡарай ҙа ҡот отҡос һүҙҙәр әйтә: "Бала урод, кисекмәҫтән рәхим итегеҙ креслоға". Күҙ алдыңа килтер: кеше ни бары ҡаралырға ғына килгән. Тышта – сират. Бер анализ да эшләнмәгән, бер ниндәй абортҡа барғанда кәрәк була торған кәрәк-яраҡ

алынмаған! Ә табип берейенән-берейе ауяһыҙ дәлилдәр килтерә, ҡурҡыта, ышандыра... Йәш ҡатын, шулай итеп, һына. Аборттан һуң һөйәренең шоферы фатирына алып барып, ризыҡ-фәлән ҡалдырып, биклэп китә... Ике аҙна ята өйҙә ҡанһырап. Япа-яңғыҙ, бер кем кермәй, бер кем сыҡмай. Нимә уйларға ла белмәй. Әлбиттә, шулай ята торғас, башы эшләй башлай тегенең. Нисек инде: поликлиника шарттарында аборт? Ул табип та бит әле, кеше-рентген түгел, Хоҙайҙың ерҙәге илсеһе лә түгел! Был бит һөйәре тарафынан ойошторолған тишек шыуманға ултырып ралли гонкаларында йөрөү түгелме һуң? Шундай шиктәргә төшөп, күҙе асыла башлағас, килеп керә теге сәскәләр тотоп. Ҡайғыра, барыһын да беләм, ниндәй ҡыҙғаныс һәм башҡалар, һәм башҡалар... Шулай уны мәкерҙә лә ғәйепләп булмай. Әммә факт: бала юҡ, булмаясаҡ та. Һөйәркә лә үҙ урынын аңларға мәжбүр. Ундай кимәлдәге ирҙәр өсөн ҡатын-ҡыҙ барыбер кеше, шәхес булып күренмәйәсәк, ҡыҙыҡһындырмаясаҡ та. Шуны аңлап, Томочка, һин үҙеңде алдарға ирек бирмә. Эмоцияларыңды һүндер, фәҡәт файҙа һығыу яғын ғына ҡара, отолмаҫһың.

Үҙем дә һиҙмәҫтән, бөтөнләй төшөнкөлөккә бирелэм. Ошондайыраҡ бер тарихты кемдер һөйләгәйне. Бер ҡатын, шулай уҡ дәрәжәле берәүҙең һөйәркәһе, хоҡуҡһыҙ статусынан ялҡып, һөйәренә ультиматум ҡуя: йә өйләнәһең, йә һинең ҡырын-мырын эштәреңде фаш итәм. Тегеһе таныш профессор ярҙамында бисәне "һары йорт"ҡа мәңгегә тығып ҡуя. Шәрифә Ҡәҙимовнаның танышы бик еңел, хатта бәхетле ҡотолған – атҡаҙанған исемдәре лә бар, ҡала уртаһында дәү фатиры. Яңғыҙ башына – биш бүлмә. Япа-яңғыҙ ҡалыу өсөн һәйбәт түләүме был? Белмәйем. Был донъяла йәшәүҙе ике улымдан башҡа күҙ алдына килтерә алмау менән сағыштырғанда, нимә инде ул – фатир? Ул балалар килтергән шатлыҡты түгел, улар өсөн кисергән һыҙланыуҙарымды ла алыштырмаҫ инем. Бер байлыҡҡа ла.

Рушанна тышҡы ҡиәфәтемә генә түгел, күңел торошома ла ныҡлап тотондо. Хәҙер мин уның аутотрениг күнекмәләре яҙмаларын туҡтауһыҙ тыңлап йөрөйөм. Ҡыҙыҡ инде: башҡалар йәмәғәт транспортындамы, башҡа ерҙәме – музыка тыңлап кинәнә, ә минең МРЗ плеерҙа – үҙ-үҙеңде түбән баһалауҙан ҡотолоу буйынса курстар. Файҙаһы шулай ҙа бар. Ысынлап та ниңә үҙ-үҙем хаҡында фекер башҡаларҙың миңә ҡарата әйткәненән бойондороҡло булырға тейеш әле? Тышҡы температураға ҡарап хәрәкәтсәнлеге, йәшәүе үҙгәреп торорға һалҡын ҡанлы бөжәк түгел дә мин? Минең үҙ йөрәк-ҡан системам бар. Тәнемдең йылыһы үҙемдән генә тора бит. Кейем кейеү-сисеү – бер ярҙамсы аспект ҡына. Үҙ-үҙемде эстән дә, тыштан да тәрбиәләү һөҙөмтәһен бирҙе шулай ҙа. Рушанна шатлана, үҙ-үҙеңде тотошоң һөйөклө, көйәҙ ханымдарҙыҡына оҡшай башланы, ти. Элек ул нимә бирһә, шуны һөртөп, нимә ҡушһа, шул процедураларҙы үтәп торһам, хәҙер "быныһы миңә оҡшамай" тип һайлансыҡлайым. Бутик-фәләнгә керһәм, эргәгә һатыусы-консультант йүгереп килеп етмәһә, ошо ла булдымы магазин, тип танау йыйыра башлайым. Ауылда арлы-бирле сәс тарап, 10 тәңкәлек помада һөртөп эшкә йүгерһәм, әле бит тиреһен ҡала һауаһынан төрлө кремдар, тон, пудралар ярҙамында ышыҡлап, сәләмәт ҡыҙыллыҡ йүгертмәйенсә урам буйына аяҡ та баҫмайым.

Рушанна клиенткалары аша кәрәкле информацияны белешеп тора. "Минең объект" үҙебеҙҙекеләр ҡуйған тамаша-фәләндәргә танауын да күрһәтмәй икән. Тик Мәскәү, Питер йә сит илдән килгән ныҡ супер-пупер класик йырсы, оркестрҙарҙы тыңларға камерный залға ғына йөрөй. Ундағы билет хаҡтарын бер

күреп аһ иткәйнем инде. Ошо арала шундай кимәлдәге бер концерт көтөлә икән, унда эләгеп булһа, Сәғитович менән осрашып, танышырға форсат тейеүе мөмкин. Ярай әле, Рушанна иң шәп профессионалдарҙан һанала. Ул булмаһа, нишләр инем: бер клиенткаһы үҙенең яратҡан косметологына шундай бүләкте йәлләмәгән – vip-ложаһынан урынға билет алып биргән. Ҡотолғоһоҙ көндөң килеп етеүенә ышана башларға тура килде. Тиктомалдан йөрәк лепер-лепер итеп ала ла китә. Йә ваҡыттан үтмәүен, «яу көнө» кисектерелеүен теләп баҙап ҡалам, йә был ғазаплы көтөүҙең инде тиҙерәк үтә һалып, бар нәмәнең асыҡланыуын теләй башлайым.

Театрға барырға киске күлдәкте үҙем һатып алырға булдым. Ошо йәшкә етеп, матур, нәзәкәтле күлдәгемдең булғаны ла юҡ ине бит. Хәйер, кәрәге тейгәне лә булманы, дөрөҫөн әйткәндә. Ҡайҙа ғына кейә алам мин уны? Итәге менән ер һеперерлек оҙон ҡупшы күлдәк менән эрзинкә итек кейеп, ауыл батҡағына батасума клубҡа барып булмай ҙа инде? Етмәһә, ул киске күлдәк алырлыҡ аҡса өсөн миңә баш күтәрмәй кәмендә өс ай эшләргә кәрәк. Ярамағанмы ни беҙ бахырға ҡытай алам-һаламы, тиһең дә ҡул һелтәйһең... Ә әле юҡ, шундай мәл килеп етте – үҙемде сибәр ҡатын-ҡыҙ итеп тойғом килә. Ғүмер шундай ҡыҫҡа, йәшлек шундай тиҙ үтә! Исмаһам, ҡарт ҡарсыҡҡа әйләнгәнсе бер генә тапҡыр булһа ла бала саҡтан хыял иткән затлы күлдәк кейеп ҡарарға хаҡым барҙыр бит?!

Киске күлдәктәр һатылған бутикта күҙҙәр ҡамашты. Улар шул тиклем күп, төрлө-төрлө – ҡайһыһын һайларға белмәй аҙап ҡалдым. Дөрөҫөн әйткәндә, барыһын да кейеп ҡарағы килә. Затлы бәрхәт тә оҡшай, күбәләктәй нәфис, йылҡылдап торған органза, шыма, ауыр атлас... Ә фасондары һуң? Эсәк кеүек, тәнгә һылашып торғаны ла мине боҙмай. Өҫкө яғы һығып торған корсет, ә итәге болоттай ҡабарып, әкиәттәге принцессаны хәтерләткәне лә күҙҙе ҡыҙҙыра. Ә боронғо ампир стилендәге нескә тауарҙан иҫәпһеҙ-һанһыҙ драпировкалы күлдәктә мин антик скульптураларҙа һынландырылған грек алиһәһенән кәмме ни?! Бер нисә сәғәт һайлана торғас алған күлдәкте күреп, Рушаннаның кәйефе ҡырылды.

– Ошо униформаны хәтерләткән сепрәкте һин иң арыуы тип таптыңмы? – Ул күңеле ҡайтыуын йәшерергә лә маташмай. – Төҫө ваще шедевр – көйә күбәләгенең тағы ла нығыраҡ төҫһөҙләндерелгән варианты.

– Ул шулай күренә, ә минең тәнемдә – бик ҡупшы буласаҡ.

– Һинең килбәтеңде септә лә боҙа алмай, әлбиттә, әммә шулай тип кенә киндер тоҡ кейеп йөрөп тә булмай инде!

– Юҡ. Рушанна, һин хаҡлы түгел! Ниндәй көйә күбәләге төҫө булһын? Белгең килһә, был – торна һырты төҫө.

– О-о-о, Тамарик, һинең менән эпитет, метафора өлкәһендә ярышып булмай, әйттең тек әйттең. Торна, имеш, табылған аҫыл ҡош. Матурлыҡ символы булып бүтән ҡоштар һанала, белгең килһә, Мәҫәлән, тауис...

– Бәлки, тутыйғош, тип тә өҫтәрһең, зауыҡһыҙлыҡ символы, ә? Ысынында иһә, ысын идеал тауис та, күгәрсен дә, аҡҡош та, хатта һандуғас та түгел. Ә торна!

– Хәҙер ниндәйҙер тотемистикаға төшөп китәһең инде, ҡуй, бәхәсләшмәйек, һин барыбер еңәһең.

– Юҡ, тотемдарға, тарихтарға төшмәй генә иҫбатларға уйлағайным.

– Нисек?

– Ишеткәнең бармы: "Һауалағы торнаға ышанып, ҡулыңдағы сәпсекте ысҡындырма" тигәнде?

– Әлбиттә. Ысынлап. Бер яҡтан, һин хаҡлы ла шул. "Һауалағы торна" – идеал, "ҡулыңдағы сәпсек" – үҙ тиңең.

– Үҙ тиңең, имеш. Һинең нимәгә, кемгә тиң икәнде кем белә һуң? Ғүмер буйы һауалағыһына ынтылма тип тыйып, ҡанаттарыңды ҡырҡып торған перестраховщиктармы? Ниңә һин гел уларҙы тыңларға, баҫылырға, йәнең теләгәнеңдән баш тартырға тейеш? Рушанна, үҙең уйлап ҡара, бәлки, тирә-яҡтағы һин – сәпсек, һәм сәпсеккә генә лайыҡ, тиеүселәр һуҡырҙыр? Әгәр һин үҙең торна булһаң, ә быны үҙең дә белмәһәң? Бәлки, ниһайәт, сәпсекте бер яҡҡа быраҡтырырға ла һауалағы торна артынан осорғалыр, ә?

– О-о, Тамара... – Рушанна күҙҙәрен тәгәрәтеп баҡты. – Әйтәм бит, сағыштырыу, үткер тел өлкәһендә һине еңеп булмай. Мин бөтөнләй башҡа ла алмаған әллә нәмәләр хаҡында фекер йөрөтәһең. Етмәһә, үҙ уйыңды кешегә һеңдерерлек тәьҫир итергә ниндәйҙер ярһыу көс бар үҙеңдә. Батшабикә Томирис һин, Тамарик – комарик ҡына түгел. Шулай итеп, һин был торна төҫөндәге күлдәктә күптәр өсөн – буй етмәҫлек хыял, ә бер һунарсы өсөн ҡомар уятырлыҡ табыш булаһың...

– Бәлки, табыш, бәлки, табышмаҡ, тигәндәй.

– Ә шулай ҙа, майк-ап һәм прическа өлкәһендә минең фекер доминанта булыр, тип өмөтләнәм, хөрмәтлем.

– Рушанна, кешесә һөйләш, куртуаз телмәр бит минең стиль.

– Нимә тиҙәр әле, тиреҫтә соҡоноп, буҡҡа буялмай булмай, тигәндәрме?..

– Ҡара һин уны! Мине нимә менән сағыштырҙы!

Күлдәкте кейеп күрһәткәс, Рушаннаның күңеле урынына ултырҙы.

– Һин хаҡлы, – тине ул, иғтибар менән тикшереп сыҡҡас. – Матур прическа, сағыу макияж менән күлдәк бәхәсләшмәйәсәк. Етмәһә, фасонының тағы бер үҙенсәлеге бар: бындай иҙеүгә бриллиант һәм башҡа ҡиммәтле биҙәүестәр тағыу кәрәкмәй. Өҫкө яғы – эшлекле ханымдарса, ә итәк – романтичный.

– Ә арты – в меру эротичный, – тип көлөп боролдом мин.

– Эйе, төҙ, матур артҡа күрелеүҙән зыян юҡ. Урам буйында, ана, ҡыҙҙар йөрөй, автобусҡа менергә бер аяғын күтәрһә, бөтә ярымшарҙары асыла. Күп ашаһаң, майлы бутҡа ла ялҡыта. Ул ирҙәр яланғаслыҡтан хәҙер ялҡып бөткән.

– Шулай, ҡатын-ҡыҙҙың хәҙер сере ҡалманы. Бөтә эске нәмәне тышҡа әйләндереп сығарып, ҡағып бөттөләр.

– Сәғәт тағырға кәрәкмәҫ. Беренсенән, һинеке арзанлы, икенсенән, ваҡыт һораған булып танышыу башларға ҡамасаулай. Өсөнсөнән...

– Өсөнсөнән, бәхетлеләр сәғәт һанамай, ә мин бик бәхетле ханым ролен башҡарам.

– Сәпсим үк түгел, кәнишне. Бәхет түп-түңәрәк булһын өсөн Сәғитович абзыйыбыҙ кеүек аҫау ир-егет менән танышлыҡ вә ҡайнар дуҫлыҡ ҡына етмәй. Һәм ул шуға ышанырға тейеш.

– Уф, – мин, битемде ҡаплап, диванға бөршәйеп яттым. Бер нәмә лә белге килмәй, эшләге лә килмәй. Тик юҡ булғы килә. Үлге түгел, ә юҡ булғы – һәм бөттө. – Шул тиклем иртәгәнән ҡурҡам.

– Бөгөн әҙерәк истерить итеп ҡалырға ярай. Әҙерәк илап алһаң да зыян булмаҫ. Әммә шешенерлек итеп түгел. Бөтә нәмә эҙһеҙ үтергә йәш саҡ түгел, үҙең аңлайһың. Тик иртәгә бындай икеле-микеле уйҙарға ла, үҙеңдә шикләнеүгә лә урын ҡалмаһын, ишетһен ҡолағың.

...Баштан-аяҡ күрһәткән ҙур көҙгөгә сағылыш шикләнеүҙәргә урын ҡалдырманы. Стилист үҙ аҡсаһын тулыһынса аҡлаған – тыңлауһыҙ сәстәрем ыҫпай,

килешле. Телевизорҙан ғына арлы-бирле күреп-белгән бер нисә "таныш" та күренә. Ҡыҙыҡһыныусан ҡараштар төбәлгәнен дә тоям. Концерттан һуңғы фуршетҡа эләгергә мотлаҡ шундай ҡараштарҙың береһен атҡан ир-ат затын эләктереү – әлегә төп бурыс. Театр, концерт залдарына яңғыҙ йөрөргә яратмайым мин. Сөнки тамашаны барған ваҡытында уҡ, тегеһе былай, быныһы тегеләй түгел, тип тикшереп-сәйнәп, фекер уртаҡлашып ултырырға яратам. Сәхнәләгеν ауыҙ асып ҡарап, һәр сығышҡа һоҡланып, бер туҡтауһыҙ ҡул сабып ултырған тамашасылар араһында ултырыу – яза. Ҡайһы берҙә яратмағанырaҡ әртис, йырфәлән булһа, телгә килгән үткер-үткер мыҫҡыллы комментарийҙарҙы һөйләй алмай тонсоғоп үлә яҙам. Кешеһенә тура килһәм – хөрриәт. Шыш-быш һөйләшеп, шырҡ-шырҡ көлөп, тамашанан кәйеф күтәрелеп сығам. Әлеге яңғыҙлығым ваҡытлыса ғына, тип өмөт итәйек. Юлымда осраясаҡ кешеләрҙең күңеленә мәрхәмәт һал, Хоҙайым.

Минең яңғыҙлыҡ, ысынлап та, көтөлгәндән дә ҡыҫҡараҡ булмаҡсы. Концерт башланмаҫ элек үк эргәләге урта йәштәрҙәге, уртаса размерҙағы "ҡорһаҡ" зауығыбыҙҙың һәм урыныбыҙҙың тап килеүен осраҡлы ғына түгел икәнлеген билдәләп, һөйөнөү билдәләре һиҙҙерҙе. Бының шулай икәнлегенә ризалыҡ белдереп, мин дә керпектәремде елбәҙәк кенә елпелдәтеп алдым. "Тояҡтар"ым буйлап ҡарашының тегеләй-былай йөрөүенә һарыуым ҡайнаһа ла – түҙәм. "Тома, тыныслан, был ни бары – бизнес, –" тип эмоцияларымды тәртәгә типкеләп индереп ҡуям. Әммә күпмелер ваҡыттан минең тырышып-тырышып барлыҡҡа килтергән тыныслыҡ стенаһы Берлиндыҡы һымаҡ ыуалып төшөрлөк хәл булды: ике метр самаһы ғына алыҫлыҡта үлтергес таныш профиль күреп ҡалдым. Тәүҙә мейеләге сканер уны идентифицировать итмәй маташты. Таныш? Эйе, таныш. Бик ныҡ? Хатта ныҡ. Ә ҡасан? Мейеләге иҫәпһеҙ-һанһыҙ кәштәләрҙә "саңланып" ятҡан меңдәрсә осраҡтар, хәл-ваҡиғалар, сәйәхәттәр, тамаша-тапшырыуҙар, байрам-һабантуйҙар барланып сығылды. Күҙ алдына килгән "интерактив таҡта"лағы информацияны барлай торғас, ҡолағыма шыпырт ҡына: "Вот ты и стала женщиной" тигән аказ салынды. Аптырап, ян-яғыма ҡарап алдым. Ҡолаҡҡа ғына шыбырҙарлыҡ бер кем юҡ. "Бына ғәжәп,"– тип эстән әйтеп тә өлгөрмәнем, башыма күҫәк төшкәндәй шаңҡытып, хәтерем асылып китте. Бына кем ул! Минең яҙмышымды пыран-заран килтергән, иң ҙур хаталарымды яһарға этәргән әҙәм дәһә! Был донъялағы иң ҙур хатам – иң көслө, дыуамал хистәр дауылына бирелеүсәнлегем. Ә ул – шул хистәр дауылын ҡуҙғыта, дөрләтеп ебәрә белеү оҫтаһы. Минең ғүмерлек нәфрәтем һәм ҡәһәрем. Минең әлеге уңышһыҙлыҡтарымдың барыһында ла шул ғына ғәйепле. Теләгән һөнәремә уҡып, теләгән эшемдә эшләмәүемә, бала саҡ хыялдарымдың тормошҡа ашмауына, ғүмер буйы үҙ-үҙемде "ашап" йәшәүемә, ғөмүмән, ысын мәғәнәһендә йәшәмәүемә... Һәм бына ултыра Ул – бәләләрем сығанағы. Сашка, Красавчик Сашка. Был аяуһыҙ Ваҡыт уны һәр ваҡыттағыса иркәләп һыйпап ҡына алған. Ул һаман күҙ ҡамаштырғыс сибәр. Шул умырып бирелгән сибәрлек баһаһын әле өҫтәлгән сикә көмөштәре тағы ла арттырған. Ниңә инде уның бер үҙенә шул тиклем? Ирекһеҙҙән күҙҙәремде йоморға, башымды борорға тырышам, килеп сыҡмай. Эсемдә ҡайнаған хистәр дауылы шул тиклем көслө – уны хатта күреп, тотоп, ипкенен тойоп ҡарарға ла була. Бына улар бер йоҙроҡ булып уҡмаштылар ҙа Сашкаға табан сойорғонолар. Улай ғына ла түгел, яңағына барып тейеүен Сашка үҙе лә һиҙҙе, хатта бәүелеп китеп, битен һыйпап алды. Һәм...һәм аптырап туп-тура миңә ҡарашын күтәрҙе. Ҡараштар осрашыуынан ток һуҡҡандағылай тертләп,

мин күҙҙәремде ҡабаланып сәхнәгә төбәнем. Һиҙеп торам: ул да боролдо. Шунан файҙаланып, мин тағы уның камилдарҙан-камил профиленә текләйем. Минең ҡараш көйҙөрәме икән әллә? Тағы күҙҙәр осраша. Дежавью. Был хәл ҡасандыр, ун нисә йыл элек булғайны. Бына ул, бер аҙ халыҡ массаһы таралыбыраҡ, йөрөрлөк мөмкинлек тыуғас, миңә ҡасырлыҡ урын ҡалдырмаҫлыҡ итеп ҡамап килеп баҫа һәм бындайыраҡ фраза менән һүҙ башлай:

– Танышыуҙың бындай формаһын өнәмәйем һәм ҡулланмайым. Ғүмеремдә тәүге тапҡыр әйтергә мәжбүрмен: таныш булайыҡ, мин – Сашка.

Стоп! Ул бит инде Сашка түгел. Хәйер, ул ваҡытта ла ысын исеме хаҡ мосолманса ине. Башҡорт егете бит ул. Уның йөҙө-төҫө хандар, мырҙалар заманынан уҡ һайланып ҡына ҡушылған ҡан һөҙөмтәһе икәнен "ҡысҡырып" тора ине. Иҫ киткес нәфис, төҫ-йөҙ һыҙаттары, аристократ һәм интеллектуал. Ысын арий. Мин милләтсе түгел-түгелен, әммә бергә уҡыған татар ҡыҙҙарының тәьҫире һөҙөмтәһендә матур, сибәрҙе "башҡортҡа оҡшаған" тип әйтергә өйрәнеп киттем. Тегеләр һылыу ҡыҙҙарҙы гел "татарға оҡшаған" тип ҡылыҡһырлай торғайны. Тәүҙә ишетеүгә сәйер һымаҡ ине, аҙаҡ уларҙың үҙаң кимәле юғары булғанлыҡтан шулай тиеүҙәрен аңланым. Үҙ милләтең матур булып күренеүе ғәйепме ни? Мин хәҙер Дженифер Лопесҡа ла "сибәр актриса" тип түгел, "башҡортҡа оҡшаған" тип маҡтауымды белдерәм.

Шулай итеп, тәү ҡараштан күҙем төшкән был егет тә башҡортҡа оҡшаған ине. Аҙаҡ уйым дөрөҫләнде. Юҡ, һораманым, нишләптер үҙе танышлыҡтың өсөнсө минутында уҡ "Башҡортса беләһегеҙме?" тип һораны. Ниңә улай тине? Белмәйем. Вот, башты юғалттым тек юғалттым. Шул тиклем дә "егет" тип аҡылды юйып була икән. Бәләкәй саҡта китап-фәләндән бәләкәйҙән сибәрлеккә, татлы һүҙгә ышанып, егетенән алданып ҡалған ҡыҙҙар хаҡында ғибрәтле тарихтарҙы күп уҡыным. Миңә ул бер нисек тә ҡағылмаҫ һымаҡ ине. Сөнки, нишләптер, бөтә класс ҡыҙҙары ғашиҡ булған сибәр егеттәр минең йөрәк ҡылдарын сиртмәй торғайны. Минән күберәк күргән, күберәк белгәндәр генә ҡыҙыҡ ине. Шулай тура килде, ҡәһәрең: Сашка сибәр генә түгел, иҫ киткес аҡыллы ла, күп ерҙәр күргән дә, мауыҡтырғыс хикәйәләү оҫтаһы ла, көслө характерлы ла булып сыҡты. Уның үҙенә буйһондора торған сихырлы бер көсө бар ине. Мин, тәкәбберлек сире менән апаруҡ сирле ун һигеҙ йәшлек туташ, күҙе асылмаған көтөй кеүек, уға эйәрҙем. "Эйәрҙем" тип әйтеүем күсмә мәғәнәлә, әлбиттә. Аяҡтарым менән түгел, күңелем менән эйәрҙем. Уның фекерҙәрен, баһаламаларын, мөнәсәбәтен, күҙаллауҙарын – барыһын да бәхәсһеҙ хәҡиҡәт итеп. Уның үҙен – идеал тип ҡабул иттем. Беҙ сәғәттәр буйы һөйләшеп ултыра ала инек. Бөтөнләй үҙемдән яҙмағанмын, күрәһең, – мине ҡыҙыҡһынып тыңлай һәм үҙенә тиң әңгәмәсе итеп һанай ине. Әйткәне лә булды: дуҫтарына, һөйләшеп ултырабыҙ, тиһә, тегеләре бот сапҡан. Нисек инде? Ҡыҙҙар менән нимә хаҡындалыр һөйләшеп була тиме ни? Улар бит – ярымкешеләр, һоро матдә урынында – алһыу кеҫәл... һәм башҡалар, һәм башҡалар. Мине шунда нимәлер сәнсеп алды. "Уның дуҫтары, тимәк, мине бер ҡасан да ҡабул итмәйәсәк". Был тойғо көсәйә генә барҙы. Ул – аҡыллы, сибәр, юғары ҡатламдан. Ә мин? Ни бары ҡәҙимге колхозсы балаһы. Быуаттар буйына тик зәңгәр ҡан аша ғына күсә килгән ҡайһы бер холоҡ һыҙаттарына, айырым мәҙәнилеккә сәсрәп киткәнсе тырышһаң да, тәрбиә менән генә өлгәшеп булмай. Тимәк, мин уға тиң түгел. Йәшлек үҙенекен итә – аралағы упҡынды бөтөнләй күрге килмәй ине. Шул тиклем уға оҡшағым, уны үҙемә ғашиҡ иткем килә, шул тиклем! Ә ул был йәһәттән үҙен ағай,

күпбелмеш итеп тоя, аҡыл һата. Ул бит миңә киләсәк тормошомдо ла һүрәтләп бирҙе бер заман. Сираттағы бер сәкәләшеү ине. Ул инде байтаҡтан гормондары уйнаҡлауының танһығын ҡандыра алмай талағы ташҡан, ә мин нисәнсе ҡабат юғалтырға теләмәгән ҡыҙлыҡты араға кәртә итеп ҡуям. Физик көс ҡулланыу, хатта стенаға ҡаҙаҡ ҡағырға кәрәк булһа ла – уның өсөн түбәнлек булғас, татлы һүҙҙәргә генә иреп төшмәгәс, ул бөтөнләй икенсе тактикаға күскән.

– Һаҡлаған булаһың инде туйға тиклем. Ә буласаҡ ирең быны һанға һуғыр микән? Мин иркәләгән кеүек наҙлай белерме? Ҡыйыулыҡ өсөн берәй яртыны кәгеп, көсләп төшөр ҙә хырлап йоҡлап та китер. Иртәгәһенә хатта һинең ҡыҙ булғаның-булмағаныңды иҫләй ҙә алмаҫ. Ул ғына ла түгел, "ҡыҙ инем" тиһәң, нимә, минән башҡа бер кем дә ҡараманымы ни, тип кәмһетер. Шуны теләйһеңме? Һиндә, әлбиттә, ханжеское воспитание. Ул – ярамай, был – гонаһ, тип һеңдереп үҫтергәндәр. Һиңә ярамай тип тыҡыйҙар, ә үҙҙәре эшләйҙәр. Шулай түгелме ни? Ә был гонаһ түгел, был – ни бары тормош, ни бары ысынбарлыҡ!

Хәҙер аңлайым: был ни бары сираттағы атака тактикаһы булған. Уның яратыу һүҙҙәренә бирешмәгәс, ул иң көслө ҡоралды ҡулланған – үҙ-үҙеңә мөнәсәбәтте. Мин уйланып ҡалдым, ҡайҙалыр киләсәктәге "мин"де, йәғни үҙ-үҙемде йәлләнем. Ә үҙ-үҙеңде йәлләү шул тиклем көслө нәмәкәй – шунда уҡ «көрәшергә, еңергә, үтеп сығырға» тигән ниәттәреңде, көстәреңде, мөмкинлектәреңде ҡыра һуға ла ҡуя. Үҙ-үҙемде яҡларға минең ихтыярым бөттө һәм...

"Вот ты и стала женщиной" – тине ул. Үҙенсә наҙлап, шыбырҙап ҡына әйтте. Ә ысынында иһә үҙ-үҙенән ҡәнәғәтләнеп әйтте ул, үҙ-үҙенән! Мин дә шәп инде, һәтәү! Уның әйткәненә башкөллө ышан да үҙ аҙмышыңдың бәхетле булырынан төңөл дә ҡуй, имеш. Ниңә, эш туйға тиклем барып еткәс, нишләп ирем мине яратмаҫҡа тейеш? Ниңә мине хөрмәт итмәҫкә тейеш? Ә ниңә, ғөмүмән, ул туйҙа лайыҡлы эсергә тейеш? Аҡты ҡаранан айыра ла белмәгән сәпсим алйот кеше түгел бит мин, моғайын, үҙемә лайыҡлы, арыу егет һайлаған булыр инем?! Былдай уйҙар үҙен хөрмәт иткән ҡыҙ башына ғына киләлер. Минең кәмһенеүем көслөрәк булып сыҡты – айыҡ баш түгел, эмоциялар иркенә бирелдем. Уйлап ҡараһаң, шул уҡ Сашка ниңә миңә өйләнмәҫкә тейеш ине һуң? Үҙемде аҡыллыраҡ тотһам, эмоцияларға ирек ҡуймаһам, уны үҙемә өйләндерә алған булыр инем. Ул бит бәлиғ булмаған бала түгел ине. Үҙ тормошон ҡорорлоҡ йәшкә еткән, миңә ҡарата йылы хистәре лә бар. Ә иң мөһиме – ул иҫәп-хисап, ике йөҙләлөк, алдаҡ мал-монаят өҫтөнлөк алған, ялған ҡиммәттәр менән тулған үҙ донъяһынан ялҡҡан ине. Ихлас мөнәсәбәткә, мөхәббәткә, ябай аңлашыуҙарға һыуһаған сағы... Ул төн уның хистәрен һыуындырмағайны әле. Эште мин үҙем боҙҙом – кәмһенеүемә кереп бикләндем, ихласлығымды юғалттым, яҡты киләсәгемдән төңөлдөм. Барыбер Сашка мине ташлаясаҡ. Мин уға тиң түгел, тинем үҙемә. Шулай килеп сыҡты ла.

Ҡара ҡайғыларға ҡалып ҡайтып төштөм әсәй йортона. Иң ныҡ ҡурҡҡаным – ауырға ҡалыу ине. Уф, донъяла йәшәмәүең мең артыҡ. Ҡыҫҡаһы, бер айым әжәл көтөп уҙҙы. Йоҡола ғына әҙерәк онотолоп алам да, төшөмдә иптәш ҡыҙҙар менән дискотекаға сығып, минең ҡайтыуҙы йәки тағы берәй сәбәпте "йыуғанда" ғына уянып китһәм, әсәй ҡарсыҡ йәнде ашап бара. Саҡ ҡына ла ҡыҙыҡһынманы, иғтибар итмәне микән ни ул ҡыҙының кисерештәренә? Көнөҙөно минең эшкинмәгәнлегемә, йүнһеҙ, изгелекһеҙ бала булғаныма бәғер итемде өтә. Йәнәһе, ул ашарын ашамай, кейерен киймәй мин тип йәшәгән, мине табырға һаулығын сарыфлаған, уҡытам тип күпме расходланған. Мине аҫрағансы, берәй

быҙау аҫраһа, лутсы изгелек күрер ине. Бына шулай. Хәмер менән бер аҙ йөрәкте баҫмаһам, ул хәл иткес айҙы үткәрә лә алмаҫ инем. Берәй аҡыллы ҡатын-ҡыҙ булһа, үҙен ҡулға алған булыр ине. Йөклө түгелмен – һәйбәт, тимәк, артабан йәшәүҙе уйларға кәрәк, тип тормошон яйға һалыуҙы хәстәрләр ине. Ә мин, барыһы ла асыҡланғас та, кире ҡалаға китеп, уҡыуымды дауам иттереүҙе ҡайғыртманым. Тауыҡ та, ваҡыты еткәс, үҙ себешен янынан суҡып-суҡып ҡыуа башлай. Ә мин ғаиләмдә һәр саҡ артыҡ «суҡыш» булдым. Әллә ниндәйҙер сит оянан килеп эләккәнмен? Белмәйем. Суҡыу ғынамы – бәғереңде телә, теле менән бысаҡһыҙ һуя. Бер яҡтан мин уны аңлайым. Әлеге аҡылымдан сығып, әлбиттә. Илдә бер сибәр булған аҡыллы ҡыҙың тиктомалдан, дипломға ла йыраҡ ҡалмағас, уҡыуын ташлап ҡайтһын да керһен. Ана, алкаш тип даны сыҡҡан йыбытҡы Нәзиләнең дә никтыуҙы ғына ҡыҙы уҡып йөрөһөн. Һәр бер таныш хәлгә кергән булып, йәлләү тулы ҡараш ташлап, кәмһеткес һорау бирә: "Нимә, ҡыуғандармы?" – йәнәһе...

Ысынында иһә минең "баҙар" юғары ғына ине. Үҙ ауылымда, үҙ ғаиләмдә һанламаһалар ҙа, мәркәздә баһамды белдем. Башым да эшләй, конкурентлылыҡты ла, бирешмәй, йырып сығам икән. Шулай булмаһа, төркөмдәштәр араһында һынау үтеп, үҙ коллекциям менән конкурста ҡатнашырға хоҡуҡ яулар инемме? Республиканың төрлө ерҙәренән йыйылған һәләтле кешеләр араһында. Төштәремдә күреп һаташа инем шул коллекциямды... Инде фасон һүрәттәре лә эшләнгән, кәрәкле туҡымалар һайланған, өлгөләр киҫелеү өҫтөндә. Теге йәки был моделдә подиумға кейеп сығырға һайлап алған төркөмдәш ҡыҙҙарым ҡанатланып йөрөй... Осраны бит шул мәлдә теге ҡәһәр һуҡҡан бәндә! Башымды әйләндерҙе, йөрәгемде урланы, бөтөн яҙмышымды пыран-заран килтерҙе лә... Әле һаман ярсыҡтарын йыйып, бөтәштерә алмай яфаланам. Шул мәлдә тормошом кирегә китмәгән булһасы! Конкурста призлы урын алып, берәй ательеға эшкә барып, аҙаҡ, уҡыуымды ҡыҙыл дипломға тамамлағандан һуң, үҙ эшемдә асып ебәргән булыр инем инде. Нимә-нимә, һәләтем дә, эшкә һерелегем дә бар ине. Иң мөһиме, ул саҡта ниндәйҙер амбицияларым, эсемдә утым бар ине. Ә хәҙер? Ә хәҙер – эсем тулы үкенес. Һәм бер нәмәне лә үҙем теләгәнсә бороп ебәрә алмауыма, көсһөҙлөгөмә асыуым ғына килә. Шулай. Мин бер заман күңелсәк һәм өмөттәр тулы, яҡты ҡарашлы, яҡшы кәйефле кеше инем. Ә әле шул асыу, үс, кәмһенеүҙәр тулы бер әҙәм. Мин хатта туйҙарҙа матур итеп ҡотлау әйтә, яҡшы теләктәр теләй белмәйем. Бына шундай туң күңел.

Туйҙар инде минең өсөн мөхәббәт байрамы түгел. Барыһына ла шул Сашканың күрәҙәлеге ғәйепле. Барыһы ла ул юрағанса килеп сыҡты. Әммә бер нәмәлә ул яңылышты: туй төнөндә тотоп көсләйәсәк ир генә түгел, мин үҙем дә иҫерек инем. Бер кемгә лә кәрәкмәгән артыҡбаш тормоштоң шулай тамамлауын "туйланым". Ни тиклем алйот булынған йәш саҡта! Ғүмер саҡ башланған саҡта "бөттө барыһы ла" тип төңөлсәле!

Мин үҙемде артыҡ кеше итеп тойған ғаиләнән ҡотолдом. Ә икенсеһенә, шулай уҡ мине артыҡбаш һанағанына, барып ҡаптым. Нимә эшләһәм дә – килешмәй, оҡшамай. Һәр һүҙең – урынһыҙ. Нимәнелер урынынан шылдырҙыңмы – ҡулайһыҙ. Таҙартырға уйлаһаң – әрпеш. Ул тиклем үк йүнһеҙ бала түгел инем, килен булғас, ҡарышҡан кеүек бит ул – һауыт-һаба йыуам тиһәң, тап шул ҡәйнәнең ҡәҙерле генә шәшкеһе мотлаҡ ҡулдан ысҡынып төшөп китә. Һәр ҡатын-ҡыҙ үҙ ғүмерендә берәй быяла-фарфор нәмә ватмай тормай, билдәле. Бер нәмәне лә ватмаҫ өсөн бер нәмә лә эшләмәҫкә кәрәк. Нишләп шундай яңылыш ҡына

осраҡты миңә булһа: "Короткос, донъямды пыран-заран итергә килгән" тип, ә ейәнсәренә: "И-и, балам үҫкән, кәсә тоторға эшкингән" тип баһалағандыр инде ҡәйнә тигән есемдәр? Үҙ-үҙемде уның ҡаршыһында яҡларға, һүҙемде һүҙ итергә минең хатта башыма ла килмәй. "Күрә алмайым ошо өйҙө, мәңге кермәҫ инем", – тип берәй мөйөштә һығылып илайым да, барып төртөлөр башҡа ерем булмағас, баҫылам. Әйләнгән һайын иренән айырылып ҡайтҡан-киткән килендәрҙе әсәйем һәр саҡ хөкөм итте, беләм. Бер оронсоҡтан ҡотолоп тын алып ҡалғас ҡына, ике оронсоҡ булып ҡайтып керә алмам бит атай йортона. Ул балама, шөкөр, оронсоҡ булып йәшәргә тура килмәгән икән. Өҫтәл өҫтөнә ултырғыс ҡуйып менеп баҫҡайным, йығылып төшөп харап иттем сабыйымды. "Угроза выкидыша" тип дауаханаға һалырға хәл ҡылып, әйберҙәрҙе йыйып, мунса инеп килергә генә ҡайтарғайнылар шунан бер көн алда. Барып өлгөрмәнем, әлеге лә баяғы шул ҡәйнәнең ҡыш уртаһында нимә типтер былай ҙа аҡ стеналарын ағартырға ҡушып енләнеүенә түҙмәнем. Менеп киттем. Хәйер, үҙем дә ғәйепле инде. Ул өҫтәлдең кәлтәннәп торғанын күрмәйемме лә башымдың юғарыла әйләнеүсән икәнен белмәйемме? Нисә ай буйы уларҙың туҡтауһыҙ миңә төрттөрөүен, кәмһетеүен, һанламауҙарын үткәреп ебәрә алғанды, әле ниңә түҙмәҫкә ине? Инде етлегеп бөткән тиерлек баламды йылы ҡосаҡҡа түгел, һалҡын ер ҡуйынына тығыуы нығ йәл булды. Башҡа балаларымдың ғүмерен ҡыл өҫтөнә ҡуймаҫмын, нимә кисерһәм дә түҙермен, тип һүҙ бирҙем шунда.

Рушанна менән йыл ярым самаһы күрешмәй торғайныҡ. Хат та яҙышырға форсат булманы. Ата-әсәһе аша ғына сәләм күндереп торҙоҡ. Ул ҡалала студент тормошонда ҡайнай, оҫталыҡ буйынса конкурстарҙа ҡатнаша, эш урыны эҙләй, егеттәрҙе бирсәткә урынына алыштыра... Ә мин, ситлектә һайрарға дәрте булмаған турғай шикелле, һирәк-мирәк эләккән шатлыҡ валсыҡтарына ла рәхмәт әйтеп көн күрәм. Үҙ туйына саҡырырға эҙләп килде Рушанна. Килде лә, миңә ҡарап, бер талай өнһөҙ ҡалды. "Таныманым",– тип аңлатты аҙаҡ. Ҡолаҡтарын локаторҙай тоҫҡап эргәлә уралған ҡәйнә алдында һөйләшә алмағас, һыу буйына "өйрәктәрҙе ҡарап алып ҡайтырға" төшкән инек. Һәр өндәшкәнгә тертләп, ябай ғына һорауға ла оҙаҡ итеп уйланып яуап биргәнде күҙәтеп ултырҙы ла: "Һин ҡайҙа?" – тип кенә әйтте.

– Нисек... ҡайҙа? Бына, алдыңда.

– Юҡ, мин белгән ысын Тамара ҡайҙа, тип һорайым  һинән. Сибәр, аҡыллы, үткер, шаян ҡыҙыҡай ҡайҙа булды? Иҫләйһеңме, беҙ бит ошонда ағын һыуға ҡарап хыялланып ултыра торғайныҡ: киләсәктә кем булабыҙ, нимә эшләйбеҙ... Ә "Тамшан" салоны? Онттоңмо ни?

...12-13 йәштәрҙә уйлап сығарғайныҡ беҙ уны. Атамала беҙҙең исемдәр ҙә булһын, шул уҡ ваҡытта башҡортса ла булһын, тип "Тамшан"ды уйлап сығарҙым. Йәғни кешене ымһындырып, тамшандырып торорлоҡ исеме лә, есеме лә. Исеме булды, ә есемен Рушанна менән беҙ икәү киләсәктә булдырырға тейеш инек. Мин иҫ киткес матур-матур киске күлдәктәр, костюмдар тегәм, ә эхирәтем моделдәрҙе биҙәндерә, ҡупшы прическалар яһай. Һәм беҙҙең был күҙ ҡамаштырғыс ижадты "Тамшан" салонының күрһәтеү залына йыйылған тамашасы һушы китеп, тамшанып, ләззәтләнеп ҡарай. Ялт-йолт фотоаппарат уттары, камералар, ялтыр-йолтор журналдарҙан интервью алырға килгән ялбыр-йылғыр репортерҙар...

Хыял тигәс тә хыял инде. Рушанна әле әйтмәһә, мин уның барлығын да онотҡайным. Абау, мин ҡасандыр хыяллана белгәнмен! Әле иһә минең көнитмештә хыялға илһам да, форсат та юҡ.

– Һуңғы тапҡыр нимә тектең?

Рушаннаның һорауы албырғатып ебәрҙе. Оҙаҡ ҡына иҫләй алмай ултырҙым.

– Ирҙең курткаһының яғаһын, еңен тегеп бирҙем, кем менәндер эсеп һуғышҡан да, айырып төшөргәндәр.

– Шунан?

– Ҡәйенбикәнең итәген ҡыҫҡартып бирҙем.

– Тағы?

– Тағы тип ни... Йөҙләгән носкиға ямау һалғанмындыр.

– Аңлашылды. Тимәк, бер нәмә лә текмәгәнһең.

– Нисек инде "текмәгәнһең"? Белгең килһә, мин ул энәне тота-тота бармағым биҙрәгән, күргем дә килмәй, теләмәйем дә!

– Беләһеңме, ниңә шулай? Иҫкене ҡормау, ямау – ижад итеү түгел. Минең аңлауымса, һин студент саҡтан бирле бер нәмә лә текмәгәнһең, хыялыңа хыянат иткәнһең, белдеңме! Шуға күрә мин һине танымайым да. Эсеңдәге утың һүнгән һинең. Эйе, тормошоңдо күрҙем. Ҡәйнәңде лә күрҙем, аһ-зарыңды ла тыңланым. Әммә, Тамара, мин шуны аңламаным: һин ниңә ҡәйнә донъяһына йәбешеп ятаһың? Үҙ донъяңды ҡороп ҡара. Башҡалар нисектер булдыра бит, ниңә һинең ҡулдан килмәҫкә тейеш? Үҙеңдең өйөңдә һине бер кем дә кәпкәкләй алмаҫ. Берәйһе башлаһа – ҡыуҙың сығарҙың да ишекте шартлатып бикләнең ҡуйҙың.

Шаҡ ҡатҡыс. Шул көнгә тиклем үҙ донъямды ҡороу тигән уйҙың үҙ башыма килмәүе – шаҡ ҡатҡыс. Иҫ кергәне бирле тирә-яҡтағылар "һинән була тиме ни инде, шуны ғына ла белмәйһең" тип тыҡып торһа, ысынлап нимәлер өйрәнергә, булдырырға ихтыяр һына икән ул. Ошо йәшкә етеп тә, әсәйемдең мине хуплап, башҡаларҙан яҡлап ниндәйҙер йылы һүҙ әйткәнен иҫләмәйем. Тәүге балам төшкәс тә йәлләмәне.

"...Шуға ла эшкинмәгән..." – тип миңә күптән һуҡкан мөһөрөн яңыртып мисәтләп кенә ҡуйҙы. Шунан артығын көтмәгәйнем дә. Аңлау, йәлләү, яратыу өмөт итеп үҫмәнем. Күңел генә алама – булмаҫтайҙы көҫәй. Барыбер яратылып ҡарағы килә.

Рушаннаның туйына барманым. Ҡараҫҡы булып ултырғым килмәне. Туйға барырлыҡ кейем, бүләк алырға ла мөмкинлегем юҡ ине, етмәһә, шул байрамды күрә алмай башлаған саҡтар ине. Саҡырылыуыбыҙ хаҡында иргә әйтеп тә торманым. Уның холҡо билдәле: минең берәй ергә ныҡ барғым килә икән, ул мотлаҡ аяғында ла тормаҫлыҡ лаяҡыл булып ҡайта һәм, әлбиттә, байрам кәйефе бөткәс, уттар һүнгәс, алдағы көнгә пландар ҡормаҫҡа, хыял йөрөтмәҫкә өйрәнергә мәжбүр булынды. Ҡайҙа, ти, ул унда "Тамшан"?! Бөткөһөҙ иҫкене ямау шул тиклем йәнгә тейҙе, түҙмәйенсә, байтаҡ ойоҡ-нәскиҙәрҙе ут тамағына ырғыттым бер заман. Әле лә энәне бик һирәк тотам. Ҡасандыр хыял иткән нәфис күлдәктәрҙе тегергә форсат булмағас, нимәгә кәрәк ул миңә? Ҡыҙҙар тапҡан булһам – бер хәл. Ҡурсаҡтай итеп йөрөтөр инем. Малайҙарға нисек тә бара, әсәйем был шөғөлдән төңөлөүемә ҡаршы булды-булыуын. "Шулайтһаң – эконом, былайтһаң – эконом", имеш. Ялҡытҡан "эконом-класс". Бына бында, – vip-ложала, ни тиклем уңайлы. Тамаша ҡылырға сәбәп буйтым.

Үҙемде саҡ ҡулға алырлыҡ хәлгә килдем. Юҡһа йөрәк тамаҡ төбөндә тыпырсына, ҡолаҡ шаулай, ҡул-тубыҡтар буйлап үрле-ҡырлы ҡалтырауыҡ йүгерҙе байтаҡ. Ниһайәт, тын алышын да тигеҙләп бөтөп барам. Үҙемдең театрҙа ултырғанымды ла, ниндәй маҡсат менән килеүемде лә оноторлоҡ дәрәжәлә шаңҡығайным. Йөрәк тамаҡ төбөнән кире урынына төштө, әммә тыпырсыныуҙан

туҡтарға уйламай. Күптән, бик күптән бындай ритмды тойған юҡ. Мин хатта ҡасандыр ир-егет менән ҡараш осрашыуҙан ғына былай тулҡынланып була икәнен онотҡайным. Ҡайҙа, ти, ул ҡараш! Килеп ҡағылғанға ла бер нервы һелкенмәй торғайны. Заманында, битарафлығыма йәне көйөп, ирем дә миңә "бүрәнә" тип ысҡындырғайны. Тейҙең ни, теймәнең ни, һап-һалҡын, бисәгә оҡшамаған, йәнәһе. Ул һүҙе өсөн, тәбиғи, мин ҡапыл ҡоро утынға сәрпәкләнеп, сыра-шырпыға әйләнеп тоҡанманым, "ҡыҙыу ҡатын" булып янырға башламаным. Уны дөрләтеү түгел, йылытырға ла ыжламаным. Киреһенсә, үҙенә ҡарата күңелдә быҒаса ул-был бысҡыған булһа, уныһы ла һүнеп ҡуйҙы. Бүрәнә, имеш. Оҫта ҡулына эләкһә, ул ниндәй генә халәткә кермәй? Нәфис һынды ла ырып яһап була, семәр-семәр биҙәкте лә... Теләгән – сәңгелдәк яһай, теләгән – табут... Кемдер иң бай йорттарҙа ғына торасаҡ сувенир эшләй, ә кемдер битарафлығы менән серетеп юҡ итә. Бына нимә ул бүрәнә! Йәлләмә һин хәләл ҡатыныңдан йылы ҡарашыңды, иғтибарыңды, татлы һүҙеңде, һал наҙыңды, ваҡытыңды, көсөңдө! Һәм бер заман бүрәнә лә сәскә тажын асыр...

Бәлки, ысынлап та миндә лә ғәйеп булғандыр? Улай тиһәң, тәнемдең бер ни ҙә тоймағанына мин ғәйеплеме ни? Ә икенсе яҡтан... Икенсе яҡтан ҡараһаң, бәлки, иремде артыҡ күп сағыштырғанмындыр Сашка менән? Сашка бит комплименттар менән "күмә" ине. Үҙ ғүмеремдә бер кемдән дә, хатта иң яҡын туғандарымдан да ишетмәгән иркәләү, наҙлау һүҙҙәрен бер нисә ай ғына таныш булған егеттән ишеттем бит мин. Бәлки, шуға, яҙғы ҡояш наҙына илергән умырзая һымаҡ, комплекстарымды тишеп, ысын минлегем моронлап сыҡҡандыр? Бәлки, шуға аҙаҡ бер кемдең дә иркә һүҙенә, арлы-бирле үпәс итеүенә бирешеп бармаған һауалы ханымға әйләнгәнмендер? Сашка минең булған матурлығым, аҡылым өсөн һоҡланмай ине. Ул алда буласағын тоҫмаллап, киләсәктә ниндәй иҫ киткес, һоҡланғыс ҡатын-ҡыҙ була аласағым хаҡында аңлатып, минең үҙемә кем икәнемде тасуирлап – ышандырғыс итеп тасуирлап күңелемде иретте. Кеше харап эгоист шулай ҙа! Хатта мөхәббәттә лә кеше үҙ-үҙен яратыу менән мәшғүл. Мин Сашкаға уның матурлығы, аҡылы өсөн генә түгел, миңә булған һоҡланыуы, баһалауы өсөн ғашиҡ булманыммы икән? Ә уның мине яратыуы үҙ ижадына мөкиббән киткән Пигмалион ише яратыу булманымы? Уның һүҙҙәренән тәжрибәһеҙ, йәш кенә ҡыҙ сәскә атып, балҡып китһен әле! Теләһә – утҡа һала, теләһә – һыуға, теләне – өҙҙө лә алды. Юҡ, өҙөп алманы. Уның теләге буйынса сәскә үҙе тамырынан өҙөлөп, ялтырға төрөнөп алдына, әй, юҡ, аяҡ аҫтына килеп ятты... Үҙ-үҙенән ни тиклем ҡәнәғәт булды, буғай, Сашка. Тәкәбберлеккә икенсе берәүҙең тәкәбберлеге һыныуын күҙәтеү ни тиклем татлы, ләззәтле... Ә ул быны өсөн баш китерлек батырлыҡтар эшләмәне, тауҙар аҡтарманы, күктән йондоҙ ватып алманы, ҡояш бүләк итмәне...

Ул ни бары минең күңел ҡылдарын ҡайҙан, нисек сиртергә, математик мәсьәлә сискән һымаҡ, һалҡын аҡыл менән иҫәпләп сығарҙы ла бойомға ашырҙы. Һәм иң мөһиме – уның бесәй сысҡанды уйнатҡан шикелле уйнатыуын, әүрәтеүен ҡорбан уйлап та бирмәй. Ул ғына ла түгел – алданыуы өсөн хатта рәхмәтле була! Мин дә бит ул саҡта Сашка өсөн "сысҡан" булғанымды аңламай инем. Тормош тәжрибәһе лә етмәй, "мөхәббәт" тип күҙ томаланған, бер кемде лә ишетмәйем дә, күрмәйем дә. Бәләкәйҙән уҡыған фәһемле китаптарҙағы аяныслы тарихтар ҙа онотолдо. Әҙәби әҫәр ысын тормош менән ярыша аламы ни инде: әҙәби геройҙың кисерештәре хаҡында уҡыуы – бер, ә үҙең тойоу – ул бит бөтөнләй бүтән! Әммә китап тигән нәмә минең яҙмышта роль уйнамай ҡалманы.

…Сашка менән айырылышмаған саҡ. Психология менән мауыҡҡан бер курсташымдың тыуған көнө, студенттарса ғына табын. Беҙҙең һәр саҡ шулай:ололарҙыҡы кеүек, байрамдарҙан һуң өс көн ашарлыҡ тороп ҡалмай, мәлендә тамам була. Байрам хужабикәһе һәр ваҡ-төйәк бүләк иткән өсөн дә шатланып рәхмәттәр әйтте, йөрөгән егете, шундай уҡ ярлы студент, ашауҙан өҙөп тигәндәй һыңар сәскә тотоп килгән булған, уға был батырлыҡ өсөн барыбыҙ ҙа ҡул саптыҡ. Ҡыҙҙар компанияһындағы икенсе егет, Игорек, ҙур ғына китап бүләк итте. Курсташ ҡыҙ бәхетенән үрле-ҡырлы һикергәнгә, мин дә был китапты асып, арлы-бирле күҙ һалмай түҙә алманым. Авторын иҫләмәйем, ә атамаһы "АнтиКарнеги" ине, буғай. Һәр хәлдә миңә, ҡасандыр Д. Карнеги китаптарын мауығып уҡыусыға, был атама бик сәйер ине. Тулыһынса уҡып өлгөрмәһәм дә, төп мәғәнәһенә төшөндөм: автор Д. Карнегиҙың кешеләр менән аралашыу методтарын тулыһынса инҡар итә. Ул уның китабын "кеше, уның хистәре менән идара итеү буйынса методик ҡулланма" тип атай. Автор фекеренсә, кешелек ике типҡа бүленә: манипуляторҙар һәм манипуляцияға бирешеүселәр. Һәм бына тап Карнеги кеүектәр кешене маҡтап, осондороп үҙ маҡсаттарына ирешәләр. Улар ихлас түгелдәр. Уларҙың ҡылыҡтары уйланған, иҫәпләнгән, хискә бирелмәйҙәр. Манипулятор үҙ маҡсатына ирешеү өсөн "ҡорбан" менән файҙалана. Ул "ҡорбан"ды маҡтап, юхалап ҡына үҙ яғына бормай, ә кәрәк икән – үҙен йәлләтә йә үсегеп еңә, йә енләндереп көсһөҙләтә. Бер ҡасан да үҙ теләген асыҡтан-асыҡ әйтмәй, үҙе лә башҡа кешенең ихласлығына ышанмай. Ихлас – уның өсөн ахмаҡ. Ахмаҡ, – тимәк, ҡорбан.

Китапты тулыһынса уҡыманым. Әммә фантазиямдың бәләкәйҙән көслө булыуы, ғәҙәттәгесә, үҙ ролен уйнамай ҡалманы. Мин Сашканың ҡылыҡтарын манипулятор формулаһына "һалып иҫәпләп" ҡараным… Һәм ҡапыл барыһын да аңлап, шаңҡыным. Үҙемдең "мөхәббәт" тип алданғанымды аңлап шаңҡыным. Быға Сашканың үҙенең абайһыҙлығы ла сәбәпсе. Минең кеүек хәтерле һәм анализлы фекерләүгә һәләтле ҡыҙ алдында ҡайһы бер нәмәләрҙе һөйләмәҫкә кәрәк ине. Мәҫәлән, ҡайҙалыр сәйәхәттә сағында аҡсаһы бөтә. Ул өйҙәгеләргә һағыныу хистәре, хәтирәләр тулы дүрт-биш битлек хат яҙып һала. Тегеләр хатты илай-илай уҡыйҙар ҙа Сашкаға кәрәкле сумманан байтаҡҡа артығыраҡ аҡса ебәрәләр. "Ә бит мин, – тиер ине Сашка, маһайып, – аҡса һорау түгел, кәрәклеге хаҡында ла бер һүҙ ҙә яҙманым. Ғөмүмән, матди яҡҡа ҡағылышлы һүҙ яҙманым, тик рухи донъям, кисерештәрем хаҡында ғына". Бик кәйефле сағында тағы нығыраҡ асылып ташлай:

– Мин – идеаль ир. Мин ҡатыныма ҡул күтәреү түгел, тупаҫ һүҙ ҙә әйтмәйәсәкмен. Мәҫәлән, ашты бик тәмле бешермәгән икән, ти. Мин бер нисек тә асыуланмаясаҡмын, ашамаһам да, рәхмәт әйтеп тороп китәсәкмен. Әммә шундай һүҙҙәр табырмын – ҡатыным икенсе тапҡыр тәүлек буйы плита эргәһенән китмәһә-китмәҫ, ҡулын утҡа ҡуйып, усында булһа ла бешерер, әммә ашты мин ятраҡанса бешерер…

"АнтиКарнеги"ға тиклем Сашканың был һүҙҙәре һиҫкәндермәгәйне. Ә был бит – типик манипуляция! Манипулятор өсөн "ҡорбан"дың хистәре – тишектәге бушлыҡ, ноль. Уға үҙ теләге – теләк. Мәҫәлән, мин Сашканың ҡатыны урынында, ти. Ярай, аш ул теләгәнсә булды, ти. Йәки ул теләгәнсә булманы, һәм мин ҡулымды ла бешерҙем, ти. Минең һыҙланыуымды уйлап бирәсәкме ул? Бәлки, кәйефем юҡ, бәлки, арығанмын, бәлки, бөтөнләй бешерергә теләмәйемдер? Ул минең хистәрҙе лә иҫәпкә һаласаҡмы? Бөтә күҙәтеүҙәрем буйынса, былай килеп сыға: юҡ, һанға һуҡмаясаҡ.

Бына шулай. Әллә ниндәй ҡапма-ҡаршылыҡтар йыйылмаһы булыуҙан туҡтап булмай. Мин йә Сашканы күккә күтәреп һоҡланам, аҡылды юйып, хистәргә бирeләм; йә бер китап арҡаһында һөйгәнемдән ваз кисәм, нәфрәт утында көйәм... Әллә ул йәшлек тигәндәре шундай ауыр мәл, әллә шәхсән минеке генә ошолай? Бер сиктән икенсеһенә бәрелеп-һуғылып шул тиклем арыным.

Яратамы мине Сашка, әллә алдаймы? Мин уны яратаммы, әллә күрә алмайыммы? Аҡыллымы мин, иҫәрме? Аҡыл мөһимме, әллә тойғолармы? Бер туҡтауһыҙ шикләнеү. Һәр аҙымыңды үлсәп баҫыу дөрөҫмө, әллә үҙ мәлендә көслө хистәргә дөрләп янып та, иртәгәһе – мат яғаһынамы? Белмәйем. Бер нәмә лә белмәйем дә, аңламайым да. Ә ул шиктәр шул тиклем йәнемде ҡыя, бер туҡтауһыҙ йөрәгемде күкрәк ситлегендә баскетбол тубы урынына уйната. Йөрәк үҙ урынында эленеп тормаһас, ниндәй тыныслыҡ булһын инде? Йә түгелеп илайым, йә һыным ҡатып, хәл бөткәнсе шашып көләм. Дәрестәрҙә нимә хаҡында һүҙ барғанын ишетмәйем, уҡытыусылар нимә әйткәнен аңламайым. Ап-айныҡмын, ә үҙемде иҫерек кеүек тоям. Йәшәйем дә кеүек, юҡ та һымаҡ. Әллә бар мин, әллә юҡ... Бер яҡтан, аҡылы камил еткән ҡыҙмын. Икенсе яҡтан, үҙ аяғына үҙе эләгеп тарбайлап йөрөгән сабый бала һымаҡмын. Күп нәмә беләм, ә бер нәмә лә белмәйем, юҡ, йәшлек – ауыр мәл ул. Артыҡ ярһыулыҡ күп, сабырлыҡ юҡ. Бер сиктән икенсеһенә һуғылыуҙан, туҡтауһыҙ икеләнеүҙән, Сашкаға булған аңлайышһыҙ хистәрҙән, ғөмүмән, донъянан һәм үҙ-үҙемдән арып, ялҡып, тыуған йортҡа ҡайтып йығылыуҙан башҡа сара тапманым. Әле аңлайым: түҙергә аҡыл етмәгән. Иртәме-һуңмы Сашкаға ҡарата йөрәгемдә янып торған ялҡын һүрелер ине. Башым айныр ине. Ҡыҙыулыҡ менән күпме иҫәрлектәр эшләп ташламаҫ инем. Ә кем белә, бәлки, ысынлап башҡа яҡтан яңлышҡанмындыр? Мәҫәлән, Сашка ысынлап яратҡан булһа? Уның һүҙҙәре ысын йөрәктән сыҡҡан булһа? "Һиңә тиклем, "бәхеттең етенсе ҡаты" тигәндәре ялтырауыҡ матур һүҙ генә икән, тип уйлай торғайным. Ә хәҙер аңланым: бар икән ул. Һинең менән ожмахтың етенсе ҡатында булғандай тойғо кисерҙем. Һин – мөғжизә. Һин – иң серле һәм ғәжәйеп ҡыҙһың. Быға саҡлы донъялағы бер генә ҡатын-ҡыҙ ҙа минән һөйөү һүҙҙәрен ишеткәне булманы. Һин – берҙән-бер. Мин һине яратам. Я-ра-там. Беләһеңме, мөхәббәт – ул ысын бәхет икән..." Был һүҙҙәр һаман ҡолаҡта яңғырай. Ихлас әйтелгәнгә микән? Хатта ихлас әйтелмәгән осраҡта ла, уның һүҙҙәрен онотмаҫҡа ине. Ҡатын-ҡыҙ ғөмүмән ҡасандыр наҙлы һүҙҙәр ишетеп торғанын онотorға тейеш түгелдер. Юҡһа, ул артыҡ ябайлана, артыҡ ғәҙәти, ҡәҙимге бисәгә әйләнә. Унан башлана инде тағы ла хәтәрерәк "әүерелеүҙәр". Кем – аждаһа, кем – йылан, кем – һәүкәш. Тәүбә-тәүбә. Эйе, эйе, кемдер әлеге лә баяғы "бүрәнә" лә булып китә. Ысынында иһә ул ваҡытта ҡасандыр үҙемдең мөғжизә һәм хыял булғанлығымды онотоп ебәргән сағым булған. Хатта йәшермәй әйтеү фарыз – яңы иҫемә төшә башланы. Тағы ла дөрөҫөрәк әйткәндә, үҙ баһамды күтәреү маҡсатында, Рушаннаның күрһәтмәләрен тыңлап, көсләп иҫемә төшөрҙөм. Был уйынға хатта кейәү балаҡай ҙа ҡушылды. Кухняла уның мөрәжәғәтенә, ғәҙәттәгесә, теләр-телмәҫ кенә яуап бирһәм, ҡыҙып китеп әрләп ташланы.

– Һин ҡатын-ҡыҙмы, әллә туң киҫкәме, ә? Ҡаршыңда баһадирҙай ир-егет баҫып тора, ә һин, исмаһам, юрамал да күтәрелеп ҡарамайһың, йылмайып ҡуймайһың?

– Һин бит ир-егет түгел, Рушаннаның ире!

– Булһа һуң. Сибәр ҡатын-ҡыҙҙың матур йылмайғанын тамаша ҡылып зауыҡланыу гонаһ түгелдер бит? Әммә һин миңә генә түгел, ғөмүмән, ир-атҡа ҡыҙыҡһынып булһа ла ҡарамайһың. Бына маршруткаға кергәс, кемдәр бар икәнен күҙ

менән тикшереп алаһыңмы? Юҡ шул, һин шунда уҡ тәҙрәгә текләйһең. Урам буйында берәйһе ваҡыт күпмелеген һораһа, яуап бирәһеңме? Эйе, секундына тиклем әйтһәң әйтәһең, ә һораусының күҙенә түгел, йөҙөнә лә һирпелеп ҡарамайһың. Ә уға ваҡыттың күпмелеге хәжәт ине тип уйлайһыңмы?

– Хәжәт булмаһа – һорамаҫ ине.

– Ә хәҙер бөтә кешелә лә сәғәтте күрһәтеп торған мобильник барлығы, бер ҙә булмаһа, ҡалала һәр ерҙә тиерлек ваҡытты һәм температураны күрһәтеп торған йүгерек яҙыуҙар яныптороуы иҫеңә төшмәйме?

– Әллә... уйлағаным булманы.

– Уйланмайһың шул. Асылда ваҡыт һорау – универсаль танышыу ысулы. Ирегет шул рәүешле ҡылыңды тартып ҡарай, ә һин күтәрелеп ҡарайһы, йылмайып әңгәмәне күтәреп ебәрәһе урынға "дүртенсе ун биш минут" тип боҙҙай тауыш менән әйтәһең дә ҡарашыңды ергә текләп юлыңды дауам итәһең. Унан, үҙеңдең һаман яңғыҙлығыңа аптырап, ирҙәрҙе һүкырлығы өсөн һүгеп кинәнәһеңдер әле.

– Дөрөҫ әйтәһең, йәнекәйем, башлыһың да инде, нисек минең үҙемдең башҡа килмәгән. – Рушаннаның күҙҙәре янып китте. Ирен һәр саҡтағыса суп иттереп үбә һалып, миңә текләне. – Тамочка, баҡһаң, һин бөтөнләй ҡылансыҡлана белмәйһең икән!

– Хәжәт ине бик! – тип турһайҙым.

– Хәжәт, ишшеү нисек хәжәт әле! Беләһең килһә, ҡылансыҡлана белеү – сибәрлектән күпкә хәтәрерәк ҡорал! Әйҙә, иң ябай алымдан башлайбыҙ. Күрерһең, үҙеңә лә оҡшап ҡалыр әле...

Кешенең аҡылы, бер уйлаһаң, күпмегә үҫешкән: ниндәй генә компьютерҙар юҡ. Ҡоштан бейек оса, нисә йөҙ "ат көсө"н ултырышы аҫтында йөрөтә, нисә меңәр саҡрымдар аша һөйләшә, күрә ала һ.б., һ.б. Ә күңеле, йөрәге һаман шул уҡ – борон заманда нисек матур күҙҙәр ҡапҡанына эләккән, әле һаман эләгә тора. "Сиртте" был балыҡсы "ҡармаҡ"ҡа. Ха-ха-ха. Антрактты минән былай көтә башланы. Уң яғындағы ханымды бөтөнләй онотто. Хәләл ҡатыны түгеллеген аңлағайным инде, әллә ялҡыта башлаған ҡарт һөйәркәһеме икән, тигәйнем. Хәлдәр күпкә ябайыраҡ: ҡәрҙәше икән. Ура, антракт. Яңылыш ҡына ҡағылыу, йән иреткес йылмайыу, иркә тауыш менән ғәфү үтенеү, кәүҙәнең бөтөн һомғоллоғон баһалап өлгөрөрлөк кенә итеп баҫып тороу, ымһындырғыс һығылмалылыҡ менән сығыуға ыңғайлау... Уйлағанымдан өс аҙымды артығыраҡ яһарға тура килде, ҡәһәрең. Уф-ф, ниһайәт, ҡыуып етте. Тәк, күрешергә беренсе ҡатын-ҡыҙ ҡул һона. Сәтәкәй бармаҡты күтәреберәк, Томочка, онотма. Артабан дело техники – күҙҙәренә мөкиббән китеп ҡарайһың, һөйләгәнен иҫең китеп, мауығып тыңлайһың, ауыҙыңды асаһың икән, мотлаҡ уға ҡарата һоҡланыуыңды белдереү өсөн генә.

О-о-о, кәйеф бермә-бер күтәрелде. Театр музейында зауыҡланып йөрөүем етмәгән, "ҡапҡорһаҡ"тың шәбен эләктергәнмен. Ысынлап та, һәйбәт әңгәмәсе генә түгел, Искәндәр Сәғитовичтың танышы ла булып сыҡты. Ул ғына ла түгел! "Объект" бөгөн бында, хатта беҙҙән йыраҡ та түгел ултыра! Ура-ура-ура. Еңеү беҙҙең яҡта буласаҡ!

– Был яҡҡа таныш ҡарышлауыҡ шыуыша. Янына барып һаулашып китмәй ярамай: минең "хужа"ның "бикә"һе. – Юлдашымдың эргәмдән китеүенән файҙаланып, иркенләп һулыш алдым. Тимәк, Искәндәр Сәғитович менән осрашыуға әҙерлән. Аҫҡа, гардеробҡа, "танауҙы пудраларға" төшөп килмәй ярамаҫ. Баҫҡыс яғына үткән ыңғай яңы танышымдың ҡаршыһындағы һынға күҙ һалам. Һығып

торған бәрхәт күлдәк аша хас тиреҫ ҡарышлауығыныҡы һымаҡ ҡатлы-ҡатлы май һырҙары ҡабарып тороуы күҙгә бәрелеп ҡала. О, ҡатын-ҡыҙ! Шыма, ялтырауыҡ тиреле, һығылмалы йыланға тиңләүҙәре, баҡтиһәң, комплимент була икән. Тәүбә-тәүбә, ҡарышлауыҡҡа тиңләүҙән Алла һаҡлаһын. Был эволюция тигән нәмә кеше мәсьәләһенә ҡағылғанда нишләп... киреһенсә эшләй икән? Тәбиғәттә ҡарышлауыҡ гүзәл, нәфис күбәләккә әйләнә, йөнлө, сырышлы маймыл – кешегә. Ә беҙҙең тормошто ҡараһаң... Күбәләктәй еңел кәүҙәле, ҡарап туйғыһыҙ гүзәл ҡыҙ тора-бара ҡарышлауыҡҡа әйләнә. Сибәр, баһадирҙай егеттәр иһә ҡартлыҡтарында һаҡал-мыйыҡ баҫып, йөҙө ҡарайып, йыйырсыҡ баҫҡан һәм кәкрәйгән маймыл төҫөнә керә. Ни тиклем ғәзелһеҙлек!

Баҫҡыстан ҡабаланып төшөп барғанда уйланырға ярамай ул миңә. Бына бит, йылтырап торған шып-шыма мәрмәрҙә алабарманлығым арҡаһында тайып та киттем. Йә кеше араһында суҡынып барып төшөп оятҡа ҡалыу менән сикләнәм, йә туфлиҙарымдың беҙ үксәһе аҡтарылып-фәлән ҡазаға тарыясаҡмын, тип уйлап та өлгөрмәнем, баҫҡыстан менеп килгән бер ир-егеттең ҡосағына барып та керҙем.

– Ханым, һеҙ Золушка роле өсөн олораҡ һәм ауырыраҡ түгелме?

– Ысын ир-егеттең ышаныслы ҡулына юлыҡтыммы тиһәм, уныһы ла ит сабыусы икән.

Кәүҙә матурлығын баһалау түгел, ә, ғәҙәт буйынса, иттең йәше һәм ауырлығы менән генә ҡыҙыҡһына. Ҡотҡарыусыма үҙе кеүек тупаҫ ҡына яуаплап, туфлийымды алырға боролам.

Тәүгеһенә ҡарағанда байтаҡҡа йомшарған интонация яңғырай:

– Ҡара һин уны! Аяҡтан йыға яҙғансы килеп бәрелә, етмәһә, ғәфү үтенеү урынына, мыҫҡыл итеп маташа. Былың өсөн яуап бирергә лә тура килеүе мөмкин бит әле.

– Беренсенән, маташманым, ә иттем. – Туфлийымды аяҡҡа эләктереү менән, асыу-ярһыу көйө кире боролам. – Икенсенән, нимә-нимә, ә яуап бирергә мин аптырамайым! Өсөнсөнән, һеҙ әллә мәмерйәнән яңы сыҡтығыҙмы? "Ҡатын-ҡыҙ хаҡлы булмаһа, унан ғәфү үтенергә кәрәк" тигәнде лә белмәйһегеҙ!

Һуңғы һүҙемде таслатҡансы битенә бәргәс, аңыма барып етә. Ҡаршымда... Сашка тора. Был юлы аяҡ тайыуҙан түгел, ә ҡапыл күтәрелгән көслө тойғоларҙан күҙ алдарым ҡараңғыланып, сайҡалып китәм. Ҡулым менән баҫҡыс таянғысын ҡапшарға маташҡанда, таныш ҡулдар тағы беләгемдән матҡып тотоп ала.

– Ниндәй темпераментлы ханым! Етмәһә, бигерәк хиссән. Мин шунда уҡ ғәфү үтенәме, тип кенә әллә иҫтән яҙырға уйланығыҙ? Берүк тынысланығыҙ, зинһар. Юҡһа, кешеләр миңә ен-пәрей күргән кеүек ҡарап үтә башланы. Бәлки, буфетҡа кереп, тереһыу уртлап сығырбыҙ, төҫөгөҙ ҡасҡан.

Мин телемде әйләндererлек хәлгә етеп тынысланам:

– Беренсенән, таныш түгел әҙәм менән тереһыу түгел... – Һүҙемде әйтеп бөтөрөргә ирек бирмәйенсә, Сашка элеп ала.

– Ябай һыу ҙа уртламайһығыҙ, аңланым. Икенсенән, һеҙгә, ғөмүмән, "беренсенән" тип һүҙ башлаттырырға аслан ярмай – аргументтарығыҙҙы танк урынына ҡулланаһығыҙ, ҡаршы сығырлыҡ түгел. Өсөнсөнән, хаталарымды төҙәтергә һуң түгел – әйҙәгеҙ, мин ғәфү үтенәм һәм, ниһайәт, танышайыҡ!

– Ризамын. Тамара.

– О-о-о, Тамара, ханбикәләр исеме һәм күреп тороуымса – есеме! Әммә мин дә төшөп ҡалғандарҙан түгел. Һеҙҙең ҡолоғоҙ – Искәндәр Зөлҡәрнәйен. Ябай ғына ла мөмкин – Искәндәр Сәғитович.

Секунд эсендә бер яндым, бер туңдым һәм телһеҙ ҡалдым. Сашка – Александр Македонский – Искәндәр Зөлҡәрнәев... Йә Хоҙай! Былдай хәлдең тик минең кеүек уңмаған менән генә булыуы мөмкин ине! Сашка һәм Искәндәр Сәғитович – бер кеше, ҡот осҡос! Был осраҡта мин үҙемде нисек тоторға тейеш һуң, ә? Танытырғамы-юҡмы, йә Хоҙай, кемдән кәңәш һорарға?

– Тамара ханым, өсөнсө ҡыңғырау яңғыраны. Концертты ҡарап бөтәбеҙме, әллә...

Тиҙ-тиҙ генә башымда төрлө варианттарҙы байҡайым. Ложаға кереп ултырһаң инде... Юҡ, унда, беренсенән, теге "ҡапҡорһаҡ" бар, уның кәйефен ҡырыуға ҡарағанда, серле монар булып юҡҡа сыҡҡан хәйерлерәк. Икенсенән, төп маҡсатҡа ирештем – кәрәкле кешемде таптым. Хәҙер иң мөһиме – уны ҡулдан ысҡындырмау һәм кәрәкле документтарға ҡул ҡуйҙырыуға ирешеү!

– Өсөнсө ҡыңғырауҙан һуң буфет та ябылмаймы икән? Ысынлап та, тереһыуһыҙ шиңергә уйлайым, ахыры.

– Зарар юҡ, минең машинала шыйыҡлыҡтарҙың һәр төрлөһө лә йөрөй торған.

– Рөхсәт итһәгеҙ, бер шылтыратып алыр инем...

– Әлбиттә, Тамара ханым, әлбиттә.

Ҡалтыранған ҡулдарым менән кескәй генә клатч эсенән кеҫә телефонын һәрмәп ала алмай йөҙәнем. Унан, иҫәрләнеп, тоҡандыра алмай бер булдым. Етмәһә, тота килеп пин-код хәтергә төшмәй ыҙалатты. Рушаннаға шылтыратып, өҙөк-тәтек Искәндәр Сәғитович менән танышыуымды хәбәр иттем. Ә бына уның ысынында Сашка икәнен бер нисек тә әхирәтемә аңлатып еткерә алманым. Ниндәйҙер кәңәш бирер, тип өмөтләнһәм, телефондың аккумуляторы ла "ултырҙы". Хет асыуыңдан шартла. Машинала беҙҙән башҡа кәүҙәле генә ике егет тә бар ине. Йән көйөүенә түҙмәй, һалып бирелгән эсемлекте бер тынала түңкәрҙем дә... аңымды юйҙым...

* * *

Ҡайҙа ятам мин? Кипкән ауыҙымда телемде ҡутарып әйләндерергә маташам. Тәмһеҙ. Иҫтән яҙғанда гел ошолай ауыҙ тәмһеҙләнгән була. Шәкәрле сәй эсеп алам былдай саҡтарҙа. Әммә ул мәлдә иҫтән яҙыуға ниндәйҙер сәбәп була торғайны, мәҫәлән, мунсала башҡа еҫ тейеү. Ә әлегеһе бит хатта бик шикле шарттарҙа. Театрҙа инем. Сашка – Искәндәр. Машина... Бер кем дә башҡа һуҡманы, тимәк, сәбәп – эсемлектә. Ахмаҡ һин, Тамара, төптө ахмаҡ! "Дошманыңдың йортонда ашамаҫҡа, эсмәҫкә, йоҡламаҫҡа" тигән ябай ғына аҡылды оноттоңмо ни? Тормош томшоҡҡа тондороп тора, тәки аҡылға ултыртҡансы түгел, ә?!. Күҙемде асалаҡ-йомалаҡ килтереп ҡайҙалығымды аңларға маташҡанда, яҡында ғына бик тыныс, бер аҙ мыҫҡыллыраҡ интонацияла тауыш яңғырай:

– Шунан, экс-Золушка, спящая красавица хәленән арындығыҙмы, әллә берәй батша малайының килеп үбеүен көтәбеҙме?

– О-о-о, тағы ла разочарование! Батша малайы үҙе осранымы тиһәм, әпәт сираттағы әрмәнде. Ярай әле, быныһы үбешкәнгә тиклем асыҡланып өлгөрҙө! – Ҡапыл боролоп әңгәмәсемә күҙ һалам һәм секундтың ундан бер өлөшө арағыуында ғына сағылып өлгөргән эмоцияны күреп өлгөрөп, эстән тантана итәм. Бөтөнләй үк таш булып ҡатмағанһың әле, Искәндәр әфәнде, "Ахиллес үксәһе" ерҙәреңә сәпкә тейҙергәнсе бәргәнмен бит. Ярай, Тамара, артыҡ маһайма, оппонент яуап-маҙар уйлағансы, үҙ хәлеңде хәл итеүҙе ҡайғырт. Рушаннанан кәңәш һорарға шылтыратһам да, "үҙемде Сашкаға танытмаҫҡа!" тигән ҡәтғи ҡарарға

килгәйнем инде. Ни тиһәң дә, ваҡыт аяуһыҙ. Үҙ йәшемә хатта бик арыу күренһәм дә, ун һигеҙ йәшлек “мин” менән ярыша алмайым инде хәҙер. Ул саҡтағы ғәмһеҙ йәшлек матурлығын әлеге тормош тарафынан оролған утыҙ йәшлек ханымдың ваҡыт үтеү менән апаруҡ таушалған тәне менән йәнәш ҡуйып булмай. Эс тирәһенә бер нисә тапҡыр бик һуҙылырға тура килде, эҙҙәрен йәшерерлек түгел инде, тән бөтөнләй бүтән һәм үҙгәрештәр, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, матурлыҡ яғына түгел. Аһ, аяуһыҙ ваҡыт! Хәйер, ваҡыт аяуһыҙлығына түҙергә була ул... Хәтер аяуһыҙлығына түҙеп булмай. Үҙемдең баштан үткәргәс, ныҡ төшөндөм.

– Бер осрашыу күңелемдең аҫтын өҫкә килтерҙе...
– Һаумы, Тамара.
– Һаумы, тик мин һеҙҙе танымайым.
– Зөлхизә.

Был исем миңә бер нәмә хаҡында ла һөйләмәй. Иғтибар менән йөҙөнә ҡарайым, әммә был кәм тигәндә ҡырҡ-ҡырҡ биш йәштәрҙәге ханым менән ниндәй шарттарҙа танышыу мөмкинлегемде һис күҙ алдына килтерә алмайым.

– Һуң, Зөлхизә, Өфөлә бергә уҡығайныҡ...

Шул саҡтағы шаңҡыуҙан телһеҙ ҡалыуҙарым! Ун йыл буйы күрешмәгән курсташымды, хатта бер аҙ ваҡыт серҙәшемде танымасы әле! Зөлхизә. Йөҙөнән нурҙар сәсеп торған ғәжәп һылыу ҡыҙ ине ул. Республикала һылыуҡайҙар конкурсы яңы ғына үткәрелә башлаған мәл. Шунда Гран-при алған ҡыҙға нык оҡшағайны. “Шуның һеңлекәше мәллә?” – тип мөрәжәғәт итә торғайнылар. Ләкин күҙҙәренән осҡон борҡолоп, керпектәренән нур һибелеп торған, бешкән сейәләй ымһындырғыс иренле гүзәлкәйҙең бынау ҡарайған сирыш битле, ялтыр металл тешле, ҡараштары һүнгән әбей менән ни уртаҡлығы бар? Һөйләшһәм дә һөйләштем, һөйләшмәһәм дә һөйләштем... Аҡылым менән шул Зөлхизә икәнен аңғарһам да, ҡабул итә алманым. Әйтерһең дә, бөтөнләй ят кеше менән уртаҡ таныштарҙың хәл-әхүәлен белешәбеҙ. Мин ул осрашыуҙан бер нисә көн айный алманым. Рушаннаға шылтыратып хәбәр иттем, курсташыбыҙҙың аянысл хәле хаҡында фекер алышып уфтаныштыҡ, ихлас ҡайғырҙыҡ, хатта балауыҙ һығып алдыҡ... Хәҙер үҙемә Зөлхизә урынына ҡалырғамы? Алла һаҡлаһын. Сашканың күҙҙәрендә “о, ваҡыт, һин ни тиклем аяуһыҙ!” тип миңә ҡарата йәлләү күрһәм? Был кәмһенеүгә ҡарағанда әжәлең мең артыҡ. Үткәндәр үткәндә ҡалһын. Йәшлектәгенең ҡонон ҡайтарырға ҡыҙыҡмам тигән инем. Кем белһен инде Сашканың зәһәрләнгәнен. Ул, ана, һис уяулығын юғалтмаған. Нисегерәк һорау алырға тотондо. Имеш, кем тирмәненә һыу ҡоям, хәсрәт “Мата Хари”, етлекмәгән шпионка. Тамаша залында уҡ уға текләп, гипноз алымдары ҡулланып маташҡанмын. Барып сыҡмағас, махсус рәүештә аңдып тороп, баҫҡыста юрамал килеп бәрелгәнмен.

– Бәлки, мин һеҙҙең һуш китерлек сибәрлеккә күҙем сағылып ҡолағанмындыр, әфәндем?

– Бында шаярыу тоны урынһыҙ, ханым. – Һуңғы һүҙгә минең интонация менән баҫым яһап, боҙҙай һалҡын тауыш менән яуаплай Сашка-Искәндәр. – Яҡшылыҡ менән һорағанда яуап биргегеҙ килмәһә, насарлыҡ менән дә булдыра алабыҙ. Минең һаҡсы “бурҙай”ҙарҙы күрҙегеҙ, көс мөмкинлектәрен ҡатын-ҡыҙ һиҙгерлеге менән баһалап өлгөргәнһегеҙҙер. Бер тәүлеккә биреп ҡуйырмын үҙегеҙҙе унауһына бергә. Ете быуын олатағыҙҙың бөтә гонаһтарын да һөйләп бирерһегеҙ хатта. Әлбиттә, ауыҙ асып тел әйләндерерлек хәлегеҙ һәм мөмкинлегегеҙ ҡалған булһа... Һеҙ бая мине ит сабыусы менән сағыштырыуығыҙҙа ниндәйҙер хәҡиҡәт

тә бар ине. Был һеҙҙең алдан күреүсәнлек һәләтенең сағылышы икән, зинһар, мин әйткәнде эшләгәндән һуң һеҙҙең нәфис, йәш һәм, дөрөҫөн әйткәндә, ымһындырғыс тәнегеҙ менән ниҙәр буласағын күҙаллағыҙ ҙа был ҡыҙғаныс хәлде булдырмау юлдарын табығыҙ. Ышанығыҙ, мин бит бөтөнләй бәғерһеҙ түгел. Мине нисектер файҙаланырға тырышҡан һәр береһен язаға тарттыра башлаһам, исемем Гитлер менән бер рәттә торор ине. Аллаға шөкөр, әлегә улай түгел. Күрәһегеҙ, тәүҙә һүҙ менән генә тәьҫир итергә маташыуым.

Эҫеле-һыуыҡлы булып китәм. Мин аяуһыҙ тормоштоң һикәлтәләрен үтеп бөтмәнем, ахрыһы. Һаман аҡыл кермәгән. Власть эргәһендә ҡасан мәрхәмәтлелеккә урын табылғаны бар? Ниндәй аҫыл йөрәктәрҙе, яҡты күңелдәрҙе бөкмәгән ул? Кем уның аяуһыҙ көсөнә бирешмәгән дә шәфҡәт һәм миһырбан тулы кеше булып ҡала  алған? Ул бик йыраҡ йәшлектә генә  Сашка һинең өсөн әллә ни ҡурҡыныс тыуҙырмаҫлыҡ ине. (Дөрөҫөрәге, ул ваҡыттағы ҡурҡыныс нәмә әле ҡурҡыныс түгел – шунда ғына айырма. Әлбиттә, ҡурҡыныс кеше. Сашка һәр ваҡыт минең өсөн ҡурҡыныс тыуҙырҙы һәм тыуҙыра.) Әле ул айырыуса хәүефле кешегә әйләнгән. Сөнки ҡулында власть һәм буйһонорға тейешле әҙәмдәр бар. Бер ымлауы булыр, ҡулың – ҡулса, ботоң ботса ботарлап та ташларҙар. Итеңде ырғытты ҡуйҙы берәҙәк эттәргә йәки берәй котлованға... Әҙме ни әҙәм һөйәктәрен юҡ итер ерҙәр. Бер кем дә эҙләмәҫ тә, белмәҫ тә. Ике улың ике көсөктәй шыңшып алыр ҙа үҫә-бара онотор. Яҡлар-ботлар кешең бер ҡасан да булманы һәм булмаҫ та. Һәр саҡ был донъяла артыҡбикә булғаныңды, үлгәс кәрәгең ҡалыр тип беләһеңме?

Ҡурҡышымдан таш һынға әйләнә башланым, ә Сашка торған һайын аяуһыҙыраҡ.

– Минең сибәрлегемә ҡағылышлы һүҙҙәрегеҙгә мин, әлбиттә, ышана  алыр инем. Тәүҙә хәлдең шулай булыуында шикләнмәнем дә. Хатта шундай көйәҙ ханымдың иғтибары ирлек тәкәбберлегемә май булып яғылды. Әммә ярҙамсыларымдың береһе һеҙҙең телефондан ни һөйләгәнегеҙҙе ишетеп ҡалған. Абайһыҙлыҡ ҡылғанһығыҙ, кем, Мата Хари! Абайһыҙлыҡ! Шпион ул аҡыллы һәм сибәр генә түгел, нығыраҡ иғтибарлы һәм түҙемле булырға тейеш. Ниңә инде танышыр-танышмаҫ отчет ебәрә башларға? Етмәһә, кем тип бит әле! “Сашка”, имеш. Кемгә – Сашка, ә кемгә – Искәндәр Сәғитович...

Кешене стенаға килтереп терәргә ярамай ул. Сөнки юғалтыр нәмәһе  лә ҡалмаһа, иң йыуаш кеше лә арыҫландай дошманға ташланырға һәләтле. Минең дә был  хәлгә асыуым килә башланы. Нимә һуң был? Ниндәй шпионлыҡ, ниндәй разборка? Ниндәй гонаһым өсөн мин үлемгәме, зәғифлеккәме дусар ителергә тейеш? Яҡлаусыһы булмаһа ни... Яҡлаусыһыҙ кеше булыуҙан туҡтайһыңмы ни? Мин үҙем яҡлаусы – улдарыма. Улар, йәтим ҡалып, кеше күҙенә ҡарап ултырырмы, бынау  чиноshaның..... башына тай типкән тип?

Минең ҡарашым ҡапыл туфлиҙарыма төштө. Улар төҙ генә, ҡупшы ғына торалар. Келәм өҫтөндә, йыраҡ та түгелдәр. Ә кем  улайтып ҡуйған? Был бит – тап Сашканың ғәҙәте. Уның минең алда өлтөрәп йөрөй торған холҡо бар ине. Кейемдәремде һыйпап-ҡағып урынлаштыра, хуш еҫле күбектәр менән ванна яһай, сәй артынан ҡуҙғалмайым да – ҡулға килтереп тоттора... Ботарлатыр  өсөн һаҡсыларына ырғытырға торған фәхишәнең туфлиҙарын шулайтып ҡуялармы ни?

Уйҙарымдың был юҫыҡҡа тәгәрәүе ҡапыл ҡурҡыу бығауҙарымды ысҡындырып төшөрҙө. Минең баш күтәрелде, кәүҙә турайҙы, ирендәремә йылмайыу йүгерҙе.

Хәсрәт манипулятор! Был бит блеф, ҡоро һүҙ менән ҡурҡытыу! Кеше күберәк кеше һүҙенән түгел, үҙенең фантазияһы эшмәкәрлегенән ҡурҡыуға бирелә. Бына мин дә ахмаҡланып барам. Сашканың арлы-бирле кинәйәләренән әллә ниндәй уйҙарға бирелеп, ахмалға төшөп ҡурҡып, үҙемде табутҡа апарып һалдым хатта! Нисауа, ҡасандыр һине алдымда теҙләнергә мәжбүр итә алғанмын икән, моғайын, төшөп ҡалғандарҙан булмағанмындыр. Тик ул ваҡытта, үҙ файҙамды ҡайғырта белмәгәнмен. Искәндәр был ваҡытта, үҙ-үҙе менән һоҡланыуға артыҡ бирелеп, миндәге үҙгәреште абайламай ҡалғайны. Бына ул эсемлек һалып алған бокалын тотоп, минең яҡҡа боролдо. Уның бер секундлыҡ аҙауынан файҙаланып, мин өҫтөмә ябылған пледты һирпеп ырғыттым.

– Искәндәр, әйт әле, мине бында һин үҙең күтәреп килтерҙеңме, әллә теге егеттәреңме? – Үҙем көткән реакцияны күреп, эстән генә тантана итәм. – Әлбиттә, үҙең. Бына бит, тубыҡтар тубыҡҡа терәлгән, итәк таушалмаҫлыҡ итеп яҙылып ябып ҡуйылған. Ә был йомшаҡ плед? Унан һинең еҫең килеп тора. Ҡайҙа тәмләп ҡарайым әле, вермутмы? Әлбиттә, вермут, мотлаҡ ике кубик боҙ менән. Ҡайҙа ванна бүлмәһе? Болоттай күбек менән тулған ванна әҙер түгел икән, исемем Тамара булмаһын!

Бер туҡтауһыҙ һөйләнеп, Искәндәргә айнырға ирек бирмәнем. Уның бер нәмә лә аңламай ҡалыуынан файҙаланып, ванна бүлмәһенә кереп тә бикләндем. Уф-ф-ф! Күҙемде баянан бирле ҡырып этләткән линзыларҙы сисеп, раковинаға бәрҙем. Хушығыҙ, минең ялған "күҙҙәрем"! Хуш, минең ялған битлегем, шаҡ ҡатырылған прическам! Тәнем ҡалтырауын ваннала йылыға күмелеп ятыу бер аҙ баҫты. Ох, нервылар! Ярай әле, бая, Искәндәр ҡаршыһында, "ысҡынманылар"! Ул инде бер нисә тапҡыр килеп, ванна ишеген шаҡып китте. Иҫенә килгәндер инде, миңә яңы психик атака әҙерләне, буғай.

Шунан, Тамара, нишләйбеҙ? Үҙеңде танытмай ғына эш ҡыйратып булманы, былай булғас. Танытырға тура килә. Эх-х. Танытҡы килмәгәйне, юҡ! Ярай, тынныслан. Һәр нәмәнең яҡшы яғы бар. Йәшлеген һәр кем яратып иҫкә ала. Йәшлек хәтергә төшһә, бәғер йомшай, йоҡоға талған яҡшы сифаттар уяна. Ваҡытлыса, әлбиттә, әммә уяна. Ә миңә тап шул бер нисә минут йомшаҡлыҡ менән урынлы файҙаланырға һәм кәрәкле ҡағыҙҙарҙы эшләтеп алырға ғына кәрәк. Эйе, ни бары бизнес, ни бары... Шундай уйҙар менән мин ваннанан сығам, яҡшылап һөртөнәм һәм йомшаҡ халатҡа уранам. Ни булһа – шул булыр...

– Ха-ха-ха! Мин шулай тинемме? Хатта теҙләндемме?! Вәт иҫәр, ә? Шундай һүҙҙәр һөйләнемме: «Я-ра-там»? Мин шулай тип әйттемме? Ха-ха-ха... Кемдән оттом икән былай ахмаҡлыҡты? Берәй кинола күргәнмендер...

Битемә ахмаҡ йылмайыу йәбештерҙем дә шаңҡып тик ултырҙым. Ғәрлегемдән өнөм тығылды, бер һүҙ әйтә алмайым. Ә Сашка көлә лә көлә. Ҡапыл, уның көлөүен ниндәйҙер үкһеүгә оҡшатып, һиҫкәнеп китәм. Күҙҙәренә ҡарайым. Тап шул ваҡытта, ул быялаларын һөртөргә була, ярайһы уҡ ҡарайтылған күҙлеген сисеп, ҡайҙалыр бушлыҡҡа текәлде. Уның күҙҙәрендәге миңә ныҡ таныш оло һағышты күреп тетрәндем. Аһ, ошо ҡараштар. Шул ҡараштарҙан мин телһеҙ ҙә ҡалам, быуынһыҙ ҙа. Күпме шарҡылдап көлгән булды ул әле генә, күпме минең хистәрҙе мыҫҡыл итте! Ә үҙенең күҙе тулы бына-бына түгелергә торған мөлдөрәмә хәсрәт. Теге ваҡытта ла шулай ине. Шул ғәм тулы, зар тулы ҡараштарға арбалдым да сөңгөлөнә баттым. Белә ул үҙе тураһында. Ниндәйҙер уҡытыусыһы әйткән. Шунан бирле быялаһы ҡарайтылған күҙлек кейә. Минең менән икәүҙән-икәү ҡалғанда ғына сисеп ырғыта торғайны. "Һинең менән генә

үҙем була алам», – тип әйткәне булды. Ә хәҙер иҫләмәй, миңә нимә һөйләгәнен түгел, хатта таныш булғанды ла. Ғәрлек. Илағы килә. Үҙемде көс-хәл тыйып ултырам.

– Туҡта, һинең әле генә күҙҙәрең ҡуңыр ине түгелме? – тип ҡысҡырып өндәшеүгә тертләп, күтәрелеп ҡарайым.

– Әлләсе, ғүмер буйы йөрөткән күҙҙәрем инде. Сәгер. Күҙҙәрең йәйғор һымаҡ, тип тә әйтә торғайның әле, етмәһә, бөтә хистәр сағылып тора, хәйләләшә белмәйһең, тип. Мин, бахыр, ышанған булдым.

Минең үпкә һүҙҙәремде тыңламай ине ул. Алдыма килеп теҙләнде лә үҙенең туп-тулы зарлы ҡараштары менән туп-тура миңә текләне.

– Был – һин! Был – һинең күҙҙәр!

Был юлы мин хахылдап көлдөм. Илағансы. "Искандәр Сәғитович сәгер күҙҙәр яратмай" тип төҫлө линзалар кейергә тура килгәйне бит. Ҡырыуына түҙмәй сисеп ырғыттым да, оноттом да. Ә әле, Искәндәрҙең тура ҡарашын күтәрә алмай, күҙҙәремде йомам. Йәнем аҡтарылып бара. Хыянатсыл күҙҙәр! Йәшкә мансылып, мине оятҡа ҡалдыралар!

– Хәҙер иҫемә төштө. Ысынлап та, алдай белмәй шул күҙҙәрең. Көҙгөгә ҡараған һымаҡ булдым. Әллә туп-тура йәшлегем күҙенә ҡараныммы? Иҫең китер: мин шундай һүҙҙәр һөйләй алғанмын! Мин ғашиҡ була алғанмын! Күңелгә наҙлы хистәр тулған заман булған, әй?! Беләһеңме, беҙ байрам... түгел, ни түгел, кистә лә фейерверк аттырып, урам тултырып шаярып-көлөп йөрөй белә инек. Ниндәйҙер дыуамал ҡылыҡтарға һәләтле инек! Алйот йырҙар йырланыҡ, шашып бейенек, донъяны үҙгәртеп ҡора алыуыбыҙға шикләнмәнек... Ә хәҙер? Йылдар буйы дуҫтар менән хатта шылтыратышмайбыҙ ҙа. Йыр тыңлаған да юҡ, бейеү түгел, артыҡ аҙым баҫырға ла йыбанабыҙ. Олоғайған һайын, донъя ҡыҙыҡһыҙ һымаҡ. Йәшлек яныуҙары-ярһыуҙары – бер мәғәнәгә лә эйә түгел икән. Донъя нисек ҡоролған, шулай тәгәрәп тик тора. Ә беҙ – шул тәгәрмәс араһында иҙеләбеҙ, ваҡланабыҙ, шунан саңға әйләнәбеҙ...

– Ватылабыҙ, ваҡланабыҙ – ул беҙ, ябай халыҡ. Һин беҙҙең исемдән һөйләшмә, килешмәй. Һин тап шул арбала дилбегә тотоп ултырыусылар рәтенән. Тик был темаға бәхәс башламайыҡ, йәме. Беҙгә тиклем әллә нисә меңәр йылдар буйы иң яҡты аҡыллы, алтын башлы философтар том-том трактаттар яҙып та, донъяның айышына төшөнә алмағанды, беҙҙең бәхәс кенә мәсьәләне хәл итмәҫ.

– Һәр ваҡыттағыса, һин хаҡлы. Ысынлап та, теманы тарайтыу иң отошлоһо булыр. Һөйләп ебәр: ҡайҙаһың, кемһең? Йылдар һиңә килешкән. Быға шатмын. Күрәһең, яҙмышың насарҙарҙан түгел. Быныһы минең ирлек сәмемә ныҡ тейҙе, йәшермәйем. Һине мин генә бәхетле итә алырға тейеш инем. Ә һин минһеҙ ҙә бына тигән: сибәр, һауалы, көслө. Һин бер кемгә лә буйһонмайһың, бер нәмәнән дә ҡурҡмайһың. Мин һиңә йәш ҡыҙ сағыңда һоҡлана инем. Ләкин әле һинең тағы ла ныҒыраҡ һоҡланырлыҡ икәнеңде күрәм. Һөйлә әле, һөйлә, тауышың танһыҡ, тыңлағым килә.

О-о-о, башланды. Китте бит эреп, хыянатсыл күңел! Теле менән йыланды ла арбай инде ул! Ниндәй ҡатын-ҡыҙ түҙһен, ти, был һайрауға? Ул бит әле бөтә йөҙөнә, тауышына шул тиклем ихласлыҡтар һалып һөйләй белә. Ышанмаҫ ерҙән ышанырһың был донъяла үҙеңдең берҙән-бер ҡабатланмаҫ, тиңһеҙ фәрештә икәнеңә. Хәҙер һөйләгәнеңде мөкиббән китеп тыңлап ултырасаҡ әле, ауыҙыңа керерҙәй булып. Һәр бер ҡылығыңа һоҡланыуын белдерәсәк, әленән-әле комплиментттар менән күмәсәк, ҡулдарыңды ҡәҙерләп үбәсәк. Һәм бөттө –

еңеләһең, уның иркенә биреләһең, һәм аҙағынан ул буйһондороусы булып ҡаласаҡ. Был сценарий миңә таныш. Ә таныш яу, билдәле, һуғышырға уңайлы.

– Тимәк, һин – веселая вдова?

Уның, йәне көйөүен һиҙҙермәҫкә була, юрамал ғәмһеҙ интонация менән әйткәнен аңлап, көлөмһөрәйем.

– Эйе,– тим үҙем дә айырата ғәмһеҙлек менән. Шул арала йәшен тиҙлегендә бөтөн күргән-кисергәндәр күҙ алдынан үтә. Иремдең ҡар өҫтөнә һуҙылған кәүҙәһе, ҡара ҡойолған туғандары, мине ҡарғай-ҡарғай бәргеләнеп илаған ҡәйнәм, баҫырауҙай кәүҙәһе бөрөшөп, бәп-бәләкәй тороп ҡалған ҡайным. Ярҙырырға, юлына, кәфененә, хәйеренә, тағы әллә нимәләренә аҡса еткерә алмай, һорансылап ауыл буйлап йөрөүҙәр. Өсөн, етеһен үткәрер-үткәрмәҫ әллә ауырлыҡ төшөүҙән, әллә кисерелгәндән “ҡыҙ булырмы” тип көтөп йөрөгән ауырымдың эсемде үлтереп һыҙлатып төшөүө. Ҡанһырап бер дауаханала – үҙемдең, икенсеһендә оло улымдың ауырып ятыуы. Ҡайтыуыма донъямдың аҫтын-өҫкә әйләндереп, ҡәйнәмдең ат, һыйыр-башмаҡ, арба-сана, ваҡ-төйәк, ҡош-ҡортто ҡыуып алып ҡайтыуы, өй ҙурайтырға тип буралған төкөтмәне ҡәйенбикәнең һүтеп алып ташытҡаны, булған бензобысҡы, башҡа ир-ат ҡоралдарын үҙҙәренекеләй күреп һатып ебәреүҙәре, үҙ көсөбөҙ менән һалып ингән өйҙән дә ҡыуып сығарырға маташып судлашып йөрөүҙәре... Ҡыш уртаһында ике баламды ҡосаҡлап бер шырпы утынһыҙ һыуыҡ өйҙә тороп ҡалыуым, кеше яллап ҡушырға тиһәң, муйындан бурысҡа батып, аҡсаһыҙ ултырыуҙарым. Бар халыҡтың ҡырын ҡарашынан, ҡәйнәм ҡәһәрләүҙәренән, артымдан да, алдымда ла ғәйбәт сәйнәүҙәре, һаулашып ҡына уҙған һәр мужикка ҡушып нахаҡ һөйләүҙәре. Бер ҡайнағам, бахыр, ситләтмәҫкә тырышты. Бер ул ғына минең ике баланың уларҙың фамилияһын йөрөткәнен, өләсәләренең асылда уларҙың өлөшөн тартып алыуҙарын аңлай ине. Тамам көрсөккә терәлгәндә, ул бер ат йөгө (аты ла, әпсендәре лә беҙҙеке булһа, ни эш бар) утын килтереп, бысып-ярып китте. Ауыл ғәйбәтселәренә шул етә ҡалды. Бер заман апһын, меҫкен, ярһып килеп, мине “аҡылға ултырыу, намыҫҡа саҡырыу” сәхнәһе ойоштороп китте. Мин ни иларға, ни көлөргә белмәй аптырап тороп ҡалдым. Бинахаҡҡа йәберләнеүемә илағым килһә, күп эсеүҙән, ғүмер буйы ауыр эш башҡарыуҙан таушалып бөткән, тешһеҙ һәм һирәк сәсле, иллегә етеп барған ҡайнағамды ир итеп күрә алыуым мөмкинлегенә ышанып, көнләп маташҡанына көлкөм килде. Бөтөн рәнйеүҙәрем, йәшем бөткәнсе илауҙарым, улдарым өсөн һыҡрауҙарым... Барыһы ла күңелде һыҙлатып иҫемә төшөүенә албырғап, баш сайҡаным:

– Эйе, веселая вдова. – Ҡәйнәмдең, уға ҡушылып бөтә ауылдың ғәйепләгән һүҙҙәре иҫемә төшөп, шуларҙы ҡабатлайым. – Ир бысрағы йыумайым, бер кем ҡолаҡ итен сәйнәмәй. Ике улыма килгән пенсия аҡсаһына рәхәтләнеп типтереп йәшәйем. Ул льготалары ғына күпме!

Искәндәрҙең ҡарашында йәшерен аптырау ғәләмәте сағылғанын күрәм. Ул минең ысынлап та елбәҙәкме, әллә юрамал шулай булып күренергә тырышыуыммы икәнен һынарға, асыҡларға маташа. Ә минең, нишләптер, уның менән үҙемдең тәрән кисерештәремдә, түгелеп китерлек һағыштарымды уртаҡлашҡым килмәй. Хәйер, уның менән генә түгел, башҡа бер кем менән дә. Сөнки улар тик минеке, минеке генә. Уй-ҡайғыларымдың бер тамсыһы менән уртаҡлашһам да, ярлыланып ҡалырмын, үҙем булыуҙан туҡтармын һымаҡ. Кешеләр, ни уйлаған булып, эс-бауырыма керерҙәй итеп хәл һорашҡан була икән был донъяла? Ҡайғыңды күтәрешерҙәй, һәр күҙ йәшеңде бриллиантҡа

тиңләп ҡәҙерләрҙәй булып ҡыланалар, ә ысынында иһә күптән билдәле ул хәҡиҡәт: кешенеке кештәктә. Уртаҡлаша икән, ул ни бары тыш күңелдән генә, үлә-бата яҡшы кеше булып күренергә ынтылыуҙан ғына. Ни бары шул. Әлбиттә, был кешегә ышанмауым минең, ышанмаусанлыҡ һыҙатым ғына булыуы мөмкин. Бәлки, кеше ҡайғыһын үҙенекеләй итеп ҡабул иткән ихлас һәм изге кешеләр ҙә барҙыр? Әллә инде. Булған осраҡта ла, Искәндәр улар рәтендә бер ҡасан да торманы һәм тормаç. Ул минән былай циник. Миңә лә унан йоҡҡандыр был сир. Йоғошло ауырыу кеүек. Йоғошло булмаһа, бөтә кешелек донъяһының күпселек өлөшөн ялмап ала алыр инеме ни ул? Уйҙар был темаға кереп китһә, бөттө, сыбыртҡы шартлатып ҡыуып та йыйып алып булмаç. Шуға, бына нисәнсе тапҡыр инде, был бысраҡ донъяла йөрөп ятыуымдың маҡсатын көсләп иçемә төшөрәм: эйе, нимә әле? Ә-ә-ә, имза, рөхсәт хаты. Мин тағы Искәндәрҙең күҙҙәренә туп-тура бағам һәм ихлас йылмаям. Бергә үткән ғәжәп матур сағыбыҙҙы уның иçенә төшөрәм. Онотам, тип үҙ-үҙемде алдап йәшәгәнмен икән. Ваҡ-төйәгенә тиклем иçтә, ҡәһәрең. Һағынышыуға түҙә алмай, маршруткала алты туҡталыш буйы үбешкән дә әле генә һымаҡ. Ҡайҙа унда халыҡтан оялыу! Күҙгә кеше күренмәй, барлыҡ йыһанда беҙ икәү генә... Үҙ-үҙемде, тирә-яҡты, ысынбарлыҡты, ваҡытты онотҡансы, онотолоп, ярһып мөхәббәт даръяһына башкөлләй сумыуым шунда... Башҡа бер кем менән дә ҡабатланманы ундай кисерештәр: бер кемдең ҡарашында батманым, бер кемдең ҡосағында иремәнем, үҙ-үҙемде онотманым... Эй, Хоҙайым, шул тиклем дә... Шул тиклем дә йәшәмәгәнмен, үлек булғанмын нисә йылдар, ә? Тамырҙарың буйлап ҡайнар ҡандың урғылып-ярһып аҡҡанына түҙә алмай, хистәреңә тонсоғоп, йөрәгең шартларҙай булып, алҡымыңа килеп тығылғансы яратыуым... Бер “ах” тиеүе менән Йософтоң ҡамсыһын көлгә ҡалдырған Зөләйханың хәлен аңлайым мин! Ҡамсы түгел, әллә нәмәң көйрәп янып китер был ялҡынға. Бәй, нисә йылдар “һүнгән” тип йөрөгән ҡуҙҙар әллә ҡабат терелергә маташа? Тәүбә-тәүбә. Йәш сағында бәхет килтермәгән был хискә хәҙер, ҡарыуым бөткәс, бирешһәм нишләрмен? Ауыҙ бешеү генә нисауа, бында бит...

Аҙмыштары өсөн яуап тотҡан ике балам барлығы иçемә килтерә. Ҡатын-ҡыҙ тәбиғәтен әсәлек инстинкты һәр ваҡыт еңә, Аллаға шөкөр. Бына бит, мин тағы иçемә килдем, аҡылыма ҡайттым. Ипләп кенә әңгәмәне үҙемә кәрәк юçыҡҡа борам. Искәндәр менән икебеҙҙең оҡшашлыҡҡа йәнем һыҙыла. Һыҙыла ғынамы – һулҡылдап-һулҡылдап әрней. Беҙҙең аҙмыш бер нисек тә оҡшарға тейеш түгел ине бит. Ул – иркәлектә үçкән яңғыҙ бала. Ни теләһә – шул алдында, бөтә тарафҡа – таҡыр юл. Сибәр, аҡыллы. Бәхетле булырға бер кем ҡамасаулай алмай. Бер кем дә, бер ниндәй сәйәси-иҡтисади бороloштар ҙа, бер ни ҙә... Байлыҡты быуыныңа етерлек туплап ҡуйғандар. Елдер иң яҡшы машинала, биш булмағайы, илле биш йондоҙло отелдәрҙә типтереп ял ит. Карьера баçҡысынан үрмәләргә ялҡауың килһә – лифт менән мен! Барыһы ла алдыңа “мә!” тип килтереп ҡуйылған. Ҡатыны үҙе кеүек ҡатламдан, тәрбиәле, супермоделдәрҙән былайыраҡ, ҡайҙа ҡултыҡлап барһаң да оялырлыҡ түгел.

Ә Искәндәр тормошонан ҡәнәғәт була алмай. Нимәлер етмәй уға. Ул “нимәлер”ҙе бер ҡасан да тапмаясаҡ, ирешә алмаясаҡ. Шуға уның күҙҙәре тулы һағыш, әрнеү. Ул бит мөхәббәттә лә ниндәйҙер ҡомһоҙ. Тән генә уға етмәй, ул бөтә йәнеңде һурып ала. Бөтөн донъяла һин тик уны ғына Алла дәрәжәһенә мендереп яратырға һәм табынырға тейешһең. Шуға өлгәшә бит әле үҙе. Шунан, бөтә хистәреңде һығып алып бөтөргәс, кәрәкмәгән сепрәк ише, ташлап та китә.

Бер тапҡыр Искәндәр ҡапҡанына эләккәнһең икән, һин инде башҡа бер ҡасан да башҡаны ярата алмаясаҡһың. Ниндәй яратыу? Йәшәргә көс ҡалмай – вампир ише, һурып бөтөргән. Мин ана нисә йылдар буп-буш ҡыуыҡ ише инем. Күңелемдә бер нәмә юҡ. Нисә йылдар мин мейемә лә уны хәтерләмәҫкә, уйламаҫҡа ҡушып йәшәнем. Оноттом тип иҫәпләнем, әммә... Ниңә минең күңел урынында түгел ине? Ниңә мин ошо шаулы  мәркәзгә әжәлгә дарыу артынан килгәндәй атлығып, талпынып, ашҡынып килә инем? Аяҡтар ниңә үҙҙәренән-үҙҙәре униң менән бергә йөрөгән һуҡмаҡтарға ғына боролоп тик тора ине? Быларҙың барыһын да аңламамышҡа, тоймамышҡа һалыштым. Йәшлекте һағынып, хәтирәләр барлап ултырманым. Ҡулымдан килһә, уй тигән нәмәне берәй ситлеккә бикләп ҡуйған булыр инем.

Тырышлыҡтарым бушҡа китмәне, әлбиттә, – хатта, ана бит, осрашҡанда танымаҫҡа маташтым. Оҙаҡ итеп иҫләгән кеше булдым. Ул икона кеүек күҙ алдында бер туҡтауһыҙ баҙлап торған образды, әйтерһең, онотоп була. Тора-бара бер ерең һыҙлауына нисек өйрәнеп китәһең, күңел әрнеүенә лә өйрәнәһең. Ул әрнеп тик тора, ә һин тышҡы тормош менән йәшәгән булаһың. Яҙ нимәлер сәскән булаһың, көҙ – йыйған. Берәй таныш бисәнең ғәйбәтен тыңлап, ҡушылып сәйнәгән булаһың, кемдер көләмәс һөйләһә,  аҡырып көлгән булаһың... Үҙ-үҙеңде алдарға маташҡанһың, ә ысынында ул һине алдаған! Мейеңдән бөтә хәтирәләрҙе, уйҙарҙы ҡыуып сығарғанһың – ул һинең ҡаның менән ҡушылған да бөтә ҡан тамырҙары буйлап һулҡылдап тик йөрөй. Шул кешене йәшәтеүсе биш литр һутты үҙеңдән һығып сығарһаң, шунда ғына ысынлап оноторһоң  беренсе мөхәббәтте.

– Беләһеңме, һин бит был донъяла мин ратҡан берҙән-бер ҡатын-ҡыҙ. Ул һүҙҙе башҡа бер кешегә лә әйтмәнем  мин? Сибәрерәктәр ҙә булды, аҡыллыраҡтар ҙа, береһе лә йөрәкте тетрәндермәне. Ә һинең бына ошолай шым ғына ултырыуыңдан да әллә ниндәй моң ағыла. Сәсрәһен донъяһы, сәсрәһен барыһы ла, әйҙә, икәү берәй утрауға олағайыҡ! Икебеҙ генә шунда йәшәйек, Әҙәм менән Һауа шикелле, әйҙә?! – Ул, сарсап килгән юлсы шишмәгә ташланған шикелле, ярһып-шашып  ҡул суҡтарымды үбә башланы.

Нисек йөрәгемде телгеләгәнен аңлармы  бер заман? Ниңә шул тиклем язалай икән ул мине? Ана-бына ышанырға, ҡабат аҡылдан яҙырға торам да һуң. Ләкин ярамай. Был һүҙҙәр – ни бары ялған, алдаҡ. Ағыулы йылан да Искәндәрҙән мәрхәмәтлерәктер – саға ла бөтә. Ә был – анаконда, быуар йылан. Ә мин, ҡорбан ҡуян кеүек, илай-илай әжәлемә – униң ауыҙына кереп барам. Йә был гипноздан айнып ҡотолаһың, йә тағы бик күп йылдарға йәшәү һәләтен юғалтып, ҡоро буш тән булып тороп ҡалаһың. Ә бит нисек уға ышанғы, ҡосағында онотолғо, шашып-ярһып һөйгө-һөйөлгө килә!  Нисә йылдар ут йотоп йәшәүемә күрә,  бер остоҡ ҡына бәхеткә лайыҡ түгелме ни мин? Бәлки, ошо мәл өсөн генә йәшәгәнмендер бығаса? Бәлки, минең тормошомда тороп ҡалһа, ошо мәлдән дә әһәмиәтлерәк бер ни ҙә булмаҫ? Ни файҙа һуң һинең оҙон-оҙон ғүмер кисереүеңдән, аҙағында ҡоро үкенестәр генә? Минең ҡулдарым, ихтыярымдан тыш, Искәндәрҙең сәстәрен, яңаҡтарын һыйпай башлағайны инде. Инде аҡылым да, хистәр көсөнә буйһоноп, “сәсрәһен донъяһы” тип битараф ҡына сигенмәксе ине. Бәхетемәме, бәхетһеҙлегемәме, ишекте туҡылдаттылар. Теге армайҙарҙың береһе Искәндәргә телефон һона. Бер нисә секундтан минең һөйөклө кешемдең бер нәмәһе лә ҡалманы. Искәндәр Сәғитович пинжәген кейҙе, галстугын рәтләне һәм бер ниндәй ҙә эмоция  сағылмаған йөҙө менән миңә боролдо.

– Бына нимә, хөрмәтлем. Яуаплы хеҙмәтем арҡаһында һеҙҙе лайыҡлы дәрәжәлә ҡәнәғәтләндерә алмағаныма ғәфү үтенәм. Һеҙҙең менән осрашыуҙан ниндәйҙер күңел күтәренкелеге алыуымды иҫәпкә алғанда, бик ҡыҙғаныс. Һеҙҙә лә, миндә лә ниндәйҙер көҙөк ҡалмаһын өсөн, былай тәҡдим итәм. Бына минең визиткам, ниндәйҙер шәхси йәки башҡа төрлө мин хәл итерҙәй проблемағыҙ тыуа ҡалһа, дүшәмбе 11 сәғәт 45 минутта минең 10 минут ваҡытым буласаҡ, шунда мөрәжәғәт итегеҙ. Минең хеҙмәткәрҙәрем иҫкәртелгән, һәм бер ниндәй ҙә тотҡарлыҡ булмаясаҡ. Ә хәҙер, ҡабатлап ғәфү үтенәм, һеҙҙең йәмғиәтте ҡалдырырға мәжбүрмен. Номер өсөн түләнгән, киске ашҡа заказ бирелгән, тыныс күңел менән иртәнгә тиклем ошонда ҡала алаһығыҙ. Һау булығыҙ!

Унының артынан ябылған ишеккә ҡарап, шаңҡып ултырып ҡалдым. Бына шулай. Ниндәйҙер шылтыратыу, ҡарайтылған күҙлек, ҡиммәтле галстук – һәм минең Сашкам Искәндәр Сәғитович әфәндегә әйләнде. Ярай әле, мин ярыҡ ялғаш янында түгел, арыу ғына ҡунаҡхананың бик арыу бүлмәһендә тороп ҡалдым. Был да насар түгел. Ҡайҙалыр урман ситендә төн уртаһында ас-яланғас, аҡсаһыҙ һәм япа-яңғыҙ тороп ҡалыу менән сағыштырғанда. Ярар, тимәк, бөтөнләй үк бәхетһеҙ түгелмен, ошоға ла риза бул, Артыҡбикә!

* * *

Бер нәмәгә ҡарамаҫтан, ауылға еңеүсе ҡиәфәтендә ҡайтып керҙем. Алып ҡайтҡан ҡағыҙҙарҙы иғтибар менән ҡарап сыҡҡас, хужаның ҡәнәғәтләнеүе йөҙөнә сыҡты.

– Рәхмәт, Тамараҡай, рәхмәт. Нисә йылдар хәл ителмәй ятҡан мәсьәләне хәл иттерҙең бит, әй. Хәйер, һинең талантыңа тамсы ла шикләнмәгәйнем. Мине лә өйрәт әле шунда берәй приемчиктарыңа. – Ул, йомро ҡорһағын еңел генә күтәреп, өҫтәл артынан сыҡты ла миңә табан ыңғайланы:

– Ох, Тамараҡай, мин әйтәм, торған һайын матураяһың, торған һайын сибәрләнәһең...

– Торғоҙма һуң, ниңә торғоҙаһың! – Ныҡ ҡына дорфа тауышҡа өҫтәп, тупаҫ ҡына этәп ебәрҙем дә кабинеттан сығып олаҡтым. Коридорҙа ҡаршыма хужаның ҡәйенбикәһе осраны. Ҡағыҙҙар тотҡан, йөҙ-һынына харап эшлекле ҡиәфәт йәбештергән. Бухгалтерия яғына былай ғына һуғылһам, "трудовой"ымды тоттороп та сығарҙылар.

Шулай, мин тағы эшһеҙ. Тағы бер кәрәкһеҙ имгәкмен. Был юлы бәхетем юҡлығына ғәжәпләнергә лә, ғәрлектән иларға ла хәлем ҡалмағайны. Иламаным. Өмөттәрем киҫелеүе беренсе тапҡыр түгел бит инде, инде нисәнсе тапҡырға үҙемдең был донъяла артыҡбаш икәнемә инанам.

Ҡыҙыҡһыҙ ғына, күңелһеҙ генә ҡыш килде, Яңы йыл байрамдары үтте. Ирҙең йыллығын был юлы билдәләрлек хәл булманы. Ҡәйнә тигән есемдәргә сәйнәнергә бер сәбәп. Утын килтерт, быстырт, ярҙырт. Һәр береһенә көнлөгөн түлә, аяҡтан йыҡҡансы һыйла. Бер баланың аяғына, икенсеһенең өҫтөнә кейем йүнәт. Бына пенсия аҡсаһы бөттө-китте. Улар шуны уйлаймы ни? Ҡайнаға, бахыр, апһындан йәшереп тигәндәй, ике тоҡ фураж килтереп ырғытты. Хаҡын бирҙем. Эй намыҫланған булды, балалар хаҡын иҫенә төшөрҙө, уфтанды, ишек төбөндә тапанды, әммә аҡсаны барыбер кеҫәһенә һалды. Бер нисә тапҡыр ярҙамы тейгән күрше йәш ирҙе миңә ҡушып һөйләп сығарҙылар. Мин инде, өйрәнгән баш, үткәреп ебәрҙем. Ә килен балаҡай бик бөтөрөнгән икән. Ул шикләнер булғас, халыҡ ныҡ һөйләгән булырға тейеш. Аптырағас, өйөмә саҡырып, сәй

эсереп, аңлаштыҡ. Мин үҙемдең мөхәббәт тарихын һөйләп эс бүҫкәрттем, ул үҙен кимереп торған шиктән арынып, кәйефе асылды.

Шулай итеп, ниһайәт, яҙҙы көтөп алдым. Яратам мин яҙ миҙгелен. Тығыҙ, көслө, йылы елдәрен яратам. Боҙҙан арынған йылғаның ҡолаҡ тондороп шаулаған тауышын яратам. Тегендә-бында күләүектәрҙә турғайҙарҙың һыу инеп быстырҙауҙарын күҙәтергә яратам. Ә шулай ҙа иң яратҡаным – торна туптарын күҙәтеү. Уларҙың сәләм тауыштары әллә ниндәй сихри моң булып ишетелә, күңелемде ярһыта. Был юлы улар бөтөнләй түбәндән генә, баш осонан тиерлек сыңрай-сыңрай осоп үтте. Күҙемә йәштәр тығылды. Иҫәр кеүек, торналарҙан күңел тынислығы, бәхет һорап иланым. Сәйер кешемен дә инде. Аҡылы теүәлдәр торналарҙан атламаған сабыйҙарға тәпәй һорап ҡысҡыра торған ине. Ә мин? Бәхет, имеш. Үҙең дә шуларға ҡушылып, бер торна булып ҡына осоп китмәһәң, был ерҙә бәхет табып булмаҫтыр. Торналар бер нисә көн ауылдан йыраҡ түгел ятҡан һаҙҙа булды. Тауыштарын тыңлап кинәндем, хатта бинокльдән бейеүҙәрен ҡарап талпынып алдым. Бына бит – һорағаным ҡабул була түгелме ни? Исмаһам, шул көндәр үҙемде бәхетле, тыныс тойҙом.

Яҙҙың тағы мин яратҡан бер мәле – сирень ҡыуаҡтарының күпереп торған шау сәскәгә төрөнгәне. Нимәһенә яратамдыр шул ҡәҙимге генә сәскәләрҙе – аптыраҡ. Ауылда һәр йорт алды баҡсаһында тиерлек бар улар. Ләкин мин нишләптер бер өйкөмдө генә барыһынан артыҡ күрәм. Атай йортонан йыраҡ түгел улар. Ауыл осондағы бер әбейҙең сирендәрен әйтәм, бигерәк күркәм. Төҫтәре лә сағыуыраҡ кеүек, сәскә суҡтары ла ҙурыраҡ һымаҡ. Хатта еҫе лә башҡаларҙыҡынан хуш еҫлерәк, тәмлерәк тойола. Шуға инде ошо мәл етһә, юҡ сәбәпте бар итеп тә әсәй эргәһенә йышлайым. Бер ҡыҫҡа ғына мәл бит ул – сәскә атыу. Күреп туйып та ҡалмайһың – уҙып та китә. Хас кеше ғүмеренең йәшлеге кеүек. Бәй, тип тә ҡалаһың – һин инде әбей.

Әбей тигәндән, сирень хужабикәһен мөрхәтһенеп етмәйем. Ул да миңә һүҙ ҡатмай. Өнһөҙ-тынһыҙ ғына ҡараштары менән оҙатып ҡала. Мин йыш ҡына уның барлығын-юҡлығын да һиҙмәй үтеп китәм. Башҡа әбейҙәр кеүек, “балаң һаулыҡ ҡушмай” тип әсәйемә ошаҡлағаны булманы былай. Шулай булғас, уға ла барыберҙер.

Эскәмйәлә ултырған ҡурҡыныс кәүҙә эргәһенән, ғәҙәттәгесә, битараф ҡына үтеп киттем тигән ерҙән ҡапыл туҡтап ҡалдым. Ҡараштарҙағы бик таныш бер нәмә туҡтатты мине. Нимә ул – аңлата алмайым, әммә мин уға “теге донъя сәләме” тип исем ҡуштым. Нисә йәштәрҙән айыра башланым был нәмәне, иҫләмәйем. Әммә кеше ошондай ҡараш менән баҡһа, аҙна ла үтмәй, уның вафаты хәбәрен ишетәм. Башҡа кеше тоямы икән шуны? Был ҡараш тереләрҙән бик ныҡ айырыла. Гел таныған кешеңде ҡапыл таный алмайһың. Бөтә йөҙ һыҙаты ла урынында, килеш-килбәте лә шул уҡ, әммә ниндәйҙер күренмәгән быяла, һалҡын диуар һеҙҙе айырған кеүек. Ә ул һиңә шул диуар аша ҡарай… Әжәл диуары аша. Был ҡараштан эстән нисектер эҫеле-һыуыҡлы булып китә, әйтәм бит: “Теге донъя сәләме”… Бер тапҡыр район үҙәгендә бер таныш уҡытыусыны танымай ҡалып, уҙып киткәс кенә сәләм ҡуштым. Тойғомдоң көслөлөгөн шунда асыҡлаған инем. Аптырап уйлайым: ул йәш, сәләмәт ҡатын-ҡыҙ, уның менән нимә булһын? Ниндәйҙер мистик тойғом – минең самаһыҙ фантазиям емеше түгелме? Үҙемде артыҡ хиссәнлек өсөн әрләп алдым. Әммә район гәзитенең шәмбе сығарылышындағы некролог тап ошо уҡытыусы вафатына арналғайны…

Әле миңә мәңгелектең үҙе һымаҡ күренгән күрше әбекәй ошолай ҡарап

ултыра. Бәләкәй сағымдан ошо эскәмйәлә ошо һынды иҫләйем. Мин үҫтем, мәктәп тамамланым, кейәүгә сыҡтым, туйым уҙҙы, бәпесем тыуҙы, ул тәпәй китте, икенсеһе тыуҙы, уныһы һөйләшә башланы, тол ҡалдым... Ә был һын эргәһенән һаман битараф үтеп китеүемде белдем... Ниндәй тормош кисергән, иребалаһы булғанмы-юҡмы, йәш сағында сибәр булғанмы-юҡмы, ниндәй хыялдар менән йәшәгән, кемде һөйгән? Бер аҙнанан был донъяла бер кем дә был хаҡта белмәйәсәк. Есеме генә түгел, исеме лә кеше хәтерендә ҡалмаясаҡ. Бына минән – ғүмерем эргәһендә, терәлеп тигәндәй үткән кешенән, ниндәй кеше ине ул, тип һораһындар, ә мин хатта уның исемен дә әйтә белмәй торасаҡмын.

Бөтә кеше өсөн дә ул – Мөнөй әбей. Ысын исемен бер ҡасан да белмәнем дә, ҡыҙыҡһынманым да. Нисә йәш икәнен – бигерәк тә. Мин тыуғансы уҡ ул пенсионер ине. Өйөнә бер кем кермәй, бер кем сыҡмай, тигәндәй. Ул үҙе лә йомошҡа бик һирәк керә. Унда ла, башҡа әбейҙәр кеүек, йәйелеп китеп, самауырҙы йыҡҡансы хәбәр һөйләп, кеше яманлап ултырмай. Сәйгә яҡын килмәй, ишек төбөндә килеш кенә ултырып доға ҡыла ла, йомошон йомошлап, тиҙ-тиҙ генә сығып китә. Уның был донъяла барлығы бер ҡасан һиҙелмәне. Ә юҡлығы? Эскәмйәне ошо һынһыҙ күҙ алдына килтерҙем. Ләпәшеп бөткән ҡап-ҡара өйҙө күмеп үҫкән, күпереп торған шау сәскәлә сирень ҡыуаҡтары. Шул фонда тәпәш кенә эскәмйә. Ҡураныс ҡына, аҡ күлдәкле, аҡ яулыҡлы һын был картинаны тултырып тора икән. Алып ташла ошо кәүҙәне – эскәмйәнең дә, өйҙөң дә, шау сәскә ҡыуаҡтарҙың да бер мәғәнәһе ҡалмаясаҡ... Ошо ниндәйҙер тотоп ҡалып, туҡтатып ҡуйып булмаған бер мәлдең өнһөҙ матурлығын ҡапыл оҙаҡҡараҡ һуҙғы килде. Аяҡтар үҙенән-үҙе сирень яғына тартылды.

– Арыу ғына ултырыуমы, әбей? – Ололарҙың бер аҙ ҡолаҡҡа ҡатыланыуын белгәнгә, ҡысҡырыбыраҡ өндәштем.

– Шөкөр, ҡыҙым, шөкөр. Ҡояшҡа ҡыҙынып ултырам әле бына, Хоҙай ҡушҡас. Әсәйеңә килдеңме?

– Эйе. – Мин иғтибар менән уның тамырҙар менән сыбарланған кескәй ҡулдарына ҡарайым, йөҙөндәге ҡатлам-ҡатлам һырҙарҙы барлайым. Ул ҡапыл өләсәй һымаҡ яҡын кеше булып күренә, ирекһеҙҙән ниндәйҙер изгелек эшләге килә. Ғүмеремдә тәү тапҡыр. Һәм, моғайын, был – һуңғы мөмкинлектер. Шуны һиҙгән кеүек, ул да миңә йомшаҡ ҡарай, йөҙөнә йылмайыу йүгергән кеүек.

– Ғәйшә ҡойоһонан бер йотом һыу эсер инем, – тине әбей, бер аҙ шымып ултырғас. Нисектер үҙ алдына һөйләнгән һымаҡ ҡына әйтте, шым ғына. Тертләп киттем. Был теләк бит миңә генә әйтелде. Тик миңә генә. Урам буйында осраған башҡа берәүгә әйтмәй торған һүҙ булды был. Күңел тигән нәмәнең барлығын кире ҡағып, тик практик аҡыл менән йәшәгән кешегә аңлашылмаҫ был хәл. Әммә һиҙенеүемдә тыңламаһам, бик үкенә торғанмын.

Әсәйемдән кереп бәләкәй биҙрә, көрөшкә алдым да Ғәйшә ҡойоһона киттем. Ул ауылдан бер саҡрымлап ситтә ята. Шуға хәҙер унда барған кеше юҡ. Һәр урамда колонка булыу менән генә мөрхәтһенмәйҙәр, күптәр өйөнә үткәреп, крандан ағыҙып ала. Ғәйшә ҡойоһо ла үҙенең һыуын эсмәгәнгә үпкәләгән шикелле – бик һайыны. Һыуы сөбөрҙәп кенә сыға, биҙрә тығып алырлыҡ түгел. Көрөшкә менән генә сайпып, тондороп ҡына алып тултыра торғас, байтаҡ ваҡыт үтте. Ғәжәп инде, бер уйлаһаң. Беҙҙең диалектта "ҡойо" һүҙе ерҙән ҡайнап сыҡҡан таҙа, эсәр һыуҙы аңлата. Ә бына Эйек–Һаҡмар һөйләшендә ул батҡаҡ араһындағы күләүекте аңлата. Күпмелер ваҡыт үтер, һәм беҙҙең Ғәйшә ҡойоһо ла Эйек–Һаҡмар һөйләшенең ҡойоһона әйләнер. Ниндәй ҡыҙғаныс... Ер-әсәнең

ҡарынынан сыҡҡан татлы һыуҙы үҙем дә бер нисә ләззәтләнеп йоттом да, ваҡыт тирмәненең аяуһыҙлығын уйлап, күңелем ҡарайҙы. Ғәйшә ҡойоһоноң да алҡынып-ташып торған саҡтары, кешегә әжәлдән дарыу кеүек кәрәк саҡтары булғандыр. Хәҙер уның исемен дә, барлығын да белмәгән өр-яңы быуын үҫеп килә... Мөнөй әбейҙең дә елтләтеп баҫып гөрләтеп донъя көткән, егелеп колхоз йөгөн тартҡан саҡтары булғандыр. Ә хәҙер инде ул – үткән заман кешеһе. Бер кем уның менән ҡыҙыҡһынмай, ҡәҙерләмәй һәм вафатынан һуң ҡайғырып иламаясаҡ.

Ҡойоноң үҙенән эскән һымаҡ ҡушуслап эсте Мөнөй әбей.

– Биш йәштәр самаһы бар инеме һиңә, юҡмы, ҡулдарыңды елпелдәтеп “осҡом килә” тип йүгереп йөрөр инең. Әй, шул ваҡытта йөрәгем өҙөлөүҙәре! Мин инде – тормоштоң ни икәнен белгән, тотош ғүмер йәшәгән әбей. Кешеләрҙең бер ҡасан да ҡанат йәйеп осоп китмәй икәнен беләм. Ә һин шул тиклем ихлас, шул тиклем ярһып осорға теләйһең. “Ҙурайғас осаммы, ҡош ҡанаты ашаһам, ҡанатым үҫәме?”– тип әсәйеңдең теңкәһен ҡорота торғайның. Уның ҡулсатырын тотоп кәртәнән дә ырғының, яулыҡтарҙан да ҡанат терәкәләнең... Телеңдә гел осоу булды. Бер заман кешенең бер ҡасан да осмауын белерһең дә, ҡанатың ҡайырылыр, тип йөрәгем өҙгөләнде шул саҡта. Әсәйең әйткәндерме, юҡтырмы – һинең иннәкәң мин булдым бит.

Һуңғы хәбәре бөтөнләй һушымды алды. Һорашманым түгел, һорай торғайным. Һирәк-мирәк әсәйемдең дә кәйефле сағы була ине. Оҙаҡ ҡына уйланып, былай тине:

– Барлыҡ балаларымдың да нисек тыуғаны хәтерҙә, бер һине генә иҫләмәйем. Башҡаларына нисек ауырып киткәнемде лә, ҡайҙа тапҡанымды ла, кем ҡабул иткәнен дә, ауырлығының күпме булғанын да грамына тиклем беләм, вәт һине иҫләмәйем. Хет ат, хет киҫ бына, юҡ, иҫемдә юҡһың...

Ә әле, мә һиңә, ғүмер буйы эргәмдә булған кеше нимә ти. Үҙем хаҡында тулыраҡ белгем килеп, иннәкәмдән һөйләүен үтенәм. Ә ул әллә ҡайҙарға төшөп китә.

– Өләсәйем тирә-яҡта билдәле имсе-томсо ла, иннәкә лә ине. Мине гел бергә йөрөттө тәүҙә. Ул саҡта, ауыр йылдар булыуына ҡарамаҫтан, балалар күп тыуа ине. Мин – әсәйҙең иң өлкәне. Бала сағым булманы ла, буғай. Әсәй йыл һайын тигеләй бәпесләп тора, иртәгәһенә үк тигәндәй колхоз эшенә сығып йүгерә. Үҙем бала ғына, сабый ҡарауҙан бушамайым. Күпме ҡусты-һеңлеләремде йөкмәп йөрөтөп үҫтерҙем. Ныҡ йонсой, ялҡа торғайным. Ә әсәй, өләсәйҙән бер йылы һүҙ ҙә, йылы ҡараш та тоймайым. Берәй ергә йығылып-бәрелеп илаһалар ҙа – мин ғәйепле, аҡырһалар ҙа – мин ҡарап еткермәгән... Ун өс йәштәргә еткән булғанмындыр, түҙемлегем бөттө, һыу буйына төшөп теләк теләнем:

– Эй, Хоҙайым, балам булып торһон, үлеп торһон, – тинем. Асыу менән, ныҡ ҡаты әйттем. Ә ҡыҙ саҡта теләгән ҡабул була. Дөрөҫ теләк теләргә лә белергә кәрәк, ә мине, нишләптер, бер кем дә ваҡытында шуға өйрәтмәгән. Тыумаған балама үлем теләгәнсе, үҙемә бәхет теләһәмсе! Үҫкәс, мотлаҡ был ерҙән йыраҡыраҡ китәсәкмен, ошо туғандарымды мәңге күрмәһәм дә риза, тип тә өҫтәнем. Сығып китәм тигәс, өләсәйем әйтте: "Балам, – тине. – Яҙмышыңа иннәкә булыу, кеше имләү яҙылған. Тиҫкәреләнеп Хоҙай ҡушҡанды ҡабул итмәһәң, бик бәхетһеҙ булырһың, яңғыҙлыҡта ҡалырһың. Аллаһы Тәғәлә барыбер үҙенекен итер, барыбер бер балаға иннәкә булырға тура килер. Ул баланы ҡабул итеүгә

ҡырҡ баланы ҡабул иткәнгә тиң сауап яҙылыр, шуның эргәһенән күрмәй үтеп китмә, аслан! Был донъялыҡта кисергән һуңғы көнөңдә шул баланың ҡулынан һыу эсергә насип итер. Үҙең кеүек юлында аҙашҡан кеүек күрһәң, дөрөҫ йүнәлеште күрһәтеп ебәр". Өләсәйемде тыңламаным. Ситкә сығып киттем, туғандарым менән араларҙы өҙҙөм, им серҙәрен белеүемде бер кемгә лә асманым. Иремә бер бала ла табып үҫтереп бирә алманым – барыһы ла тыуып, сығырсыҡмаҫ ауаз һалдылар ҙа миңә рәнйеп китеп барҙылар. Иҫемә төшә лә бит һыу буйында теләгән теләгем – терһәкте тешләп булмай, һуң. Түккән йәштәремде бергә йыйһаң, дарья булыр... Бөтә йәшем сығып бөткән, күңел нишләһен, таш булып ҡатты. Бөтә көсөмдө эшкә генә бирҙем. Эш – бала түгел. Бөтә һутымды һығып алды ла, кәрем бөткәс, китте-барҙы. Тороп ҡалдым ошолай яңғыҙлыҡта, өйөмә бер кем кермәй, бер кем сыҡмай. Мин үҙем дә кешегә кермәйем. Әллә ниндәй артыҡ баш итеп тоям үҙемде. Кешегә генә түгел, бөтә донъяға кәрәкмәгән бер артыҡ баш. Һин тыуаһы төндә атайыңды миңә фәрештәләр ебәргәндер. Иҫ киткес көслө ҡойон уҙҙы ул төн. Яҡты юҡ, сымдар өҙөк. Эҫе йәйҙә тауыҡ та кисеп сыҡҡан шишмә, диңгеҙ кеүек, ярға һыймай дулап ятты. Балнисҡа бара торған күперҙе ағыҙҙы. Беҙҙең ярҙа телефон-маҙар ҙа булманы, буғай, ул заман, ҡайҙа инде әлегесә “ҡолаҡ” менән һөйләшеү. Шундай дөм-ҡараңғы, шомло төндә ишекте берәү дөбөрҙәтте. Аптыраным, шулай ҙа астым. Ҡараһам – атайың.

– Киленең бәпескә ауырый башланы, зинһар, ярҙам ит, – ти. – Малай булһа, бер һарыҡ бирәм, ҡыҙ булһа – бер нәмә лә.

– Тыумаған баланың өлөшөн киҫеп торма, бер ҡулъяулыҡ бирһәң дә риза булырмын, – тинем.

Тәүҙә бармаҫҡа уйлағайным, күрше урамда Ғәйникамал ҡарсыҡ бар, шуны саҡыр, тиергә иткәйнем, гәрсә Сәбилә бахырҙың йөҙләгән урлаған һымаҡ, урлашып ҡуймаһын тип, ары атланым.

– Йөҙлөк аҡсаһын урлағанмы ни?

– Ниндәй аҡса, йөҙлөк, тим бит. Әй, бында әллә морондоҡ, әллә күлдәк тип әйтәләр, ҡыҙыҡһынғаным булманы. Беҙҙең яҡта баланың битен ҡаплап торған пәрҙәне йөҙлөк тип йөрөтәләр. Йөҙлөк менән тыуған бала сибәр, бәхетле була. Унан эшләнгән һөйҙәргәс бик көслө, шуға ҡиммәтле лә. Ҡайһы бер Ғәйнүш кеүек намыҫһыҙ иннәкәләр баланың йөҙләгән шым ғына урлай ҙа берәйһенә һөйҙәргәс бетеү эшләй. Әйҙә, был баланың бәхете теге кешегә күсә. Сәбилә меҫкендең яҙмышы бик аянысла булды. Иргә сыҡты, унынһы эскесе, һуғышҡаҡ бәндә ине. Сәбиләнең күҙенән күк китмәне. Ҙурайып бөткән ике малайын, эскән баштан, ире арбаға ултыртып алып сығып киткән. Нисек булғандыр, бер КАМ-АЗдың аҫтына барып кергәндәр. Иргә бер ни ҙә юҡ, малайҙарын ҡара гүргә һуҙып һалдылар. Ҡайғыһынан Сәбилә аҡылдан яҙҙы, “Бәхетемде һин генә урланың” тип, урам буйлап сәс-башын туҙҙырып, Ғәйникамалды ҡарғап йөрөп үлде. Ғәйнүш үҙе лә бәхет күрмәне, бахыр. Сәбиләнең генә түгел, әллә кемдәрҙең дә ҡарғышы төшкәндер. Бер бөртөк ҡыҙы ла уйнаштан бала тапты, унынһы ла үҫкәс уйнаштан бала тапты, эй-й, унның нимәһен һөйләп торорға. Яҙмышына шулай яҙылған булғандыр.

Шулай итеп һеҙгә керҙем. Гөләмзә килен ята аҡырып, хәле бөткән тамам. Тулғаҡ бер тота ла туҡтай, ә һинең башың да күренгән. Үлтерәһең бит баланы, Гөләмзә, нисек итһәң дә ит, Айҙарыңа булған асыуыңды онот, ғәфү ит, әтеү

балаң быуыла, – тип ҡаты ғына әйттем. Әсәйең тиҫкәреләнә:

– Баҡса арты Фәғилә менән өҫтөмдән йөрөй, хайуан, – ти.

– Йөрөһөн, эш хаҡын һиңә алып ҡайта, һиңә донъя көтә, туҡмап әрһеҙләнмәй, шул етмәгәнме һиңә, – тип пыр туҙҙырып ташланым тегене. – Ә бында яңы ғүмер ярала, өр-яңы тормош тыуып килә. Балаң үлһә, ирең йөрөмәй башлар тиһеңме? – тим.

Шунан саҡ ҡабат тулғағы башланып, һин килеп сыҡтың. Кендегең өс тапҡыр муйыныңды ураткан. Үлемдән саҡ ҡалғанһың. Белгән кеүек килгәнмен, йөҙләгөң дә бар ине.

– Малаймы? – тип өмөтләнеп һорай әсәйең.

– Юҡ, бик матур, бик бәхетле ҡыҙыҡай, – мәйтәм.

– Эй, Аллам, Зөбәйҙәм тыуғанда, һуңғы ҡыҙым ошо булһын, тип теләгәйнем бит, ниңә тағы ҡыҙ һуң ул? – тип илай әсәйең. – Былай булғас, һаман йөрөр инде, йөрөр. Малай тапһам, йөрөмәҫме икән әллә, тип өмөтләнгәйнем, булманы былай булғас. Лутсы үлһен ине, ҡыҙыҡай булғансы.

– Әстәғәфирулла тәүбә, килен, ауыҙыңдан ел алһын. Балаңа үлем теләмә, бәхет телә. Тыумаҫ элек ҡыҙыңдан баш тартҡас, унан ниндәй изгелек көтәһең. Һинең ҡырыҫлығыңа уҫаллыҡ менән яуап бирә башлаһа, кемгә үпкәләрһең?

– Барыбер ҡыҙыҡай теләмәйем, нимәгә ул миңә? – тип үкһей әсәйең. – Булғандары еткән.

– Күр ҙә тор, бына ошонoһо арала иң матуры ла, иң аҡыллыһы ла буласаҡ, Айҙарың да йөрөүенән туҡталасаҡ. Ошо бала гонаһ юлдан ҡурсып торасаҡ атаһын.

Шулай тигәс кенә һине имеҙҙе әсәйең. Үлән төнәтмәһен эскәс, тынысланып йоҡлап китте. Урыныңды, кендек бауҙарыңды биҙрәгә һалып алып сыҡһам, атайың тора.

– Малаймы? Малай булһа, бер һарыҡ, – ти.

– Ҡыҙыҡай, – тинем. – Кем тип ҡушаһың?

– Артыҡбикә! – тип екеренде Айҙар. – Ҡулъяулыҡ та тәтемәй һиңә...

– Эй, Аллам, ниңә ошо баланы өлөшһөҙ ҡалдырырға тырышаһығыҙ икәүләшеп тороп, ә? Хоҙай Тәғәлә өлөшөн биргән инде уға, муллыһынан биргән. Һеҙҙеке булыуын теләмәһәгеҙ, һеҙгә булмаҫ! Бөтөн илдә балҡып торған бер йондоҙ булыр, иншалла. – Шулай тинем дә киттем.

Бына бында, сирень төбөндә, кендек ҡаныңды шунда күмдем. Йөрәгең турылығында апаруҡ ҡына миңең бар ине. Күрше ауылда ишан улы тере ине әле. Шуны саҡырып, “миңле” исем ҡушығыҙ, тип ныҡыттым ата-әсәңде. Тыңламаныла р, йәнәһе, совет заманы. Исем ҡағыҙы булғас, етмәгәнме, тинеләр. Етмәй шул. Мулла ҡушҡан исемен әйтеп, ҡолағына аҙан ҡысҡырмағас, Хоҙай Тәғәләнең күктә ҡоло өсөн әҙерләп ҡуйған өлөшө нисек насип булһын? Аҙашып тик йөрөй инде. Шөкөр, үҙеңә әйтеп өлгөрҙөм, бер бурысым төштө. Хәйерендә тоторһоң да, мәсеткә барып, үҙең ҡуштырырһың.

Ҡулдарымды, ҡалтырағанын баҫырға була, кеҫәмә тыҡтым. Бөгөн генә яңы ҡулъяулыҡ алып сыҡҡаным иҫемә төштө. Өнһөҙ генә уны әбейгә һондом. Уның йөҙө яҡтырып, йыйырсыҡтары буйлап нурҙар таралып китте.

– Бына бит, ғүмер булғас, мин дә өлөшөмдө – һөйөнсө бүләген көтөп алдым. Һин дә көтөп алырһың, иншалла. – Оҙаҡ ҡына уҡынып доға ҡылғас, һүҙен дауам итте. – Белеклеһең, ҡыҙым. Ярты һүҙҙән дә аңлап тораһың. Күп-күп көстәр бар һинең йөрәгеңдә, күп көстәр. Мин уны һин тыуғас та белдем, ә, үҫә килә, күренә

лә башланы. Бәләкәй генә сағыңдан ошонда, оста, ҡыҙҙырған ҡояш аҫтында сабыр ғына күпме бәпкәләр көттөң. Әсәйеңә ҡаршы һүҙ әйтмәнең, “уф“ тимәнең. Сәғәттәр буйы һине уйлаған кеше юҡ. Эсерергә лә, ашатырға ла онотталар, эҫе ҡабыр, тип тә борсолмайҙар. Ҡәҙерһеҙләүҙәренә шым ғына йәнем дә көйә, артыҡ сабырлығыңа ла бошонам. Бала иннәкәһенә оҡшай, тиҙәр бит. Сабыр булып-булып, бер көн сабыр ҡанаттарың һыныр ҙа, әллә нимә ҡыйратырһың, тип ҡурҡам. Гөләмзәгә лә әйтеп ҡарайым, уның үҙ һүҙе һүҙ. “Изгелеген дә күрмәгәс, нимәгә табаһың ул баланы. Бәпкә ҡарау ҙа булдымы ауыр эш. Ана, өлкәндәренең эше аҙмы: сөгөлдөр, бәрәңге утаған – улар, һыйыр һауған – улар”, – тине лә ҡуйҙы. Эйе, апаларыңдың эше күп, бәхәс тә юҡ. Тик улар бит гел тиңтоштары менән бергә. Гөрләшәләр-серләшәләр, ял да итәләр. Ә һин гел яңғыҙ. Ҡайһы берҙә быуындарың ҡатып китәлер инде: үҙ алдыңа үҙең көйләп, бейеп әйләнә башлайһың. Шул мәлдәрҙе бигерәк һағынам. Торна ғына балаһы инде – нәҙек кенә, нәфис кенәһең. Муйының да оҙон, аяҡтарың да. Ҡулдарыңды елпетәһең, ҡупшы ғына баҫаһың. Ҡайһы саҡта ҡарап ултырам да “аһ“ тип тертләп ҡуям. Саҡ ҡына талпынһаң, осоп китерһең кеүек. Ата-әсәйең алдында бер бейемәнең һин. Бер күрһәләр, туң йөрәктәре ирер ҙә төшөр ине, моғайын.

Әллә ниндәй көс бар һиндә. Күңелде күтәрә, сафландыра торған көс. Эйәрә торған кешеләр була, эйәртә торғаны була. Бына һин эйәртә торғандарҙан. Шулай, йылдар үтә тора. Һинең дә танауыңа еҫ керер мәлдәр етте. Йәштәш ҡыҙҙарың кейенеп-яһанып егет-елән, клуб-дискотека яғын ҡайыра башланы. Ә һине һаман әҙәмгә һанаған кеше юҡ. Өлкән итеп тә һөйләшмәйҙәр, кесе итеп тә һанламайҙар. Өҫтөңдә шул һаман апайыңдарҙан ҡалған алам-һалам. Һинең үҙеңә кейем алырға баштарына ла килмәй. Ә һинең нимәлер талап итеп һорарға башыңа ла килмәй. Үҙеңдең буй-һыныңа килешле итеп, иҫкене боҙоп тегәһең дә ҡуяһың. Эйе, алтынды сүкешме-һәнәкме итеп ҡойһаң да, ул ҡимmәтен юғалтмай, барыбер аҫыл булып ҡала. Шуның шикелле, һинең дә септә япһаң да аҫылҡош төҫөңдө юйып булмай ине. Ҡайһы берҙә “күрмәй микән ни Гөләмзә шул аҫыл һөйәк балаһын” тип ғәжиз булып китәм дә тағын баҫылам.

Был донъяла Хоҙай нимә һорайһың, шуны бирә. Килен дә бит, апайыңды тапҡас, башҡа ҡыҙым булмаһын, тип теләгән. Шуға һиңә ҡарата күҙе быуылғандыр, тим. Маңлай күҙе күрһә лә, күңел күҙе асыҡ булмағас, һинең һылыу, аҡыллы, нурлы бала икәнеңде күрмәй ҙә, һиҙмәй ҙә ине ул. Барлығыңды аҙаҡ тойҙо Гөләмзә. Йыл да ер ябып йөрөй торған ҡаҙҙары, өйрәктәре бер көн килеп юҡҡа сыҡҡас ҡына. Мин дә өйөгөҙҙә инем ул көн. Әсәйеңдең кәйефе шәп. Яңы ғына йоморҡаларын инә аҫтарынан алып йөҙҙәрөп ҡараған. Барыһы ла йәнле, ҡыймылдай икән. Мин кергәнсе ниндәйҙер һөйләшеү булған, ахыры, – һинең һөмһөрөң ҡойолған ине. Әсәйең һөйөнөстәре менән уртаҡлашҡан ғына мәлдә:

– Сыҡмаһын шул сепейҙәрең! – тип бер ҡысҡырҙың да ишекте шарт ябып сығып киттең.

– Ах! – тип ҡалдым мин дә, Гөләмзәнең дә йөҙө ағарҙы.

Һүҙеңдең көсөн шунда уҡ самаланым. Мин әйткән бер нисә йылдан төшә ине, һинеке шундуҡ барып етте. Бер бәпкә лә сыҡманы ул йыл һеҙҙең йортта. Бер ҙә! Нисә оя ҡаҙ, нисә оя өйрәк, нисә оя тауыҡ! Беренсе тапҡыр ҡурҡтым шунда. Һинең өсөн ҡурҡтым, киләсәгең өсөн. Минең кеүек, бер абайһыҙ һүҙе менән үҙ яҙмышын ҡыйратмаһа ярар ине, тип ҡурҡтым. Икенсе тапҡыр уҡыуыңды ташлап ҡайтҡас әсендем. Мин бит инде йәшәгән кеше, нимә буласағын

төҫмөрләп торам. Гөләмзә йөрөй талағы ташып. Уразбайҙың малайы менән кети-мети уйнайҙар икән, тегеһе алмаҫҡа итә икән, тигән хәбәр таралып китте бер заман. Килен башын ҡайҙа тығырға белмәй, һине һүгә. “Нахаҡ бит ул, әсәй, ниңә миңә ышанмайһың?” – тип һин илайһың. Кеше тигәндәре шулай ҡоролған шул, балам. Күптәр яҡындары һүҙенә түгел, урам буйындағы ғәйбәткә ышана. Ул һүҙҙе, моғайын, Уразбай малайы үҙе тараҡҡан булғандыр инде. Һиңә ымһынған да булғандыр, буйы етмәҫен дә тойғандыр. Ә былай, һин ҡыл өҫтөнән тел өҫтөнә төшкәс, кемдең дә буйы етә. Тик барыбер Уразбай малайына тәтемәнең, Расихтыҡы яусы ебәрҙе. Һүҙҙән дә ҡурҡманы, ғәйбәтенән дә. Арпа араһында бер бойҙай кеүек ине, мәрхүмең. Эсеүгә әүрәп харап булмаһа, башын боғалаҡҡа ла тыҡмаҫ ине. Һай, шул эскелек! Әҙәм булды тигәндә, әрәм итә ирҙәрҙе.

Һинең үҙеңдә лә ғәйеп булғандыр, тим. Тәнеңде бирһәң дә, йәнеңде бирмәгәнһеңдер. Ә ир бирмәк – йән бирмәк ул. Уның мәғәнәһен төшөнмәй һөйләйҙәр түлкә хәҙер. Йәнәһе, ир – һиңә йән кеүек ҡәҙерле... Юҡ, улай түгел. Ир кешегә бисә үҙенең йәнен бирә. Йәғни ҡурсауын, көсөн, бар мөхәббәтен бирә. Ир-егетте ҡатынының һөйөүе һаҡлап торһа, уның көсө күберәк, ғүмере оҙонораҡ була. Ауырыуын да һирәк ауырый, эшендә гел уңышҡа осрай, тормошо гел ыңғай тәгәрәй. Ә йәнен икенсе өсөн һаҡлап, үҙ иренә тәнен генә бирә икән – үҙе лә бәхет күрмәй. Үҙе, ире генә түгел, балалары лә өлөштән мәхрүм ҡала. Һинең, ана, ҡыҙ балаларың төшөп торҙо. Юҡҡа ғына түгел бит ул. Ҡыҙ балаға наҙ күп кәрәк, ә һинең наҙың үҙеңә юҡ. Әсәйгә иркәләп үҫмәгәнгә шулай. Һине ҡыҙ бала итеп, наҙлап ҡараманылар, шуға һин дә наҙлай белмәйһең, әҙер түгелһең әле. Әммә һинең яҙмышыңа ҡыҙ тәрбиәләү яҙылған. Белмәйем ҡасан – әммә буласаҡ. Күңелең бөтәйгәс, төрлө яҡҡа һуғылыуҙан туҡтағас, үҙең кеүек бик матур, аҡыллы, һөйкөмлө ҡыҙ бүләк итер Хоҙай. Эргәңдә күргән дә һымаҡмын, тик нишләптер төҫө һиңә оҡшамаған. Күҙҙәре лә ҡара, сәстәре лә ерән түгел, аҡһыл һымаҡ. Атаһына оҡшағандыр. Ярар, инде алйып, ҡәбер еҫе керә башлағас, кеше аптыратып ултырмайым әле, етәр. Күп һөйләһәң дә артыҡ була. Мин бит һиңә иң мөһимен генә әйтергә тейеш, иң кәрәген, иң етмәгәнен генә.

Был донъяла бер кемдән дә мөхәббәт көтмә һин. Үҙең башлап ярат. Хоҙай Тәғәлә һиңә күп-күп мөхәббәт биргән. Һинең бурыс – шуны кешеләргә таратыу. Был донъяла бер ҡайҙан да, бер ниндәй ҙә бәхет көтмә. Үҙең бәхет бул. Кешегә мохтаж кеше булма. Барыһының да һиңә мохтажлығы төшөрлөк бул.

Им-томға тыным килешә ине, кешегә ҡарау менән нимәгә мохтажлығын аңлап-һиҙеп тора инем. Әммә минең, – тип дауам итте иннәкәм. – Өләсәйем һымаҡ, бер тынғы белмәй, гел кеше ҡайғыһын көйләп, гел башҡаларға ваҡыт, көс сарыф иткем килмәне. Шул бер туҡтауһыҙ килеүсе-китеүсе мохтаждарҙан ялҡҡайным. Шуға, был яҡҡа килгәс тә, һәләтемде, белгәнемде кешегә асманым. Бына, яҙмыш мине үҙе язаланы. Кешегә мохтаж сағымда ла килеп-китеүсе юҡ. Бер кемгә минең һүҙ ярҙамым да, ҡул ярҙамым да, хатта им ярҙамым да кәрәкмәй. Хәйер, мин үҙем дә ярҙам итә алмайым хәҙер – кәрем дә бөткән, ғүмерем дә. Бер ҡасан үҙеңде йәлләмә. Ҡаның ҡайнар саҡта бир үҙеңде был тормошҡа, уның һиңә нимәлер биргәнен көтөп ятма. Онотма: һинең үҙең бәхет был донъяла, һин һауа кеүек кәрәк кешеләр бар. Эҙләп тап шуларҙы ла, уларҙы бәхетле ит. Шул бурысыңды үтәһәң, тыныслыҡ табырһың. Бөгөнгә етеп торор. Иртәгә килерһең, сығырға хәлем булмаһа, өйҙә көтөрмөн. Аслан килмәй ҡалма.

һиңә ҡайтараһы бурысым бар. Теге донъяға мине бурыслы итеп ҡайтарып ҡуйма, кил! Кил, йәме?!

Һуңғы һүҙҙәрен артымдан ҡысҡырып ҡалды. Мин, йөрәкһеүемә сыҙамай, ҡабат Ғәйшә ҡойоһо яғына йүгергәйнем. Хәлем бөтөп, сәсәп йығылғансы йүгерҙем дә йүгерҙем. Әллә ташҡын булып башымдан уҡ ҡаплап килгән хәтирәләрҙән ҡасмаҡсы инеме? Белмәйем. Әммә тыныс ҡына ултырырлыҡ, бер ни булмағандай гәпләшерлек йәки ваҡ-төйәк эш тоторлоҡ рәтем ҡалмағайны. Иҫемә килгәндә Ғәйшә ҡойоһонан арыраҡ урынлашҡан ереклектең бер олонон ҡосаҡлап ҡатҡан инем. Тағы саҡ ҡына барһаң, теге торналар төшкән һаҙлыҡ башлана.

Был йәшәү тигәндәре нимә икән ул? Бар ғүмереҢ буйы үҙ-үҙеңде алдау ғынамы икән әллә? Нисек тә үҙ-үҙеңде оҫтараҡ һәм нескәрәк алдарға, үҙ-үҙеңде быуырға, йөрәгеңдең тауышын ишетмәҫкә, аңламамышҡа һалышырға... Башҡаса нисек аңлатырға һуң был хәлде, ә? Әле ҡасан ғына үҙемде Сашканы онотҡаныма ышандырып, йөрәгемдең һыҡрап өҙгөләнгәнен һиҙмәмешкә һалышып йәшәп тик ята инем, әле иһә...

Әле бынауы Мөнөй әбей үҙенең хәтирәләре менән бөтөн донъямды аҡтарып сығарҙы. Мин бит инде бала сағымды ерләгән кеүек инем. Бер ҡасан дә хәтирәләргә бирелмәнем, иҫтәлектәрҙә соҡонманым. Ниндәй хыялдар хыялланғанмын, киләсәгемде нисек күҙаллағанмын, атай менән әсәйгә ниндәй бирелмәгән, яуабы табылмаған һорауҙарым ҡалған, үпкәләүем, рәнйеүҙәрем, маҡсаттарым, һабаҡтарым... – барыһын да һеперен түктем. Нимәгә кәрәк булды әле шуларҙы соҡоп сығарыу? Ысынында иһә соҡорға ла кәрәкмәне – улар гел минең менән йөрөгән. Барса үпкә-хәсрәттәрем һикерешеп килделәр ҙә сыҡтылар. Ниңә үткәндә тороп ҡалмағандар һуң барыһы ла? Нисә тиҫтә йылдар артымдан эйәр ҙә йөрө, имеш...

Бахыр бәпкәләрем... Һеҙ инде моронлағайнығыҙ. Әсәгеҙ менән сипелдәшеп һөйләшеп ята инегеҙ. Оҙаҡламай үҙегеҙ кеүек һары ҡояшҡа йылынырға, йәшел генә үләнде наҙлы томшоҡҡайҙарығыҙ менән тартырға, йылы ғына инештә сума-сума ҡыуышып уйнарға хыялланғанһығыҙҙыр. Тыуа ғына алманығыҙ был донъяға. 13-14 йәшлек кенә ҡыҙ баланың асырғанып ҡысҡырыуы күпме гонаһһыҙ йәндең ғүмерен ҡыйырын кем уйлаған һуң ул саҡта? Йылдар буйы бер ҡыҙыҡһыҙ йәйҙең ҡабатланыуынан йәнем көйгән саҡ ине бит. Башҡалар лагерҙарға китә, күңел аса, дуҫтар таба. Рәхәтләнеп һыу инә, ҡыҙына, еләк-емеш тирә. Ә минең өсөн донъя – һаман шул бәпкә буғы таҙартыу. Эй, уйнағы килә, ҡолас ташлап йөҙгө килә, әхирәттәр менән юҡ-барҙан ҡыҙыҡ табып көлгө килә. Юҡ бит, юҡ! Инде бер оя бәпкәне ҡарға алмаҫлыҡ итеп үҫтерҙемме тиһәң, сираттағылары, унан һуң тағы... Һәм мә һиңә: емештәр кипкән, һыу һыуынған, мәктәпкә ваҡыт еткән, ә һин әле йәйҙе күреп тә, ҡәҙерен белеп тә өлгөрмәгәнһең...

Илай-илай үҙем күмдем тиреҫкә моронлап та сыға алмаған өмөттәрҙе. Ай буйы йомортҡа баҫып та һөҙөмтәһен – ғәзиз балаҡайҙарын көтөп ала алмаған инәләр, ҡайҙа барырға белмәй аптырап, толҡа тапмай шаңҡып йөрөнө. Аһ, төштө бит шул йән эйәләренең рәнйештәре, аһ, төштө! Аңлауын һуң аңланым. Бер-бер артлы үҙемдең нисә ғәзизем тыуып өлгөрмәй төшкәс...

Кисерегеҙ мине, бәпкәләрем-бәбекәйҙәрем! Башҡа бер ҡасан да рәнйеш-ҡарғыш әйтергә ауыҙ асмам. Тик һеҙ генә ғәфү итә күрегеҙ...

Илап бушанғас, еңел булып ҡалды. Ул ваҡытта мин, әсәйемә ҡушылып,

үҙемде ҡәһәрләнем, күрә алманым, үкендем – шул булды. Нисектер, Хоҙайҙан ярлыҡау һорарға, киләсәккә һабаҡ итеп алырға баш етмәгән. Өйрәтеүсе лә табылмаған. Ул хәтирәләрем шуға күрә эйәреп тик йөрөнөмө икән әллә миңә? Һабаҡ ал, аҡыл ал, тип... Ысынлап та, еңел булып ҡалды, күңел ныҡ һыҙламай. Әрнеү түгел, бер хәтирә генә иҫкә алырға. Күпме шундай үкенестәрем, хаталарым ҡалды икән минең?

Тағы бер осраҡ ялт итеп мейемде ярып үтте. Ҡул һыртымда әллә ниндәй бер аҡ тап барлыҡҡа килде. Һыҙламай ҙа, ауыртмай ҙа. Әммә ҡулымдың шул ерҙәре мәйетме ни – төҫө ҡасҡан, ниндәйҙер йәнһеҙ-йәмһеҙ. Һәр ваҡыттағыса, атай-әсәйҙең күҙ һалғаны, иғтибар иткәне юҡ. Улар донъя көтә, ә мин шунда аяҡ араһында буталған бер ҡамасау, оронсоҡ ҡына. Тап ҙурая, нимә икәнен белгән юҡ. Бер көн урам буйында әлеге лә баяғы Мөнөй әбей тотоп алды. Ҡулымды тотоп, әлеге тапҡа оҙаҡ итеп текләп торҙо.

"Тимерәү бит был, – тине. – Тимерәү был". Ҡытыршы ҡарт ҡулдары менән оҙаҡ ҡына тапты һыйпаны. Тағы ниҙәр әйткәндер, онотҡанмын. Тик әбей китеү менән күрше ҡыҙҙары һырып алды.

– Ҡана, беҙгә лә бир әле, – тиҙәр.

– Нимәне, – тип аптырайым.

– Әле генә Мөнөй әбейгә ус тултырып симешкә бирҙең дәһә, беҙҙән йәлләгән булаң, – тип үпкәләй ҡыҙҙар.

Һәр кемебеҙ үҙ фекерендә ҡалды. Мин, бер нәмә лә бирмәнем, тинем, улар “йәлләмсек”тән һалдырҙы. Шул көндән һуң теге тап юғалды. Ҙурайғас, әсәй булғас ҡына белдем нимә менән сирләгәнемде. Витилиго тигән нәмәкәй булған икән. Бер ниндәй крем-майҙарға, дауалауға бирешмәй торған серле сир. Ныҡ ҡурҡыу, стресс арҡаһында барлыҡҡа килә икән. Ул саҡта нимәгә ҡурҡҡан булыуымдың осона сығып уйланып торманым. “Шул тимерәү бөттө бит әлеү!” – тип һөйөнөп-аптырап ҡуйҙым да, бөттө. Нимәнән ҡурҡтым икән? Хәйер, уны-һын оҙаҡ уйларға ла тура килмәй. Был донъяла иң ҡурҡҡаным – әсәйҙең үлеме булды. Миңә 5-6 йәштәр самаһы. Атай менән ниндәйҙер һауыт-табаҡ шылтыратҡан ваҡыттары булғандыр, ахырыһы. Уларҙың ниңә һыйышмағанлығын бала аҡылы аңлай аламы ни инде. Миңә тышҡы торош ҡына күренә: әсәйем һығылып төшкән. Илаймы, шыңшыймы:

– Оҙаҡламай үлермен, ахыры. Мине Хоҙай алғас, кемде алһаң да ал, түлке шул Хафизаңды алма. Һис фатихам юҡ. Ҡәберемдән тороп та килермен, әммә йәшәтмәм уның менән.

Был, әлбиттә, ҡатын-ҡыҙ истерикаһы булғандыр. Бер тамашасы – ир өсөн генә тәғәйен сәхнә. Унда һүҙҙәрҙе уйлап түгел, йәберһетелеүсе бисара роленә кереп, уйнап ҡына әйтәһең. Йәлләтеп, буйһондороп, ниндәйҙер бер теләгеңде үтәтеү өсөн. Хәйлә. Миңә, сабый аҡылға, ул нисек тәьҫир итте! Әгәр әсәй үлһә? Ҡояш һүнә, донъя бөтә ләһә ул саҡта! Минең өсөн тамуҡ башланды. Һәр нәмәгә “терт” итеп торам. Йоҡлай алмайым. Йоҡлап китһәм, әсәйемде гел үлгән итеп күреп, ҡотом осоп уянам. Ни тиклем дәрәжәлә ҡурҡырға кәрәк булған уның өсөн? Көндөҙ ҙә, төндә лә тынғы белмә, нервылар гел көсөргәнештә... Әллә ниндәй сирҙәргә тарырһың ундай хәлдә, нисек әле аҡылдан яҙылмаған?!

*(Аҙағы бар.)*

Зифа
ҠАДИРОВА

# ҺАҒЫНЫРҺЫҢ — МИН БУЛМАМ

ПОВЕСТЬ

## ИКЕНСЕ БҮЛЕК

* * *

Булат менән Фәриҙәнең ғаилә тормошо бер яйға һалынған килеш дауам итте. Фәриҙә юҡ-барға йәнен борсоманы. Һәр иртә эшкә килгәс, кем иренә, кем ҡәйнәһенә зарланды, һәр кем үҙ ғаиләһендәге шатлыҡ-ҡайғы менән уртаҡлашты. Фәриҙә һис ҡасан ғаиләһе, үҙе тураһында һөйләмәне. Башҡаларҙы «эйе, шулай, дөрөҫ иткәнһең» тип йөпләгәндәй булды, ҡайһы бер нәмәне аңламағанға һалышты. Эстән генә: «Эй, йүләрҙәр, кемгә кәрәк һеҙҙең зарығыҙ, кемгә ҡыҙыҡ һеҙҙең иҫерек ирегеҙ, аҡылһыҙ балаларығыҙ, кем үҙ тормошон кешегә һөйләй инде», – тип уйланы. Ул яҡтан уның ҡайғыһы юҡ: ире эсмәй, аҡсаны һәйбәт эшләй, юҡ-барға бәйләнмәй. Фәриҙә ашарға бешерһә бешерә, бешермәһә, Булат үҙе бешереп ашай. Артыҡ ашау кешенең фигураһын боҙа, ана, тултырылған тауыҡ һымаҡ йөрөйҙәр, билдәре лә, муйындары ла күренмәй. Хеҙмәттәштәре янында ул ун һигеҙ йәшлек ҡыҙҙар кеүек, үтеп китһә, ирҙәр әйләнеп ҡарай. Бергә эшләүсе ҡатындар:

– Эй, Фәриҙә, һинең кеүек нескә билле булһаң ине, – тип уфылдайҙар.

Бала булмағанға Фәриҙәнең иҫе китмәне. Утыҙҙарҙа табыр, бәпес сепрәге йыуырға өлгөрөр әле. Әсәһенеке булған, уныҡы ла булыр. Булат ҡына, бала кәрәк, тип эсен бошора. Ҡәйнәһе ҡайтҡан һайын: «Ниңә табиптарға күренмәйһең?» – тип һаман шул бер балыҡ башын сәйнәй. Балаһыҙ ҡатын – емешһеҙ ағас, ти. Хәҙер инде, Байрас балалы ҡатын алып ҡайтҡас, өндәшмәй башланы. Шуларға: «Сөмбөл ҡыҙым, ейәнем», – тип йән аталар. Әллә ҡайҙан ҡайтҡан килмешәк, сит-ят балаһы алдында тәрилкә генә тотмайҙар. Бер көндө һис нәмәгә иҫе китмәй торған, бар кешегә өҫтөн генә ҡараусы, ғорур Фәриҙәне аяҡтан йығырлыҡ ваҡиға булды.

Ғәҙәттәгесә, ҡатындар төшкө ашҡа йыйылдылар, өҫтәл артында Яңы йылда булған хәлдәр, байрам тураһында һүҙ китте. Аҙаҡтан ингән Фәриҙә ҡул йыуырға

---

*Аҙағы. Башы 2 — 3-сө һандарҙа.

тип барғанда, Арыҫланов фамилияһын ишеткәс, ишек төбөндә тыныс ҡына тыңлап торорға булды. Ҡалаға, тирә-яҡҡа батырлығы, сибәрлеге менән даны таралған Байрас тураһында һөйләүҙәрен аңлап алды.

– Яңы йылға ирем менән кафеға барҙыҡ, уларҙың эшенән ойоштороҙолар, – тип һүҙен дауам итте бер ханым. – Унда түрә-ҡаралар ғына йыйылған, ябай эшселәр саҡырылмаған ине. Иң һуңынан Арыҫланов менән ҡатыны килде. Ул бит хәҙер баш инженер. Элек бер ябай шофер ине, хәҙер күрһәгеҙ... Яҡындан үҙемдең бер күргәнем юҡ ине, уның буйы, сибәрлеге, уның күҙ ҡарашы... Ашауым ашау булманы, ике күҙем гел унда булды. Көлөп ебәрһә, йығыл да үл. Кәртинкә инде.

– Ә ҡатыны, ҡатыны ниндәй? – тине берәү түҙемһеҙләнеп.

– Икәү килеп инделәр, эйеме, ҡатыны бәләкәй буйлы, өҫтөнә ялтырап торған оҙон күлдәк кейгән, алтындар таҡҡан, үҙе шундай мөләйем, ҡарап тороуға әллә кем түгел, ә бына йылмайһа, шундай һөйкөмлө. Ире кис буйы ҡатынынан күҙен алманы, бейегәндә, бишкә бөкләнеп, муйынынан үбә, кеше күрмәй, тип уйлай, ахырыһы. Эх, ҡыҙҙар, шундай ирҙең ҡуйынында бер генә ятып ҡарайһы ине.

Арыҫланов ҡуйынында иркәләнеүҙәрен күҙ алдына килтерепме, бөтәһе тынып ҡалды. Фәриҙә, кеше һиҙгәнсе сығайым тигәндә, тынлыҡты үҙенең шаҡ ҡатырғыс хәбәре менән яңы эшкә урынлашҡан бер ханым боҙҙо.

– Ул Арыҫланов бер туған ағаһының беренсе ҡатынына өйләнгән, ти.

– Кит унан, – тине ҡатындар бер ауыҙҙан.

Фәриҙә, дөрөҫ ишеттеме тип, ишеккә яҡынyраҡ барып баҫты.

– Эйе, минең апайым больницала эшләй, уны яҡшы белә. Элек ул ҡатын бик ҡаты сирләп, шул больницала ятҡан. Ауырға уҙған булған, егете алмаған, шуға үҙ-үҙен үлтерергә уйлаған, буғай, көс-хәлгә ҡотҡарып ҡалғандар. Унан балаһын тапҡанда ла үлемдән ҡалған. Апайым әйтә: башта ул Булат ҡатыны ине, хәҙер Байрасҡа сыҡты, ти. Бала ағаһыныҡы икән. Улар ауылынан эшләүсе бер ҡатын да: «Әллә ҡайҙа китеп юғалған ине, әкиәттәге кеүек булды инде: үлергә китеп, байып ҡайтты, уҡып, дипломлы белгес булып ҡайтты», – тип әйтә, ти. Власов үҙ ҡанаты аҫтына алды, бер ҡайҙа ебәрмәйем, ти. Власов оло йәштә бит, үҙенә алмаш әҙерләйҙер. Хәҙер бөтә операцияны Сөмбөл Харисовна яһай, ул күҙәтеп кенә тора, бик маҡтай икән.

Фәриҙәнең өҫтөнә һалҡын һыу ҡойғандай булды, етмәһә, теге ҡатындың һүҙе әле быңың менән генә бөтмәгән булып сыҡты.

– Ағаһының икенсе ҡатынынан балаһы юҡ, ти. Хәҙер бик үкенәлер инде, балаһыҙ ҡатын кемгә кәрәк.

Был һүҙҙәр Фәриҙәне бөтөнләй аяҡтан йыға яҙҙы, көс-хәл менән ҡайҙалыр тотондо, башҡалар уны был хәлендә күрмәһен өсөн, бүлмәһенең ишеген эстән бикләне. Кешеләр төшкө аштан таралғансы, шунан сыҡманы. Бер аҙҙан етәксеһенән һорап ҡайтып китте. Ишеткәндәре башына һыйманы. Булатҡа асыуы килде. Булат нисек шулай эшләй алған? Ни өсөн был хаҡта бер ни әйтмәгән? Йә Хоҙай, уның балаһы бар! Бына ни өсөн өйҙәгеләр Сөмбөл ҡаршыһында бейеп йөрөйҙәр икән! Был уйҙары уны йоҡоһонан ваҡытһыҙ уятҡан январ хәленә килтерҙе.

Булат эштән ҡайтҡанда, Фәриҙәнең йөҙө танырлыҡ түгел ине. Булат:

– Ни булды? – тине ҡурҡып. – Үҙеңде көҙгөнән ҡара әле.

– Сөмбөл кемдең ҡатыны? Һинекеме, Байрастыҡымы? – тип тураһын бәреп һораны Фәриҙә.

– Байрас менән йәшәгәс, Байрастыҡылыр.

– Ә уға тиклем?

Булат, өндәшмәйенсә, аш бүлмәһенә инеп китте. Кәстрүл ҡапҡастарын асып ҡараған булды, уларҙың буш икәнен күргәс, сәй ҡуйҙы. Фәриҙә уның һәр хәрәкәтен күҙәтеп торҙо. Фәриҙәнең утлы ҡарашынан Булаттың арҡаһы семерҙәп ҡуйҙы. Яратмай ине ул Фәриҙәнең бындай зәһәр ҡарашын. Беҙ ҡапсыҡты тиште. Ҡатынына нисек яуап бирергә белмәй баш ватты Булат.

– Мин яуап көтәм. Ни эшләп Сөмбөлдө һинең беренсе ҡатының тип һөйләйҙәр? Бала кемдеке?

– Минеке. Сөмбөл дә минең ҡатыным ине, законлы түгел, ә никахлы...

– Мин ҡыҙ килеш, һине егеттер тип уйлап кейәүгә сыҡтым. Ә һин ҡатын айырған ир булғанһың бит. Әсәйемдәр белһә, ни тиерҙәр, хурлығы ни тора бит. Оятһыҙ! Ниңә башта әйтмәнең? Оятһыҙҙар һеҙ, ике туғанға бер ыштан. Байрас туйғас, яңынан һиңә ҡайтырмы? Һеҙҙең ул фахишәгеҙҙе ҡайҙарҙа кем менән ни эшләп йөрөгәнен Алла ғына беләлер. Ауылға ҡайтһаң да, телдәрендә Сөмбөл менән балаһы, батша урынына күрәләр үҙҙәрен. Ғаиләгеҙ менән боҙоҡтар һеҙ, атаәсәйең дә йүнһеҙ. Кәтүк буйы бер ҡатын барығыҙҙы үҙ ҡулында тота. Ике малайға бер ҡатын, шуға барыһы һөйөнә, боҙоҡтар һеҙ! – тип ҡысҡырҙы Фәриҙә.

Нисә йыл йәшәп, ҡатынын бындай хәлдә беренсе тапҡыр күрҙе Булат. Уның бигерәк тә ата-әсәһенә ауыр һүҙ әйттергеһе килмәне. Сөмбөлдөң һис ғәйебе юҡ, бында барыһына Булат үҙе генә ғәйепле.

– Туҡта, етте! Ни һөйләгәнеңде ҡолағың ишетмәй.

– Мин әле башланым ғына, бәлки, ул бала башта уҡ Байрастыҡы булғандыр...

Булат уға һүҙен әйтеп бөтөрөргә ирек бирмәне, Фәриҙәнең эйәгенән ҡыҫып тотто ла күҙенә ҡараны.

– Сөмбөл менән балаға тел тейҙерәһе булма! Һинең алда уларҙың ғәйебе юҡ. Мин ғәйепле улар алдында, – тип Фәриҙәне этеп ебәрҙе.

– Үкенәһеңме? Һора Байрастан, бәлки, кире ҡайтарып бирер, – тине Фәриҙә, асыуына быуылып.

Булат мөйөштәге кәнәфигә барып ултырҙы.

– Хәҙер барыһын аңлатам, яҡшылап тыңла, әгәр аңламаһаң, үҙеңә үпкәлә. Сөмбөл менән дә, ата-әсәйем менән дә ауыҙ сайҡама. Балаға тел тейҙермә. Баланың кемдеке булыуын мин бик яҡшы беләм. Мин һине яраттым, бөтә хыялым һин инең, һин тип, Сөмбөлдө илаттым, баланан баш тарттым. Һиңә өйләнһен тип, алты айлыҡ бала менән ул өйҙән сығып китте. Атайымды, Байрасты тыңламаным, «Яҡшы ҡатын буласаҡ, бергә йәшәгеҙ», – тинеләр, ишетергә теләмәнем. Атай: «Үкенерһең, балаңды һағынырһың», – тине. Юҡ, миңә Фәриҙә бала табасаҡ, тинем. Баламдың һинән булыуын теләнем. Барыһын һинең өсөн ҡорбан иттем. Ҡыҙ килеш айырылған иргә сыҡтым, тиһең, бел, мин Сөмбөл менән йәшәмәнем, яратҡан кешеңә өйлән, тип, ул үҙ янына яҡын ебәрмәне, мине бер ҡасан битәрләмәне, күҙ йәштәрен күрһәтмәне. Ирһеҙ бала тапҡан исемен күтәрмәҫ өсөн генә йәшәне бит ул беҙҙә. Буйы бәләкәй булһа ла, бик көслө кеше ул. Ҡышҡа ҡаршы, беҙҙең туй алдынан сығып юғалды, ҡайҙа киткәнен белмәнек. Ә Байрас уға бер күреүҙә ғашиҡ булған, ләкин Сөмбөл минең менән булғанға, араға инмәгән. Байрас уны эҙләне, бик оҙаҡ көттө. Аҙаҡтан нисек күндергәндер, Сөмбөл хәҙер уның менән. Өйҙәре йылы, яҡты, ожмах ояһы. Үкенәһеңме, тиһең. Әгәр мине эштән ҡайтыуыма ҡайнар аштар бешереп, йылмайып ҡаршы алһаң, балаларым йүгереп ҡаршы сыҡһа, үкенмәҫ инем. Һин бит үҙ-үҙеңде генә яратаһың, фигура һаҡлайһың, ун һигеҙ йәшлек ҡыҙҙар кеүекмен, тип ғорурланаһың. Кемгә кәрәк һуң һинең ҡоро һалҡын сибәрлегең? Һүҙ ҙә юҡ, һин бик сибәр, ләкин мин уның йылыһын таймайым. Ни үҙең йылытмайһың, ни миңә йылынырға ла, йылытырға ла мөмкинлек бирмәйһең. Һинең һалҡын ҡарашыңдан ҡурҡып, беҙгә хәҙер кеше кермәй башланы, яңғыҙ кәкүктәр шикелле, икебеҙ ике

яҡта ултырабыҙ. Хәйер, һин кем менән йәшәһәң дә шулай буласаҡ, таш ҡурсаҡ бит һин, Фәриҙә! – тине лә Булат өйөнән үк сығып китте.

Урамда төҫлө уттар яна, Яңы йыл байрамы шауҡымы әле бөтмәгән, йәштәр күңел асып йөрөй. Элек эсе бошһа, энеһенә бара ине. Хәҙер унда Сөмбөл булғас, уға юл ябыҡ. Өйөнә кире ҡайтҡыһы килмәне. Урам буйлап йөрөй торғас, иртәгә ял көнө булыуы иҫенә төштө. Оҙаҡлап уйлап торманы, машинаһына ултырып, ауылына ҡайтып китте. Ауыр саҡта ҡайтырға тыуған йорто, ата-әсәһе булыуына һөйөнөп ҡуйҙы. Ваҡытлыса булһа ла, ауыр уйҙарынан арыныр, атаһы менән һөйләшер. Булат машинаһын кертеп ҡуйып, өйгә инде, ишекте асыуға, ҡаршыһына Азамат йүгереп сыҡты:

– Булат ағай ҡайтты, – тип һикергеләне, – ә һин атай менән әсәйемде күрҙеңме? Улар ҡасан ҡайта?

Булат әллә һөйөнөстән, әллә көйөнөстән баланы күтәреп алып, уның күкрәгенә башын йәшерҙе, күңеле тулды, күҙ йәштәрен улына күрһәтеүҙән оялды, тамағына ултырған төйөрҙө йота алмай ғазапланды. Азамат быны һиҙҙе, ахырыһы:

– Булат ағай, ниңә илайһың? Әллә машинаң ватылдымы? – тип Булаттың ҡолағына бышылданы. – Илама, атай төҙәтеп бирер. Ул бөтә әйберҙе лә эшләй белә, илама, – тип сәсенән һыйпаны.

Булаттың былай әсенгәне юҡ ине әле. Нисә йылдан һуң бөгөн улын беренсе тапҡыр ҡулына алды. Ул уны ҡосаҡларға күпме ынтылды, Сөмбөлдән ҡурҡты: «Яҡын килмә, һинеке түгел», – тиер кеүек ине. Ә бөгөн улын ҡурҡмайынса ҡулына алды, яратып ҡосаҡланы. Булатты был хәлдә күреп, ата-әсәһенең йөрәге әрнене. Атаһы: «Их, балам, һуңға ҡалдың шул», – тип улын ҡыҙғанып ҡуйҙы.

Азамат, Булат ағаһының ҡулынан һыйпап:

– Әйҙә, бөгөн минең менән йоҡлайһыңмы? Әлфис ағай клубтан барыбер һуң ҡайта, теге бүлмәлә икәү йоҡларбыҙ йәме, – тип йылмайҙы.

Ятыр алдынан Шәфҡәт ағай:

– Нимә, улым, донъялар ауырайҙымы әллә? – тип һораны.

Булат, атаһына күтәрелеп ҡарамайынса ғына, әрнеүле тауыш менән:

– Үкенестән үлеп булһа, мин үлер инем, атай, – тине.

Улының һүҙҙәренән атаһының йөрәгә ҡыҫылып ҡуйҙы, утыҙға етһә лә, уның өсөн һаман бала шул. Уның барлыҡ тойғоһон үҙенә генә алыр ине, ләкин һәр кемдең үҙ яңылышы, үҙ яҙмышы, башҡа кеше төҙәтә алмай.

– Үлергә ашыҡма әле, улым, ана ниндәй матур улың үҫеп килә, уның үҫкәнен, кеше булғанын күрәһең килмәйме ни? Атаһы була алмаһаң, яҡын ағаһы, дуҫы бул. Һөйләш, серләш, йән дуҫы бул.

– Сөмбөл яҡын ебәрмәҫ шул, атай.

– Һин Сөмбөлдө белмәйһең, улым, оло йөрәкле кеше ул.

– Әйҙә, йоҡлайбыҙмы? – тип Азамат Булаттың ҡулынан тартып, Әлфистең бүлмәһенә алып инде. – Һин бында ят, – тип, йәнәшәһендәге мендәрҙе рәтләне. – Мин бер үҙем йоҡларға ҡурҡам, төндә бында бик ҡараңғы, һин мине ҡосаҡлап ят, – тип үҙе лә Булатты ҡосаҡлап, танауын уның күкрәгенә төрттө лә йоҡлап китте.

Булат төн буйы керпек ҡаҡманы, улын уятыуҙан ҡурҡып, һелкенергә лә ҡыймай ятты. Ул бөгөн кемде юғалтыуын аңланы, әгәр уның кеүек хата яһарға йыйыныусы кеше барын белһә, һис икеләнмәйенсә: «Балағыҙҙы сибәр ҡатынға алыштырмағыҙ!» – тиер ине. Үткәндәге яңылыштары йөрәген әрнетте, күҙҙәренән ҡайнар йәш аҡты. Ярай әле, илағанын улы күрмәй. Булат таң алдынан ғына йоҡлап китә алды. Байрастар ҡайтмаһа, уға тағы бер көн улы менән йәнәшә йоҡлау насип буласаҡ.

Икенсе көндө улар бергә баҡсала ҡарҙан әүәләп Ҡар бабай, Ҡар ҡыҙы, машина яһанылар. Азамат ысын күңелдән ағаһына булышты, үҙе юҡтан ҡыҙыҡ табып, баҡсаны яңғыратып көлдө. Һалҡындан бит остары ҡыҙарған, йүгереп йөрөүҙән тирләп сыҡҡан ошо бәләкәй генә бала, әйтерһең дә, бөтә донъяның шатлығын үҙенә туплаған. Ниңә шуны Булат элек аңлай алмаған? Улынан башҡа нисек йәшәй алған? Быға тиклем һағынманымы, һағынды, улының буш бишеген күреүгә йөрәге һулҡылдап ҡуя ине, ләкин сер биргеһе килмәне, артҡа сигенергә һуң ине инде.

Өйҙәгеләр уларға ҡамасауламаны, уйындарына ҡатнашманы, бары тик тәҙрәнән генә күҙәтеп торҙолар.

– Эй, балаҡайҙарым, – тине Гөлфиә апай, алъяпҡысы менән күҙ йәштәрен һөртөп.

– Әле былай булғанға шөкөр итәйек, әсәһе. Әсәһен башҡалар алып китһә, беҙ уны мәңге күрмәҫ инек.

Йәкшәмбе Булатҡа китергә кәрәк булһа ла, иртән китермен, Азамат үҙе генә йоҡларға ҡурҡа, тағы бер кис ҡунырға кәрәк, тип, улы янында ҡалыр өсөн һылтау эҙләне. Уның ҡалырын белгәс, Азамат һөйөндө:

– Бөгөн дә икәү йоҡлайбыҙ, эйеме, – тип Булатты ҡосаҡлап алды.

– Эйе, улым, – тигәнен Булат үҙе лә һиҙмәйенсә ҡалды.

Сөмбөлдөң серле бүлмәһендә улар тағы икәү. Улының уның өсөн урын әҙерләүе, шатланып йылмайыуы, ҡуйынында мыш-мыш йоҡлауы Булатҡа әйтеп бөтөргөһөҙ йән рәхәтлеге, Фәриҙә менән нисәмә йылдар йәшәп ала алмаған йылыны бирә. Хәҙер ул нисек, кем өсөн йәшәргә кәрәклеген аңланы. Тыныслыҡ һәм рәхәтлек биреп, күңелендә яҡты өмөт йондоҙо ҡабынды. «Улым, мин һине бер ҡасан ташламам, яҡын ебәрмәһәләр, йыраҡҡа китмәм, күләгәң булып, һәр ваҡыт янында йөрөрмөн». Улының маңлайынан үбеп алды. Торор ваҡыт еткән. Эшенә һуңға ҡалмаҫ өсөн китергә уйланы, атаһы оҙата сыҡты.

– Тынысландыңмы инде?

– Ҡайғырма, атай, хәҙер барыһы ла һиненсә булыр. Рәхмәт, әле, ярай, һеҙ бар мине аңларға.

– Һин, улым, Байрасҡа үпкәләмә, Сөмбөл һеҙҙе дошманлаштырыуҙан ҡурҡып, ризалыҡ бирмәне. Энеңде үҙең беләһең, ике һөйләргә яратмай. Ул өйләнмәгән булһа, башҡалар алыр ине, ул саҡта инде баланы мәңге күрә алмаған булыр инең. Улым, һеҙ бит бер туғандар, уртаҡ тел табып йәшәгеҙ...

* * *

Фәриҙә быға тиклем яңғыҙлыҡтың ни икәнен аңламаған икән. Булат китеп юғалғас, ул үҙ-үҙенә урын тапманы. Әгәр балаһы булмаһа, ире ташлап китһә, ғүмере буйы шулай яңғыҙы йәшәрме? Һеңлеһенә барҙы, ләкин күңелен бушатырға ғорурлығы ирек бирмәне. Туҡтың хәлен ас аңламағас, бала-сағаһы, ире менән мәш килеп йөрөгән һеңлеһе апаһын аңламаны, аңларға ваҡыты ла булманы. Һәр кемдең үҙ донъяһы. Фәриҙә өйөнә ҡайтты, ундағы бушлыҡ йәнен өшөттө. Теге ҡатындың «Балаһыҙ ҡатын кемгә кәрәк?» тигән һүҙҙәре иҫенә төштө. Булат, унан айырылып, башҡа ҡатынға өйләнһә? Ул быға са «Булат минән башҡа йәшәй алмай, мин сибәр, нисек теләһәм, шулай борам» тип үҙ-үҙенә ышанып йәшәне. Бала юҡлығына ла ҡайғырманы, булыр әле, тип, табиптарға ла күренмәне. Бөгөн иһә үҙ уйҙарынан үҙе ҡурҡа ҡалды. Булат ял көнө кисен килмәгәс, бөтөнләй шикләнә башланы. Байрас янына барып һорарға ғорурлығы баш бирмәне. Дүшәмбе, йүгерә-йүгерә эшенән ҡайтып, ашарға бешерҙе. Ире бөгөн дә ҡайтмаһа, яңғыҙы ни эшләр? Булат һуң ҡайтты. «Ашарға бешерҙем,

яңғыҙым ашаманым, һине көттөм»,– тиергә Фәриҙәнең ҡыйыулығы етмәне, тәҙрә янына баҫып, урам күҙәткәндәй баҫып торҙо. Бына хәҙер Булат уны килеп ҡосаҡлар, ғәфү үтенер, тип уйланы. Ире бер ни өндәшмәне, ашарға һораманы, йоҡо бүлмәһенә инеп, урын да йәймәйенсә ятты. Фәриҙә асыуынан шартлар дәрәжәгә етте, ләкин өндәшмәне. Күңелендәге ҡурҡыу көсәйҙе. Элек Фәриҙә һөйләшмәй йөрөгән булһа, хәҙер Булат һөйләшмәне. Аҙна аҙағы етеүгә, ауылына ҡайтып китте. Бер түбә аҫтында йәшәүсе сит кешеләр кеүек, бер-береһенә өндәшеүҙән, бәрелеп китеүҙән ҡурҡтылар. Һүҙһеҙ көрәш ике ай дауам итте. Бер көндө, һис уйламағанда, Байрас килеп инде. Тегеһен-быныһын һөйләшкән булдылар.

– Онотмаған булһағыҙ, 8 мартта әсәйҙең тыуған көнө, ҡайтығыҙ, – тип икеһен дә ауылға саҡырып китте.

Булат, байрамда ата-әсәһенең кәйефен төшөрмәҫ өсөн, Фәриҙәгә:

– Ҡайтаһыңмы, ҡайтһаң, тиҙерәк йыйын, – тип ҡоро ғына әйтеп ҡуйҙы.

Фәриҙә өйҙәге тынлыҡтан, яңғыҙлыҡтан тамам туйып, йәһәннәмгә китергә әҙер ине, иренең ауылына ҡайтырға шатланып риза булды.

– Хәҙер күстәнәстәр алып керәм, – тип кибеткә сығып китте.

Улар ҡайтып ингәндә ишек алдына Байрастың машинаһы күренмәгәс: «Ҡайтмағандар!» тип, эстән генә икеһе лә еңел һулап ҡуйҙы. Өйгә ингәс, көтөлмәгән хәл булды: Сөмбөл мейес алдында бәрәмәс бешереп йөрөй, Әлфис менән Азамат һөйләшеп-көлөшөп ултыралар, Булатты күреп, Азамат:

– Булат ағай ҡайтты! – тип ҡосағын йәйеп, ҡаршыһына йүгереп килде.

Булат был юлы Сөмбөлдән ҡурҡманы.

– Ни хәл, улым? – тип Азаматты ҡосаҡлап алды.

Сөмбөл, ни әйтергә белмәй, юғалып ҡалды. Шулай ҙа ул үҙен бик тиҙ ҡулға алды. Азамат ауылдан килгәс, Булат ағаһы менән дуҫлашыуы тураһында һөйләгән ине. Байрас:

– Ҡаршы килмә, ағайға былай ҙа бик ҡыйын, – тигәс, ул бөтә үпкәләрен эсенә йотто, бала бүлешеп, тауыш сығарып булмай бит инде.

Сөмбөл, бер ни һиҙҙермәҫкә тырышып:

– Әйҙә, уҙығыҙ, маҡтап йөрөйһөгөҙ, – тип йылмайҙы. Яны менән бороლған ине, Фәриҙәнең яңағына килтереп һуҡҡандай булды, Булат та баҫҡан урынында ҡатып ҡалды: Сөмбөлдөң эсе шаҡтай түңәрәкләнгән ине. Сөмбөл, уларҙың хәлен һиҙеп, Фәриҙәне:

– Әйҙә, түр бүлмәгә өҫтәл әҙерләйек. Хәҙер Байрас та ҡайтып етер, әсәйҙе алырға киткән ине, – тип икенсе бүлмәгә алып сығып китте.

Сөмбөл, әҙерләп биреп барҙы, Фәриҙә оло бүлмәгә ташып торҙо, асыуы килһә лә, ҡушҡанды үтәне. Сөмбөл уның менән дуҫ ҡыҙылай яҡын күреп һөйләште, ләкин был Фәриҙәнең ҡанын ғына ҡайнатты. Кәтүк буйы, тәпән кеүек йыуан ошо нәмәкәй бөтә кешене ауыҙына ҡаратып тора. Байрас ҡәйнәһен алып килгән, йыйылышып гөрләшәләр. Булат Фәриҙәнең әсәләрен алып килеү тураһында уйламаны ла. Донъяһын онотоп, Азамат менән уйнай. Байрас, бишкә бөкләнеп, Сөмбөл ҡаршыһында нисек булышырға белмәй тырышып йөрөй. Фәриҙә бөгөн ире менән дуҫлашырға өмөтләнгән ине, Сөмбөлдөң ауырлы икәнен белгәс, өмөтө өҙөлдө. Хәленән килһә, Сөмбөлдө күҙ ҡарашы менән үлтерер ине, уны үҙенең йән дошманы итеп күрҙе. Ситтән генә ирен күҙәтте: ул аҫтан ғына Сөмбөлгә ҡарап-ҡарап ала, Азамат менән ниҙер һөйләшә, көлөшәләр. Былар барыһы Фәриҙәнең һарыуын ҡайнатты, ләкин түҙергә, бер ни һиҙҙермәҫкә тырышты. Нисек кенә булмаһын, Булат менән дуҫлашырға кәрәк, кәтүк буйы Сөмбөлгә ике ир күпкә китер. Кеше булмағанда, Сөмбөлдән асыуын алмаҡсы булып:

– Һин бик тиҙ етешкәнһең, ауырыңды әйтәм, – тип зәһәр генә йылмайҙы.

– Шулай килеп сыҡты шул, бер-ике йыл бала тапмам, эшләрмен әле, тигән инем. Фәриҙә, һорағанға үпкәләмә, ә ниңә һеҙҙеке һаман юҡ? Бергә йәшәүегеҙгә лә байтаҡ, донъяғыҙ етеш, нимә ҡамасаулай? Бәлки, берәй ярҙам кәрәктер, һин Юрий Петровичҡа күренеп ҡара әле, ул яҡшы табип.

Сөмбөл үҙе һөйләне, үҙе Фәриҙәне күҙәтте: «Эйе, Фәриҙә бик сибәр. Мин уның янында кем инде? Байрастың да тиңе шундай сибәр ҡатын булырға тейеш, миндә ни тапҡандыр? Әгәр берәй ваҡыт, күҙе асылып китеп, шундай сибәрҙе осратһа... Юҡ, улай булыуы мөмкин түгел. Сөмбөлдөң ул мәхшәрҙе башҡа кисергеһе килмәй. Ул саҡта ир-ат затынан мәңгегә баш тартасаҡ. Улар яҡшы, күңелле йәшәһәләр ҙә, ул әле һаман Байрасҡа йөрәген асырға ҡурҡа. Булат та уның ауырлы икәнен белгәнсе янынан бер аҙым ситкә китмәне, иркәләп туйманы. Ә нимә булып бөттө? Юҡ, мин хәҙер ике бала әсәһе, үҙемде рәнйетергә юл ҡуймам, хистәргә бирелмәм. Теге ваҡытта яралы йөрәгемде усыма тотоп, төнгө урам буйлап йөрөүҙәремде, әрнеүгә түҙә алмайынса, поезд ҡаршыһына сығып баҫыуымды һис бер ваҡыт оноторға тейеш түгелмен. – Ул шулай уйҙар даръяһына инеп батыуын һиҙмәй ҙә ҡалды. – Бик ныҡ рәнйеттең һин беҙҙе, Булат, хәйер, үҙең дә бәхетле күренмәйһең, Сөмбөл тапҡан кәрәкһеҙ бала менән уйнайһың...» Сөмбөл үҙенең Булатҡа ҡарап ултырыуын һиҙмәне, сөнки ул уны күрмәне, был ваҡытта ул артта ҡалған ғазаплы үткәндәре эсендә йәшәй ине. Унда Фәриҙәгә ҡарата көнсөлөк хистәре уянманы, күңеле түренән элекке мөхәббәт саткыларын эҙләне, унда ла әллә ниндәй сәйер тынлыҡ, йөрәге уға яуап бирмәне. «Һиңә булған ҡайнар хистәрем янып бөткәнме, әллә улыма күскәнме? Һине күреп, йөрәгем ашҡынмай, һин мине башҡа рәнйетә алмаҫһың».

Сөмбөл, уйҙарынан арынып, ауыр һулап ҡуйҙы. Үҙенең Булат менән күҙгә-күҙ ҡарашып ултырыуҙарын аңлағас, йоҡонан уянғандай һиҫкәнеп китте, урылыҡта тотолғандай, Байрасҡа ҡараны. Уның йөҙө ҡара болот, ҡатынының ҡарашынан ни аңлағандыр, Сөмбөл иренең күҙҙәрендә рәнйеү күрҙе. Ни эшләп мөхәббәт өсмөйөштән тора икән?

Байрас бер һүҙ әйтмәйенсә сығып китте. Уның йөрәген инде нисәнсе тапҡыр бер үк һорауҙар борсой: «Һаман ағайымды ярата микән? Күпме дауам итер? Уның түҙемлеге етәрме?» Йәшәгән һайын Сөмбөлдө нығыраҡ яратыуын аңлай, ул уға һауа кеүек кәрәк. Бәлки, бала тыуғас, Сөмбөлдөң уға ҡарата хистәре ҡабынып, сабыр итергә кәрәк.

Байрас тышта, ауыр уйҙарына батып, бик оҙаҡ баҫып торҙо. Ишектән кемдер сығып, уның өҫтөнә йылы кейем ҡапланы.

– Әйҙә, Байрас, үҙебеҙгә ҡайтайыҡ, бында бөгөн кеше күп. Сығар машинаңды, мин йыйындым, Азамат хәҙер кейенеп сыға, – тип Сөмбөл кире инеп китте.

Юл буйы һөйләшмәй ҡайттылар. Өйгә ҡайтып йоҡларға ятҡас, Байрас ауыр һулап борғоланды, әйләнде. Сөмбөл дә йоҡламаны, ирен нисек йыуатырға белмәне. Сөмбөл уның ниҙәр уйлап йоҡлай алмауын аңланы, ләкин Байрас ҡына ҡатынының йөрәгендә Булат урынын әкренләп яулап барыуын һиҙмәй, әгәр белһә, былай борғоланмаҫ ине. Сөмбөл иренә табан боролоп ятты, башын уның киң күкрәгенә һалды ла ҡыҫып ҡосаҡланы.

– Юҡҡа ғазапланаһың, үткәндәр артта ҡалды. Һин үткәнде уйлайһың, ә мин киләсәкте. Һин яңылышаһың, береһе лә һин уйлағанса түгел.

Байрастың йөрәге йыш-йыш тибә башланы, ҡатынын әкрен генә мендәргә яйлап һалды, уның күҙҙәрен күрәһе килеп, ут яндырҙы.

– Сөмбөл, минең ни уйлауымды ҡайҙан беләһең?

– Битеңә яҙылған, ауыр һулап ятыуыңдан һиҙәм...

– Эйе, мин теләгеңә ҡаршы өйләндем, һиңә яҡшы ир булырмын, наҙлармын, иркәләрмен, йөрәгеңде яуҙармын, тип уйланым. Ә бөгөн шикләнеп ҡалдым. Һин ағайға шундай итеп ҡарап ултырҙың, һин уны һаман яратаһың, ғазап уттарында янаһың, ахырыһы. Мин бөгөн көсһөҙлөгөмдө аңланым. Ағай сит кеше түгел, уның менән ҡара-ҡаршы көрәшеп, һуғышып булмай. Һеҙ осрашҡан һайын, йәнемде ниндәйҙер ҡорт кимерә, көнләшеүме был, үҙем дә аңламайым, аңым томалана, туғандар икәнлегебеҙҙе лә онотам. Һин мине ярата алмаһаң, ни эшләрмен? Мин һине көндән-көн ныҡыраҡ яратам, үҙеңә әллә ниндәй тылсымлы көстәр менән тартаһың. Һин миңә һауа, ҡояш кеүек кәрәк. Элекке йылдарҙағы хистәр ул яратыу булмаған икән. Мин һине бер яратып үпһәм, иркәләһәм, шул етер кеүек тойола ине, ә хәҙер һинең бөтә йөрәгеңә хужа булғым килә, һине бер кем менән бүлешкем килмәй. Аңлайһыңмы мине? Һин бит мине аҡылдан яҙҙыраһың, Сөмбөл,– тип ауыр һулап, башын ҡатынының ҡуйы сәстәре араһына йәшерҙе. – Мин элек бер ни аңламағанмын икән шул: йөрәгеңде яулай алмаһам, ҡалғаны бер ни тормай икән.

Сөмбөл Байрастың битен устарына алып, күҙҙәренә ҡараны:

– Булатҡа ҡараһам да, мин һинең хаҡта уйлайым.

– Ниҙәр уйланың? Минең бик белгем килә.

– Юлыңда Фәриҙә кеүек сибәр ҡатын осрап, һине минән тартып алһа, нисек йәшәрмен? Һинең кеүек оҙон буйлы баһадирға шундай сибәрҙәр пар бит.

– Ни һөйләйһең һин, Сөмбөл? Шуға күрә мине яратырға ҡурҡаһыңмы? Ҡайҙан килә башыңа ундай уйҙар? Эй, Сөмбөл, Сөмбөл. – Ул ҡатынын ҡыҫып ҡосаҡланы, еңел һулап ҡуйҙы. – Мин һине бер ҡасан бер кемгә алмаштырмаясаҡмын. Ҡурҡма, ас йөрәгеңде, аҙ булһа ла урын алайым.

Ташҡын һыуын асҡандай, ҡатынын йәне туйғансы үпте, иркәләне.

– Юҡ, мин һине бер ниндәй сибәр ҡыҙҙарға алмаштырмайым. Йә Хоҙай, бынан да артығыраҡ яратып буламы икән? Яндырып үлтерәһең бит, – тип бышылдап, ҡайнар тыны менән Сөмбөлдө яндырҙы. Сөмбөл ҡаршы килмәне, бөтә йәне-тәне менән яуап бирҙе, иренең ҡайнар ҡосағында ирене. Шул миҙгелдә аңын йәшен кеүек бер уй киҫеп үтте: «Хоҙайым, үҙең һаҡла ошо мөхәббәтте!»

* * *

Тәбиғи юл менән бала таба алыу мөмкин булмағанға, Юрий Петрович менән кәңәшләшеп, бала тыуҙырыу көнөн Сөмбөл үҙе билдәләне. Һәр көндө һанап, ҡурҡып йәшәгән Байрасҡа:

– Тағы ике аҙна ваҡыт бар, – тип ялғанларға мәжбүр булды.

Сөмбөл кистән больницаға инеп, операцияға әҙерләнде. Икенсе көндө иртән яһаһалар, ире килеүгә барыһы үткән булыр. Әйтһәң, ул меҫкен ҡурҡып, кеше генә борсоп йөрөр.

Байрас, кис менән Сөмбөлдө эштән алырға килгәс, ҡабул итеү бүлмәһендәге шәфҡәт туташынан:

– Сөмбөл Харисовна сыға алмай, – тигән яуапты ишетеп аптыраны.

– Ни эшләп сыға алмай?

– Иртән генә операция яһағас, нисек сыға алһын?

– Ниндәй операция? – тине Байрас, ҡото алынып.

– Үҙе таба алмағас, операция яһанылар.

– Ҡайҙа ул? Нисәнсе палата?

– Икенсе ҡатта, унынсы палата.

Байрас баҫҡыстарҙы ике генә һикерҙе, артынан: «Унда инергә ярамай!» – тип ҡысҡырып ҡалған шәфҡәт туташының һүҙҙәрен ишетмәне. Ул палата ишеген

асҡанда, Юрий Петрович менән шәфҡәт туташы Сөмбөлдөң беләгенә энәләр ҡаҙай ине. Сөмбөл үҙе әллә аңһыҙ, әллә йоҡлай, уныһын аңлап бөтөрә алманы. Байрас аҡ ҡағыҙ төҫөнә инде, көс-хәл менән карауат башына килеп тотондо, ҡатынының беләгенә ҡаҙалған энәнән күҙен ала алманы.

– Ни булды? Ни өсөн? Әле ике аҙна бар ине бит, – тип тотлоға-тотлоға һораны, үҙе ҡурҡыуынан йығылыр дәрәжәгә етте.

Юрий Петрович, Байрастың хәлен аңлап:

– Әйҙәгеҙ, сығайыҡ, бында инергә ярамай, – тине.

Байрас урынынан теләһә лә ҡуҙғала алманы, Сөмбөлгә ҡарап тик торҙо.

– Уға хәҙер йоҡларға кәрәк. Барыһы ла яҡшы. Әйҙәгеҙ, сығайыҡ, иртәгә килерһегеҙ.

Сөмбөлдө әллә һөйләшкән тауыштар, әллә иренең тетрәнеүе уятты, ул йоҡо аралаш:

– Байрас, ебәр карауат башын, йолҡоп алһаң, мин карауат менән бергә таралам, – тип мығырҙаны. – Һеҙ уға тынысландыра торған укол яһағыҙ, шунһыҙ китә алмаҫ.

Байрастың артына энә менән төрттөләрме ни:

– Юҡ, кәрәкмәй, мин ҡурҡам, мин шунда ғына торам, – тине.

– Ярамай, микроб индереүегеҙ бар. Әйҙәгеҙ, мин һеҙгә балағыҙҙы күрһәтәм, – тип доктор уны үҙе менән алып сығып китте.

Ул, иҫерек кеше кеүек сайҡала-сайҡала, Юрий Петрович артынан эйәрҙе, ҡурҡыу ҡатыш һораулы күҙҙәре менән докторға ҡараны. Доктор көлөп ебәрҙе:

– Сөмбөл Харисовна хаҡлы, һеҙ бик ҡурҡаҡ икән. Ул һеҙҙе йәлләп, операцияға керәһен әйтмәне. Кемегеҙ бар икәнен белдегеҙме әле?

Байрас, «юҡ» тигәнде аңлатып, баш сайҡаны.

– Ай, егетем, ҡурҡаҡ айыу икәнһең, үҙең тирә-яҡта иң көслө кеше һаналаһың. Кил әле бында, – тип Юрий Петрович уны быяла менән бүленгән бүлмә янына саҡырҙы. – Был яҡтан икенсе бала – һеҙҙең ҡыҙ.

– Сөмбөл иҫән ҡалырмы?

– Ҡалыр, ҡалыр, борсолма. Нисек инде һинең кеүек ҡурҡаҡ ирҙе ҡалдырып китһен ул. Ана, үҙеңә ниндәй матур ҡыҙ бүләк итте. Ҡыҙҙар аталарын малайҙарға ҡарағанда ныҡыраҡ яраталар. Һин хәҙер бар, ҡайт, ял ит, өйҙә балағыҙ яңғыҙҙыр. Иртәгә иртән килерһең, борсолма, барыһы ла яҡшы булыр.

Байрас төнө буйы йоҡламаны, арлы-бирле йөрөп таң аттырҙы. Азаматты мәктәпкә оҙатыуға, больницаға йүгерҙе. Сөмбөл иренең киләһен күңеле менән һиҙҙе. Байрас, ҡурҡып, палата ишеген асты, әкрен генә ҡатыны ятҡан карауат янына сүгәләне, йоҡлай, тип тын алырға ла ҡурҡып, уға ҡарап ултырҙы.

Сөмбөл:

– Мин бик йәмһеҙме? – тине лә боролоп йылмайҙы.

Байрас күҙ йәштәрен йәшерә алманы, уның мендәренә башын һалды.

– Тағы бер бала табам тиһәң, мин аҡылдан яҙасаҡмын.

Сөмбөл иренең сәсенән һыйпаны.

– Ҡара инде, аҡ сәстәрең барлыҡҡа килгән.

Байрас:

– Башта сәс күп, ә һин берәү генә, – тип уның бармаҡтарынан үпте. – Мин кисә баланы күрҙем, уйымда гел һин булғанлыҡтан, бер ни аңламаным.

Сөмбөл уның битен, күҙҙәрен һыйпаны.

– Ҡыҙың тыуҙы, ә һин һөйөнмәйһең дә.

– Мин һинән башҡа бер кем тураһында уйлай алмайым. Һин йылмаяһың, ә мин һаман һинең өсөн ҡурҡам.

Палатаға Юрий Петровичтың ингәнен һиҙмәнеләр.

Ул арала шәфҡәт туташы баланы палатаға индерҙе.

– Ҡап-ҡара бәләкәй йомғаҡ, әсәһенә оҡшаған...

Сөмбөл, Байрасҡа ҡарап:

– Мә, атаһы, үпкәләмә инде, малай бүләк итә алманым, – тип баланы уның ҡулына һалды.

– Улай тимә, кемгә кәрәк ул өй тулы малайҙар. Уларҙы матур итеп кейендереп тә булмай бит, – тип йылмайҙы ире. – Ҡыҙыбыҙ өсөн рәхмәт. – Байрастың йөҙө яҡтырып китте, ул үҙенең атай булыуын аңлай башланы. – Мин һиңә ни бүләк итәйем икән?

– Һин беҙгә өй һал, атаһы, ҙур, яҡты өй. Һәр яҡлап ҡояш төшһөн, тәҙрәнән ағастар, сәскәләр күренеп торһон. Балаларыбыҙҙың тыуған йорто, аяҡ баҫыр үҙ ерҙәре булһын.

– Һин мине ғәжәпләндереүҙән туҡтамайһың. Бөтә ҡатын-ҡыҙ ҡала фатиры тураһында хыяллана, ә һиңә ауыл өйө кәрәк.

– Ҡала фатиры аяҡ аҫтындағы тыуған ерҙе алмаштыра алмай, үҙ баҡсаңда ялан аяҡ йөрөүгә ни етә. Беҙ ҡыҙым менән гөлдәр үҫтерербеҙ. Һин беҙгә матур йорт һал, мин һиңә булышырмын, бына шунда беҙҙең ысын тормошобоҙ башланыр.

Сөмбөл больницанан ике аҙнанан һуң ғына сыҡты, шул сәбәпле һабантуйға бара алманы, бала менән өйҙә ҡалды. Байрас менән Азамат икәү китте.

– Байрас, көрәшә күрмә, йә имгәнерһең, – тип оҙатып ҡалды уларҙы Сөмбөл.

– Һин ҡурҡмайынса бала таптың, мин дә батыр, улыма көрәшеп күрһәтәм әле...

Көрәш майҙанына халыҡ йыйылды. Булат менән Әлфис көрәшсе туғандары янында ҡайнашты. Алғы рәткә, ҡарттар араһына, Шәфҡәт ағай ҙа ғорур ғына инеп урынлашты. Азаматтың әле көрәш күргәне юҡ, шуға ул ҡыҙыҡ итеп кенә күҙәтте. Ахун халҡы таҙа, көрәшсе халыҡ, ҡараусыһы ла, көрәшсеһе лә етерлек, хатта ҡатын-ҡыҙ ҙа ситтә ҡалмай. Ахун көрәш майҙанының уртаһында күҙ һалып һоҡланырҙай ир бәһлеуәндәре етерлек әлегә. Шәфҡәт ағай үҙ малайы өсөн тыныс ине. Бил бирмәйәсәк, күренеп тора...

Ысынлап та, көрәштә Байрас еңеп сыҡты, елкәһенә тәкә килтереп һалғас: «Сөмбөләм, был еңеүем һиңә!» – тине эсенән генә. Азамат:

– Атайым еңде, атай еңде! – тип Булат янында һикергеләне.

Һөйөнөшөп өйгә ҡайтып инеүгә, Азамат ашыға-ашыға әсәһенә һабантуй яңылыҡтарын һөйләргә тотондо.

– Минең атайым иң көслөһө, – тигәс, Сөмбөл эштең ниҙә икәнен аңланы.

– Ҡотлайбыҙ, атаһы! Мине тыңламаҫыңды белдем бит, еңелеп хур ҡалмаһын, тип кенә әйткән инем. Улайһа, өйләнеү килешмәгән, тиерҙәр ине, минең менән бергә бәпесләп ябығып бөттөң бит.

– Сөмбөл, әйҙә, йыйынығыҙ, мин һеҙҙе бер ергә алып барам, тик һорама, барғас күрерһең.

Байрас Сөмбөл менән балаларын ауыл ситендәге ҡарағай урманы буйына алып килде.

– Оҡшаймы һеҙгә был ерҙәр?

– Бик матур урындар. Ҡарағай урманының саф һауаһы ни тора...

– Мин һине хәҙер үҙемдең класташтарым, дуҫтарым менән таныштырам. Бөгөн беҙ ҡыҙымдың тәпәйен йыуабыҙ. Һин больницанан терелеп сыҡмайынса, байрам итергә күңелем тартманы. Ә бөгөн ике байрамды рәхәтләнеп бергә үткәрәбеҙ.

Ул машинаһын йыйылған халыҡ янына килтереп туҡтатты. Дуҫтары уны шатланып ҡаршы алды. Байрас машинанан сыҡты, унан иплəп кенə Сөмбөл менəн ҡыҙын төшөрҙө.

– Ҡəҙерле дуҫтарым, мин һеҙҙе ғаилəм менəн таныштырырға телəйем. Бына был бəлəкəй матур ҡатын – бөтə тормошомдоң йəме, шатлығы. Барлыҡ еңеүҙəрем Сөмбөлөмə бағышланған. Бына быныһы – улым Азамат, килəсəктə майҙандарҙа мине алыштырасаҡ. Ə быныһы – ҡатынымдың миңə һабантуй бүлəге, бəлəкəй ҡыҙым Айһылыу. Беҙ баҫып торған ерҙə, Алла телəһə, балаларымдың тыуған ере буласаҡ.

Сөмбөл, ризалығын белдереп, йылмайып керпек ҡаҡты, ҡысҡырып əйтмəһə лə, ул бөгөн бик бəхетле ине. Ире уның күҙҙəренə ҡараны, Сөмбөлдөң күҙҙəре ул ратҡанса йылмаялар, барыһынан бигерəк Байрас үҙе бəхетле, бер йыл элек ул был хаҡта хыяллана ғына ала ине. Ул Сөмбөлгə йылмайып:

– Хоҙайҙан бик ялбарып һораһаң, буй етмəҫ хыялдар ҙа тормошҡа аша икəн, – тип бышылданы. Үҙе: «Һин дə берəй ваҡыт яратырһың мине, Сөмбөл. Һин «яратам» тигəн көндө бөтə донъяла минəн бəхетле кеше булмаҫ», – тип уйланы.

* * *

Шул йəйҙə үк Байрас, атаһы менəн бергəлəп, буласаҡ йортҡа нигеҙ һалды. Учалы ҡалаһының ситендə Буранстсы ауылының пар ҡарағай үҫеп ултырған ерен ҡамап алдылар. Байрас шатланып: «Пар ҡарағайы ни тора, киҫеү юҡ, үҫһендəр, шулаймы, атай?» – тине шатланып. Ирҙəр көн-төн шунда эшлəне. Ваҡыт уҙа торҙо, ҡап-ҡара сəсле Айһылыуға ла бер йəш тулды. Азамат һеңлеһен нисек кенə итеп яратырға белмəне. Əсəһе уға:

– Улым, һин Айһылыуға ҙур ағай. Һеҙ ике бөртөк бер туған, бер ҡасан был хаҡта онотма, – тигəс, ағай булыу менəн ғорурланып йылмайҙы.

– Əсəй, беҙҙең Айһылыу ҡапҡа башындағы сыйырсыҡҡа оҡшаған, эйеме, һис тик тормай, үҙе гел ниҙер бытылдай.

Байрас балаларын бик ярата, эштəн уларҙы бик һағынып ҡайта, балалар, аталары ишектəн күренеүгə, муйынына һарылалар.

Айһылыу тыуғас, өс бүлмəле фатир биргəндəр ине, үҙ йорттарын иркенлəп өлгөртөргə уйланылар.

Балаға бер йəш тулыуға, Юрий Петрович ауырып китеү сəбəпле, Сөмбөлдө эшенə саҡыртып алдылар. Сөмбөлдө күреүгə, ҡарт табип, ғəфү үтенгəндəй:

– Сөмбөл Харисовна, һеҙҙе борсоном инде. Һөйлəшəһе һүҙҙəрем бик күп. Мин үҙемдең сиремде белəм, миңə ял кəрəк, бəлки, донъяла йəшəргə лə күп ҡалмағандыр, шуға күрə һеҙгə ашығыс рəүештə эшкə сығырға кəрəк. Бына был дəфтəрҙə минең ҡырҡ йыл буйына яҙып барған күҙəтеүҙəрем, ҡайһы бер асыштарым. Уҡығыҙ, өйрəнегеҙ, бəлки, кəрəге тейер. Беҙҙең эштə бит əллə ниндəй көтөлмəгəн хəлдəр килеп сығырға мөмкин, һеҙ барыһына əҙер булырға тейеш. Ҡатын-ҡыҙ бүлеген һеҙгə тапшырырға телəйем. Мин һеҙгə ышанам.

Шулай итеп, Сөмбөлгə һис уйламағанда эшкə сығырға тура килде. Ҡара сыйырсыҡ балаһын Гөлфиə апай ауылға алып ҡайтып китте.

– Ғүмер буйы ҡыҙ бала үҫтерергə хыялландым, Алла насип итте, – тип ул бик һөйөндө.

Баштараҡ йəш белгескə тəжрибəле табиптан башҡа эшлəүе ҡыйыныраҡ булды. Ҡатмарлы операциялар яһағанда, янында күҙəтеп тороусы, кəңəш биреүсе Юрий Петровичтың булмауы Сөмбөлдө бер аҙ ҡурҡыта ине. Ул операция өҫтəле янына килеп баҫҡас, Ғəлимə апайҙың етди йөҙөн күҙ алдына килтерҙе һəм эшкə тотонды. Үҙ-үҙенə ышанмағандарҙы Өфөгə ебəрҙе. Ҡатын-ҡыҙ араһында уның хаҡта «яҡшы белгес» тигəн хəбəр тиҙ таралды.

Бер көндө уның янына Фәриҙә килеп инде.

– Килдем әле, һине бит, бик күп белә, яҡшы дауалай, тиҙәр, бәлки, миңә лә ярҙам итерһең?

– Әгәр минән генә торһа, ҡулымдан килгәндең барыһын эшләргә тырышырмын, Фәриҙә.

Ул Фәриҙәне бөтә яҡлап тикшерҙе, ләкин, ҡыҙғаnысҡа ҡаршы, уның инәлеге етәрлек дәрәжәлә үҫмәгән булып сыҡты. Был осраҡта бала табыу мөмкин түгел икәнен Сөмбөл бик тиҙ аңланы, ләкин Фәриҙәгә нисек әйтергә белмәй аптыраны, еңелерәк һүҙҙәр эҙләне. Күптәр был хаҡта ишеткәс, табипҡа ышанмайҙар, йә иһә уны ғәйепләйҙәр.

– Фәриҙә, был осраҡта медицина көсһөҙ, мин һиңә бер нисек ярҙам итә алмайым. Һине Хоҙай шулай яратҡан, бында бер кем дә ғәйепле түгел. Һинең балаң булмаясаҡ...

Сөмбөл ошо һүҙҙәрҙе әйткәндә, үҙен ауырыу ҡаршыһында ғәйепле кеүек тоя ине. Килендәше янында үҙен нисек тоторға белмәне. Фәриҙә бер мәлгә телһеҙ ҡалды, йөҙө ағарҙы, унан уҫал итеп Сөмбөлгә ҡараны:

– Шатланаһыңмы? Эйе, шатланаһың, ҡарғышым төштө, тиһеңме? Булмаһын, мин уны һинән башҡа ла яҡшы беләм. Улай бик яҡшы табип булғас, дауала, булырлыҡ яһа. Һин бит үҙеңә ниндәй кәрәк, ҡайһыһынан кәрәк, шулай табаһың: береһенән малай, икенсеһенән ҡыҙ. Һин бит Арыҫлановтарҙың уртаҡ ҡатыны.

Килендәшенең зәһәр сәсеүен Сөмбөл бар көсөн йыйып, сабырлыҡ менән тыңланы, башҡа ерҙә булһа, урынына бик тиҙ ултыртыр ине, тик эштә ҡысҡырышырға яҡшы түгел. Ул әкрен генә тороп, тәҙрә ҡаршыһына килеп баҫты.

– Әйтәһе һүҙҙәреңде уйлап һөйлә, Фәриҙә, аҙаҡтан оялырға тура килмәһен. Унан, урыны ул түгел, – тине Сөмбөл, үҙен тыныс тоторға тырышып.

– Оятмы, миңә оятмы?

Фәриҙә зәһәрләнеп тағы ниҙер әйтмәксе булған ине, Сөмбөлдөң асыулы ҡарашын күреп, туҡтап ҡалды.

– Әйтәһе һүҙең булһа, өйгә кил, бында килеп тауыш сығарып йөрөмә, хәҙер үк сығып кит. Мине рәнйетеп кенә бала тыумай, донъяла йәтимдәр бөтмәгән, алығыҙ ҙа үҫтерегеҙ.

Фәриҙә яуап ҡайтарғансы, һүҙ бөттө тигәндәй, Сөмбөл ишекте асты:

– Һау булығыҙ, мин һеҙгә ярҙам итә алмайым, башҡа табипҡа барып ҡарағыҙ.

Ауылға ҡайтҡас, улар тағы осрашты.

Сөмбөл, тирә-яҡҡа тәмле еҫ сығарып, баҡсала ҡоймаҡ бешерергә тотондо.

– Сөмбөл ҡайтҡаны әллә ҡайҙан һиҙелә, – тип күлән-күрше инеп сыҡты. Ҡара бөҙрә сәсле Айһылыу – бөтәһенең шатлығы, йыуанысы – атаһының алдынан төшмәне. Сөмбөл Фәриҙәгә ҡарап-ҡарап алды, ул Азаматтың уйнағанын күҙәтә ине. Теге һөйләшеү тураһында ирҙәренә һиҙҙермәнеләр. Баҡсала икәү генә ҡалғас, Фәриҙә Сөмбөлдөң ҡаршыһына килеп баҫты, уға өҫтән генә ҡарап:

– Һинең менән һөйләшәһем бар, – тине.

– Нимә тураһында?

– Азаматты беҙгә бир. Булат «миңә кеше балаһы кәрәкмәй, минең үҙ балам бар» – ти, шулай булғас, Азаматты беҙгә бир.

Сөмбөл, был һүҙҙәрҙе ишеткәс, йығылып китмәҫ өсөн, ҡайҙа тотонорға белмәне, башына һуҡҡандай булды, һауа етмәне, үҙен тиҙерәк ҡулға алырға тырышты. «Был ниндәй оятһыҙлыҡ, хәйерсегә яҡты сырай күрһәтһәң, ямаулыҡ һорай, ти, бала менән аралашыуға ғына риза түгел, инде тартып алырға уйлайҙар». Сөмбөлдөң асыуҙан ҡаны ҡайнаны, йөрәге ярһыны, ә Фәриҙә, бер ни һиҙмәгәндәй, һаман ауыртҡан ергә баҫты:

– Ул Булаттың малайы, уның быға хаҡы бар.

Был һүҙҙәр Сөмбөлдө тамам сығырынан сығарҙы.

– Юғал күҙ алдымдан! – тип ҡысҡырып ебәреүен үҙе лә һиҙмәй ҡалды. – Мин һиңә, йөрәгемдән өҙөп, атаһын бирҙем, бала теләһәң, унды тап. Булатҡа бит мин тапҡан бала кәрәкмәне, уға һинеке кәрәк ине, ә бала таба алмайһың икән, бында минең ғәйебем юҡ.

Улар Фәриҙә артына килеп баҫҡан Булатты күрмәнеләр. Сөмбөлдөң бөтә тәне ҡалтыраны, хәле китте. Булатты күреп алды, ул, ниҙер һиҙенеп, Сөмбөлгә ҡарап тора ине. Сөмбөл асыу менән:

– Минең балаларым янына яҡын киләһе булмағыҙ! Уның балаға бер ниндәй хаҡы юҡ, ул малайын һиңә алмаштырҙы! – тип ҡысҡырҙы.

– Ә мин балаға атаһының кем булыуын әйтһәм, ул ваҡытта ни тиерһең?

– Дөрөҫөн әйтермен, атайың һине йәнһеҙ бер таш ҡурсаҡҡа алыштырҙы, тиермен. Унан ҡарарбыҙ, яратҡан Булат ағаһы кемгә әйләнер? – Сөмбөл Булатҡа бармаҡ менән төрттө. – Ҡарында саҡта уҡ һин ул баланан баш тартҡаныңды оноттоңмо? Байрас ҡайтмаған булһа, беҙ икебеҙ ҙә гүр эйәһе инек, ә хәҙер һеҙгә бала кәрәкме?

Уның тауышын ишетеп, баҡсаға Байрас менән ҡайныһы килеп инде.

– Сөмбөл, ни булды?

Байрастың ҡатынын былдай хәлдә беренсе тапҡыр күреүе ине: ул уҫал, асыуы йөҙөнә сыҡҡан, ҡара күҙҙәрендә ут уйнай.

– Мине ҡан илатып, тапап уҙҙың, алма кеүек баланан баш тарттың, теләгеңә ирештең: бәхетең, мөхәббәтең үҙ ҡулыңда. Мин һинән бер ни ҙә һораманым, үҙ яраларымды үҙем бәйләнем. Нисек ғазапланыуымды күреп тә йәлләмәнең, ул тип барыһын аяҡ аҫтынан һалып тапаның. Ә һин, Фәриҙә, минең менән ауыҙ сайҡама, мин уны йыртыла-йыртыла һинең өсөн тапманым. Булат, балаға яҡын киләһе булма, бала яратаһың килә икән, урам малайҙарын ярат, беҙҙекенә теймә! Бик кәрәк икән, донъя тулы йәтим бала – ал да тәрбиәләп үҫтер!.. Әйҙә, Байрас, балаларҙы машинаға ултырт, тиҙерәк китәйек бынан, береһен дә күргем килмәй.

Байрас, аптырап, ҡатынын ҡосаҡлап алды:

– Башта тыныслан, унан китербеҙ.

– Юҡ, хәҙер үк! Азамат, ҡайҙа һин? Машинаға ултыра тор, – тип Сөмбөл Айһылыуҙы алырға ашыға-ашыға өйгә инеп китте.

Шәфҡәт ағай Байрасҡа:

– Бар, улым, ҡатыныңа ярҙам ит, ағайың менән үҙем һөйләшермен, – тип баҡсанан сығарып ебәрҙе. Булатҡа боролоп:

– Ҡатыныңды ал да кит бынан, ә һин, килен, телеңде тыймаһаң, Булатҡа бала табырлыҡ ҡатын алып бирергә лә күп һорамам. Сөмбөл, һеҙ бәхетле булһын тип, барыһынан баш тартты, әгәр шулар менән дә иҫәпләшмәйһең икән, үҙегеҙгә үпкәләгеҙ. Сөмбөлдө рәнйетәһең икән, был йорттоң ҡапҡаһыябыҡ һиңә, – тине, Фәриҙәнең күҙенә ҡарап. – Улым, әгәр элеккесә йәшәйһең килһә, ҡатыныңды тәртипкә килтер. Ә хәҙергә ана китер юлығыҙ, ҡапҡа асыҡ. Улым, теләп алған яҙмышың, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Хоҙайҙан ни һораһаң, шуны бирҙе.

Байрас ҡатыны менән балаларын ауылдан ситтә урынлашҡан күл буйына алып килеп туҡтатты. Сөмбөл бер нөктәгә текәлеп, һелкенмәйенсә ултыра бирҙе. Байрас:

– Әйҙәгеҙ, әсәйегеҙгә сәскәләр йыйып бүләк итәйек, – тип балаларын машинанан төшөрҙө. Азаматҡа:

– Улым, миңә әсәйең менән һөйләшергә кәрәк, һин ҙур егет бит, һеңлеңде ҡарап тор, – тигәс, тегеһе үҙен оло кеше итеп хис итте, баш һелкте.

Байрас Сөмбөл янына инеп ултырҙы, һүҙһеҙ генә уны ҡосаҡлап алды. Әллә йәлләүсе, әллә яҡлаусы булғанға, Сөмбөл әкрен генә илап ебәрҙе. Ул һирәк илай, илаһын, эсен бушатһын, тип, Байрас туҡтатманы, балаларының уйнауҙарын күҙәтеп тыныс ҡына ултырҙы. Ҡатыны тыныслана төшкәс, уның эйәгенән күтәреп, күҙҙәренә ҡараны.

– Сөмбөл, беҙ бергә, һин шуны онотма. Борсоу-ҡайғыларыңды минән йәшереп, үҙең генә күтәреп маташма, беҙ бөтөн бер алма кеүек йәшәргә тейешбеҙ. Кил әле үҙемә, һин яралы ҡошҡа оҡшағанһың, – тип иркәләй-иркәләй, ҡатынын үпте. Улар балаларының килгәнен күрмәй ҙә ҡалдылар. Азамат, атаһы менән әсәһенең үбешкәнен күреп:

– Ҡарама, ҡарама, – тип һеңлеһенең күҙен ҡапларға тырышты.

Байрас, уларҙы күреп, ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

– Аһ, һине, кил әле, ҡыҙым, улым, кил һин дә, – тип икеһен ике яғына ултыртты. – Эх, рәхәт тә һуң, ниндәй матур был донъя, әсәһе!  Мин бөгөн ағайымдарҙың ҡайғыһын бөтә йөрәгем менән тойҙом, Хоҙай үҙе ярҙам итһен. Беҙҙе генә ошо бәхеттән айырмаһын, – тине, ҡыҙын алдында һикертеп.

Улар яланда ҡыуышлы уйнап, матур сәскәләр йыйып бик оҙаҡ йөрөнөләр, Сөмбөл тынысланды:

– Әйҙә, ҡайтайыҡ, атайҙар борсола торғандыр. Сөмбөл, һин ағай менән Фәриҙәгә рәнйемә, Хоҙай уларҙы былай ҙа ныҡ рәнйеткән. Беҙҙекен генә күпһенеп күҙ тейҙермәһендәр, ә ҡалғанын бергә еңербеҙ. Сөмбөл, әле мин һине белеп бөтөрмәйем, ахырыһы, һин бик көслө кеше. Асыуланған ваҡытта һин үҙ бәпкәләрен һаҡлап ҡалырға тырышҡан инә ҡаҙға оҡшаған инең. Һине яҡыныраҡ белгән һайын, үҙемде бәләкәйерәк тоям.

– Улай тимә, Байрас, миңә үҙемдән көслөрәк рухлы кеше кәрәк. Бөтә йәнемтәнем менән һөйөлөрлөк, бөтә эс серҙәрем һыйырлыҡ, уларҙы аңларлыҡ, ир генә түгел, иң яҡын дуҫ та булырлыҡ кеше кәрәк. – Сөмбөл, үрелеп, Байрастың күҙҙәренә ҡараны. – Һин хаҡлы, араға ел-дауыл кермәһен. Мин һинең менән бик бәхетле, һин шуны беләһеңме, һиҙәһеңме икән, Байрас, ишетәһеңме, мин бик бәхетле!

Ҡатынының һәр бер әйткән һүҙе Байрастың йөрәгенә һайрар ҡош булып ҡунды, уның был бәхеттән башы әйләнде, күҙҙәре, иртәнге һыу өҫтөн хәтерләтеп, мең төрлө төҫтә ялтыраны, ирендәре йылмайҙы.

– Сөмбөл, мин һинән был һүҙҙәрҙе бик оҙаҡ көттөм, уларҙың минең өсөн ни тиклем әһәмиәтле икәнен һин үҙең дә белмәйһең, – тип Байрас күҙҙәрен йомдо, Сөмбөлдө яратып күкрәгенә ҡысты, балалар ҡыҙыҡһынып уларҙы күҙәтте.

Тормош юлдары ҡатмарлы, бигерәк тә ғаилә тормошонда, уның боролмалары бик күп, һәр кеше лә ул боролмаларҙы еңел генә үтеп сыға алмай: кемдеңдер сабырлығы етмәй, кемдеңдер аҡылы томалана. Бөгөн Байрас менән Сөмбөл шул тормош тигән оҙон юлдың бер боролмаһын юғалтыуҙарһыҙ атлап уҙҙы. Улар ғүмерендә былдай боролмалар күп булыр әле, бөгөн ошо яланда бер-береһенә йөрәк серҙәрен астылар, алда яңы көн кеүек, ҡояштай оло, яҡты мөхәббәт тыуасағы, тигеҙ юлдар буласағы билдәле ине.

Булаттарҙың ғына тормошо, болот ҡаплаған ҡояштай, һүнгәндән-һүнә барҙы. Булаттың аталары ҡаршыһында тауыш сығараһы килмәне, үҙ өйҙәренә ҡайтып еткәнсе түҙҙе, өйгә инеү менән:

– Һөйлә, – тине Фәриҙәгә ҡоро ғына, – нимә кәрәк һиңә Сөмбөлдән?

– Барыһына ла һин ғәйепле, бала-бала, тиһең, булмай беҙҙең балабыҙ, булмаясаҡ та, Сөмбөл үҙе шулай тине. Азаматты беҙгә бир, тинем. Һин бит, кеше балаһы кәрәкмәй, тинең, ҡайҙан алайым мин, булмағас, – тип илап ебәрҙе. –

Мин бит күреп торам: шул баланан айырыла алмайһың, уның янында донъяңды онотаһың. Һинең дә бит ул балаға хаҡың бар, һөйләш Байрас менән, Сөмбөлдө күндерһен, – тип иренең ҡаршыһына килеп теҙләнде. Кәнәфиҙә башын эйеп ултырған Булат Фәриҙәгә тишерҙәй итеп ҡараны:

– Мин һиңә, бала тап, тинем, Сөмбөлдөкөн тартып ал, тимәнем. Мин улымды күпме теләйем – шул тиклем яратам, уның янында булам, мин шуға риза инем, ә һин бөгөн мине барыһынан мәхрүм иттең. Ниндәй ҡанһыҙ кеше һин, ул бит бесәй балаһы түгел, һеҙҙә икәү, береһен беҙгә бир, тиергә нисек телең әйләнде? Минең бер ниндәй хаҡым юҡ ул балаға, Сөмбөл дөрөҫ әйтә, мин уны һиңә алыштырҙым!

Булат ҡатынын бер ҡырыйға этте лә өйҙән сығып уҡ китте.

Фәриҙә:

– Мине ташлап ҡайҙа китәһең, китмә өйҙән, ҡасма минән, – тип үкһеп иланы, күҙ йәштәре аша Сөмбөлдө ҡарғаны. Ул ҡайтҡансы, улар бик һәйбәт йәшәйҙәр ине, бөткән инеме уға башҡа ғаилә, башҡа ир, ниңә был донъя шулай тығыҙ һуң? Фәриҙә үкһей-үкһей бик оҙаҡ иланы.

Булат ошо көндән һуң тамам юғалып ҡалды, үҙ эсенә бикләнде, күҙҙәре моңһоуланды. Ул донъяла йәшәүҙең йәмен тапманы, ҡысҡырып көлгән кешеләргә ҡарап аптыраны. Элек эсе бошһа, әнеһе менән һөйләшә, атаһы янына ҡайта ине, атаһы уны һәр ваҡыт аңланы, ә иң мөһиме – уның донъялағы бар нәмәнән ҡәҙерлерәк улы бар ине. Хәҙер япа-яңғыҙ, ни әнеһе, ни атаһы, ни улы янына бара алмай. Сөмбөл уны бөтөнләй күрә алмаҫ булды, теге көндө: «Балаға яҡын килмә!» – тип нисек асынып ҡысҡырҙы. Ул барыһын да юғалтты, ул бер кемгә кәрәк түгел. Көн-төн йөрәкте ошо уйҙар тапаны, тирә-яғындағыларҙы күрмәне, үҙен яңғыҙ утрауҙа ҡалғандай хис итте. Әкренләп, эштән ҡайтҡанда, эсеп ҡайта башланы. Арыҫлановтар ғаиләһендә эскән кешеләр булмағанға, бер кемдең башында «Булат эсә башлар» тигән уй тыуманы, әһәмиәт итеүсе лә булманы.

Һалҡын көҙ килде. Ҡарлы ямғырҙар ҙа Булаттың йөрәк яныуын баҫа алманы. Ауылына күптәнән ҡайтҡаны юҡ, элек, исмаһам, улын шунда күрә ине.

Бер тәүлек эшләп ҡайтҡас, икенсе көндө ялында ҡайҙа барырға белмәй йөрөнө, йөрәк ярһыуҙарын баҫыр өсөн, ике йөҙ грамм араҡы эсеп алғандан һуң, әнеһе йәшәй торған йорт алдына килде. Ни өсөн килгәнен үҙе лә аңламаны. Нимәгә өмөтләнеп килде? Уҡыусылар мәктәптән ҡайта торған ваҡыт булғанға, ишек алды бала-саға тауышы менән тулды. Шул саҡ кемдер:

– Булат ағай! – тип ҡысҡырҙы.

Булат бер көтөү бала араһынан таныш тауыш эйәһен эҙләне, йөрәге йышйыш типте, үҙе «улым, улым» тип бышылданы. Арттан берәү килеп ҡосаҡлап алды, үҙе сылтыратып көлөп ебәрҙе.

– Булат ағай, ни эшләп тораһың бында?

Булат:

– Азамат улым, – тип малайын күтәреп алды. – Бына һине күрергә килдем, һағынып бөттөм үҙеңде. – Йәштәрен күрһәтмәҫ өсөн күҙен йәшерҙе.

– Әйҙә, беҙгә инәбеҙ, сәй эсербеҙ, минең ашағым килә, әйҙә, Булат ағай, – тип Азамат уның ҡулынан тартты.

– Юҡ, улым, инмәйем, әсәйең асыуланыр.

– Кем? Әсәйемме? Һин ингәнгә әсәйем ниңә асыуланһын? Улай ҡурҡһаң, әсәйемә әйтмәҫбеҙ. Әйҙә инде.

Булаттың улы менән аралашҡыһы, янында оҙағыраҡ торғоһо килгәнгә, ярай, ни булһа, шул булыр, тип ризалашты. Белһәләр, үлтермәҫтәр әле, үлтерһәләр, кемгә кәрәк бындай тормош.

– Әсәйеңә әйтмәһәң генә инәм.

– Эй, ҡурҡаҡ, әйтмәйем, әйҙә, – тип ҡысҡырып көлдө Азамат. – Шахмат уйнарбыҙ, яңы алымдар өйрәндем, һиңә лә өйрәтермен.

Баланың күҙҙәре ут янды, ярата ине ул Булат ағаһын, ул бит уның иң яҡын дуҫы.

Булат әнеһенең яңы фатирында әйберҙәр күсергәндә бер булған ине, башҡа килергә тура килмәне. Сөмбөл фатирҙы һәр ваҡыттағыса зауыҡ менән биҙәгән, бүлмәләрҙәге гөлдәр өйҙө гөл баҡсаһы иткән.

Азамат хужаларса аш йылытырға ҡуйҙы, сәй әҙерләне.

– Булат ағай, әйҙә, хәҙер ашап алайыҡ, унан уйнарбыҙ.

Ашап-эскәс, бергәләп өҫтәл өҫтөн йыйыштырҙылар ҙа донъяларын онотоп шахмат уйнарға керештеләр. Булаттың уйнай белмәгәнен күреп, Азамат эсе ҡатып көлдө. Улы янынан киткеһе килмәһә лә, Булат сәғәткә ҡарарға онотманы: ваҡыт бишкә яҡынлаша ине.

– Ярай, Азамат, мин китәйем инде.

– Һин тағы ҡасан киләһең?

– Киләйемме һуң? – тип иҙәнгә улы ҡаршыһына сүгәләне.

– Кил. Миңә һинең менән бик күңелле, – тип Азамат Булаттың муйынынан ҡосаҡланы.

– Әсәйең белһә, асыуланыр бит.

– Ә беҙ әсәйемә әйтмәйбеҙ.

– Улайһа иртәгә килермен, – тип улын ҡосоп һөйҙө лә, һаубуллашып, үҙ алдына йылмайып ҡайтып китте. Ошо көндән башлап уларҙың уртаҡ серҙәре барлыҡҡа килде. Азамат мәктәптә булған хәлдәрҙе, ата-әсәһенә һөйләмәгән серҙәрен дә Булат ағаһына һөйләне.

Булат уның янына бараһы көндө ауыҙына бер грамм араҡы ҡапманы, ә ҡайтышлай ике йөҙ грамм һала торған ғәҙәте барлыҡҡа килде. Өйҙә араҡы еҫе һиҙелә башланы. Булат йоҡлағанда, һаташып, Азамат менән һөйләшә. «Сөмбөл, асыуланма инде» тигән һүҙҙәр ҙә ишеткәс, Фәриҙә бөтөнләй тынысһыҙлығын юғалтты. Бер көндө эштән һорап ҡалып, ирен күҙәтергә уйланы. Ире инде күптәнән уның янына килмәй, сит кешеләр кеүек, һәр ҡайһыһы үҙ алдына йәшәй. Күңелендә, «бәлки, Сөмбөл менән сыуалалыр» тигән шик тыуҙы. Эйе, күҙәтә торғас, ысынлап та Булаттың шунда йөрөүе асыҡланды. Фәриҙә түҙмәне, Байрастың эшенә шылтыратты, үҙен танытмаҫ өсөн тауышын үҙгәртеп һөйләште.

– Һин эштә ваҡытта ҡатының янына Булат килеп йөрөй, биш тулыр алдынан сығып китә. Мин көн дә тәҙрәнән күреп ҡалам.

Бына хәҙер ҡарап ҡарарбыҙ, ireң ҡайтып тотһа, нисек йырларһың икән, тип, үҙ ҡылығына үҙе шатланып ҡуйҙы Фәриҙә.

Байрастың башына килтереп һуҡҡандай булды, был һүҙҙәргә ышанырға-ышанмаҫҡа белмәне. Кем булды был? Нисек инде ағаһы ундай эшкә бара алһын? Шулай ҙа ул тиҙ генә йыйынып, ҡайтырға уйланы, сығып китер алдынан Сөмбөлгә шылтыратаһы итте.

– Сөмбөл Харисовна операцияла, тиҙ генә бушамаҫ, – тинеләр.

Байрас ҡайтып ингәндә, Булат менән Азамат сәй эсеп ултыралар ине.

– Бына нисек икән хәлдәр? – тине Байрас, ағаһына ҡарап.

Бала бер атаһына, бер ағаһына ҡараны, Булат ағаһының ҡурҡып ҡалыуын күреп:

– Беҙ Булат ағай менән шахмат ҡына уйнайбыҙ, ә ул әсәйемдән ҡурҡа. Атай, һин әсәйемә әйтмәҫһеңме? – тине ялбарыулы тауыш менән.

Байрас:

– Ярай, уйнағыҙ, әйтмәм. Ҡайҙа, мин дә сәй эсәйем, үтешләй генә ингән инем, – тип тиҙерәк китергә ашыҡты. Сыға-сығышлай үҙенә асыуланырға тотондо. Яла яҡҡан кешенең теле ҡороһон, ә мин, йүләр, шуға ышанып, күҙемде тондороп сабам. Сөмбөл белһә, битемә төкөрөр.

Ағаһын да йәлләп ҡуйҙы, ябыҡҡан, ҡартайып киткән. Байрасты күргәс, әллә нисек ҡурҡып ҡалды. Эйе, йән тартмаһа, ҡан тарталыр, ана бит Азамат атаһына нисек тартыла, нисек яҡларға белмәй. Сөмбөл ҡайтып күрһә, ни булыр, әйтеүе лә ҡыйын. Меҫкен ағаһы, үҙ улы менән ҡаса-боҫа күрешергә килә. Ни эшләһен, башҡа сараһы юҡтыр, күрәһең. Әйҙә, килһен, һағыналыр, ул да эштән Айһылыуын бик һағынып ҡайта бит. Ағайға «килмә» тип әйтеп булмай, тиҙерәк йортоноң эшен бөтөрөп күсергә кәрәк. Бында кем кергәнен, кем сыҡҡанын йөҙ күҙ күҙәтеп тора.

Йәй буйы улар бергәләшеп өйҙөң эсен-тышын эшләне. Булат килде, Азамат улар янында йөрөнө. Байрас, ағаһының араҡы менән мауығыуын һиҙеп:

– Ағай, эсмә, ауырлыҡтарҙы улай еңеп булмай. Улыңа ниндәй үрнәк күрһәтәһең, ҙур бит инде ул, араҡы еҫе кәнфит еҫе түгел, уны кем дә яҡшы айыра. Бер кереп батһаң, сыға алмаҫһың, атайымдарға ҡара ҡайғы булырһың. Сөмбөл белһә, Азамат янына яҡын ебәрмәҫ, – тине.

– Белһә, былай ҙа ебәрмәҫ.

– Ниңә белмәһен, белә, тик эскәнеңде генә белмәй.

– Ярай, энем, тырышып ҡарармын. Һеҙҙең менән рәхәт, ә өйгә ҡайтып инге килмәй, эскәс, еңелерәк булып китә, ҡайтып йоҡлайым. Айыҡ башты ауыр уйҙар баҫа, донъяның бер йәме, бер тәме ҡалмай.

Байрас ағаһы өсөн ҡурҡып ҡуйҙы:

– Донъянан туйырға ашыҡма әле, ағай. Беҙ бергә бит, йәшермә сиреңде, ни борсой һине, нимә етмәй? Ниңә, нимәлер юғалтҡан кеше шикелле, һәр ваҡыт башыңды аҫылындырып йөрөйһөң?

– Юғалттым, энем, юғалттым. Хәҙер шуның ғазабын кисерәм. Яңыһын башлап булмай, иҫкеһен ташлап булмай. Ҡалғанын һорама, үҙең дә беләһең.

Өс йыл тигәндә, өй әҙер булды. Көҙөн, япраҡтар һарғайғансы тип, Байрас ғаиләһен күсерергә уйланы. Иң беренсе Сөмбөлдөң үҙен генә алып килеп күрһәтергә теләне.

– Әйҙә, әсәһе, минең эшкә баһа бир әле, – тип ҡатынын етәкләп өйгә алып инде.

Өй эсендәге ҡарағай еҫе, буялмаған иҙән-түшәмдәрҙең һары таҡталары, икенсе ҡатҡа күтәрелә торған һырлап, матурлап эшләнгән баҫҡыс, иркен бүлмәләр, гөлдәр ҡуйырға тип уйланылған киң тәҙрә төптәре һәр кемде һоҡландырырлыҡ ине.

– Әйҙә әле, мин һиңә үҙебеҙҙең йоҡо бүлмәһен күрһәтәм.

Байрас ҡатынын икенсе ҡатҡа алып менде. Йәнәшә урынлашҡан өс йоҡо бүлмәләренең береһенең ишеген асты:

– Рәхим итегеҙ, Сөмбөл ханым, был беҙҙең мөхәббәт оябыҙ. – Ҡатынын бик матур бүлмәгә алып инде, үҙе уны ҡосаҡлап: – Оҡшаймы? Тәҙрә урманға ҡарап тора, ишек алды ла күренә. Йә, нисек? – тип үҙенә табан борҙо, эйелеп Сөмбөлдөң күҙҙәренә ҡараны. – Теләһәң, өсөнсө ҡат та төҙөйөм, унан айға юл һалам, һине шунда алып менеп яратырмын, – тип күҙҙәрен ялтыратты. – Тик һин әйт кенә.

Сөмбөл был бышылдауҙарҙың, күҙ ялтыратыуҙарҙың ни менән бөтәсәген белә ине.

– Сабырһыҙланма, ҡарттар йыйып, Ҡөрьән уҡытайыҡ, күҙеңде унан ялтыратырһың.

– Шулай ҙа һине бер генә үпһәм, гонаһ булмаҫ бит. Әгәр ҙә һиңә мин һалған өй оҡшаһа, миңә бер наҙ бүләк ит, – тип ҡатынын ҡыҫып ҡосаҡланы.

Сөмбөл ҡаршы килмәне, үрелеп иренең ирененән үпте, бышылдап:

– Миңә бик оҡшай, бында бар нәмә һинең кеүек матур. Мин был өйҙө һәр ваҡыт бында ҡайтаһың килеп торорлоҡ итеп биҙәрмен, уның һәр мөйөшө йылмайып торор, – тип иренең күкрәгенә башын ҡуйҙы. – Миңә шундай рәхәт. Байрас, иртәгә, беләһеңме, ниндәй көн?

– Юҡ, белмәйем.

– Беҙ ҡушылғанға биш йыл була. Шул биш йылда балабыҙ тыуҙы, өй һалдыҡ, кеше араһында дәрәжәгә ирештек.

– Эйе, ғүмер биш көн кеүек кенә үткән дә киткән, барыһы ла бар, күҙ генә теймәһен, мин тормошомдан бик ҡәнәғәт.

Улар бер аҙнанан яңы өйгә күсеп сыҡтылар, хәҙер үҙ донъялары менән йәшәйҙәр. Баҡсаларына Силәбе питомнигынан төрлө емеш ағастары ҡайтарҙылар, ағастарҙы һәр кемгә атап ултырттылар.

Азамат:

– Булат ағайға ла ултыртайыҡ, – тип бер алмағас алып килде.

Сөмбөл менән Байрас бер-береһенә ҡарашып алды.

– Ярай, килтер, улым, бына бында, һинеке янына ултыртайыҡ. Унан Әлфис ағайыңа ултыртырбыҙ.

Шулай итеп, әкренләп Учалы янында Бурансы ауылы үҫеп сыҡты. Үҙ өйҙәре менән йәшәргә теләүселәр Сөмбөл менән Байрас ҡына булмаған икән, ауыл күҙгә күренеп ҙурайҙы.

Яңы йылда өй туйы уҙғарҙылар, йорт уртаһында ҡалған ҡарағайҙарҙы биҙәнеләр. Яҙын Сөмбөл баҡсаһына бөтә тирә-яҡтың күҙ яуын алырлыҡ сәскәләр ултыртты. Барыһы һәйбәт кенә барһа ла, Сөмбөлдөң йәненә Булат тынғылыҡ бирмәне. Ул йә эшкә киткәнсе, йә эштән һуң энеләренә килә торған булды. Азамат менән икәү әллә нәмә эшләйҙәр, үҙ-ара ниҙер һөйләшәләр. Сөмбөл уны күрмәмешкә һалынды, улы янына килгән кешене ҡыуып сығарып булмай бит инде. Һуңғы ваҡытта Булат әллә нисек ҡыҙғаныс күренә ине, ул Сөмбөлдөң күҙенә салынмаҫҡа тырышты. Ул көн дә тиерлек килде, һуң ғына ҡайтып китте, Азамат уны боролошҡа тиклем оҙата бара торған булды.

Бер көндө Сөмбөл тәҙрәнән шаршау аша уларҙы күҙәтеп торҙо. Булаттың ҡулдарын болғай-болғай һөйләүен күреп, аптырап китте. Иренең килеп баҫыуын һиҙмәгән икән:

– Эйе, ҡыҙғаныс, – тигән һүҙҙәренән һиҫкәнеп ҡуйҙы.

– Бәй, ҡайтҡаныңды ишетмәнем.

– Ҡайттым. Ҡамасауламайым тип, тиҙерәк инеп киттем, йәлләйем мин ағайымды, ярҙам ғына итә алмайым. Бәлки, һин һөйләшеп ҡарарһың?

– Нимә тип? Булат бөгөн әллә ниндәй сәйер күренә.

– Ул яҡшы ғына эсә башланы, хәйер, күптән инде. Һөйләшеп тә ҡараным... Ул Азаматтан йыраҡ йәшәй алмай, өйөнә ҡайтып йәм тапмай, мин уға нисек ярҙам итергә белмәйем. Бөтә өмөт һиндә генә, Сөмбөл, бәлки, һине тыңлар, тик ҡыума ғына, унан бөтөнләй юҡҡа сығыр, әле әҙерәк булһа ла бала тотоп тора.

– Ҡара әле, Байрас, уға тип атап ултыртҡан алмағас та үҫеп китә алмай интегеп ултыра, әйтерһең дә, Булаттың хәлен аңлай. Азамат бер көндө: «Әсәй, был алмағас ниңә үҫмәй икән, үләм-үләм тип ултыра», – ти. Хикмәт, быларҙың өсөһөн дә нимә бәйләй? Ниндәй һүҙҙәр табайым һуң мин уға?

– Тап, Сөмбөл, тап, һин бит табип, һин һәр ваҡыт кәрәкле һүҙҙәрҙе таба беләһең, йығылғанды ҡыйнамайҙар, ярҙам ит, – тип Байрас Сөмбөлдөң күҙҙәренә

ялбарып ҡараны. – Атай менән әсәй хаҡына. Улар быны белһә, күтәрә алмаясаҡтар, беҙҙең нәҫелдә эскеселәр юҡ бит, үҙең беләһең.

Сөмбөл, уйланып, ишек алдына сыҡты:

– Азамат, кер әле, улым, атайың саҡыра, – тип улын өйгә индереп ебәрҙе.

Булат, Сөмбөлдөң тауышын ишеткәс, тиҙ генә баҡсаға инеп китте, өй ышығына барып баҫты. Сөмбөл әкрен генә килеп, уның беләгенән тотто.

– Ҡасма, барыбер сысҡан кергән тишеккә һыймаҫһың.

Булат баҫҡан урынында таш кеүек ҡатып ҡалды. Сөмбөл уның ҡаршыһына килеп баҫты. Булаттың әллә күп эсеүҙән, әллә кеше төҫлө йоҡламауҙан күҙ ҡабаҡтары шешенгән, ҡасандыр матур зәңгәр күҙҙәре хәҙер болғансыҡ һыу төҫөн хәтерләтә, сәстәренә сал төшкән. Сөмбөлдөң йөрәге ҡыҫылып ҡуйҙы. «Ни булды һиңә, Булат, ниңә былай таушалдың?» – тиәһе килде.

Сөмбөлдөң ҡайнар күҙ ҡараштары Булатты яндыра-көйҙөрә ине, ул уларға тура ҡарарға ҡурҡты. «Эләктем, хәҙер мине ҡыуасаҡ», – тип уйланы.

– Әйҙә, Булат, асыҡтан-асыҡ һөйләшәйек әле, ун йылдан артыҡ ваҡыт үтте, ҡасан да булһа бер һөйләшергә кәрәктер бит беҙгә, кил, ултыр ҡаршыма, – тип баҡсалағы өҫтәл янына саҡырҙы, улар ҡапма-ҡаршы ултырҙы. Булат ҡулдарын ҡайҙа ҡуйырға, күҙҙәрен ҡайҙа йәшерергә белмәне.

– Булат, ниңә былай уғры кеүек ҡасып йөрөйһөң? Киләһең, өйгә инмәйһең, был бит минеке генә түгел, энеңдең дә өйө, һинең өсөн беҙҙең ишек һәр ваҡыт асыҡ. Ниңә былай йөрөйһөң? Әллә эсә лә башлағанһың, йөҙөң талсыҡҡан, ҡанаттары һынған ҡош кеүек, иңбаштарың аҫылынып төшкән. Ни етмәй һиңә, нимә юғалттың, бәхетле булырға нимә ҡамасаулай? Һөйлә, аңлармын.

Булат Сөмбөлгә ҡараны:

– Бәхетте бер юғалтһаң, табып булмай икән, ул һинең менән бергә китте. Теге ваҡытта һин иланың, хәҙер мин илайым. Һинең ҡарғыштарың йөҙөмә менән төштө. Һин беҙҙең өйҙә йәшәгән саҡта булған икән ул бәхетле миҙгелдәр... һин китеп юғалғас, юҡһына башланым, өйләнгәс, онотормон, тип уйланым. Ҡарт алмағас төбөндә, бала менән һине һағынып, мин бик күп иланым. Атай аңлай ине мине: «Яңылышаһың, улым, үкенерһең – һуң булыр, баланы йәллә», – тине. Эх, йәшлек, үкенестән үлеп булмай, Сөмбөл, быны аяҡтар үҙҙәре алып килә һеҙгә. Үҙем киләм, «Балаға яҡын килмә!» тиерһең тип, үҙем ҡурҡам. Азамат – минең был донъяла берҙән-бер йыуанысым. Йәллә, тимәйем, хаҡым юҡ, рәнйеттем һине, хәҙер шуның уңышын йыям. Кисер мине, Сөмбөл, кисерә алһаң. Энем булһа ла, Байрасҡа көнләшеп ҡарайым мин, ул күпкә аҡыллыраҡ булып сыҡты, мин генә һуҡыр булғанмын. Мин хәҙер һинең менән үткән йылдар хәтирәһендә йәшәйем, Азаматты бер көн күрмәһәм дә, ауыр. Тормоштағы ҡайһы бер хаталарҙы төҙәтеп була, тик минекен түгел, – тип ауыр һуланы, бармаҡтарын ағара башлаған ҡуйы сәсе араһына батырҙы. – Яратҡанмын икән мин һине, Сөмбөл, тик һуңлап аңланым. Булдыра алһаң, килтергән ғазаптарым өсөн кисер мине...

Икеһененең дә тамаҡ төбөнә төйөр ултырҙы, күҙҙәренә йәш тулды, бер-береһенә текәлеп ҡаранылар. Сөмбөл күкрәк тултырып тын алды:

– Булат, тыңла әле, мин һине бер ҡасан ҡарғаманым. Рәнйенем, иланым, тик ҡарғаманым. Мин барыһына үҙемде ғәйепләнем. Һин миңә өйләнгән булһаң, беҙ икебеҙ ҙә бәхетһеҙ булыр инек. Һин үҙеңдең тормошҡа ашмаған хыялыңды һағынып, ә мин көсләп тағылған ҡатын булып кәмһенеп йәшәр инек, уҡымаған, бер наҙан булыр инем. Мин һине ҡарғаманым, Булат, һин яратмағас, үҙемде, яратырлыҡ кеше түгел, тип уйланым. Мин һине шашып яраттым, яраттым да, яндым да. Бына инде нисә йыл Байрас менән йәшәйем, ләкин мин уны һине яратҡан кеүек яратырға ҡурҡам. Ул барыһын да һиҙә, әммә сабыр ғына көтә

бирә... Һинең былай йөрөүең йәнемде талай, йөрәгемә тынғылыҡ бирмәй, үҙемде ғәйепле кеше шикелле хис итәм.

– Килмә, тиһеңме?

– Юҡ, юҡ, улай тимәйем, кил, өйгә ин, ҡасҡын кеүек йөрөмә һәм эсеүеңде ташла. Балабыҙ хаҡына үтенеп һорайым, эсеп юҡҡа сыҡма. Бала алығыҙ, көн һайын күпме бала йәтим ҡала, бер йәтимде бәхетле итһәгеҙ, үҙегеҙ ҙә бәхетле булырһығыҙ. Оҙаҡламай Азамат үҫеп, сығып китер. Ул ваҡытта ҡайҙа барырһың? Алығыҙ бала, үҙем ярҙам итермен, ә Фәриҙәне бала таба алмағанға ғәйепләмә, Хоҙай шулай яратҡас, ни эшләһен. Һин бит уны яратаһың, ә яратҡан кешеләрҙе бөтә кәмселектәре менән яратырға кәрәк. Һин уны аңларға, ярҙам итергә тырыш. Мин бала тапһам да ярата алманың, ул таба алмай тип ташлама, хата бер була. Эсеүеңде ташла, Арыҫлановтар нәҫелендә эскән кеше юҡ, һин эсһәң, һинән күреп, улың эсә башлар. Ана теге бәләкәй генә алмағасты Азамат һиңә атап ултыртҡан ине, күрәһеңме, ул да сирләй, бала ағастың насар үҫеүенә бик борсола. Һин терелһәң, ул нығып үҫеп китәсәк. Килтергән ҡорбандарың юҡҡа булмаһын, һин бәхетле булһаң, мин дә бәхетле булырмын. Байрасҡа, ҡурҡмайынса, йөрәгемде аса алырмын. Булат, үткәндә ҡалған мөхәббәтебеҙ хаҡына бәхетле булырға тырыш! Мине, бер ни күрмәй, тимә, мин һинең һәр аҙымыңды күҙәтеп торам, онотма. Мин һинең берҙән-бер балаңдың әсәһе, улың үҙеңә оҡшаған, мин уның киләсәген ҡайғыртам, насарлыҡҡа өйрәтһәң, мәңге кисермәм.

Улар баҡсала бик оҙаҡ ултырҙылар, Байрас та сығып, улар араһына ҡатышманы. Был эскерһеҙ һөйләшеү, бәлки, Сөмбөл менән Булатҡа күптән кәрәк булғандыр, икеһе лә еңеләйеп ҡалдылар, уртала торған кәртә юҡҡа сыҡты.

Бер көндө Сөмбөл, ниҙер уйланып, тәҙрәнән ҡарап торҙо ла:

– Ҡара әле, атаһы, ана ҡаршыла ниндәй буш урын. Әйт Булатҡа, һалһын шунда бер йорт, йөрөмәһен ике арала тилмереп, – тип үҙ янына ирен саҡырҙы.

– Эйе шул, бик һәйбәт урын, үҙе менән һөйләшергә кәрәк.

Булатҡа әйткәс, ул бик ентекләп әлеге урынды килеп ҡараны, оҙаҡ ҡына әйләнеп йөрөгәндән һуң:

– Нимә, улым, мин дә шунда өй һалайымы? – тип йылмайҙы.

Азамат:

– Нисек шәп булыр, һиңә төндә өйөңә ҡайтырға кәрәк булмаясаҡ, – тип һөйөндө.

Булат, Сөмбөл менән Байрасҡа ҡарап:

– Һеҙ ҡаршы килмәһәгеҙ, мин риза, – тип йылмайҙы. Уның тормошҡа ҡарашы үҙгәрҙеме, күңелендә өмөт уяндымы, нисек кенә булмаһын, Булаттың күҙ ҡарашы хәҙер асыҡ һәм тыныс ине.

– Улайһа, килештек, ағай, урынды барып һөйләшәбеҙ ҙә быйыл уҡ өйҙөң нигеҙен һалып ҡалдырабыҙ.

– Ай, шәп була, – тине Азамат, шатланып Булат ағайын ҡосаҡлап алды, – мин дә һеҙгә булышам.

Азаматҡа тиҙҙән ун ике йәш тула, Арыҫлановтарға оҡшап эре кәүҙәле булмаҡсы, Сөмбөлдөң, миңә оҡшап бәләкәй булып ҡалмаһын, тип ҡурҡыуҙары бушҡа булды. Айһылыу иһә кәтүк, үҙе тик тормаҫ, сиған балаһы кеүек ҡап-ҡара, ә күҙҙәре зәңгәр ут сәсеп тора. Сания апай уны Сөмбөлгә оҡшата. Айһылыуҙы йыш ҡына ауылға Сания апай янына ҡайтаралар, ике яҡ та үпкәләмәһен өсөн, алмаш-тилмәш ҡайтарырға тырышалар.

Сөмбөлдөң эше үҙ яйы менән барҙы. Хәҙер инде ул кисәге йәш өйрәнсек белгес түгел, ә дәрәжәле, эшен яҡшы белә торған табип. Урамда күптәр уны танып иҫәнләшә, рәхмәт әйтеп китәләр. Уның ҡул аҫтында күпме бала донъяға килде,

күпме ҡатын-ҡыҙҙы ауыр сирҙән ҡотҡарҙы. Ярата ине ул эшен, һәр ваҡыт кешеләргә мөләйем һәм яғымлы булды.

Сөмбөл менән Байрас нисек кенә матур, татыу йәшәмәһендәр, ғаилә тормошо һынауҙары уларҙы ла урап уҙманы. Дуҫ бар, дошман бар, тигәндәй, кемдер уларҙың тормошон бик тә боҙорға тырыша ине.

Сөмбөл «Байрас үҙенең эшендә йәш ҡыҙ менән йөрөй» тип яҙылған әллә нисә хат алды. Был хаттарҙы уҡығас, йөрәге ҡыҫылып ҡуйҙы. Бик оҙаҡ һушына килә алмай торҙо, көс-хәл менән үҙен ҡулға алып, хатты йыртып, мейескә ташланы. Иренә бер ни һиҙҙермәне. Үҙ йорттарына күскәс килмәҫ, тип уйлаһа ла, хаттар дауамлы килә торҙо.

Бер көндө Байрас, эштән ҡайтҡанда, почтаны үҙе алып керҙе. Гәзиттәр араһынан килеп сыҡҡан хатты әйләндереп ҡараны, «Арыҫланова Сөмбөлгә» тип яҙылғанын күреп, ҡатынына һуҙҙы. Конвертта, ғәҙәттәгесә, кире адрес күрһәтелмәгән ине. Сөмбөлдөң йөҙө ағарып китте, хатты ҡарап та тормаҫтан мейескә ташланы, үҙе икенсе бүлмәгә үк сығып китте. Байрас аптырап ҡалды, ҡатынының хатты күреп ҡаушап ҡалыуын, уның ниҙер йәшерергә тырышыуын аңлап алды. Тиҙерәк мейестән хатты тартып сығарҙы ла асып уҡый башланы. Үҙенең дә йөҙөнән ҡаны ҡасты, унда яҙылған һүҙҙәр башына һыйманы. «Һинең ирең үҙ сәркәтибе менән йөрөй, ул оҙаҡламай һиңә үҙенең һөйәркәһен бәпесләргә алып киләсәк. Байрас минеке генә тип йәшәмә, был ҡалала уның ваҡытлы ҡатындары күп, һин генә бер ни һиҙмәйһең...»

Байрас хатты ҡат-ҡат уҡыны, ниҙер аңларға тырышты. Хатты Сөмбөл уҡыманы, тимәк, уға былдай хаттарҙың беренсе тапҡыр ғына килеүе түгел. Ул хатты тотоп Сөмбөл янына сыҡты, ҡулдары ҡалтыраны, асыуҙан тешен ҡыҫты. Үҙен-үҙе ҡосаҡлап тәҙрә янында баҫып торған ҡатынының артына килеп баҫты.

– Ҡасандан килә былдай хаттар?

Сөмбөл өндәшмәне.

– Ниңә өндәшмәйһең, ҡасандан?

– Ике йыл, бәлки, күберәктер.

– Ике йыл? Ниңә мин бер ни белмәйем?

Ул Сөмбөлдө үҙенә борҙо, күҙенә ҡарарға тырышты.

– Сөмбөл, минең һиңә бер ҡасан да хыянат иткәнем юҡ, был ялған, ышан миңә. – Ул Сөмбөлдөң эйәген күтәреп, күҙҙәренә ҡараны. Сөмбөлдөң күҙ ҡарашында тәрән әрнеү сағыла ине. – Сөмбөл, яфалама үҙеңде, Хоҙай шаһит, донъяла бөтә йәнем-тәнем менән яратҡан кешем – ул һин! Ни өсөн һин бөтә ауырлыҡты үҙең генә күтәрергә тырышаһың? Ниңә әйтмәйһең? Ниңә үҙ-үҙеңде өҙгөләйһең? Һинең алда минең намыҫым таҙа, ышан миңә. Һин минең иң ҡәҙерле кешем.

Сөмбөл Байрастың ҡулынан хатты тартып алды, бер һүҙһеҙ бер нисә киҫәккә йыртҡылап, кире иренең усына һалды.

– Гонаһың булмаһа, аҡланып маташма, ә хатты ҡайҙан алдың, шунда ташла. Үҙең әйтмешләй, барыһына ла Хоҙай шаһит, оло мөхәббәт ваҡланмай ул.

Ҡасандыр Ғәлимә апаһы уға бер нәмәне бик яҡшы аңлатты. Әнүәр ағаһы бик сибәр кеше, шуға Сөмбөл:

– Ғәлимә апай, һин көнләшмәйһеңме? – тип һораған ине.

– Сибәр ир менән йәшәү бик ауыр ул, үҫкәнем, ниңә көнләшмәҫкә, көнләшәм, тик һиҙҙермәйем. Беҙҙең араны боҙорға теләүселәр бик күп булды, ҡайһы ҡатын-ҡыҙҙың таҙа, сибәр ир ҡуйынында йоҡлағыһы килмәһен? Бик ҡыйыу ханымдар бар, үҙ теләктәренә ирешеү өсөн ниндәй генә юлдар тапмайҙар, ҡайһы бер ирҙәр шул тоҙаҡҡа эләгеүҙәрен һиҙмәй ҙә ҡалалар. Унан, ирҙәр – ирҙәр

инде, ҡырын ҡараған һайын, ирҙән айырылып булмай бит. Ул икенсе ҡатынға китһә, һин үҙең шул ҡатын хәлендә ҡалаһың. Кеше яңғыҙ йәшәй алмай, ул ваҡыт уҙыу менән үҙенә пар эҙләй башлай, сөнки тәбиғәт кешене шулай яратҡан.

– Нисек йәшәргә һуң, апай? Барыһын да кисерергәме?

– Кисерә алһаң, кисерергә. Кеше ғашиҡ булған ваҡытта башын юғалта, кеше үҙ ғүмерендә мең тапҡыр ғашиҡ булырға мөмкин. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ғаиләле кешеләргә лә ҡағыла ғашиҡ уты, бына шунда һынала инде мөхәббәт, сөнки әкренләп теге ут һүнә, ә мөхәббәт ҡала бирә. Бындай ғашиҡ дауылдарынан иҫән сыҡҡандар үҙ мөхәббәттәренә икеләтә көс менән кире ҡайта. Икенсеһенең береһе, кисергәне, сабыр ғына көткәне өсөн, ғүмере буйы мең рәхмәтле булып йәшәй. Һәр кемдең бәхетле булғыһы килә, кем ниндәй юлдар менән ирешә инде, уныһын үҙе һайлай. Ә ирең ситкә ҡарамаһын тиһәң, наҙыңды, татлы телеңде йәлләмә, ҡайҙа барһа ла, үҙемдекенә етмәй, тип һағынып ҡайтырлыҡ булһын. Кешеләр, бигерәк тә ирҙәр, өйҙә күрмәгән наҙҙы ситтән эҙләйҙәр. Улар өйгә ял итергә ҡайталар, ә өйҙә тауыш, уны-быны талап итәләр, үҙ-үҙен ҡарамай торған ҡатын да булһа... Ә һөйәркә юҡты бар итеп өҫтәл әҙерләй, матур эске кейемдәрен кейә, сәстәрен яһап, биҙәнеп, йылмайып ҡаршы ала, иркәләй, наҙлай, күгәрсен кеүек гөрләй, күккә күтәреп маҡтай, ул ир, ысынлап та, үҙен донъялағы иң яҡшы егет солтаны итеп хис итә. Өйҙә үҙен ҡатыны һанламай, тип уйлай, һырт ҡабартып сығып киткән була, ә уртаҡ тормош тауышһыҙ ғына булмай, бергә йәшәй башлағас, унда ла шул уҡ хәл ҡабатлана. Тормоштоң ҡырҙары бик күп, уларҙы шыма ғына үтеп булмай, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙға аҡыллы, сабыр булырға кәрәк.

Сөмбөл Ғәлимә апаһының был кәңәштәрен хәтеренән сығармаҫҡа тырышты, беренсе ике хатты алғас та апаһынан кәңәш һорап яҙҙы. Ғәлимә апаһынан: «Дошмандарға һөйөнөргә ризыҡ бирмә, йөрәгеңде тыңла, тағы ла яҡшыраҡ йәшәргә тырыш», – тигән яуап килде. Эйе, Байрас һәр ваҡыт иғтибарлы һәм яҡшы ир, балалар өсөн үлеп тора. Буш ваҡытында, эштән һуң өй эштәре менән шөғөлләнә. Төшкө аш ваҡытында, биш минутҡа булһа ла, Сөмбөл янына килеп, юҡбар һөйләп, кеше күрмәгәндә бер ҡосаҡлап китә. Был инде ғәҙәткә инеп китте, хәҙер сәғәт уҡтары ун икегә яҡынлашһа, Сөмбөл үҙе лә, бөгөн килерме, тип көтә башлай. Шуға күрә уның әллә ни шиге юҡ. Ғәлимә апаһы әйткәндәй, дошмандарға сәйнәргә аҙыҡ бирмәйем, тип, Байрастан бер ни һораманы, аңлатыу талап итмәне. Бөгөн хат, һис уйламағанда, Байрас ҡулына эләккән.

Урамдан ингән Айһылыу, йүгереп килеп, атаһының аяғына һарылды.

– Атайым ҡайтҡан, атайым, – тип һикергеләне.

Байрас ҡыҙын күтәреп алды, ҡара бөҙрә баш атаһының муйынынан ҡосаҡлап, «суп-суп» битенән үпте. Ни эшләптер атаһы бөгөн көлмәне, бала аптырап әсәһенә ҡараны.

– Әсәй, атайымды асыуландырҙыңмы әллә? Ниңә ул көлмәй?

– Юҡ, ҡыҙым, атайыңдың ашағыһы килә, бар, ағайыңды саҡыр, киске ашҡа ултырабыҙ.

Атаһы ла:

– Бар, ҡыҙым, – тип ҡыҙын алдынан төшөрҙө.

Сөмбөлдөң башында бер генә уй: ул кеше һүҙенә ҡарап, балаларын ата наҙынан мәхрүм итмәйәсәк. Байрас атаһына – Шәфҡәт ағайға оҡшаған, бала йәнле кеше. Сөмбөл иренә ышана.

– Ярай, мин аш әҙерләйем әле, – тип аш бүлмәһенә атланы.

– Туҡта, Сөмбөл. – Байрас, эйелеп, ҡатынының күҙенә ҡараны.

– Кәрәкмәç, һуңынан һөйләшербеҙ.

Улар, һәр ваҡыттағыса йыйылышып, киске аш ашанылар. Байрас тәрән уйға сумды. Ниңә Сөмбөл хаттар тураһында алдан әйтмәгән? Берәү булһа, илар, аңлатыу талап итер ине, ә ул өндәшмәгән. Нисек аңларға, Сөмбөл уға битарафмы, әллә, хаталар ҡабатлана, тип йәшәйме? Булат менән яңылышҡан кеүек яңылыштым, был юлы ла алданылар, тип йәшәйме? Былай булһа, Сөмбөл мине бер ҡасан да яратмаясаҡ. Кем генә булмаһын, хатты яҙған кешене ҡәһәр һуҡһын, үҙ яуызлығы үҙенә ҡайтһын! Был донъяла ул һис нәмәнән ҡурҡмай. Уның бөтә ҡурҡҡаны – Сөмбөлдө, балаларын юғалтыу. Күпме йылдар ул Сөмбөлдөң мөхәббәтен яуларға хыялланды, хәҙер инде өмөтөн бөтөнләй өҙҙө. Ҡулы өçтөндәге бәләкәй ҡул уны уйҙарынан арындырып ебәрҙе.

– Атаһы, ашың һыуына.

Байрас башта ҡатынының ҡулына, унан күҙҙәренә ҡараны. Ике пар күҙ бер-береһен аңларға тырышты.

Сөмбөл, эшен бөтөрөп, йоҡо бүлмәһенә ингәндә, Байрас, өçтөн һалмаған килеш, һаман уйға сумып ултыра ине. Сөмбөл уның янына килеп ултырҙы, улар күпмелер ваҡыт икеһе лә һүҙһеҙ ҡалды.

– Сөмбөл, ниңә әйтмәнең?

– Һине борсоғом килмәне.

– Ә үҙең борсолманыңмы?

– Борсолдом, иланым, урамға сығырға ояллдым, һине берәйһе менән күрһәм, йығылып китермен шикелле тойола ине. Бәлки, һин ысынлап та ғашиҡ булғанһыңдыр, һинең кеүек көслө кеше йәшермәç, дөрөçөн үҙең әйтерһең, тип уйланым. – Сөмбөл, Байрастың күҙҙәренә күтәрелеп ҡарап: – Һин ышанырға ҡуштың, мин ышандым, – тип бышылданы. – Әгәр һин башҡаны ятһаң, минең күҙ йәштәрем генә һине тотоп ҡала алмаясаҡ. Мин үткәнемде яҡшы хәтерләйем, ул саҡта күҙ йәштәрем йылға булып аҡты, ә уны туҡтата алманым, һине лә шулай...

– Сөмбөл, эй, Сөмбөл, һин һаман миңә ышанмайһың. Йә бөгөн, йә иртәгә барыбер ташлап китер, тип уйлайһың, шуға күрә йөрәгеңде асырға, яратырға ҡурҡаһың, һаман артҡа әйләнеп ҡарайһың, хәтирәләреңде онота алмайһың, миңә ышанмайһың.

– Мин һиңә ышанам.

– Ышанаһың, ләкин һин мине яратмайһың.

Сөмбөл өндәшмәне. «Минең һине юғалтаһым килмәй» тип уйлаһа ла, ҡысҡырып әйтмәне, эш һүҙҙәме ни.

Байрас ҡатынын бик ярата, уның һәр аҙымын, һәр эшләгән эшен, ҡуҙғалып китеүҙәренә тиклем аçтан ғына күҙәтеп һоҡлана ине. Теге көндән һуң бер аҙна үҙ-ара һөйләшмәнеләр. Байрас ғәҙәттәгесә ҡатынын һәр көндө эшенән инеп алды, юл буйы һүҙһеҙ генә ҡайттылар, былай үҙҙәрен ғазаплауҙары беренсе тапҡыр ине. Сөмбөлдөң эшендә көтөлмәгән хәл килеп сыҡмаһа, был ғазапланыуҙар ҡасанға тиклем дауам иткән булыр ине, билдәһеҙ. Больницаға йәш бер ҡыҙ баланы алып килделәр. Ҡулдан бала төшөртмәксе булған, шуның һөҙөмтәһендә күп ҡан юғалтҡан был ҡыҙҙы ҡотҡарыу өсөн Сөмбөл хәленән килгәндең барыһын да эшләне: ҡан да һалып ҡаранылар, тик һуң ине шул, ярҙам итә алманылар. Йәш ҡыҙҙың ғүмере шулай өҙөлөүе бик тә аяныс ине. Теге ваҡытта уның ғүмере өсөн Юрий Петрович күпме көрәште, барыбер еңде, Сөмбөлдө аяҡка баçтырҙы. Ул иһә ҡара тиргә батты, ә ҡотҡара алманы. Сөмбөл эшләй башлағандан һуң булған беренсе үлем... Был хәл уны тетрәндерҙе, үҙ бүлмәһенә бикләнеп, туйғансы иланы. Бындай ваҡиға уның башынан да үтте, әммә уны

ниндәйҙер мөғжизә ҡотҡарып ҡалды бит. Ҡыҙҙың әсәһенә ни тиергә, нисек күҙенә ҡарарға? Йә, Хоҙайым, үҙең ярҙам ит, үлем менән күпме генә осрашырға тура килһә лә, уға күнегеп булмай, еңел генә үткәреп булмай. Табип иҫән ҡалғандар менән бергә ҡайғыра, улар алдында үҙен ғәйепле хис итә.

Һыҙылып таң ата, яңы көн тыуа, кемдәргәлер шатлыҡ, кемдәргәлер ҡайғы-хәсрәт алып килә. Был ҡыҙ өсөн инде башҡа бер ҡасан да таң атмаясаҡ, ул мәңгелек төн иленә китте, урыны ожмахта булһын. Шулай, ҡыҙҙар ғүмере – сәскә ғүмере, кистән өҙәләр, иртән һулый, ә һулығас, еңел генә сығарып ташлайҙар. Кемде ғәйепләргә? Өҙөүсенеме, өҙҙөрөүсенеме? Әгәр ҡыҙ иҫән ҡалған булһа, Сөмбөл уға үҙенең үткәндәре хаҡында һөйләр, ғаиләһе, балалары менән таныштырыр, был тормоштоң матур яҡтары ла барлығын, мөхәббәттең татлы көндәрен, төндәрен аңлатыр ине. Бер ни аңларға өлгөрмәйенсә донъянан китеп барған ҡыҙ бала өсөн йөрәге әрнене. Сөмбөл утты ҡабыҙмайынса ғына тәҙрә янында оҙаҡ баҫып торҙо. Һыҙылып атҡан таң яҡтыһында тәҙрәнән таныш машинаны күреп, күңеле күтәрелеп китте. Йә, Хоҙайым, әлдә һин бар был донъяла. Сөмбөл кейенеп урамға сыҡты, Байрасы йоҡлайҙыр, тип уйлап, әкрен генә машинаға яҡынлашты. Юҡ, Байрас йоҡламаған, Сөмбөлдөң ҡаршыһына сығып баҫты, уның талсыҡҡан йөҙөндә арыу, борсолоу сағылды. Ауыр саҡта ире уға һәр ваҡыт ярҙамға килә, бына бөгөн дә Сөмбөл өсөн борсолған, көткән, матур зәңгәр күҙҙәрҙән уның эске донъяһын уҡырға була, унда күпме наҙ, яратыу...

Сөмбөл ҡаршыһында баҫып торған иренә йәшле күҙҙәре менән ҡараны:

– Байрас, әлдә һин бар был донъяла. Мин бит һинән башҡа бер көн дә йәшәй алмайым. Донъялағы иң матур күҙҙәр, иң татлы ирендәр һиндә генә, ҡәҙерлем. Мин һине үлеп яратам, бик күптән яратам, мин һине бер кемгә бирмәйәсәкмен. Ғүмер менән үлем – ҡаш араһы, уның һәр миҙгелен матур итеп, ҡәҙерләп йәшәргә кәрәк.

Был һүҙҙәрҙе ишетер өсөн Байрас һәр төндө ошо тәҙрә ҡаршыһында ҡунырға әҙер ине. Әллә таң кинәт атты, әллә йөрәге күптән көткән шифаһын алды–донъя яҡтырып киткәндәй тойолдо. Байрас, тын алырға ҡурҡып, ҡатынынан күҙен ала алманы, уның күҙҙәре күктә ҡабынған ике йондоҙ булып ялтыраны.

– Тағы бер генә ҡабатласы, Сөмбөл.

– Һинһеҙ был донъяла йәшәүҙең мәғәнәһе юҡ. Һин миңә ошо яңы атҡан таң кеүек кәрәк. Мин һине бер ҡасан бер кемгә алыштырмайым, һин минең иң ҡәҙерле кешем.

Байрастың күҙенә йәш тулды, ул ҡатынын ҡайнар ҡосағына алып, һөйәктәрен шығырҙатып, күкрәгенә ҡыҫты. Улар шулай һүҙһеҙ генә ҡосаҡлашып бик оҙаҡ баҫып торҙолар. Ике йөрәк бергә ҡушылып типкән саҡта һүҙҙәр урынһыҙ.

– Сөмбөл, Сөмбөләм минең, күктәге буй етмәҫ йондоҙом.

Ул уның ирендәрен эҙләп тапты. Йылдар менән матурлығын да, тәмен дә юғалтмаған сейә кеүек ирендәр был иртәлә тағы уныҡы, ул уларҙы үлгәнсе яратып туймаясаҡ.

* * *

Ике йыл тигәндә, күмәкләп тырыша торғас, Булаттың өйө әҙер булды. Улар хәҙер Байрастарҙың күршеләрендә йәшәйҙәр. Фәриҙә башта:

– Сөмбөлгә күрше булып бармайым, – тип киреләнһә лә, Булат:

– Бармаһаң, ҡал, – тип үҙе генә күсеп сыҡты.

Фәриҙә яңғыҙы нишләһен, йәшәй торғас, Булат кеүек ирҙәрҙең урамда аунап ятмағанын яҡшы аңланы. Яңы өйгә яңы хужабикә табылмағайы, тип йыйынып үҙе килде.

Фәриҙәнең күсеп килеүен белгәс, Сөмбөл Айһылыуға ағаһы менән апаһын үҙҙәренә киске ашҡа саҡырып сығырға ҡушты. Фәриҙә инергә теләмәһә лә, Булат йыйынғас, ҡаршы төшмәне. Уның ире бында күптән үҙ кеше икән. Сөмбөл менән күптәнге дуҫтар кеүек һөйләшәләр. Фәриҙә, ни әйтергә, үҙен нисек тоторға белмәйенсә, бер ситтә тыныс ҡына ултырҙы. Азамат, һәр ваҡыттағыса ҡыҫыла-ҡыҫыла, Булат ағаһы янына инеп ултырҙы. Фәриҙә аҫтан ғына өҫтәл артындағыларҙы күҙәтте. Азамат үҫкән һайын Булатҡа оҡшай бара, тик сәстәре генә оҙон.

– Атай, иртәгә Ахунға олатай янына ҡайтып киләм әле, бына Булат ағай ҙа ҡайта, – тип Азамат иңбашы менән Булатҡа төрттө. Булатҡа ризалашырға ғына ҡалды. Иртәгә шәмбе, Азамат киске уйынға ҡайтырға ашыға.

– Ниңә ҡайтаһығыҙ? – тип һораған булды Байрас, сәбәбен бик яҡшы белһә лә.

– Эй, олатай ҡайтырға ҡушҡан, эш күп, ти.

Азамат, ярҙам һорағандай, Булатҡа ҡараны.

– Эйе, – тине Булат, ҡыҙарып.

– Һин бит, иртәгә бер ҡайҙа бармайым, әйберҙәр ташыйбыҙ, тигән инең түгелме? – тип һүҙгә Фәриҙә ҡушылды.

– Ҡайғырма, Фәриҙә апай, ташырбыҙ, беҙ кискә генә ҡайтабыҙ, унда олатай көтә.

Байрас тыңлап торҙо ла:

– Киске уйынға Булат ағайыңды ғына йөрөткәнең етмәгән, хәҙер инде олатайың да һеҙгә эйәрә башланымы? Эй меҫкен атай, уның кеүек ҡарттар йоҡлағанда, ул киске уйында йөрөй, күрәһең, – тип көлөп ебәрҙе.

Сөмбөл дә йылмайып ҡуйҙы, ул Булаттың улын ауылға алып ҡайтып, йоҡламайынса, төн буйы Азаматты көтөп ултырыуын бик яҡшы белә.

– Улым, имтиханға әҙерләнер инең.

Сөмбөлдөң улы менән ҡапма-ҡаршы ултырып, ныҡлап һөйләшәһе бар, тик нимәнән башларға белмәй. Ун йыл ваҡыт үтеп китте, улы үҫеп еткән егет булды, йөҙө Булатҡа оҡшаһа ла, йылғырлығы менән Байрасҡа тарта, ҡыҙҙар башын бик иртә әйләндерә башланы. Ауылға ашҡыныуы шуның өсөн генә. Ахун – ҙур ауыл, йәштәр күп, ҡыҙҙар сибәр. Улының китер көндәре яҡынлашыуын уйлаһа, Сөмбөлдөң күҙенә йәштәре тула. Ярай, ауылдан килгәс һөйләшермен, бөгөн Фәриҙә менән асыҡтан-асыҡ аралашырға кәрәк, тип күңеленә һалып ҡуйҙы. Барыһы ла ашап-эсеп, өҫтәл янынан таралышҡас, Сөмбөл Фәриҙәгә өндәште:

– Фәриҙә, һин уңайһыҙланып торма, беҙ бит һинең менән туғандар ғына түгел, ут күршеләр ҙә. Беҙ Байрас менән төрлө ваҡытта ҡайтабыҙ, шуға күрә Айһылыуға күҙ-колаҡ булып торорһоң инде. Беҙҙең ишектәр һеҙгә һәр ваҡыт асыҡ, миңә асыу, үпкә һаҡлама, татыу йәшәйек, ҡасан теләһәң, шунда рәхим ит.

Фәриҙә Сөмбөлдөң һүҙҙәренән һикереп төшмәһә лә, уға бында бар нәмә оҡшаны, өйҙә яңғыҙ ултырыу түгел, әкренләп күнекте.

Сөмбөл генә үҙ-үҙенә урын таба алмай йөрөй, оҙаҡламай уның улы, күҙ ҡараһы, төп йортто ташлап, сит ерҙәргә китәсәк. Июлдә Әнүәр ағаһы менән Ғәлимә апаһы Азаматты алып китергә ҡайтасаҡтар. Сөмбөл кис менән улының бүлмәһенә инде:

– Әйҙә, улым, ҙурҙарса бер һөйләшәйек әле, – тип һүҙ башланы. – Ҙур атайыңдан хат килде, улар һине алып китергә ҡайтасаҡтар. Һинең киләсәгең улар ҡулында, ә уларҙың киләсәге һинең ҡулыңда. Үткәндәребеҙ менән беҙ уларға бурыслы, шуға күрә, улым, һин оло юлға йыйын, һин уҡырға тейеш.

– Әсәй, мин барыһын хәтерләйем, тик минең һеҙҙән айырылаһым килмәй. Мин бер нәмәне аңламайым: ни өсөн беҙ унда йәшәнек, атайым нисек ебәрҙе? Ниңә һин уларға һүҙ бирҙең?

Сөмбөл улын ҡосаҡлап алды.

– Минең бик уҡығым килде, атайыңдан ҡасып киттем, шулай килеп сыҡты инде, улым.

Сөмбөл улын ни тиклем яратһа ла, бөтә дөрөҫлөктө уның ҡаршыһына асып һала алмай, һуңыраҡ, бәлки, үҙе аңлар, хәҙер белһә, Булатты кисермәйәсәге күренеп тора.

– Улым, миңә рәнйемә, йәш саҡта барыһын да уйлап бөтөрөп булмай, ул ваҡытта минең өсөн берҙән-бер юл шул ине. Биргән һүҙ – ул алған бурыс шикелле – ғүмер буйы өҫтөңдә аҫылынып тора. Мин алған бурысты һиңә түләргә тура килә. Ныҡ бул, ир бул, ләкин үтенесемде кире ҡаҡма, балам. Миңә лә еңел түгел, күҙ алдымдан юғалһаң, нисек йәшәрмен?

Улар, ҡосаҡлашып, уйға батып бик оҙаҡ ултырҙы, күп нәмәләр тураһында һөйләштеләр, илаштылар. Азамат, әсәһенә күҙ йәштәрен күрһәтеүҙән оялып, гаражға, тимер-томор араһына сығып китте. Уға еңел түгел, уның бында һөйгән ҡыҙы, дуҫтары ҡала. Булат ағаһы бер үҙе ни эшләр, тағы эсә башлаһа, кем ҡотҡарыр? Теге ваҡытта Азамат уны гел һаҡлап йөрөнө, әсәһе күрмәһен тип, йә бесәнлектә, йә соландың ҡараңғы мөйөшөндә йәшереп йоҡлатты. Ни эшләптер, Булат ағаһы уның әсәһенән ҡурҡа ине. Берәһендә, Булат ағаһын бесәнлеккә алып ингәндә, атаһына эләктеләр. Атаһының күҙ ҡарашынан уның ни әйтәһен аңларға өйрәнгән Азамат үҙен ғәйепле итеп хис итте. Атаһы күп һөйләшмәй, әйткән һүҙе алтын баһаһына тора.

– Әсәйемә әйтмә инде, атай, – тип бик оҙаҡ ялбарҙы.

– Ағайҙы эсеүенән әсәйең генә туҡтата ала, – тине ни эшләптер атаһы.

Кем ташлатһа ла, эсеүенән туҡтаны Булат ағаһы. Шулай ҙа, яңынан эсә башлаһа, тигән уй һис тыныслыҡта ҡалдырманы Азаматты. Мин киткәс, кем ҡарар уны?

– Ниндәй уйҙар баҫты башыңды? Өндәшәм, ишетмәйһең.

– Булат ағай, ике аҙнанан мин китәм.

– Ҡайҙа, оҙаҡҡамы?

– Белмәйем, әсәйем, бөтөнләйгә, ти.

– Нисек бөтөнләйгә? Ҡайҙа китәһең? – тине Булат, көтөлмәгән яуаптан аптырап.

– Шулай, әсәйем һүҙ биргән. Мин ҙур олатайҙарҙа уҡырға, йәшәргә, уларҙы үлгәнсе ҡарарға тейеш. Белмәйем, ниңә атайым беҙҙе унда ебәргән, ниңә мине өләсәйем алып ҡалмаған? Бына хәҙер ғүмер буйы йәшә инде ситтә, минең киткем килмәй, ә әсәйем, барырға кәрәк, ти.

Булат ни әйтергә белмәй ҡатып ҡалды, баланың һүҙҙәре аяҙ көндә йәшен һуғыу менән бер ине.

– Мин әсәйең менән һөйләшәйемме, бәлки, ебәрмәҫ, кире уйлар.

– Юҡ, әсәйем биргән һүҙендә тора торған кеше, әйткән һүҙ – алған бурыс, ти, үтәргә кәрәк. Бына бер үҙең ҡалаһың, Булат ағай.

Булат, ауыр һулап:

– Улай әйтмә, улым, былай ҙа ауыр, – тине, Азаматты йыуатырлыҡ һүҙ таба алмайынса.

Булат барыбер Сөмбөл менән һөйләшеп ҡарарға уйланы. Баҡсала эшләп йөрөгән Сөмбөл янына инде, һүҙен ниҙән башларға белмәй:

– Сөмбөл, – тип туҡтап ҡалды, ялбарып күҙҙәренә ҡараны.

Сөмбөл уның нимә әйтергә теләгәнен шунда уҡ аңлап алды.

– Кәрәкмәй, Булат, миңә лә еңел түгел. Икенсе яҡтан ҡара: башҡалар армияға китәсәк, ә ул – уҡырға, ни айырмаһы бар? Бик һағынһаң, янына барырға була, – тигән булды, үҙенең иһә тауышы ҡалтыраны, күҙҙәре йәшләнде.

– Теге ваҡытта минең дә киткем килмәне, ул саҡта һин мине туҡтатманың, хәҙер һуң инде, мин биргән һүҙемдән кире ҡайтмаясаҡмын.

Сөмбөл үҙе өсөн күптән инде барыһын да хәл итте. Азамат киткәс, бүлмәһе бушап ҡаласаҡ, уны һағынып аҡылдан яҙырға мөмкин. Ул бит балаҡайының ары үтһә лә, бире килһә лә башынан һыйпап ҡалырға ғәҙәтләнде. Улы еткән егет булыуға ҡарамаҫтан, рәхәтләнеп иркәләнә, үҙе лә әсәһен ҡосаҡлап үбә. Былар барыһы һағынып иҫкә алырға ғына ҡаласаҡ. Шуға күрә был ҙур өй бушамаһын тип, үҙ теләге менән ауырға уҙҙы, ләкин бер кемгә белгерткеһе килмәне. Дөрөҫөрәге, улынан уңайһыҙланды. Байрас белһә, тағы ҡайғыра башлар, тип ҡурҡты.

Көткән көн килеп етте, Әнүәр ағаһы менән Ғәлимә апаһы ҡайтты. Уларҙың ҡайтыуы оло бер байрам булды. Ғәлимә апаһы Сөмбөлдәрҙең мул тормошона һоҡланып туя алманы, кис икәү генә ҡалғас, һеңлеһенән:

– Йә, үҫкәнем, нисек һуң тормоштар, сибәр ир менән йәшәүҙәре ауыр түгелме? – тип көлдө.

– Үҙең күрәһең, Ғәлимә апай, ышанып йәшәгәс, әллә ни ауырлығы юҡ.

– Күрәм, мин һинең өсөн бик шат, донъяңды бик матур ҡорғанһың, ожмах ояһы. Эш яғы нисек?

– Еңел түгел, апай, бөтәһе миңә ҡарап тора. Ҡарт уҡытыусым гүр эйәһе булғас, әллә ни таяныр кешем ҡалманы, һеҙҙең өйрәткәндәрҙе һәр ваҡыт иҫтә тотоп, һеҙгә рәхмәт уҡып эшләйем. Шулай ҙа миңә остаз бик кәрәк шул, һеҙ киткәнсе, күп мәсьәләләрҙе хәл иткем килә.

– Яҡшы, үҫкәнем, һорауҙарыңды бергә хәл итербеҙ. Барыһын да үҙем беләм, тиһәң, ышанмаҫ инем, ысын күңелдән тырышып эшләгән кешенең һорауы күп була. Тимәк, эшеңде яратып башҡараһың, беҙҙең тырышлыҡтар юҡҡа китмәгән.

– Юҡ, апай, бушҡа түгел, мин ғүмерем буйы һеҙгә рәхмәтлемен.

– Ә был өсөнсөһөн ҡасаныраҡ алып ҡайтырға йыйынаһың?

– Ғәлимә апай, һинән бер нәмә йәшереп булмай...

– Юҡҡа ғына ҡырҡ йыл ҡатын-ҡыҙ табибы булып эшләйемме мин?

– Мин һине көттөм, апай, тик, зинһар, бер кемгә һиҙҙерә күрмә.

Икенсе көндө улар Сөмбөл эшләгән больницаға килделәр. Бәләкәй генә Учалы ҡалаһы өсөн йыйнаҡ, мөһабәт бина урман янында урынлашҡан. Быларҙың береһе лә Ғәлимә апай күҙенән ситтә ҡалманы.

– Бигерәк матур ерҙә эшләйһең, ниндәй таҙалыҡ, тыныслыҡ, урманы ғына ни тора. Ҙур ҡалаларҙа былдай тынлыҡ юҡ шул.

Сөмбөл уның үҙ бүлмәһенә алып инде, бер нисә ауырыу тарихы менән таныштырҙы, һөйләшәһе, кәңәш һорайһы мәсьәләләре бик күп ине. Ғәлимә апай иң беренсе эш итеп Сөмбөлдө ҡараны.

– Мин һине китер алдынан ҡабат ҡарармын, – тип теүәл бер һүҙ әйтмәне.

Ҡабат ҡарағас, Ғәлимә апай:

– Сөмбөл, бәлки, үҙең дә һиҙәһеңдер, бында ике йөрәк тибә – игеҙәктәр буласаҡ. Аҙаҡҡа тиклем күтәрә алырһыңмы икән? Яраларың иҫке булһа ла, ҙурҙар, ваҡытынан алда асылыу ҡурҡынысы бар. Ауыр операцияларға алынма, үҙеңде һаҡларға тырыш. Әгәр ҡаршы килмәһәң, бәпесләтергә үҙем киләм, иреңә Яңы йылға бүләк булыр, – тип һеңлеһен шатландырҙы.

Сөмбөл бик ҡәнәғәт йылмайып ҡуйҙы. «Ире белмәй шул әле, белһә, хәҙер сирләй башлаясаҡ. Ул һәр ваҡыт мине үлер тип ҡурҡа, әле икәү икәнен белһә, ҡарауыл ҡысҡырыр». Ул, Байрастың йөҙөн күҙ алдына килтереп, ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

– Һөйөнөр тимә, апай, ҡото алынасаҡ, бер үк әйтмәй тор, һеҙ киткәс, үҙем әйтермен. Минең бит еткән улым бар, унан оят.

– Әйт әле, Сөмбөл, һин бәхетлеме?

– Бик бәхетле, апай. Байрас кеүек ирҙәр күберәк булһа, күпме ҡатын–ҡыҙ бәхетле булыр ине. Минең уға бер малай бүләк иткем килә. Азаматтың да бүлмәһе буш тормаһын.

– Яҡшы эшләгәнһең, ундай һау-сәләмәт ирҙәрҙән күберәк тыуһын ине әле үҙҙәре кеүек таҙа, ныҡ балалар, был донъя күпкә йәмлерәк булыр ине.

Сөмбөл ваҡытты күпме генә һуҙырға тырышмаһын, улы китер көн килеп тә етте. Өй эсе иртәнән ығы-зығы килде, Булат бер инде, бер сыҡты, үҙ-үҙенә урын тапманы. Силәбегә тиклем оҙатырға булғас, ул да юлға йыйынды. Байрас:

– Һин, әсәһе, өйҙә ҡал инде, ағай барһын, – тигәс, Сөмбөл улы менән өйҙә генә хушлашты.

– Улым, яҡшы кеше бул, йөҙөмә ҡыҙыллыҡ килтермә, уҡы, ҙур кеше бул, ямандан йыраҡ тор, беҙҙе онотма, – тип улының күкрәгенә башын һалды. – Хәйерле юл, улым, китер сәғәтең етте.

Сөмбөлдөң йөрәге һыҡраны, ул бит улы менән ниҙәр генә күрмәне, ләкин уларҙың бер ҡасан айырылышҡандары булманы. Баш бала ғына шулай ҡәҙерлеме икән, әллә ҡайһыһы китһә лә шулаймы? Баҫҡыстан төшкәндә, уның йөҙө ап-аҡ ине, Ғәлимә апаһы, хәлен аңлап, тиҙерәк дарыу ҡаптырҙы.

– Тыныслан, ярамай былай, ҡарыныңдағыларҙы уйла, әйҙә, инеп ят, – тип индереп яҡтырҙы. Сөмбөл илап ятҡан еренән йоҡоға китте.

Азаматты оҙатып ҡайтҡан Байрасты ҡаршы алыусы булмағас, ул бүлмәләр буйлап ҡатынын эҙләп китте. Азамат бүлмәһендә йомарланып ятҡан Сөмбөлдө уятмаҫҡа тырышып, әкрен генә беренсе ҡатҡа, аш бүлмәһенә, төшөп ултырҙы, сәй ҡуйҙы. Ул бөгөн үҙе лә бик арыны, Учалы – Силәбе араһы яҡын юл түгел. Азаматтың өйҙән сығып китеүе ауыр тәьҫир ҡалдырҙы, көн дә күҙ алдында йөрөгән балаңдан айырылыу бик ҡыйын икән. Шундай уйҙарға батып ултырып, ҡатынының икенсе ҡаттан төшөүен ишетмәне, Сөмбөл уның янына килеп ултырҙы, улар һүҙһеҙ генә бер-береһенә ҡарашып торҙо. Байрас, ҡулын һуҙып:

– Кил әле үҙемә, әллә һине күрмәгәнгә ай булды инде, һағынып бөттөм, – тип, ҡатынын алдына алып ултыртты, сәстәренән һыйпап, күҙҙәренән үпте. – Өҫтәл артында ултырғанда әллә нисек серле итеп йылмайһың, күҙҙәрең менән мине әллә ҡайҙарға саҡыраһың, өй тулы кеше булмаған булһа, мин һине шунда уҡ ятҡан, йә йоҡо бүлмәһенә алып менеп киткән булыр инем.

– Ә хәҙер нимә ҡамасаулай?

– Ысынлап та, беҙ икәү генә бит, – тине лә Байрас, ҡатынын шашып-шашып үпте, яратып туя алманы. – Сөмбөл, бер ваҡыт ошо иркен өйҙә икәү генә ултырып ҡалырбыҙмы икән? Ғүмер нисек тиҙ уҙа, тағы алты йылдан Айһылыу сығып китер. Беҙ был ҙур өйҙә ни эшләрбеҙ?

Сөмбөл, серле итеп йылмайып, иренә ҡараны:

– Береһе китһә, икенсеһе килер.

– Ҡасан була бит әле ул?

– Яңы йылға, атаһы. Алла теләһә, Азаматтың бүлмәһе буш булмаҫ.

– Ниңә улай тинең, кем килә?

Сөмбөл, йылмайып, Байрастың ҡулын үҙенең эсенә ҡуйҙы.

– Кем икәнен белмәйем, әммә мин һиңә оҡшаған малай алып ҡайтырға теләйем. Кәрәкмәй, тимә. – Сөмбөл иренең күҙҙәренә ҡараны. – Һиҙмәйһеңме ни, күрмәйһеңме ни, атаһы?

Байрас, был һүҙҙәрҙе ишеткәс, тораташ кеүек ҡатып ҡалды, ҙур итеп асылған күҙҙәре менән ҡатынына текәлде, бер аҙҙан көскә телен әйләндереп:

– Сөмбөл, ни һөйләйһең? Кәрәкмәй, бер иҫән ерең юҡ бит, – тип кенә әйтә алды.

Сөмбөл Байрастың ҡурҡынған ҡиәфәтенән көлөп ебәрҙе.

– Тағы сирләй башланыңмы, ҡурҡаҡ ҡуяным? Ҡурҡма, минең әле киҫер урыным бар, бер бала алып ҡайтып һөйөндөрәм үҙеңде. Һинең өсөн тәнем дә, йәнем дә йәл түгел, – тип иренең муйынынан ҡосаҡлап алды.

Байрас, ҡатыны тағы бер бала табыр, тип уйына килтермәгән ине, шуға был хәбәрҙе нисек ҡабул итергә белмәй аптырап ҡалды, әйтер һүҙ тапманы, күңеле тулды.

– Сөмбөл, ни өсөн шундай ауыр ғазапҡа бараһың?

– Мин һине бик яратам, ә яратҡан кешеңдән бала табыу – үҙе бәхет, яратҡан йәреңде һөйөндөрөү – тағы бер бәхет.

– Мин һинең өсөн ҡурҡам. Үҙең күрәһең, һөйөнә лә алмайым. Шул ҡурҡыуым арҡаһында ысын йүләргә әйләнәм, һин бәпесләп өйгә ҡайтҡансы ҡотом алынып йәшәйем. Сөмбөл, ҡәҙерлем, һин шундай бәләкәй генә, һин минең йондоҙом...

Байрас ҡатынын, ҡәҙерләп кенә күтәреп, үҙҙәренең йоҡо бүлмәһенә алып меңеп китте. Бик ҡәҙерле ине уға ҡатыны, Хоҙайҙан ялбарып, һорап, көтөп алған мөхәббәте. Эйе, ул бик бәхетле ир! Бына хәҙер улар өйөнә тағы шатлыҡ килергә тора, килһен, бәхете менән килһен, тик һөйөклө ҡатыны ғына иҫән булһын.

Байрас шул көндән башлап ҡатынын нисек һаҡларға белмәне, өрмәгән ергә ултыртманы. Уның зәңгәр күҙҙәре һәр ваҡыт етди, йөҙөндә Сөмбөл өсөн борсолоулы һыҙаттар күренә ине.

– Атаһы, йылмай әҙерәк, ҡурҡма, һүтелмәм, – тип ҡатыны уны тынысландырырға тырышты.

– Алла һаҡлаһын, әсәһе, һүтелә күрмә. Былай ҙа ул яраларға нисек түҙәһеңдер?

– Һинең кеүек яҡлаусы, һаҡлаусы булғанда ниңә түҙмәҫкә, түҙәм, атаһы, түҙәм.

Барыһына түҙҙе Сөмбөл, ҡарындағы балалар көн менән түгел, сәғәтләп үҫтеләр.

Бер ай тигәндә, Азаматтан хат килде.

«Әсәй, минең өсөн борсолма, миңә был ҡала бик оҡшаны. Бындағы тәбиғәт иҫ китмәле матур, йылы, бик күп төрлө еләк-емеш ағастары үҫә. Ләкин шулай ҙа, әсәй, һин бешергән икмәк менән туҡмаслы ашты һағынам. Һеҙҙә көҙҙөр инде, ә был яҡтарҙа һаман йәй, белмәйем, ҡышһыҙ нисек йәшәрмен? Янымда булған саҡта бер ни һиҙмәгәнмен, әсәйем, ниндәй ҡәҙерле һин миңә. Ашайбыҙ, уйнайбыҙ, йүгерәбеҙ, башта төрлө уйҙар, тормош гел шулай барыр кеүек тойола... Ә хәҙер мин һәр ваҡыт һеҙҙе уйлайым. Янында булһам, үҙеңде йөҙ тапҡыр үбер, әсәй, һин минең донъялағы иң ҡәҙерле кешем, тиер инем. Бында тәмле ашайым, йомшаҡта йоҡлайым, тик башымдан һыйпарға һинең ҡулдарың етмәй, әсәй».

Сөмбөл улының хатын илай-илай уҡыны, күңеленән уның менән һөйләште: «Түҙ инде, балам, мин һинең хәлдәреңде бик яҡшы аңлайым. Мин аңламай, кем аңлаһын һине, улым. Сит илдең сәскәләре матур булһа ла, тыуған яҡтың әреме лә тәмле».

Ашығып Булат килеп инде.

– Айһылыу, Азамат ағайымдан хат бар, тигән ине.

Сөмбөл күҙ йәштәре аша йылмайырға тырышты.

– Эйе, бар, бына быныһы һиңә тип яҙылған, – тип Булатҡа айырым бер конверт һуҙҙы.

– Алып сығып уҡыйым әле, ә һин ниңә илап ултыраһың?

– Бала тыуған яғын һағына, миңә бик таныш был хәлдәр, түҙергә кәрәк, – тине лә ауыр ғына урынынан тороп китте. Уға ҡарап торған Булат, үҙ күҙҙәренә ышанмайынса, ҡабат Сөмбөлгә текәлде.

– Сөмбөл, – тине ул, күҙен унан айыра алмайынса.

Сөмбөл Булаттың ни әйтергә теләгәнен бик яҡшы аңланы, уңайһыҙланып, биттәре ҡыҙарып сыҡты, ҡулы менән эсен ҡапланы, елкәһен йыйырҙы.

– Ниңә аптырайһың, шулайыраҡ хәлдәр, был ҙур өйҙә икәү ҡалһаҡ, ни эшләрбеҙ...

Булат, ни әйтергә белмәйенсә:

– Эйе шул, – тигән булды.

Тиҙҙән Азаматҡа ун ете тула, ә Сөмбөл бала табырға йыйына, ярамай тиһәләр ҙә, таба бирә. Был минуттарҙа ул әллә үҙен йәлләне, әллә энеһенән көнләште. Шулай бер аҙ тапанып торҙо ла урамға сығып китте, сыҡҡас та зиһенен йыя алмай торҙо. Башында һаман бер уй ҡайнаны. Сөмбөл тағы бала алып ҡайта, ә уларға Сөмбөл тапҡан балалар менән йыуанырға ғына ҡала. Булат нисә йылдар инде ҡасандыр юғалтҡан мөхәббәтенең бәләкәй генә осҡононда йылынып йәшәй. Сөмбөл – сабыр, аҡыллы ҡатын, килгән һәр кешене яҡты йөҙ, һый-хөрмәт менән ҡаршы ала, оҙатып ҡала. Улар бөтәһе лә шул бәләкәй генә Сөмбөл йылыһына һыйынып йәшәйҙәр. Булат уны йыраҡтан күҙәтеп, уға һоҡланып йәшәй, йылдар үткән һайын Сөмбөлдөң һөйкөмлө яҡтары асыла ғына бара. Булат көн дә энеләренә юҡты бар итеп инеп сыға. Сөмбөл уны кисерҙе, сөнки уның мөхәббәте хәҙер – Байрас. Ул уға яратып: «Эйеме, атаһы», – тип күҙҙәренә генә ҡарап тора. Булат быларҙың барыһын аҫтан ғына күҙәтә. «Атаһы» тигән һүҙҙе уға һис ҡасан бер кем әйтмәйәсәк. Булат, үҙ уйҙарына сумып, утын һарайында бик оҙаҡ ултырҙы, өйгә инһә, Фәриҙә барыһын аңлар шикелле тойолдо. Ул кинәт кеҫәһендәге хатты иҫенә төшөрҙө, ашығып, улының хатын уҡып сыҡты. «Булат ағай, барығыҙҙы ла шундай һағындым, нисек түҙергә инде? Һин минең мотоциклды майлап, ҡараштырып тор... Их, Булат ағай, Ахунға тағы бер генә киске уйынға ҡайтыр инем»,– тигән. Ике бит тултырып яҙған хатты уҡығанда Булаттың, улын йәлләп, йөрәге әрнене.

«Эй, улым, һинән башҡа миңә лә был донъя йәмһеҙ шул. Әсәйең, түҙергә кәрәк, ти, түҙәйем, улым, ул түҙә, беҙ ҙә түҙәйек...»

* * *

Сөмбөл беренсе ҡар менән ялға сыҡты. Ҡурҡҡанға ҡуш күренә, ти, Байрасҡа ҡатыны айлап түгел, көнләп йыуаная барған шикелле тойолдо, иҫке яралары һүтелә күрмәһен, тип ҡурҡты. Декабрь башында түҙмәне, Ғәлимә апайға шылтыратты.

– Апай, ҡыйын булһа ла килеп ет, Сөмбөл тау хәтлем булды, зинһар, ярҙам ит, – тигәс, Ғәлимә апалары оҙаҡ көттөрмәне, ҡайтып та етте.

Сөмбөлдө ике аҙна урынынан торғоҙманы, үҙе ҡараны. Ысынлап та ҡурҡырлыҡ сәбәптәр бар ине: иҫке яралар тартылған, йоҡарған.

Декабрь урталары еткәс, урындағы табиптар менән кәңәшләшеп, ваҡытынан алдараҡ булһа ла бәпесләтергә уйланылар. Сөмбөл Байрасҡа операция көнөн әйтмәүҙәрен үтенде. Ире былай ҙа больница юлын көнөнә әллә нисә тапай, операция икәнен белһә, китмәҫ тә. Иртән Байрас килеп киткәндән һуң, Сөмбөлдө операцияға алып инделәр. Ғәлимә апаһы:

– Ирең килгәнсе өлгөрәбеҙ, – тип йылмайҙы.

Эйе, өлгөрҙөләр, донъяға һау-сәләмәт ике малай ауаз һалды. Сөмбөлдөң теләге ҡабул булды – иренә Яңы йыл бүләге әҙер ине.

Эштән һуң килгән Байрасты Ғәлимә апаһы, аҡ халаттарға урап-сорнап, Сөмбөл ятҡан палатаға алып инде. Яңы ғына наркоздан айнып күҙен асҡан Сөмбөл ауыҙына маска, башына аҡ башлыҡ, өҫтөнә аҡ халат кейгән иренә ҡарап:

– Һин ниндәй матур доктор булыр инең, – тип йылмайҙы.

– Юҡ, бында миңә ярай торған халат юҡ, унан, үҙең дә беләһең – энәнән ҡурҡам бит мин. Хәлең нисек? – тип ҡулын Сөмбөлдөң эсенә ҡуйҙы, нисек ҡуйҙы шулай тартып алды. – Сөмбөл, – тине хәле бөтөп, – таптың дамы ни?

Уларҙы ситтән күҙәтеп торған Ғәлимә апай, йылмайып, Байрасты ҡулынан етәкләп, ике бәләкәй генә карауат янына алып килде.

– Бына күр, ҡатыныңдың Яңы йыл бүләген.

– Ә ҡайһыһы беҙҙеке?

– Икеһе лә һеҙҙеке.

– Нисек икеһе лә?

Байрастың ғәжәпләнеүҙән түңәрәкләнгән күҙҙәрен күреп, Ғәлимә апай ҡысҡырып көлөп ебәрҙе.

– Ниңә аптырайһың? Бындай хәлдәр йыш була.

Байрас бер балаларға, бер Сөмбөлгә ҡараны.

– Икәү булғандармы? Йә, Хоҙайым, Сөмбөл, нисек түҙҙең? – тип карауат янына килеп теҙләнде. – Әсәһе, нисек түҙҙең, яраларың ауырталыр.

– Ниңә, атаһы, кемдәр тип һорамайһың?

– Кемдәр булһа ла ярай, иң мөһиме – үҙең иҫән ҡалғанһың. Икәү тиһең, ә, башҡа һыймай!

Ул, тороп, яңынан балалары янына килде, уларға оҙаҡлап ҡарап торҙо.

– Ысынлап та, кемдәр һуң былар?

– Малайҙар, атаһы, икеһе лә малайҙар.

– Берәһе ҡыҙ булһа ла яҡшы булған булыр ине. Ҡыҙҙар аталарын күберәк яраталар бит. Ярай инде, рәхим итегеҙ беҙҙең донъяға, балалар, – тип йылмайып, Сөмбөл янына килде.

– Әсәһе, күпме рәхмәттәр әйтһәм дә аҙ булыр төҫлө. Хоҙай һине миңә үҙе бүләк итте, мин һинең яныңда бик бәхетле. Һинән башҡа тормошомдо күҙ алдына ла килтерә алмайым, һин минең иң ҡәҙерле кешем. Әсәһе, мин ҡайтып, Айһылыуҙы, атайымдарҙы, ағайымдарҙы һөйөндөрәйем әле. Бөгөн бит донъяға Арыҫланов нәҫеленең дауамсылары тыуҙы. Ниндәй шатлыҡлы көн! Сөмбөл, һин минең батырым, мөхәббәтем минең, ҡара ҡарлуғасым минең!

Байрастың шатлығы эсенә һыйманы, Сөмбөлдөң уға ниндәй ҙур бүләк яһағанын бөтә барлығы менән аңланы, һөйөнөсөнән күҙҙәре ялтыраны.

Сөмбөл иренә ҡарап һоҡланды. Байрастың егеттәрсә төҙ баҫып, матур башҡайын ғорур тотоп йөрөүе, һәр һүҙен өҙҙөрөп һөйләшеүе, зәңгәр күҙҙәре, наҙлы йылмайыуы, теҙелеп торған ап-аҡ тештәре, эйәк осондағы бәләкәй генә соҡоро – барыһы, барыһы ла Сөмбөл өсөн ҡәҙерле, яҡын ине.

Йәштән етәксе урындарҙа эшләгәнгәме, ҡайһы берәүҙәргә ул ҡырыҫ кеүек тойола, сөнки үҙенең бер ҡарашы менән теләһә кемде бик тиҙ урынына ултырта. Әйткән һүҙендә тора белгәне, кешене рәнйетмәгәне өсөн, директорҙары лайыҡлы ялға киткәндә үҙ урынына Байрасты тәҡдим итте. Хеҙмәттәштәре ҡаршы килмәне, бер тауыштан уны етәксе итеп һайланылар. Байрас:

– Әсәһе, директор ҡатыны булғың киләме? – тигәс:

– Юҡ, Байрас ҡатыны ғына булғым килә, – тип көлдө.

Башҡаларға ҡырыҫ кеүек күренһә лә, Байрас – нескә күңелле, ғаилә йәнле кеше. Сөмбөл өсөн ул – диңгеҙ уртаһындағы маяҡ.

Бала табып, бер аҙна үткәс, Сөмбөл янына унын урынына ҡалған бүлек мөдире килде.

– Бер йәш ҡатын балаһынан баш тарта, хатта имеҙергә теләмәй. Ни эшләйбеҙ? Ташлап сығып ҡасмағайны...

– Ире бармы?

– Юҡ, ирһеҙ тапҡан.

– Әсәһен саҡыртып һөйләшегеҙ.

– Әсәй алырға ҡушмай, ти.

– Ярай, иртәгә үҙем инеп һөйләшеп ҡарармын. Ни эшләйһең, донъяла кәкүктәр бөтмәгән шул.

Икенсе көндө Сөмбөл ҡыҙ ятҡан палатаға инде. Шәфҡәт туташы ымлап ҡына ҡыҙ ятҡан урынға күрһәтте.

– Һаумы, үҫкәнем, һинең менән һөйләшкем килә.

– Бәйләнмәгеҙ миңә, минең бер кем менән һөйләшкем килмәй.

– Әгәр башҡалар алдында һөйләшһең килмәһә, әйҙә минең менән.

Ҡыҙ теләр-теләмәҫ тороп баҫты. Оҙон буйлы, ҡара бөҙрә сәсле, муйыл ҡара күҙле был ҡыҙ бик сибәр ине. Ул Сөмбөл артынан эйәрҙе, улар икенсе палатаға инделәр.

– Ултыр, әйҙә, һөйләшәйек әле. Һеңлем, ниңә һин балаңды имеҙергә теләмәйһең?

– Һеҙҙең минең баламда ни эшегеҙ бар?

– Үҫкәнем, мин ошо больницала ун йыл эшләйем, шул ваҡыт эсендә әле бер кемдең дә бала ҡалдырып сыҡҡанын күргәнем булманы. Һин минең оло улым менән бер йәштә генә бит, кем һине ололар менән былай тупаҫ һөйләшергә өйрәтте? Үҙең, ҡотҡарығыҙ, тип килгәнһең, ә хәҙер, ҡотолғас, яҡшылап һөйләшкең дә килмәйме?

– Мин баланы алмайым. Мин әле йәш, ҡайҙа ҡуяйым ул баланы? Әсәй, бала күтәреп ҡайтма, тине.

– Ә атаһы?

– Уның үҙенең ғаиләһе бар, ул барыбер миңә өйләнмәйәсәк. Уға кәрәкмәгәс, миңә лә кәрәкмәй.

– Ниңә улайһа ике айлыҡ сағында ҡотолманың?

– Аборттан һуң башҡа бала булмаҫҡа мөмкин, тинеләр. Һуңыраҡ кейәүгә сыҡҡас, бәлки, бала кәрәк булыр, әлегә кәрәкмәй.

– Балаңдың атаһын яратаһыңмы?

– Яратам кеүек инде.

– Яратҡан кешенән тапҡан баланы ла яраталар бит. Баланың атаһы һиңә нисек ҡарар? Мөхәббәтегеҙ ни эшләр? Бала кем ҡулдарына эләгер? Һин был хаҡта уйлайһыңмы?

– Китапта ғына ул мөхәббәт. Ятһа, ҡатынынан айырылыр ине, ул, ҡатыным, балаларым, ти. Йәшәһен шунда үҙенең ҡарт шайтаны менән.

– Ниңә һуң ғаиләле кеше менән сыуалдың? Ғаиләһе, балалары бар икәнен белмәнеңме?

– Белдем, уның аҡсаһы күп, машинаһы шәп. Туйҙырҙы был хәйерселек. Бала тапһам, өйләнер, тип уйланым, ә ул миңә, аборт яһат, тип аҡса бирҙе лә ғаиләһе менән ялға китеп барҙы. Аҡсаһын туҙҙырҙым, балаһын ҡалдырҙым.

– Тыңла әле мине, һеңлем, бала ул бесәй балаһы түгел, һин тапҡан баланы кем ҡарарға тейеш тип уйлайһың? Кем имеҙергә тейеш? Ул бит ас, бына һин

үҙең ҡасан теләйһең, шунда ашайһың, уның ни ғәйебе бар? Бөтә кеше Яңы йылға өйҙәренә ҡайтып китәсәк, ә ул яңғыҙы бында ҡалырмы? Уның теле булмаһа ла, ул үҙенең йөрәге менән һинең ошо ҡыланмышыңды һиҙә, рәнйер, тип тә уйламайһыңмы, бала ҡарғышынан да ҡурҡмайһыңмы? Киләсәктә оло мөхәббәт килер, юлыңда яҡшы кеше осратырһың, ул һине лә, балаңды ла яратыр, ҡалдырма балаңды. Һин үҙең дә әсәйеңдең күкрәк һөтөн имеп үҫкән кеше, үкенерһең бер ваҡыт, һуң булыр. Яратҡан кешең быны белһә, үҙеңде ташлап китер. Ваҡыт уҙыр, олоғайырһың, аҡыл йыйырһың, бына шул саҡ балаңды эҙләй башларһың. Минеке түгелме икән, тип урамдағы һәр баланың күҙенә ҡарарһың, таба алмаҫһың, сәсеңде йолҡоп иларһың. Кейәүгә сығып, башҡа балаларың булһа ла, беренсе балаң йәнеңә тынғылыҡ бирмәҫ, төштәреңә инеп йөҙәтер. Балаҡайым, аҡылыңа кил, үкенерһең.

– Апай, йәнемде талҡыма, балаһыҙ ҡатындар бөтмәгән, берәйһе алыр ҙа үҫтерер, бик йәлләһәң, үҙеңә ал. Мин ун ете йәшемдән бала ҡарап өйҙә ултырырға йыйынмайым. Кемгә кәрәк – шул алһын.

– Эҙләрһең, нисек кенә эҙләрһең, бына шунда илап минең яныма килерһең, баламды бер генә күрәйемсе, тиерһең, һуң булыр. Эйе, алыусылар булыр, алырҙар ҙа үҙ ҡыҙҙарылай ҡәҙерләп үҫтерерҙәр. Бәлки, ул киләсәктә ҙур кеше булыр, ата-әсәһе уның менән ғорурланыр. Йәшлектәге хаталарың йөҙө менән ғазап булып ҡайтыр, мин ул саҡта бер ни менән ярҙам итә алмам. Яҡшылап уйла, һин хәҙер бала түгел, һин хәҙер әсә кеше, оялма ла, ҡурҡма ла, булаһы булған. Балаңды ташлау тормошоңдағы иң ҙур хатаң булыр, уйла, әле һуң түгел.

– Уйланым инде, күп уйлаһаң, тиҙ ҡартаяһың. Мин был хаҡта башҡа һөйләшергә теләмәйем, – тине лә ҡыҙ ишекте шапылдатып ябып сығып китте.

– Эх, йүләр йәшлек, бик һөйләшкең килер, һуң булыр...

Ғәлимә апаһы был һөйләшеүгә ҡатнашманы, Сөмбөл хаҡлы, һуңынан күптәр үҙ балаларын эҙләйҙәр, үкенәләр, илайҙар. Хоҙай ундайҙарға язаһын ҡаты бирә, уларҙа әсәлек хисен уятып, йән тыныслыҡтарын ала, бына шул ваҡытта кәкүк әсәләр өсөн «киәмәт көнө» башлана.

– Ғәлимә апай, шәфҡәт туташына әйтегеҙ, ул баланы бында алып килһен, ҡарайым әле.

– Нимә уйланың, Сөмбөл?

– Мин ул баланы Булаттарға алам.

– Уларға кәрәкмәһә?

– Үҙемә булыр, ике янына берәү һыйыр әле.

Бәләкәй генә төргәкте алып килделәр. Баланы ҡулына алыу менән Сөмбөл күҙ йәшен тыя алманы.

– Эй, сабыйым, кил әле үҙемә.

Ул, баланы таратып, бар ерен ҡарап сыҡты, һау-сәләмәт бала. Еүеш сепрәктәрен алыштырҙы, өйҙән алып килгән иң матур йылы сепрәктәргә төрҙө, күкрәгенә яҡын килтерҙе, бала, шуны ғына көткәндәй, бик тәмләп, тағы ҡасан эләгә, тип ашығa-ашығa имергә тотондо.

– Ҡалһын бында, алып китмәгеҙ, – тине баланы алырға ингән шәфҡәт туташына.

Баланың әсәһе менән дә, өләсәһе менән дә һөйләшеү ыңғай һөҙөмтә бирмәне, кемгә кәрәк, шул алһын, тинеләр.

Сөмбөл Байрасын көс-хәл менән көтөп алды, ир башынан һикерергә ярамай, уртаҡ һалып һөйләшергә өйрәнгән Сөмбөл.

– Атаһы, ошо баланы Булат менән Фәриҙәгә алайыҡ. Улар риза булмаһа, үҙебеҙгә алырбыҙ. Бигерәк йәл, әсәһе ташлап китте, – тигәс, Байрас баланы ҡабат-

ҡабат килеп ҡараны, шул сабыйҙы нисек йәлләмәйенсә ташлап киттеләр икән, тип аптыраны.

Һәр балаһы өсөн йәнен бирергә әҙер торған Байрас:

– Ярай, әсәһе, алып ҡайтайыҡ, аҙаҡтан күҙ күрер. Миңә лә ағайҙар алдында ситен, кешене үртәгән кеүек, беҙҙә икәү, уларҙа бирәү ҙә юҡ. Азамат киткәс, ағай бөтөнләй төшөнкөлөккә бирелде, бәлки, уға ла йән инер.

Яңы йыл алдынан Байрас Сөмбөлдө бер ҡосаҡ бала менән больницанан алып сыҡты. Айһылыу, был тиклем баланы күреп:

– Әсәкәйем, был кем балалары, кеше бер бала алып ҡайта, ә һин өстө алып ҡайтҡанһың, – тип шаҡ ҡатты.

Бына башланды тамаша: береһе илаһа, икенсеһе ҡушылды, уныһына – өсөнсөһө. Азаматтың бүлмәһе дарыу, сепрәктәр менән тулды. Бер көн эсендә өс балаға апай булған Айһылыу:

– Мин береһен генә ҡарайым, – тип бер баланы үҙ бүлмәһенә алып сығып киткән ине, илағас, кире индерҙе.

Быға тиклем атаһы менән әсәһененең бер бөртөк иркә ҡыҙы булып йәшәгән Айһылыу, бөтә иғтибар балаларға күскәс, үҙен кәрәкһеҙ кеүек хис итте. Ҡыҙының үпкәләгәнен иң беренсе атаһы һиҙеп алды.

– Ҡара әле, әсәһе, беҙҙең Айһылыу нисек ҙур үҫеп китте, һиңә ярҙамсы, энеләренә апай булды.

Сөмбөл, эштең ниҙә икәнен аңлап:

– Кил әле, ҡыҙым, һин беҙҙең иң матур, иң ҙур, иң аҡыллы ҡыҙыбыҙ бит. Бына энеләрең бер аҙ үҫһендәр, улар һине беҙгә ҡарағанда ла нығыраҡ яратасаҡ, «апай, апай» тип яныңдан китмәйәсәк, ҡыҙым, – тип Айһылыуҙы ҡосаҡланы.

Ата-әсәһе һүҙҙәренән Айһылыуҙың кәйефе күтәрелеп китте.

Кисен, хәл белергә тип, Булат менән Фәриҙә инде. Башта йыйылышып сәй эстеләр, Байрас, нисек һүҙ башларға белмәй, ҡатынына ҡарап алды. Сөмбөл бер аҙ уйланып торғас, ҡунаҡтарҙы, балалар ҡарарға тип, өҫкө бүлмәгә саҡырҙы. Улар ингәндә, карауатта ике бәләкәй генә малай йоҡлап ята ине.

– Бәй, өсөнсөһө ҡайҙа?

Бәләкәй ҡыҙҙы Айһылыу үҙ бүлмәһен алып сыҡҡан булған икән.

– Ҡыҙым, ул ҡурсаҡ түгел, улай уйнама. Әйҙә, ҡыҙым, был бәпесте Фәриҙә апайыңа бирәйек, уларға ла кәрәк бит, – тигәс, Айһылыу йылмайып:

– Әйҙә, быныһы күберәк тә илай, – тип бәләкәй ҡыҙҙы әсәһенә бирҙе.

Сөмбөл баланы күтәреп Фәриҙә ҡаршыһына килеп баҫҡас, аптырап ҡалдылар: ике малай тигәндәр ине бит.

– Алығыҙ ошо баланы, уның бер кеме лә юҡ. Бала ла, үҙегеҙ ҙә бәхетле булырһығыҙ. Үҫтерегеҙ, исем бирегеҙ, өйөгөҙгә йәм инер.

Булат менән Фәриҙә, көтөлмәгән хәлдән аптырап, бер-береһенә ҡарашып алдылар.

– Алығыҙ, ағай, йәтим бала ул, әсәһе ташлап киткән. Һеҙ алмаһағыҙ, үҙебеҙ алабыҙ.

Сөмбөл әкрен генә баланы Фәриҙәнең ҡулына һалды.

– Ал, ҡыҙың булһын, ҡурҡма, үҙем булышырмын, икәү ҡарарбыҙ.

Ал биләүгә күҙ йәштәре тамды, Фәриҙә ҡулындағы биләүҙе күкрәгенә ҡыҫты, үҙе ялбарып Булатҡа ҡараны.

– Алайыҡ, – тине, күҙ йәштәренә быуылып, – миңә бала кәрәк, – тип бышылданы, – минең дә әсәй булғым килә, алайыҡ, Булат, – тип ялбарҙы.

Һәр ваҡыт ғорур, үлһә лә күҙ йәшен күрһәтмәй торған Фәриҙәне бындай хәлдә әле берәүҙең дә күргәне юҡ ине. Ҡатынын йәлләп, Булаттың йөрәге әрене, үҙенең дә күңеле тулды, тамағына ултырған төйөндө ауырлыҡ менән йотоп:

– Алайыҡ, – тине.

Фәриҙә күҙ йәштәре аша йылмайҙы.

– Һин дә атай булырһың.

Улар һораулы ҡараш менән Сөмбөлгә текәлде, икеһе бер тауыштан:

– Беҙгә хәҙер ни эшләргә кәрәк? – тине.

Сөмбөл менән Байрас, өҫтәренән ҙур йөк төшкәндәй, еңел һулап ҡуйҙы.

– Һеҙгә бик күп ҡағыҙ йыйырға тура киләсәк. Фәриҙә бала менән өйҙә ултырыр, әлегә мин имеҙермен, үҫә төшкәс, үҙегеҙ ашата башларһығыҙ. Азаматтың бүлмәһе буш, шунда йәшәп тора алаһығыҙ, барыбер имеҙергә беҙгә киләсәкһең бит. Бәхетле ата-әсә булығыҙ, аҡыллы ҡыҙ итеп үҫтерегеҙ, һеҙҙең өйөгөҙ бала тауышынан гөрләп торһон, – тип йылмайҙы Сөмбөл.

Бына шулай уйламағанда-көтмәгәндә Булаттар өйөнә лә йән инде, улар бер аҙна буйы кәрәкле ҡағыҙҙар артынан сапты. Кисен, барлыҡ арыу-талыуҙарын онотоп, бала тирәһендә бөтөрөлдөләр. Фәриҙә көнгә бер нисә тапҡыр ҡыҙын Сөмбөлдәргә имеҙергә алып инде. Бала имгән әсәһен һағынып инә, бәләкәй ҡулдары менән сәбәкәләй-сәбәкәләй имә. Баланың шул тиклем яратып, тәмләп күкрәк һөтөн имеүен күреп, Фәриҙәнең күкрәктәре һыҙлап ҡуя ине. Эх, шул бала имеҙеү тойғоларын бер татыһаң ине! Бер ваҡыт өйҙә, кеше күрмәгәндә, ҡыҙына күкрәген ҡаптырып ҡарарға булды. Ләкин сабый һурып ҡына ҡараны ла, һөт булмағас, ҡысҡырып илап ебәрҙе. Фәриҙә, баланы алдауына оялып, Сөмбөлдәргә йүгерҙе...

Кистәрен барыһы бергә Байрастарҙа йыйылалар. Өс баланы уртаға ултыртып, уларға ҡарап ултыралар. Ике тамсы һыу кеүек оҡшаш Азат менән Саматты әсәләре генә айыра. Бәләкәс Гүзәл малайҙарға ҡарағанда теремек булып сыҡты, әле береһен, әле икенсеһен тартып йыға, Сөмбөл янына килеп, имсәк һорай. Малайҙар ҡайҙа нимә йәшерелгәнен яҡшы беләләр, улар ҙа ҡыҙҙан ҡалышмай.

Балаларға йәш тулды, тормош шулай әкрен генә үҙ эҙенән барыуын дауам итте.

Ял көнө иртән, йүгереүҙән тыны бөтөп, Булат килеп инде.

– Сөмбөл, әйҙә әле тиҙерәк, Фәриҙәгә әллә нимә булды, кисәнән бирле күңеле болғана, тора ла, ашай ҙа алмай, – тип, Сөмбөлдө ашыҡтыра-ашыҡтыра, үҙҙәренә алып инде.

Сөмбөл Фәриҙәне ентекләп ҡараны, ҡурҡыныс бер нәмә тапманы, күңеленә килгән шиген һиҙҙермәне, күңел болғаныуҙы баҫа торған дарыу бирҙе.

– Әйҙә инде, Фәриҙә тағы сирләне бит, – тип бер-ике көндән Булат ҡабат инеп етте.

Сөмбөл Фәриҙәне ҡарағас, йылмайып ҡуйҙы:

– Сөмбөл, ниңә көләһең? Үләм бит, – тип ыңғырашты Фәриҙә.

– Үлмәйһең, әле йәшәй генә башлайһың. Йәтимде бәхетле итһәгеҙ, үҙегеҙ ҙә бәхетле булырһығыҙ, тип әйттем бит мин һеҙгә. Ҡурҡма, теге ваҡытта шикләнгән инем, хәҙер шигем ҡалманы. Һин балаға уҙғанһың, Алла теләһә, йәйгә тағы атай-әсәй булырһығыҙ.

Булат лып итеп урындыҡҡа ултырҙы.

– Сөмбөл, ни һөйләйһең? Яңылышмайһыңмы?

– Булат, был һеҙгә, йәтимде һыйындырғанығыҙ өсөн, Хоҙайҙың рәхмәте. Һуңлап булһа ла әсәй булыу, бала имеҙеү теләге организмға көс биргән. Ҡотлайым һеҙҙе, мин һеҙҙең өсөн бик шат. Йәйгә эшкә сығам, үҙем бәпесләтермен.

Иҫән кешегә ғүмер бик тиҙ уҙа, йәйҙә Булаттың улы тыуҙы. Сөмбөл Булаттың ҡулына баланы һалғанда:

– Мин хәҙер һинең өсөн тыныс, үткәндәрҙе онот, киләсәк менән йәшә, Булат, – тине.

# ЭПИЛОГ

Шәфҡәт ағайҙың ҡапҡа төбөнә бер-бер артлы машиналар ҡайтып теҙелде, ишек алды бала-саға менән тулды. Ҡатын-ҡыҙ ҡасандыр Сөмбөл үҫтергән баҡсаға матур итеп табын әҙерләне, Байрас менән Булат яңы урындыҡтар урынлаштырҙы.

Бөгөн Шәфҡәт ағайға етмеш йәш, балалары уның тыуған көнөнә йыйылды, ләкин, ни эшләптер, төпсөк улы Әлфис кенә күренмәй, аптырағас, ҡапҡа төбөнә сығып ултырҙы, уға ейәндәре эйәрҙе.

– Балалар, йүгермәгеҙ, йығылырһығыҙ.

Тиктормаҫ малайҙар, уның һүҙен ҡолаҡтарына ла элмәйенсә, арлы-бирле йүгереште, Гүзәл дә уларҙан ҡалышырға теләмәне. Был малайҙарҙы нисек айыралар икән– икеһе лә бер тамсы һыу кеүек аталарына оҡшағандар, ә был бөҙрә сәсле ҡурсаҡ – нәҡ Фәриҙә инде, үҙенән тыуған тиерһең.

– Эй, башкиҫәрҙәр, бына кеҫәмә бер тәмле нәмә йәшерҙем, тапһағыҙ, үҙегеҙгә була.

Балаларҙы янында тотоуҙың бер хәйләһе ине был. Балалар бабайҙың кеҫәләренә тығылды.

– Эҙләгеҙ, яҡшылап эҙләгеҙ, үҙе бәләкәй генә, үҙе шундай тәмле.

Балалар менән ҡайнаша ла, үҙе юлдан күҙен алмай. Төпсөгө утыҙға етте, әле һаман өйләнергә уйламай, кемде эҙләйҙер?

Әлфис, юғары уҡыу йортон тамамлағас, сауҙа менән шөғөлләнә башланы, хәҙер үҙенең бәләкәй генә бер фирмаһы, Өфөлә фатиры, яҡшы машинаһы бар. Бар әйбере етешле, ә бына өйләнмәй йөрөй бирә. Шәфҡәт ағай, улы ҡайтҡан һайын, артынан берәйһе эйәреп кермәҫме икән, тип өмөтләнеп, ишеккә ҡарай.

– Олатай, юҡ бит, һин алдайһың, – тип Гүзәл бабаһын тартҡылай башланы.

– Бар, бар, һәйбәтләп эҙләгеҙ, кеҫәне генә тишмәгеҙ.

Урам буйлап туҙан туҙҙырып килеүсе бер машина күренде, сиҙәм сүпләп йөрөгән ҡаҙҙар тирә-яҡҡа сәселде.

– Ҡайһы йүнһеҙе шулай саба, бөтә кешене туҙанға батырып, бала-саға йөрөп тора, – тип Шәфҡәт ағай уйлап та өлгөрмәне, теге хәтәр машина уларҙың ҡапҡа төбөнә килеп туҡтаны.

Ҡапҡанан балалары янына сығып килеүсе Сөмбөл:

– Абау, кем былай туҙан туҙҙырып йөрөй, – тип ҡайныһы янына килеп ултырҙы.

Ҙур матур машинанан аҡ костюм-салбар кейгән бик сибәр, оҙон буйлы егет төштө.

– Көтәһегеҙме? Һаумыһығыҙ!

– Бәй, Солтанай бит. Атай, Әлфис тағы машинаһын алыштырған, ә беҙ танымай торабыҙ.

– Нимә күҙеңде тондороп сабаһың? Бөтә кешене туҙанға батырҙың бит, – тигән булды Шәфҡәт ағай, малайын шелтәләп.

– Ашыҡтым, атай, ана, ҡунаҡтар ашыҡтыра бит. Сөмбөл апай, ҡара әле, кемде алып ҡайттым.

– Һаумы, әсәй, – тигән тауышҡа Сөмбөл һиҫкәнеп китте һәм:

– Улым, Азамат, – тип урынынан тормаҡсы булды.

– Әсәйем, – тип егет әсәһе ҡаршыһына килеп теҙләнде. – Әсәйем, бәғерем.

– Улым, ҡайттыңмы, балам, күҙ нурым, – тип әсәһе уның башын күкрәгенә ҡыҫты, күҙенән йәштәре тамды.

Азамат әсәһенең күҙҙәренән үпте, үҙенең дә күҙҙәре йәшләнде. Сөмбөл улының битен ҡулдары менән тотто:

– Балам, – тип күҙҙәренә ҡараны. – Ниндәй сибәр егет булғанһың, ҡайҙа, туйғансы бер ҡарайым әле үҙеңә.

Улын күрмәгәнгә дүрт йыл булған. Азаматҡа ысын ирҙәр төҫө ингән, биттәре ҡояшта ҡарайған, ҡуйы ҡара сәсе матур итеп киҫтерелгән, зәңгәр күҙҙәре янып тора. Ул Булаттың йәшлеген ҡабатлаған, атаһының сибәрлегенә әсәһенең һөйкөмлөлөгө ҡушылған.

Сөмбөлдөң күҙ йәштәрен күреп, игеҙәктәр, тиҙ генә олаталары алдынан төшөп, икеһе ике яҡтан әсәләренең беләгенә йәбеште. Гүзәл, апаһын илатҡан ағайға уҫал итеп ҡарап:

– Теймә! – тип  уның еңенән тартты.

Сөмбөл уңайһыҙланып ҡына оло улына ҡараны.

– Улым, үпкәләй күрмә, улар бәләкәй бит әле. Бына быныһы Азат, быныһы Самат энең, ә был матур ҡыҙ – Гүзәл. Балалар, таныш булығыҙ, был – оло ағайығыҙ Азамат. Мин уны бик яратам, һеҙ ҙә яратығыҙ.

– Ну, байығанһығыҙ, әсәй, – тип башын һелкене Азамат, олатаһы янына килеп.  – Һаумы, олатай, мине онотманыңмы, ейәндәрең күбәйгән бит?

– Улай тимә, улым, һин иң ҡәҙерлеһе, балам, һин бит беренсе, баш ейән, һинең урыныңды берәү ҙә ала алмай. Уҙ түргә, улым.

– Атай, бында тағы бер ҡунаҡ бар әле, – тип машинаның арт ишеген асты Әлфис. Машинанан уртаса буйлы, ҡап-ҡара бик һөйкөмлө ҡыҙ сыҡты, ул ҡайһылыр яғы менән Сөмбөлдөң йәшлеген хәтерләтә.

– Атай, таныш бул, буласаҡ киленең Әлиә.

– Хуш киләһең, ҡыҙым, түргә уҙ.

Бына кемгә оҡшаған ҡыҙҙы эҙләгән улы. Күпме оҡшаған икәнен йылдар күрһәтер, Сөмбөл – Сөмбөл инде ул...

– Әйҙәгеҙ, әйҙә, йортҡа инегеҙ, башҡа килер кеше ҡалманы, – тип Шәфҡәт ағай ҡапҡаны асты.

Арыҫлановтар ғаиләһендә бөгөн байрам. Шәфҡәт ағай хәҙер инде бабай, өҫтәл тирәһендә йыйылып ултырған балаларын күҙҙән кисерҙе. Бик бәхетле ине ул бөгөн.

Шәфҡәт ағайҙар баҡсаһында йыр-моң ағылды. Ахундың алыштырғыһыҙ гармунсыһы, һүҙ оҫтаһы Сәлимйән ағай ҡунаҡтарҙың күңелен күрҙе.

– Сәлимйән дуҫ, әйҙә, тарт үҙебеҙҙекен, Ахун көйөн!

*Урам көйө, урам көйө,*
*Урам көйө беҙҙеке.*
*Сыҡмаһын да дошман һүҙе өҫкә,*
*Сыҡһа сыҡһын беҙҙеке.*
*Эх, Ахундың урамдары,*
*Беҙ киткәс тынып әле*
*Ахундың урамдары...*



**Хәлисә**
**МӨҘӘРИСОВА**

## *Кем булһаң да*

*Яҡшыртаһы килеп донъяны*
*Тир түккән ир — сират артында*
*Тешен ҡыҫа, төйнәй йоҙроҡ,*
*Түрә «эш күрһәтә», ә ысынында —*
*Этеш-төртөш ҡояш аҫтында.*

*Яҡтыртаһы килеп өҙлөккән*
*Ризыҡ йыя урам сатында.*
*Шәп машина тәҙрәһенән*
*Хәрәм йыйған тинен ырғыта,*
*Этеш-төртөш ҡояш аҫтында.*

*Мәңгелеккә килгән шикелле,*
*Һоҫа самаһыҙ кеше хаҡына.*
*Намыҫлыға бында урын юҡ,*
*Тағараҡҡа яҡын килгәнде*
*Этеш-төртөш ҡояш аҫтында.*

*Баш һөйәге тора ыржайып,*
*Төпһөҙ ҡараш буш күҙ аҫтында...*

---

*Хәлисә Мөҙәрисова (1953) Ишембай ҡалаһында тыуған. Балалыҡ һәм үҫмер йылдары Иглин, Нуриман райондарында үтә. БДУ-ның филология факультетын тамамлай. Нуриман районы үҙәге Красная Горка ауылында йәшәй.*
*Авторыбыҙҙы күркәм юбилейы менән ихлас тәбрикләйбеҙ.*

*Этеш-төртөш — ярыҡ тағараҡ!*
*Һәр кем тыуҙан ваҡыт ҡаршыһында —*
*Кем булһаң да ҡояш аҫтында.*

* * *

*Ташланым, ҡыуҙым, оноттом,*
*Иреп юғала шәүләң.*
*Кире ҡайтыр юлың япты*
*Был юлы һиңә тәүбәм.*

*Күпме яфа, күпме ҡорбан*
*Техетеңә — тырышлығым,*
*Булмышымды бағышланым*
*Ҡушып йән тыныслығын.*

*Һин тип күпме бәргеләндем,*
*Дошман булды серҙәштәр,*
*Йәнемә бысаҡ ҡаҙаны*
*Һинең өсөн көндәштәр.*

*Етте! Осһон үҙ күгенә*
*Мөхәббәт емештәре,*
*Уларҙың үҙ донъялары,*
*Фиғеле, килештәре.*

*Һау бул, сазым, туҡтат наҙың,*
*Йәшлек үтте, арытты,*
*Заманында матур итте,*
*Батыр итте, балҡытты,*
*Ғүмер үтте, хәҙер инде*
*Әрәм итмәм ваҡытты.*

*Бына яңғыҙ донъя көтәм,*
*Йоҡлайым да — уянам,*
*Ҡабаланам ҡайтарырға*
*Уны үткән донъянан.*

*Тик нимә был? Һинән башҡа*
*Йәнем юҡ, бары — кәүҙәм.*
*Ҡайт кире, ташлама мине,*
*Илһамым, шиғри тәүбәм.*

## Өфө

*Ал нурға ҡойонған урамдар,*
*Һауала аҡ сирень еҫтәре.*
*Моң булып саҡыра, кұр ана,*
*Өфөнөң йыр тулы кистәре.*

*Һәр һуҡмаҡ, сәскәлә — яҡты наҙ,*
*Һаҡлана мөхәббәт серҙәре.*
*Йәшлектең ұҙенә ғашиҡ ул*
*Өфөмдөң йондоҙло төндәре.*

*Ағиҙел күпере өҫтөндә*
*Алтын ай, ярында талдары.*
*Дим йырлай, тирбәлә, талпына,*
*Өфөмдөң бәхетле таңдары.*

*Йәшлек — ул мәңгелек хәтирә,*
*Һағыныр кемдәрҙер — кемдәрҙе.*
*Яҡтырһын һәр ваҡыт күңелдә*
*Өфөнөң ҡояшлы көндәре.*

## Асылы – шул!

Рәдиф Ғаташҡа

*Йомарт көҙҙәр баҡсаһынан,*
*Гүйә, яҙ ҡарап ҡуя,*
*Яңы бөрө бүртер өсөн*
*Ағас та япраҡ ҡоя.*

*Сыҡҡан күпер күмер түгел,*
*Әйтмә: «Ваҡыт үтелгән...»*
*Юҡҡамы ни нескә йәнең*
*Һандалдарҙа сүкелгән.*

*Сүкелгән һәм юнғыланған,*
*Ҡағылған һәм өтөлгән,*
*Күпме ҡулдан дарыуы ла,*
*Ағыуы ла эселгән.*

*Япраҡ ҡойғас, япраҡ ярыр,*
*Был донъя наҙға түйыр,*
*Нисә мыҫҡал ынйы-япраҡ*
*Йәнеңә әле һыйыр.*

*Мөлдөрәмә уй-кәсәңдә*
*Яңы яҙҙар ғәм өрөр,*
*Йәшәйештең һәр фасылы*
*Мең үҙгәреш — бер ғүмер!*

*«Ғаташ» тиһәң, асылы шул:*
*Илһамы юғалмаған,*
*Затлы сағы, заман сағы,*
*Аттарын туғармаған,*
*Һөйгән, һөйә һәм һөйәсәк —*
*Яратып туялмаған,*
*Шиғриәт тигән бәйгелә*
*Толпарын тыялмаған...*

*«Ғаташ» тиһәң,*
*Асылы — шул.*

* * *

*Айырылды йәй көҙҙән —*
*Ҡул болғап оҙатты,*
*Астра керпегенә*
*Тәүге рашҡы ятты.*

*Утын һалам утҡа,*
*Янһын усаҡ, янһын.*
*Ҡүшеккән йәндәргә*
*Йылы тулҡын барһын.*

*Был әле — тәүге ҡар,*
*Юҡ, әле ҡыш булмаҫ,*
*Ҡыш булыуын булмаҫ,*
*Йылы ла йыш булмаҫ.*

*Хужа булыр тиҙҙән*
*Сыңлап торған ҡыштар,*
*Ҡуныр тәҙрәгә*
*Ҡыҙыл түшле ҡоштар.*

*Ҡыҙыл түшле ҡоштар —*
*Ҡояш ярсыҡтары,*
*Әй, һин, алтын көҙкәй,*
*Китмә, ашыҡма әле!*

*Илтмәле ҡыштарға,*
*Ҡыштар шундай оҙон,*
*Ҡыш үлемгә оҡшаш —*
*Яба ергә боҙон.*

*Йылдың был миҙгеле —*
*Минең ғүмер кеҫек,*
*Уты һүнеп барған*
*Усаҡ көлө кеҫек.*

*Ләкин көл аҫтында*
*Усаҡ йәне тере!*
*Ҡуҙҙа — өмөт көсө,*
*Ҡуҙҙа — йәшәү сере.*

*Утын һалам утҡа,*
*Янһын беҙҙең усаҡ,*
*Өмөт һәм ышаныс*
*Һалам ҡосаҡ-ҡосаҡ.*
*Ҡыҙыл түшле ҡоштар*
*Яҙға илтер бер саҡ.*

* * *

*Күңел тәҙрәләрем асыҡ —*
*Бар ғүмер әле алда.*
*Улар ҡояшҡа асылған,*
*Эргәлә һөйөү барҙа.*

*Йәшлегем инде эйәрҙә —*
*Ҡабаланған саҡтарым:*
*Яулайһы үрҙәр саҡыра,*
*Ашыҡтыра саптарым.*

*Беҙ яулайһы киңлектәрҙә*
*Өмөттәр ҡанатлана.*
*Аҡ хыялдар, бәхет теләп,*
*Беҙҙе оҙатып бара.*

*...Офоҡ аша офоҡ сигә,*
*Бөгөн ейәндәр эйәрҙә —*
*Ғүмерҙәр ҡабатлана.*



**Рамай**
**ҠАҺИР**

## *Урмансылар*

2013— Тирә-яҡ тәбиғәтте һаҡлау йылы

*Яҙ килә. Ирей аҡ ҡарҙар.*
*Урамда ҡыләцектәр.*
*Урманда ҫлән моронлай,*
*Терелә ҡыбәләктәр.*
*Яҙ килә нурҙар сайпылтып,*
*Йөҙҙәрҙә юҡ борсолоу.*
*Кешеләргә ҫҙе шатлыҡ*
*Имен-аман ҡыш сығыу.*
*Оҙаҡламай йәй ҙә етер,*
*Шуға ла көр ҡыңелдәр.*
*Игенселәр иген сәсер —*
*Уңһын инде игендәр!*

*Барыһы ла шат йылмая,*
*Борсоулы тик урмансы.*
*Ул ҡфтаныл теләк теләй:*
*«Эх, ямғырҙар яуһасы!»*
*Ерҙең өҫтө — ҡыу ҫләндә,*
*Һыуҙар кипкән, ер ҡоро.*
*Бөгөнгө көн урмандарҙа*
*Утлы хәүеф осоро.*

*Рамай Ҡаһир (1962) Учалы районының Өргөн ауылында йәшәй. Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Урмансылар теләк теләй,*
*Яуһын, тиеп, ямғырҙар.*
*Урмандарҙа көнөн-төнөн*
*Дөрләп тора янғындар.*
*Янып китә ҡоро үлән*
*Һүнмәгән тәмәкенән.*
*Оло бәләгә килтерә*
*Уйнауҙар шырпы менән!*

*Борсолоуҙан һыҙлай көн дә*
*Һеҙҙең йөрәк яраһы.*
*Янһа Бөрйән урмандары,*
*Янһа Илеш далаһы.*
*Ыңғыраша тау-урмандар,*
*Илап яна тәбиғәт.*
*Был бәләләр — хәҡиҡәт.*
*Беләм, һеҙгә еңел түгел,*
*Һеҙ — тик ут уртаһында.*
*Һәр көн һайын яңы хәбәр*
*Янғындар тураһында!*
*Әйтерһең, юрый ҡыҙҙыра*
*Яҙҙың сағыу ҡояшы.*
*Яна урман, күпме йәнлек,*
*Яна ҡоштар ояһы.*
*Һыу һиптерә «пожарка»лар,*
*Эх, етмәй вертолеттар.*
*Шулай ҙа беҙ бирешмәйбеҙ,*
*Ныҡ әле беҙҙең сафтар!*
*Көрәшәбеҙ янғын менән,*
*Ер һөрә тракторҙар.*
*Күмәкләшеп ут һүндерә*
*Башҡорт, татар, урыҫтар.*
*Ярһып инәм ут эсенә,*
*Мин — янғын һүндереүсе.*
*Тәбиғәтте ҡотҡарғанда*
*Мин, һис шикһеҙ, беренсе! —*
*Яртылаш янған ҡарағай*
*Ҡолай яҙа өҫтөмә.*
*Ышанам мин сослоғома*
*Һәм ышанам көсөмә.*
*Ялтанып ҡалам үлемдән,*
*Мин посымда, мин — тере!*
*Беҙҙе үҫләр әле оҙаҡ*
*Шаулы урман хәтере.*

*Кеше — тәбиғәт балаһы,*
*Тимәк, тәбиғәт — әсәй.*
*Янғын һүндерә кешеләр*
*Төтөнгә сәсәй-сәсәй.*
*Тырышалар йәшәһен, тип,*
*Йәшәрһен, тип, ер-урман.*
*Тәбиғәтте ҡотҡарырлыҡ*
*Уларҙа бар көс-дарман.*
*Урман булһа — ағас була,*
*Ағас булһа — йорт була.*
*Бары йортло кешеләрҙең*
*Күңеленә ҡот тула!*

*Ул урмандың, беләһегеҙ,*
*Ниндәй татлы һауаһы.*
*Күпме сырхауҙы терелткән*
*Үләндәрҙең дауаһы.*
*Шул урман тип йән атам мин,*
*Һоҡланам шул урманға.*
*Бәхетле мин тау-урманлы,*
*Ҡотло ерҙә тыуғанға.*

*Тирләп бөттөм, бар тәнемдән*
*Тама ҡайнар тамсылар.*
*Беҙҙең һөнәребеҙ шундай,*
*Беҙ, тимен, урмансылар.*
*Тәбиғәтте яҡлау, һаҡлау —*
*Беҙҙең бурыс иң элек.*
*Урман ғына булһын тере,*
*Урман булһын мәңгелек!*
*Яҙ етте. Һәр көн тиерлек*
*Ҡойоп яуа ямғырҙар.*
*Шөкөр, тимен, урмандарҙа*
*Баҫылды ут-янғындар.*
*Тәбиғәтте йәмләй бөгөн*
*Һандуғас һайрауҙары.*
*Баҫылмайҙыр бары һеҙҙең*
*Йән, йөрәк һыҙлауҙары.*
*Борсолорлоҡ сәбәптәр күп,*
*Ҡырҡыла күпме урман.*
*Әллә донъялар үҙгәрҙе,*
*Әллә кешеләр яман?!*
*Браконьерҙар тынғы бирмәй,*
*Тынғы бирмәй янғындар.*

*Эшһөйәргә ҡарағанда,*
*Артты ялҡау, аҙғындар.*
*Урман бөтһә, ъәфү итмәҫ*
*Беҙҙе киләсәк быуын.*
*Уларға ла ҡалдырайыҡ*
*Шишмәләрҙең саф һыуын.*
*Улар ҙа һулап үҫһендәр*
*Саф һауаһын урмандың.*
*Шул урмандан илһам алып,*
*Ғүмер буйы нурландым!*
*Әйҙә, киләсәк быуынға*
*Ҡалдырайыҡ изгелек:*
*Урман булһа — донъя бөтмәҫ,*
*Донъя булыр мәңгелек!*

## Ауырығанда

*Ҡан баҫымым күтәрелде,*
*Еп өҙөрлөк юҡ хәлем.*
*Ауырыйым, нисәнсе көн —*
*Уттай яна бар тәнем.*
*Олоғайҙым, шуғалыр ҙа*
*Бөтөп бара көс-кәрем.*
*Бал бутап сәйҙәр эсерә —*
*Ҡатыным, һөйгән йәрем.*

*Өсөнсө көн түшәктәмен,*
*Еп өҙөрлөк юҡ хәлем.*
*Әжәл яғамдан алғандыр,*
*Уттай яна бар тәнем...*
*Төшөнөп булмай донъяны,*
*Бал ҡаптырһа ла йәрем;*
*...Ҡылған эштәреңә ҡарап*
*Тормош ҡаптыра әрем!*

## Учалымдың алтын кешеләре!

Шәхси эшҡыуар
Йәғәфәров Фәнүз Ғәйнан улына

*Ҡояш кеҫек кешеләр бар,*
*Тик ҡояш юғарыла.*
*Ә һин халыҡ араһында —*
*Нур сәсәң Учалыла.*

*Ошо нурҙар киңәйтәләр*
*Дүрт тарафта офоҡто.*

*Һәйтәктәргә мәсет төҙөп,*
*Ҡыуандырҙың халыҡты!*

*Һин сәмле лә, егәрле лә,*
*Эшле иттең ҡуптәрҙе.*
*Ил ағаһы тип атайҙар*
*Тап һинең кеүектәрҙе!*

*Алтын кешеләр булғанда,*
*Ни кәрәге алтындың?!*
*...Арҡа терәр ағайҙар бар,*
*Таянысы халҡымдың!*

## Яңғыҙ ҡарттың әйткәне

*Әжәл яғаңдан алғанда,*
*Бер яңғыҙың ҡалғанда,*
*Барлыҡ булған өмөттәрең*
*Эргәңдәге балаңда.*
*Таҙа кейемен кейҙерер,*
*Таҙа урынға һалыр;*
*Атай — бала хөкөмөндә,*
*Һине шул балаң бағыр!*
*Иренеңде сылатыр ул —*
*Һыу теләп сарсағанда,*
*Хәлең нисек, атай, тиеп,*
*Һорашыр һәр бер таңда.*

*Үлер алдынан да шулай —*
*Була бәхетле булып.*
*Ҡарт шундай фекер төйнәне,*
*Күҙҙәре йәшкә тулып.*
*Ҡарт көнөңдә булһаң әгәр*
*Ҡараулы һәм ҡәҙерле,*
*Тимәк, дөрөҫ йәшәгәнһең,*
*Юйып булмай хәтерҙе.*
*Балаларыңды яратһаң,*
*Биреп бар йөрәк көсөн,*
*...Улар утҡа-һыуға инер,*
*Ҙурайғас, һинең өсөн!*

## Үләндәргә илап ауаһы

*Алтын-көмөш миңә кәрәк түгел,*
*Миңә кәрәк — ирек һауаһы.*

*Күптән көткән ирек тәме генә*
*Миңә булыр ирек дауаһы.*

*Миңә кәрәк тәбиғәттең моңо,*
*Ҡошсоҡтарҙың моңло һайрауы.*
*Һутлы еләк менән аҡландарҙың*
*Йомартланып мине һыйлауы.*

*Миңә кәрәк әсәйемдең моңһоу,*
*Йылы ғына нурлы ҡарашы.*
*Шул ҡараштан яҡтыра бит мәңге*
*Был донъяның һәр бер тарафы.*

*Алтын тауҙар миңә кәрәк түгел, —*
*Миңә изге ирек һауаһы.*
*Тыуған ерҙәремә аяҡ баҫып,*
*Үләндәргә илап ауаһы...*

## Туған телем моңо

*Елкенеп тора күңелем —*
*Анау сағыу байраҡ һымаҡ,*
*Ейәндәрем туған телдә*
*Һандуғастай һайрай һымаҡ!*
*Туған телем — минең өсөн*
*Бөтмәҫ бер сер, тылсым, йомаҡ.*
*Уның моңо йөрәгемә —*
*Яғылып тора ҡаймаҡ һымаҡ!*
*Эй, Хоҙайым! Балаларҙы*
*Мәхрүм итмә ошо телдән.*
*...Туған телдең ҡәҙерҙәре*
*Күңелдәргә беҙҙең һеңгән!*

## Күңел

*Кемдәр генә белһен, кем аңлаһын*
*Күңелемдә минең ни барын.*
*Ҡай саҡтарҙа ҡосаҡларҙай булам,*
*Сабый бала күреп, Ер шарын.*
*Йәшәйем мин һәр саҡ шөкөр итеп,*
*Ишетмәҫһең минән ир зарын.*
*...Киң күңелем, ҡайнар йөрәгемә*
*Һыйҙырғанмын бөтөн Ер шарын!*

# ЯҢЫ ФЕКЕРҘӘР, ТӨПЛӨ КҮҘӘТЕҮҘӘР ЕМЕШЕ

2011 йылдың аҙағында «Ғилем» нәшриәте республикабыҙҙың фундаменталь тикшеренеүҙәр фонды ярҙамында Башҡортостан Фәндәр академияһының мөхбир-ағзаһы, БДУ профессоры, күренекле әҙәбиәт белгесе Ғиниәт Сафиулла улы Ҡунафиндың урыҫ телендә «XIX – XX быуат башы башҡорт шиғриәте. Жанр һәм идея-художество үҙенсәлектәре мәсьәләләре» тигән монографияһын баҫтырып сығарҙы. Унда автор башҡорт әҙәбиәт ғилемендә тәү башлап әҙәбиәтебеҙҙең теоретик тарихын тыуҙырыу мәсьәләһен күтәрә. Әҙәбиәтте өйрәнгәндә ул уның төп яҡтарын һәм үҙенсәлектәрен асып биреү өсөн нигеҙ булып торған ижад методы, жанр, стиль категорияларын үҙәккә ҡуйып эш итеү кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә ала. Уның фекеренсә, һүҙ сәнғәте билдәле бер идеологияға хеҙмәт итеүсе, билдәле бер идеяларҙы, фекер-ҡараштарҙы пропагандалаусы сығанаҡ, «рупор» булыуҙан бигерәк, сәнғәти-эстетик күренеш. Ошонан сығып, ғалим үҙ монографияларында идеяларҙы, уй-фекерҙәрҙе билдәле бер тәртипкә ойоштороусы, «моделләүсе», ысынбарлыҡтың билдәле бер эстетик концепцияһы булып тороусы жанр һәм уға туранан-тура бәйлелектә әҫәрҙәргә эмоциональ-эстетик төҫ биреүсе, уларҙың экспрессив баһа мәғәнәһен асыусы стиль категорияларының әҙәби процеста һәм уның теоретик тарихын тыуҙырыуҙа ифрат мөһим роль уйнауын аса. Улар әҙәби әҫәрҙең, ғөмүмән, әҙәби процестың художестволы-эстетик тәбиғәтен билдәләшә. Жанр категорияһы айырыуса мөһим роль уйнай. Жанрһыҙ әҫәр ҙә, әҙәбиәттең үҙе лә юҡ. Шуға ла теге йәки был әҙәбиәттең төрлө осорҙағы идея-эстетик торошо панорамаһын күҙаллау өсөн уның жанрҙар системаһын асыҡлау һәм өйрәнеү мөһим. Ошо ҡараштан сығып, Ғ. С. Ҡунафин үҙ монографияһында әҙәбиәт ғилемебеҙҙә беренсе тапҡыр әҙәби процесты жанр күҙлегенән өйрәнеү проблемаһын үҙәккә ҡуя. Әҙәбиәт тарихын яҡтыртҡанда, ул традицион характерҙағы идея-тематик, тасуири-хронологик принциптар ерлегендә әҫәрҙәрҙең һәм айырым ижадтарҙың бары йөкмәткеләрен асып, көнүҙәк мәсьәләләрен күрһәтеп, эстәлектәрен һөйләп сығыу менән генә сикләнмәйенсә, уларҙың төп асылына, эске тәбиғәтенә лә ныҡыраҡ иғтибар итергә, сәнғәттең үҙенсәлекле бер формаһы булараҡ художестволы-эстетик яҡтарын да асып бирергә кәрәклекте һыҙыҡ өҫтөнә ала. Бында ғалим, әҙәбиәт ул саф идеологик, сәйәси булыуға ҡарағанда, бөтәһенән дә элек эстетик күренеш, тап шуның менән башҡа ижтимағи аң төрҙәренән айырыла ла, тигән позициянан сығып эш итә һәм хеҙмәтендә жанрҙарҙың әҙәбиәттең

үҫеш-үҙгәреш законсылыҡтарын билдәләүсе төп категорияларҙың береһе булыуын аса. Уныңса, тап жанр әҙәбиәттең «хәтер йылъяҙмаһы», тарихи күренеш булып тора. Сөнки жанрҙарҙың берәүҙәре юғала, икенселәре үҙгәрә, камиллаша, яңы жанрҙар барлыҡҡа килә. Шуға ҡарамаҫтан, жанрҙарҙа беҙҙе уратып алған ысынбарлыҡ, ижтимағи тормош образын тыуҙырыуҙағы алым-сараларҙың мөһим уртаҡ һыҙаттары осрай һәм һаҡлана. Жанрға хас бөтә ошо үҙенсәлектәрҙең әҙәбиәттең теге йәки был осорҙарҙағы үҫеш-үҙгәреш картинаһын, был процестың нисегерәк булыуын һәм сәбәптәрен асыҡ күҙ алдына баҫтырырға мөмкинлек биреүен ул XIX – XX быуат башы башҡорт шиғриәтенең бай фактик материалдары ерлегендә төплө дәлилләй.

Монографияла XIX быуатта, хатта XX йөҙйыллыҡ баштарында башҡорт һүҙ сәнғәтендә, көнсығыштан тыш, урыҫ, көнбайыш әҙәбиәттәре менән бәйләнештәр көсәйә барған шарттарҙа ла, эпос һәм драма төрҙәренә ҡарағанда, лирик төр өҫтөнлөк алыуы, унда төрлө ижад методтарының һәм йүнәлештәренең, жанр формаларының һәм һүрәтләү сараалымдарының үҙ-ара ҡатмарлы бәйләнештәре, йоғонто яһашыуҙары процесы сағыу яҡтыртыла. Автор әҙәбиәтте жанр йәһәтенән өйрәнеүҙең теоретик аспекттарына, шул иҫәптән жанрҙар дифференциацияһы һәм типологияһының дөйөм принциптарын, шиғри жанрҙың типтар буйынса классификацияһын яҡтыртыуға ҙур иғтибар бүлә. Әйтергә кәрәк, был мәсьәләләр башҡорт әҙәбиәт ғилемендә тәү башлап ныҡлап күтәрелә һәм системалы яҡтыртыла. Үҙенең күҙәтеүҙәрендә ғалим төрлө шиғри жанрҙарҙың генезисын, формалашыу һәм үҫеү юлдарын өйрәнеү, жанрҙарҙың характерлы үҙенсәлектәрен, тотороҡло алымдарын, художестволы «реаллелек» тыуҙырыу сараларын асыҡлауҙың әҙәби процестың, халыҡтың донъяны художестволы-эстетик танып белеүенең күп серҙәрен сисеүгә асҡыс булып тороуын ышандырырлыҡ итеп күрһәтеп бирә. Хеҙмәттең икенсе – дүртенсе бүлектәре – быға сағыу миҫал. Уларҙа Ғ.С. Ҡунафин XIX – XX быуат баштары башҡорт әҙәби йыр, манифестацион-публицистик һәм нарратив лирикаһының жанрҙар системаһы генезисын, тарихи йәшәйеш һәм үҫеш динамикаһын асыҡлауҙа етди аҙым яһай. Ул шиғриәттең ошондай типтары, уларҙың төрлө жанрҙары формалашыуҙары, үҫешенең социаль-иҡтисади, сәйәси, мәҙәни, идея-эстетик ерлеген яҡтыртыуға ла ҙур иғтибар бүлә. Монографияһының икенсе бүлегендә ғалим XIX быуаттың тәүге яртыһы башҡорт шиғриәтендә әҙәби йыр тибындағы жанрҙарҙың («башҡорт йыры», сада, мөнәжәт, бәйет һ.б.) әүҙем үҫеүен, медитатив (тойғо, тәрән уйланыу) характерҙағы жанрҙарҙың (ғәзәл, мәдхиә, мәрҫиә, робағи, хикәйәт һ.б.) өҫтөнлөк итеүен Ә. Ҡарғалы, Һ. Сәлихов, Ш. Зәки, М. Ҡотош-Ҡыпсаҡ һәм аноним шағирҙарҙың ижад емештәрен анализлау нигеҙендә төплө дәлилләй. Уның фекеренсә, башҡорт йәмғиәтендә капиталистик мөнәсәбәттәр формалаша башлаған осорға тиклем йыр лирикаһы жанрҙары, нигеҙҙә, фольклорҙа, ауыҙ-тел әҙәбиәтендә – йырауҙар һәм сәсәндәр ижадында (Асан Ҡайғы, Ҡаҙтуған, Шалғыйыз, Байыҡ, Салауат Юлаев, Буранбай, Ишмөхәмәт һ.б.) сағылыш таба. Капитализм дәүерендә халыҡтарҙың иҡтисади ғына түгел, рухи аралашыуы көсәйеүе, мәғарифтың, яҙма мәҙәниәттең, революцион-демократик идеяларының киң таралыуы, әҙәбиәттең йылдам үҫеүе йыр

лирикаһының яҙма әҙәбиәттә лә нығыклап тамыр йәйеүенә, XX быуат башында романс, гимн, агитйыр, марш, йыр-баллада кеүек жанрҙарҙың барлыҡҡа килеүенә килтерә.

Монографияның икенсе, өсөнсө бүлектәре был дәүерҙәге манифестацион-публицистик һәм нарратив типтағы лирика жанрҙары системаһын анализлауға арналған. Авторҙың, күңелендәгене шағирҙың туранан-тура асып һалыуы, һүрәтләүе, хикәйәләүе башланғыстары һәм уларҙың айырылмаҫ бер бөтөн булып синтезлашыуы башҡорт шиғриәтендә урта быуаттарҙа уҡ ярайһы урын ала, XIX быуаттың икенсе яртыһы – XX быуат баштарында, мәғрифәтселек сәскә атҡан осорҙа, нарратив лирика поэзияның төп типтарының береһенә әүерелә, тигән һығымтаһы менән килешмәү мөмкин түгел. Был күренештең объектив сәбәптәрен ғалим ышандырырлыҡ итеп асып бирә. Әҙәбиәттең йөкмәткеһе шәхес концепцияһы үҙгәреүенә ярашлы үҙгәрә, тигән позициянан тороп, ул, башҡорт шиғриәтендә мәғрифәтселек һәм революцион-демократик идеялар таралыуы дәүерендә, кеше шәхесенә иғтибар артыуға бәйле, уның тормошон һәм ысынбарлыҡты нарратив планда киңерәк, тәрәнерәк сағылдырыу, донъяны лирик танып белеү сиктәрен эпик материал менән киңәйтеү тенденцияһы көсәйеүен М. Өмөтбаев, М. Ғафури, С. Яҡшығолов, Ш. Бабич, С. Ҡудаш, Б. Мирзанов, Д. Юлтыйҙарҙың ижад емештәре миҫалында дәлилләй. Яҡты киләсәк хаҡында ихлас хыялланыусы шағирҙар донъяны лирик «мин» аша ғына күрһәтеүгә ынтылып ҡалмай, ә замандашын күп төрлө ҡиәфәттә, заман, ысынбарлыҡ менән ҡатмарлы, күп яҡлы мөнәсәбәттә кәүҙәләндереү ихтияжын нығыклап тоя, уны тормошҡа ашырырға ынтыла. Тикшеренеүсенең дөрөҫ билдәләүенсә, XIX быуаттың икенсе яртыһы – XX быуат башындағы шиғриәтебеҙҙә реалистик һәм романтик пландарҙағы поэма, баллада, мәҫәл, тәмҫил кеүек нарратив пландағы жанрҙарҙың барлыҡҡа килеүенә һәм үҫеүенә ошолар етди сәбәпсе була.

Ғ. С. Ҡунафиндың манифестацион-публицистик типтағы лирик жанрҙар хаҡындағы күҙәтеүҙәре лә – үҙе бер яңы фекер-ҡараштар, асыштар донъяһы. Халыҡ тормошоноң һынылышлы тарихи осоронда әҙәбиәттең, айырыуса уның оператив поэтик төрөнөң граждандыҡ йөҙө, публицистик пафосы көсәйеүсән, тип билдәләй ғалим. Башҡорт ижтимағи мөхитендә мәғрифәтселек, артабан революцион-демократик идеялар нығыклап тамыр йәйгән, йәмғиәтте үҙгәртеп ҡороу өсөн көрәш көсәйгән осорҙа шағирҙарыбыҙҙың барыһы ла тиерлек шундай аһәң, шундай пафос менән һуғарылған әҫәрҙәр ижад итте. «Уларҙа авторҙар үҙҙәренең хис-тойғолары тураһында уйланыусы сифатында ғына түгел, ә тормоштоң дөйөмөрәк пландағы мөһим мәсьәләләре, темалары хаҡында фекер йөрөтөүсе, социаль ҡатламдарҙың, халыҡтың, хатта бөтә кешелектең уй-ҡараштарын туранан-тура сағылдырыусы ролендә лә сығыш яһаны. Бындай осраҡта әҫәрҙәрҙә «лирик герой» төшөнсәһенең мәғәнәүи роле, мөмкинлектәре киңәйә. Шағирҙар исеменән генә түгел, бәлки, халыҡтың төрлө ҡатламдары исеменән сығыш яһауы арҡаһында, уларҙа лирик «мин»гә алмашҡа лирик «беҙ» килә, авторҙың уй-фекерҙәрен биреү формаһы бөтөнләй асыҡ сағылыш ала, «фекер лирикаһы» «хис-тойғолар лирикаһы» бермә-бер өҫтөнлөк ала», – тигән фекергә килә тикшеренеүсе. Үҙенең был фекерен ул М. Өмөтбаев, М. Аҡмулла, С. Яҡшығолов, М. Татлыбаев, Ғ. Хоҙаяров,

М. Ғафури, Д. Юлтый, С. Ҡудаш, Ш. Бабич һәм башҡа шағирҙарҙың байтаҡ китаптары, мәктүбтәре, васыятнамәләре, эпиграммалары, пародиялары, сатирик шиғырҙары, перепевтары (парафраздары) миҫалында дәлилләй. Уның күҙәтеүҙәренән һәм һығымталарынан замандың әхлаҡи-этик, рухи-мәҙәни, социаль-иҡтисади, сәйәси, хатта ҡәҙимге тормош-көнкүреш проблемаларына бәйле ҡарашты көслө итеп, ваҡыты-ваҡыты менән тормошҡа ашыраһы эш-ғәмәлдәр программаһы кимәлендә манифестациялау теләге был жанрҙарға ҡараған әҫәрҙең идея-тематик йүнәлешен, тормошто раҫлау йә кире ҡағыу пафостарын, публицистик стилен билдәләгәнлеге күренеп тора. Уй-фекерҙәрҙе асыҡтан-асыҡ эш-ғәмәл программаһы, лозунг ташлау, өндәү, өгөтләү, раҫлау, хуплау йә фашлау, инҡар итеү рәүешендә биреүҙең бындай поэтик формаһын лирик медитацияның манифестацион-публицистик тибы тип атауы менән автор бик хаҡлы.

Ғ. С. Ҡунафин монографияһындағы иғтибарҙы биләгән күренештең береһе булып унда совет осорона тиклемге башҡорт әҙәбиәтендә йыр, манифестацион-публицистик һәм нарратив шиғриәт жанрҙар формалашыуы, тарихи үҫеше һәм йәшәйеше мәсьәләләренең киң сағыштырма фонда яҡтыртылыуы тора. Бының өсөн тикшеренеүсе күп ерле, көнсығыш һәм көнбайыш әҙәби, фольклор ҡомартҡыларына мөрәжәғәт иткән, эшендә уларҙы тейешенсә системаға һалып, сағыштырма-тарихи планда уңышлы ҡулланған. Быға, һис һүҙһеҙ, авторҙың иҫке төрки телен, ғәрәп яҙмаһын һәм ғәрәп графикаһындағы әҙәбиәтте яҡшы белеүе булышлыҡ иткән.

XIX – XX быуат баштарындағы башҡорт шиғриәтен жанр йәһәтенән тарихи-теоретик планда яҡтыртҡан был хеҙмәт үҙенең композицион төҙөклөгө, күҙәтеүҙәрҙең системалылығы, фекер аныҡлығы менән айырылып тора. Бүлектәрҙә һәм бүлексәләрҙә материалдар аңлайышлы, логик эҙмә-эҙлелектә, үҙ-ара бәйлелектә яҡтыртыла, бөтә осраҡтарҙа ла теге йәки был рухи-мәҙәни һәм әҙәби-художестволы күренештәрҙең барлыҡҡа килеү сәбәптәре, идея-эстетик сығанаҡтары асып бирелә. Шуныһы мөһим: үҙенең күҙәтеүҙәрендә һәм һығымталарында Ғ. С. Ҡунафин ниндәйҙер әҙер, шаблон «рецепттар»ҙан сығып түгел, ә фактик материалдарҙың үҙҙәренән сығып эш итә. Был күренеш хеҙмәтте ҡыҙыҡлы һәм ышандырғыс итә. Унда автор бихисап мөһим проблемалар һәм идеялар күтәргән, уларға күҙәтеүҙәр яһап, төплө һығымталар яһаған, әҙәбиәттең мөһим мәсьәләләрен хәл итеү юлдарын күрһәткән.

Ҡыҫҡаһы, башҡорт әҙәбиәт ғилемен өр-яңы фекер-ҡараштар менән байытҡан фундаменталь хеҙмәт тыуҙырылған. Ул әҙәбиәт ғилеме тарихында беренсе тапҡыр үткән быуаттарҙағы башҡорт шиғриәтенең идея-эстетик йөкмәткеһе һәм жанр-стиль тәбиғәте тураһында төплө тулайым тарихи-теоретик төшөнсә бирә. Киләсәктә был хеҙмәттең әллә күпме ғилми эҙләнеүҙәр өсөн нигеҙ булып торасағына, башҡорт халҡының рухи мираҫы менән ҡыҙыҡһынған киң ҡатлам уҡыусылар, бигерәк тә ғалимдар, әҙиптәр, юғары уҡыу йорто һәм мәктәп уҡытыусылары, аспирант һәм студенттар өсөн мөһим фәнни сығанаҡ буласағына шик юҡ.

**Гөлфирә ГӘРӘЕВА,**
**Башҡорт дәүләт университеты**
**профессоры.**

# ЭШ КҮРҺӘТКӘН УЛЫН ИЛ ОНОТМАЙ

2012 йылда «Китап» нәшриәтендә күренекле башҡорт ғалимы, әҙибе, педагогы һәм йәмәғәт эшмәкәре Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев хаҡында монография донъя күрҙе. Уның тормошон һәм ижадын тулайым күҙ алдына баҫтырған былдай хеҙмәт күптән кәрәк ине. Юғиһә 2011 йылда оло шәхестең тыуыуына 100, мәрхүм булыуына 43 йыл булып та китте бит. Ниһайәт, Башҡортостан Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты, БДУ профессоры Ғиниәт Ҡунафин бик мөһим, изге эште тормошҡа ашырҙы – «Жәлил Кейекбаев. Тормошо һәм ижады» тигән күләмле хеҙмәтен киң ҡатлам уҡыусыларға бүләк итте. Ул ябай уҡыусы ла, тел һәм әҙәбиәт белгесе лә кинәнеп уҡырлыҡ тел менән яҙылған, фактик материалдарға бай булыуы, уларҙы эҙмә-эҙлекле итеп төплө анализлауы менән иғтибарҙы биләй. Әйткәндәй, уҡытыусылар һәм уҡыусылар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре өсөн ул мөһим фәнни-методик сығанаҡ булып тора. Уның беренсе бүлегендә күренекле ғалим һәм әҙиптең тормош юлы, уны ҙур шәхес итеп формалаштырған социаль-рухи мөхит төрлө документтар, шәжәрәләр, иҫтәлектәр, фольклор материалдары ерлегендә ентекле яҡтыртыла.

Автор Ж. Кейекбаевтың ауылы тарихын, ата-олаталары генеологияһын, белем һәм тәрбиә алыуы шарттарын һәм этаптарын, хеҙмәт юлдарын өйрәнеүгә ҙур иғтибар бүлә. Шуның менән ул уның ижади шәхес булараҡ формалашыуы этаптарын һәм үҙенсәлектәрен киң ижтимағи-тарихи фонда асыҡ һәм эҙмә-эҙлекле итеп күҙ алдына баҫтырыуға өлгәшә.

Монографияһының икенсе бүлегенә Ғ. С. Ҡунафин бөйөк шағир М. Аҡмулланың түбәндәге шиғыр юлдарын эпиграф итеп алған:

*Киткәндәр ниндәй ирҙәр гәүһәр сәсеп,*
*Уларҙың эштәренең юлы асыҡ.*
*Ғәжәйеп ҡиммәт әҫәр*
*ҡалдырғандар,*
*Хикмәттең мәхзәһенән мизраҕ*
*(келәтенән шиғри юлы) асып.*

Был юлдар Ж. Ғ. Кейекбаевтың әҙәбиәттә, тел ғилемендә, ғөмүмән, бөтә ғилми-әҙәби эҙләнеүҙәре өлкәләрендә сәсеп ҡалдырған гәүһәрҙәренең асылына тап килеп тора. Жәлил Ғиниәт улының шағир, сәсән, тәржемәсе, прозаик булараҡ эшмәкәрлеген өйрәнеп, тикшеренеүсе ул тыуҙырған әҫәрҙәрҙең халыҡтың «фәлсәфәүи,

сәйәси, этик һәм, әлбиттә, эстетик фекер ҡеүәһен дә, ауыр, ҡаршылыҡлы, ҡатмарлы һәм ҡыуаныслы тормошон да, намыҫ-выжданын, өмөт-хыялын һәм киләсәккә ынтылышын да сағылдырған... үҙ осорондағы башҡорт сәнғәтенең үҫеш тенденциялары, үҙенсәлектәре, законсалыҡтары һәм уңыштары хаҡында фекер йөрөтөргә, тарихи-теоретик күҙәтеүҙәр яһарға ныҡлы нигеҙ булырҙай» ижад емештәре булыуын уларҙы сағыштырма-тарихи планда, киң әҙәби фонда ентекле анализлау ерлегендә күрһәтеп бирә.

Автор Ж. Ғ. Кейекбаевтың әҙип булараҡ үҫешенә байҡау яһап, тулайым анализ үткәрә, әҫәрҙәрендә Ҡол Ғәли, Салауат Юлаев, Аҡмулла традицияларын дауам итеүсе генә түгел, ә көнсығыш тамырлы милли әҙәбиәт менән көнбайыш классикаһын оҫта синтезлаштырыусы ижади шәхес булараҡ бәйән итә. Мәдех стилендә яҙылған, публицистик пафослы шиғырҙарында, робағиҙарында халыҡтар дуҫлығы, хеҙмәт, Тыуған ил, батырлыҡ, тәбиғәт, мөхәббәт темаларына ҡағыла, шиғыр төҙөлөшөнөң ҡағиҙәләрен еренә еткереп, шиғриәттең төп идея-эстетик функцияһын белеп эшләй Ж.Ғ. Кейекбаев. Автор уның ижадына, әҫәрҙәренең поэтикаһына ғына төплө анализ биреп ҡалмай, ә тематикаға ҡағылышлы яңы, ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр менән байыта. Мәҫәлән, совет яугирына бағышланған «Батыр Матросов» тигән мәдхиәһен фәнни тикшергәндән һуң, Ғ. С. Ҡунафин хәҙерге көндә билдәле фактик материалдарға, дәлилдәргә таянып, А. Матросовтың ысынында башҡорт ҡанлы Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов икәненә баҫым яһай.

Монографияла шәхестең тәржемәсе булараҡ И. В. Гете, Г. Гейне кеүек бөйөк шағирҙар ижадына мөрәжәғәт итеүе, уларҙың шиғырҙарын төп нөхсәһенән башҡортсаға ауҙарыуы хаҡындағы мәғлүмәт иғтибарға лайыҡ. Был үҙ йәһәтенән Г. Гейненың «Тұҡыусылар», «Гарц буйлап сәйәхәт», «Тыуған илгә ҡайтыу», антифашист Э. Вайнерттың «Жан Шеер һәм уның иптәштәре», «Гражданин» һ.б. тәржемә ителгән классик әҫәрҙәрҙә тасуирланған дәүерҙең тарихилығын, атмосфераһын ысынбарлығында һиҙергә ярҙам итә, уҡыусыға ләззәт бирә, тигән фекерҙә Ғ. С. Ҡунафин.

Ж. Ғ. Кейекбаевтың «Туғандар һәм таныштар» романының идея-тематик йөкмәткеһен, фәлсәфәүи-эстетик нигеҙен юғары баһалап, әҙәбиәтсе-ғалим Һ. Дәүләтшина, З. Биишеваларҙың тарихи-революцион әҫәрҙәре менән бер рәткә ҡуя һәм быны ышандырырлыҡ итеп дәлилләй. Китап авторы «Зөбәй Үтәғолов» әҫәренең документаль-биографик повесть жанрына ҡарағанын – композицияһын, образдар системаһын ентекле, деталле тикшереү һөҙөмтәһендә – билдәләүгә өлгәшә.

Фәнни-популяр хеҙмәттең 3-сө бүлеге юҡҡа ғына «Фән донъяһындағы артылыштары һәм асыштары» тип аталмаған. Әгәр ҙә беренсе ике бүлектә Ж.Ғ. Кейекбаевты шәхес иткән мөхиткә,

унының билдәле, тәжрибәле яҙыусы булып формалашыуын байҡаһаҡ, аҙағында иһә автор шәхестең данлыҡлы фән эшмәкәре, донъя кимәлендә киң билдәле тел белгесе-ғалим булып үҫеү юлының һикәлтәле булыуын, үҙ асыштарын көрәш, дискуссиялар, артылыштар аша яҡлап сығыуын асыҡ сағылдыра. Ысынлап та, урал-алтай телдәренең ҡәрҙәшлеге концепцияһын, билдәлелек-билдәһеҙлек тегорияһын фәнни яҡтан нигеҙләү, башҡорт теленең фонетик, морфологик үҙенсәлектәрен синхроник һәм диахроник яҡтан тикшереп, системаға һалып тулайым асып һалыу, әлбиттә, – ҙур әҙерлек талап иткән эш. Ж. Ғ. Кейекбаев һәм унының дуҫ-коллегалары, замандаштары башҡарған ҡыйыу фундаменталь хеҙмәттәрҙең һаман да бәхәс тыуҙырыуы, кеше аҡылдарын ҡайнатыуы хаҡында һүҙ алып бара автор. Шәхес биографияһына бәйле ҡайһы бер сетерекле һорауҙарҙы асыҡлар өсөн Ғ. С. Ҡунафин йә тарих төпкөлөнә экскурс яһай, йә иһә бөгөнгө көндәрҙәге филология өлкәһендәге яңылыҡ-асыштарҙан сығып үҙ уйҙарын да әйтмәй ҡалмай. «Башҡорт тел ғилеме тик совет осоронда ғына формалашҡан» тигән фекерҙе ул, мәҫәлән, тулыһынса кире ҡаға. М. Иванов, С. Күкләшев, М. Биксурин, М. Өмөтбаев һ.б. билдәле зыялыларҙың башҡорт тел мәсьәләләренә ҡағылышлы логик, эҙмә-эҙлекле тикшеренеүҙәренә иғтибарҙы йәлеп итә, уларҙың фекерҙәренең фәнни үҫешен Ж. Ғ. Кейекбаев хеҙмәттәрендә күрә. Ж. Ғ. Кейекбаевты бай традициялы, тамырҙары быуаттар төпкөлөнә киткән башҡорт милли гуманитар ғилемен дауамлаусы ҙур шәхес, оло ғалим итеп асып бирә.

Һүҙемде монография авторының бер фекере менән тамамлағым килә: «Тыуған иленә, унының әҙәбиәтенә, айырыуса фәненә титаник хеҙмәт күрһәткән Ж. Ғ. Кейекбаев халыҡ күңелендә унының дан-мәртәбәһе, ғорурлығы булып мәңгелеккә урын алды. Эш күрһәткән улын Ил онотмай ул». Оло ғалим-әҙиптең күп яҡлы ижади эҙләнеүҙәрен төплө итеп, тулайым күҙ алдына баҫтырған был хеҙмәт шуға бер дәлил. Ул ҙур шәхескә ҡарата авторҙың ғына түгел, ә халыҡтың да күңел түрендәге тәрән ихтирам һүҙе булып тора.

Беҙгә иһә ошо ихтирам һүҙен киң ҡатлам уҡыусыларға тейешле фәнни юғарылыҡта уҡымлы тел менән еткергән өсөн ғалимға ихлас күңелдән рәхмәт әйтәһе, фәнни эҙләнеүҙәрендә артабан да яңы үрҙәр яулауын теләйһе ҡала.

**Айнур ХУЖӘХМӘТОВ,**
**филология фәндәре**
**кандидаты,**
**БДУ уҡытыусыһы.**

Раул
БИКБАЕВ

# Уҙған ғына ғүмер, ҡалған хәтер...

**23 май 2004 йыл, йәкшәмбе.**

**Орел ерендә ниндәйҙер әҙәби мөхит солғап ала. Бында Тургенев, Фет, Лесков, Бунин, Андреев һ.б. исемдәренә бәйле әллә күпме иҫтәлектәр һаҡлана.*

*Орелда һәм Мценскиҙа Тургенев һәйкәлдәренә сәскәләр һалдыҡ. Орелда Бунин музейында булдыҡ. Был ҡалала Тургенев, Лесков, Бунин, Андреев, «Орел яҙыусылары» музейҙары бар. Ҙур булмаған өлкә үҙәге өсөн был бик күп. Беҙ үҙебеҙҙең Өфөләге берҙән-бер әҙәби музейыбыҙ өсөн һаман да бина юллай алмайбыҙ.*

**25 май 2004 йыл, шишәмбе.**

**Рәсәй яҙыусыларының XII съезы өлкә администрацияһының түңәрәк залында үтте. Үҙәк округ етәксеһе Георгий Сергеевич Полтавченко, өлкә башлығы Егор Семенович Строев сығыш яһаны. Саҡырылғандар менән 400-ләп кеше булғандыр. Материалдар алдан баҫып таратылды. Шуға Валерий Ганичев докладын тезистар рәүешендә һөйләне.*

**Сығыш яһаусыларҙан тәүҙә Феликс Кузнецов (ИМЛИ), уның элек тә һөйләгән бер һүҙе – Шолохов тураһында. 24 май – съезд асылған көн – Шолоховтың тыуған көнө икән. Ҡыҙыҡлы тап килеү. Съезд делегаттарына «Тымыҡ Дон»дың бик бай баҫмаһын бүләк иттеләр.*

**В. Гусев: рус теленең бөгөнгө яҙмышы тураһында төҫһөҙ генә телмәр.*

**В. Распутин: В перспективах не уверен. Через некоторое время нынешних классиков не будет. Не вернутся не золотой, не серебряный, даже почвеннический век русской литературы. Языка Астафьева, Белова, Личутина и других уже не будет. Будет другая литература. Письмо Ф.Абрамова своим землякам сегодня не заметили бы.*

---

*Аҙағы. Башы 1— 3-сө һандарҙа.*

**А. Лиханов (Детский фонд): свою ненужность не испытывают только дети. С 1992 по 2002 годы детей сократилось на 11,5 млн. человек. Сиротское государство. 2 млн. – неграмотных, 1 млн. – беспризорных.*

**Геннадий Андреевич Попов (Орел): Здесь учреждены Всероссийские литературные премии. 22 членам СП 1 тыс. руб. ежемес. стипендия. За 3 года – 4 ордена Дружбы (Беҙҙә бер йылда 3 Салауат, 3 халыҡ шағиры).*

**Е.Исаев: Это сегодня железная занавес в TV для русской литературы.*

**Ст. Куняев: Жизнь стремительно теряет свою национальную сущность.*

**Съезды Михаил Алексеев (87 йәш) асты. Будь похож только на одного писателя: на самого себя. Привел слова Л.Толстого.*

**Строев Е.С.: Очень большой просчет государства – не поддержать литературу.*

**Ганичев: Нет ни строчки в бюджете, нет места в программах TV. Не будет кормить свою культуру – будет кормить чужую. Корневые писатели России. Книга самая дорогая, читатель самый бедный.*

**5 июль 2004 йыл, дүшәмбе.**

*Тимер Йосопов – минән һуң был манараға күтәрелгән икенсе башҡорт шағиры. Беҙгә тиклем, бәлки, Каруанһарай манараһынан Ырымбурға Шәйехзада Бабич ҡарап торғандыр. Уралдағы күперҙе, баҫҡыстарҙы ҡараныҡ, Ырымбур тарихына арналған музейҙа булдыҡ.*

*Нәфисә Смакованың «Кисеү» исемле китабының презентацияһы Совет урамындағы «Балалар ижады үҙәге»ндә үтте.*

*Һөйләшеү, дөрөҫөрәге, сығыш яһауҙар ике сәғәттән артыҡ барҙы. 1918 йылда Ырымбурҙа Ш. Бабичтың «Зәңгәр йырҙар»ы менән Х. Ғәбитовтың «Башҡорт моңдары» сыҡҡан. Шунан һуң бында баҫылған китаптарҙы белмәйем. Һәм 86 йылдан һуң, ниһайәт, башҡортса китап донъя күрҙе – Н.Смакова, «Кисеү». Мин бына ошолар хаҡында һөйләнем. Тимер ҙә сығыш яһаны, Ришат бик затлы баянында уйнап йырланы. Салауат Аҡдәүләтовты тыуған көнө менән ҡотлап, «Антология»ны, Салауаттың төрөксә-башҡортса китабын бүләк иттем. Беҙ юлға сыҡҡанда мәжлес ҡыҙып ҡалды. Нәккәр апайым ҡаҙаҡса йырланы.*

**21 июль 2004 йыл, шаршамбы.**

**Байтаҡ ваҡытымды бүлеп, ниһайәт, Таңсулпан Ғарипованың “Бөйрәкәй”енең осона сығып ҡуйҙым. Бөгөн сәғәт өстә Салауат премияһы буйынса комиссияның ултырышы, шуға ашығырға тура килде.*

*Беҙ конкурс йомғаҡтары буйынса Рәшит Назаровты тәҡдим иттек: беренсе томын. Әлбиттә, был том һәйбәт төҙөлмәгән, өйрәнсек шиғырҙар – күпселек, ысын ынйыларҙы шулар араһынан уҡыусыға сүпләп алыуы еңел түгел. Мин төҙөүсе булһам, беренсе томға уның иң классик әҫәрҙәрен индерер инем, икенсеһенә – өйрәнсегерәктәрен.*

*1964 йылда Ираклий Андронников Лермонтовтың 4 томлығын нәк шул принцип буйынса төҙөгәйне. Бабичтың да өйрәнсек шиғырҙарын мин иң аҙаҡтан урынлаштырҙым. Ул яҙмаларҙан башлаһаң, ябай уҡыусы бер-икеһен уҡыр ҙа китапты ябып та ҡуйыр ине.*

*Бөгөнгө тикшереләсәк исемлектә Рәшит Назаров внеконкурса булырға тейеш, әлбиттә. Ләкин Таңсулпандың «Бөйрәкәй»е – лә хәҙерге әҙәбиәтебеҙҙә бик етди күренеш, ҙур ижади хеҙмәт емеше. Әҙибә уға 12 йыл ғүмерен биргән. Әҫәрҙең тәүге өлөшө китап булып сыҡҡас та уны халыҡ яратып өлгөргәйне. Хәҙер роман биш өлөштән тора, автор уны роман-эпопея тип атаған. Эпопея һүҙе, минеңсә, артығыраҡ. Роман үҙе үк бик ҙур һүҙ бит. Толстой ҙа, Шолохов та романдарын эпопея тип ҡабартып тормағандар, гәрсә улар тотош панорама, грандиоз эпопея булһа ла.*

*Нисек кенә атаһаң да, Таңсулпандың хеҙмәте бик етди. Әлбиттә, ашығыу ҙа бар. Аҙаҡ эйфория көсәйә, финал артыҡ ҡупшы һәм сөсө. Ғөмүмән, аҙаҡҡа табан геройҙар һауала осоп йөрөй башлай. Бөтәһенең дә тиерлек гениаль яҡтары асыла. Ә бит бөгөнгө замандың фажиғәләре уҙғандарҙағынан һис кенә лә кәм түгел. Тотош дәүләт емерелһен әле! Ә имгәтелгән яҙмыштар, төрлө тарафтарҙа ҡан ҡойоштар, ҡасаҡтар, хәйерселәр күпме! Ә Таңсулпандың эпопеяһында барыһы ла бөгөн ал да гөл һымаҡ. Хәҙерге ауылдың хәлкәйҙәре улай түгел шул!..*

*Аҙаҡҡы өлөштәрҙә ашығыу көслө, шуға образдарҙа схематизм көсәйә, улар, тере кеше булыуҙан бигерәк, ниндәйҙер идеяны асырға тейешле ҡурсаҡҡа оҡшай башлай. Заданность.*

*Беҙҙең элекке трилогияларҙағы хәл ҡабатлана: Зәйнәб Биишева, Яңыбай Хамматов, Фәрит Иҫәнголовтың трилогияларында тәүге роман бик тығыҙ эшләнгән, аҙаҡ геройҙар урынлы-урынһыҙға эксплуатациялана, һыу ҡушыла, көсөргәнешлек һүрелә, хәрәкәт аҙая, ваҡиғалар таркала, йомшара, сифат түбәнәйә.*

**29 июль 2004 йыл, кесаҙна.**

**Квартира мәсьәләһе буйынса февралдә Президентта булғандан һуң дәртләнеп йөрөй инем, тағы ла тупикка килеп төртөлдөк, ахыры. Экономика министры урынбаҫары Марат Шамил улы Минасовтан «Киләсәк йылдарҙа ғына» тигән шылғаяҡ яуап килгән. Президент Премьерға ҡуша, ул мәсьәләне министр урынбаҫары кимәлендә ҡарай. Эт – эткә, эт – ҡойроҡҡа. Бөгөн дүрттә тороп Байдәүләтовҡа хат яҙып ташланым.*

**11 сентябрь 2004 йыл, шәмбе.**

*«Наш современник»та башҡорт һанын әҙерләйбеҙ, Мостай ағайҙан материал һораным. Ундай «махровый шовинистик журнал»да ҡатнашмайым, тураһын әйтәм, дөрөҫ аңла, тип баш тартты. Ағайҙың үҙенең инаныуымы был, әллә йәһүд йәмғәтселегенең баһаһынан һағайыуымы? Рус әҙиптәренең үҙ халҡын яҡларға тырышыуҙарын, уларҙың бөгөнгө хәлдәрен аңларға кәрәктер бит.*

**12 сентябрь 2004 йыл, йәкшәмбе.**

**Яңыраҡ атаҡлы ҡурайсыбыҙ Ишмулла ағай Дилмөхәмәтовтың ҡустыһы Сәйфулла ағай йыйында ҡурай тартып торған еренән йығылып, бер нисә секунд эсендә вафат булып ҡуйған. Ишмулла ағайҙы ла «Актерҙар йорто» янында машина тапап үлтергәндә ҡулындағы ҡурайҙарын да һындырып киткәйне. Был хаҡта яҙылмаған шиғыр күңелдә һаман йөрөй.*

*Ағайҙарҙың икеһе менән дә аралашып ҡалдым. Ишмулла ағай менән беҙҙең Туҡ буйҙарында йөрөнөк, Сәйфулла ағай менән Ҡазанда бергә булғайныҡ.*

*Яҙылмаған шиғыр тағы ла тынғы бирмәй башланы. Ике ағайҙың иҫтәлегенә арнап яҙылһа ине лә…*

**26 сентябрь 2004 йыл, йәкшәмбе.**

*Һүҙҙең, телдең бөйөклөгө, бәлки, барыһынан да бигерәк шунда күренәлер: һүҙ, уй аша беҙ Алла менән тоташабыҙ. Башҡаса бәйләнешкә инер мөмкинлегебеҙ юҡ. Ҡөрьән Алла тарафынан кешеләргә Мөхәмәт ғәләйессәләм арҡылы һүҙ ярҙамында еткерелгән. Мосолмандың Алла менән бәйләнеше һүҙ аша, Ҡөрьән аша, ундағы доғалар аша, биш намаҙ аша атҡарыла.*

**2 октябрь 2004 йыл, шәмбе.**

**30 сентябрҙә «Актерҙар йорто»нда Әхиәр Хәкимовтың 75 йыллыҡ кисәһе. Мин асып ебәрҙем. Әйткәндәремдән: Беҙ былтыр Ә. ағайҙың тыуған көнөнә 1 көн ҡалғанда Дәүләкән янындағы Ярыштауҙан донъяны байҡағайныҡ. Асылып киткән киңлектәр. Донъяла Ә. Х. бейеклеге лә бар. Унан халҡыбыҙҙың тарихы һәм бөгөнгөһө күренә. Уның алыҫ илдәрҙәге китаптары. Талант һәм хеҙмәт менән яуланған бейеклек. Ярыштауға Әхиәр ағайҙың 75-ендә күтәрелергә уй ҡорғайныҡ. Теләгебеҙ тормошҡа ашманы. Әммә Ә. Х. бейеклеге мәңге ҡаласаҡ һ.б.*

**Ҡайһы берәүҙәрҙең уйлауынса (мәҫәлән, ололар йыйынында ҡыҙмаса баштан Йыһат Солтанов миңә шулай тип бәйләнде), юбилей һ.б. саралар туйҙан-туйға йөрөү түгел, үҙенсә, бик әһәмиәтле эш ул. Көнөнә кәмендә 2-3, йыш ҡына 4-5 урында сығыш яһау һәм уларҙың барыһы ла бушҡа. Нахаҡ һүҙ һөйләүселәр бер ҙә ундай «туй йөрөүҙәр»гә атлығып тормай. Йәки берәй артисты бушҡа эшләтеп ҡара.*

**11 октябрь 2004 йыл, йәкшәмбе.**

**7-һендә Президент Салауат премияларын тапшырҙы. Араларында иң лайыҡлыһы, әлбиттә, Рәшит Назаров. Бүләк биреүҙе бик ҡыҫҡа тоттолар. Мәғәфүр Хисмәтуллинды оҙатыу көнө ине.*

**Салауат Юлаев менән Рәшит Назаров яҙмыштары араһындағы оҡшашлыҡтар. Икеһе лә бик йәшләй халыҡтың ихтирамын яулай. Икеһе лә кешеләрҙе яҡтылыҡҡа саҡырып, күңелдәренән нур сәсеп, үҙҙәре мәңгелек ҡараңғылыҡҡа дусар ителә, яҡты донъянан ғүмерлеккә*

*айырыла. Салауат – каторгала, Рәшиттең зиһене – зинданда.*

**Башҡортостан дәүләт гербында Салауат һыны. Тағы ниндәй илдең гербында үҙәктә шағир тора икән? Бәлки, беҙҙеке донъяла берҙән-берҙер. Шағирҙың ошолай юғарылыҡҡа күтәрелеүе үҙе үк башҡорт шиғриәтенә бик ҙур яуаплылыҡ йөкмәтә бит.*

**13 октябрь 2004 йыл, шаршамбы.**

*Баҡсалағы сүп-сарҙы йыйыштырғанда сәскәләрҙе лә тәпкеләп-сапҡылап ташланым.*

*Күҙҙең яуын алған сәскәләр ҙә*
*Әйләнә шул бер көн тик сүпкә.*

*Баҡсалағы быйыл ултыртҡан розалар бик матур сәскә атҡайны. Бер барғаныбыҙҙа бер нисәһен өйгә алып ҡайтҡайныҡ. Оҙаҡ ҡына донъяны йәмләп ултырҙылар. Бер мәл күҙ алдында ҡойолғандарын күрҙем.*

*Шиғыр һүнә. Нур юйыла. Ҡала проза:*
*Киҫәк-киҫәк ҡойолоп төшә ҡыҙыл роза.*

**15 октябрь 2004 йыл, йома.**

**Акцент тигәндән, ғәҙәттә, һөйләшеүҙәге милли үҙенсәлекте күҙ алдына килтерәбеҙ. Күреүҙә, ишетеүҙә акцент юҡ һымаҡ. Әммә бар шул. Мәҫәлән, һәр милләт рәссамы Ленинды үҙ милләтенә оҡшатып эшләй торғайны бит. Йәки ябай башҡорт кешеһенең рус йырын башҡарыуҙағы, бигерәк тә элекке осорҙарҙа, үҙенсә бороп башҡарыуын иҫкә төшөрәйек. Йырҙың һүҙендә генә түгел, көйөндә лә акцент ишетелә бит. Һөйләүҙә, көйләүҙә генә түгел, уйлауҙа ла милли акцент бар.*

**20 ноябрь 2004 йыл, шәмбе.**

**С. Поварисов юбилейында һүҙемде Туҡайҙың «Без сугышта юлбарыстан көчлебез, без тынычта аттан артык эшлибез» тигән һүҙҙәренән башланым. Яу һәм хеҙмәт батыры. С. Поварисов баш эйеп йәшәмәне, әммә баш күтәрмәй эшләне.*

**11 декабрь 2004 йыл, шәмбе.**

**Профилакторий тирәһендә йөрөгәндә, ҡайһы саҡта Сибай мәсетенең ҡараңғыла аҙан әйткәнен ишетәм, үҙенсә ғәжәп серлелек ул. Шул кисерештәр бөгөн шиғырға әйләнде. Эштәр ошолай китһә икән дә бит… Байтаҡ әйбер яҙылыр ине.*

*Бында «Туған тел» стихияһында рәхәтләнәм. Күпселеге – башҡорттар, һөйләшеү күпселектә башҡортса. Беҙ Сибай, Баймаҡ һымаҡ ерҙәргә килеп, шул бәхетле мәлдәрҙе кисерәбеҙ. Өфөлә был хаҡта уйлау ҡайҙа? Ә бит камил дәүләттәрҙә һәм милләттәрҙә бындай бәхетте татыу – көндәлек, ғүмерлек, ғәҙәти көнкүреш.*

**12 декабрь 2004 йыл, йәкшәмбе.**

**Бөгөн тыуған көнөм. 66 йәш – Ғайса пәйғәмбәрҙең ике ғүмерен йәшәп ташланылған. Тыуған көнөмдө ситтә байтаҡ ҡаршылаған булды.*

*Ә был көндө үҙем генә башлап ебәргәнемде һуңғы ваҡытта хәтерләмәйем.*

*Иртән һигеҙенсе яртыла урамда һелкенергә сыҡтым. Ҡараңғы ине. Сибай томан эсендә, уттары ла күренмәй. Бер аҙҙан ҡараңғылыҡта тағы ла серле аҙан ишетелде. Бында кисле-иртәле: уны ҡараңғыла нисәнсе ҡат ишетәм. Аҙандан һуң ни мөғжизә: монар таралды, Сибай уттары балҡып күренде лә китте. Аҙан хаҡында кисә башлаған шиғырымды бөгөн бөтөрөп ҡуйҙым.*

**13 декабрь 2004 йыл, дүшәмбе.**

**Атайымдың да ике ғүмерен йәшәгәнмен икән. Кисә шул хаҡта уйлап ҡуйҙым.*

**14 декабрь 2004 йыл, шишәмбе.**

**Бөгөн телевидениенан килеп, «Һуңғы хәбәрҙәр»гә төшөрөп алдылар. Башта бүлмәлә интервью алдылар, унан һуң тышта шиғыр уҡыным. Тышта Хәйҙәр Тапаҡов менән дә төшөрҙөләр.*

*Шиғырҙар яйлап яҙыла. Тик поэмаға асҡыс таба алмайым.*

*Бында бер төркөм эттәр тамаҡ туйҙыра. Миңә эйәләшеп алдылар. Береһенең биш көсөгө бар. Ҡаршылағы баҡсала бер сүп өйөмө аҫтында өңдәре. Бөгөн көсөктәрен профилакторий янына эйәртеп алып килгән. Иртән йөрөгәндә арттан ҡалмайҙар.*

**16 декабрь 2004 йыл, кесаҙна.**

**Профилакторийҙағы оло ағайҙар һөйләй. Элек бында гармун, бейешеү, йыр-моң яңғырап тора ине, тиҙәр. Ә хәҙер тып-тын. Хәҙер йорттар тимер ишектәр менән, тәҙрәләр тимер рәшәткәләр менән генә бикләнеп ҡалмай. Кеше үҙ-үҙенә бикләнә, унық күңеле сикләнә. Отчужденность, бер-береңдән ситләшеү – заман ауырыуы. Глобализм ул информацион бәйләнештәрҙе үҫтереүгә әллә ниндәй юлдар аса, әммә күңелдәр тарая. Интернет буйынса башланып киткән мөхәббәт тә осрай, тиҙәр. Ләкин уныһы дөйөм ҡанундың матур иҫкәрмәһе, бик һирәк ситләшеүе генә. Ә дөйөм алғанда Интернетта «бысраҡ» та етерлек.*

*Интернет ҡоло кешенең ҡул йылыһын тоймай, кешенең күҙ ҡарашының нурын күрмәй, кешенең яғымлы өндәшеүенең наҙын ишетмәй. Хәҙерге күп кешеләр өсөн байлыҡ-мөлкәттең харам йәки хәләл юл менән табылыуы мөһим түгел, улар өсөн төп принцип: деньги не пахнут. Шуның һымаҡ, Интернет ҡолдары өсөн дә кеше тойғолары, яҡты кисерештәр – ят нәмә. Улар өсөн төп девиз: информация не пахнет. Улай түгел шул. Аҡсанан да, мәғлүмәттән дә ҡайһы саҡта бик насар, хатта енәйәт, ҡан еҫе килә.*

**19 декабрь 2004 йыл, йәкшәмбе.**

**Бөгөн иртән саҫҡау һыуыҡ булды. Баймаҡта – 27, Сибайҙа 25 градус. Күктә йондоҙҙар. Тап түбәлә – Етегән. Бында һуңғы ҡабат таңғы*

*ҡараңғыла йөрөп әйләнеүҙәр. Эттәрем оҙатып йөрөй. Көсөктәр аяҡҡа урала.*

**24 ғинуар 2005 йыл, дүшәмбе.**

**Өлкәнәйә барыу – яңғыҙлыҡҡа нығыраҡ инә барыу. Ғүмер үткән һайын оҙаҡ йәшәгәндәрҙең хәлен нығыраҡ аңлайым. Мәҫәлән, Мостай Кәримдең хәҙерге кисерештәрен. Йәки 93-кә етеп килгән инәйемдең хәлдәрен. Балалары иҫән булһа ла, уның күпме ваҡыты асылда яңғыҙлыҡта үтә бит.*

*Минең дә хәҙер асылда фекерҙәштәрем, арҡадаштарым ҡалмай бара. Шуныһы бигерәк ауыр.*

**Ватанға шәхестең мөнәсәбәте тураһында мәҡәлә күҙ алдына килә башланы. Һоҡланып ҡына йәшәп булмай. Пушкин «Я имел несчастье родиться в этой проклятой стране» тигән һәм шул уҡ ваҡытта Рәсәй уның иманы булған. Лермонтовтың «Прощай, немытая Россия…» тигән һүҙҙәрендә илен ни тиклем һөйөүе. Туҡайҙың, Абайҙың үҙ милләттәренә мөнәсәбәте, кәмселектәре тураһында тураһын ярып әйтеүе. Шул уҡ хәл Бабичта. Ә һуң бөгөнгө хәлдәргә нисек күҙ йоммаҡ кәрәк? Һәр батша илде, халыҡты теләгәнсә мәсхәрәләй, ә түрәләр уларҙы маҡтай.*

**23 февраль 2005 йыл, шаршамбы.**

**Убогая у бога я! – Бөгөнгө Рәсәй Некрасовтың «Ты и убогая» тигән һүҙҙәрен бөгөн ошолайыраҡ үҙгәртеп ҡабатлай алыр ине.*

**Животрепещущее – ошо һүҙҙе башҡортсаға туранан-тура тәржемә итһәң, мәғәнәһе башҡортса тағы ла тәрәнерәк асыла түгелме һуң? Тере көйө тертләп торған, тере көйө «дер» килеп торған һ.б.*

**27 февраль 2005 йыл, йәкшәмбе.**

**Байрамы ла, вайраны ла, шатлығы ла, ҡайғыһы ла бергә йөрөй шул тормоштоң. Шиғыр кисәһенән һуң һауала оҙаҡ ҡына йөрөлдө. Сәғәт унда ҡайтһам, яман хәбәр: Аҫылгужа Баһуманов үлгән.*
*Яҙыусылар союзында матәм йыйыны үткәрҙек. Фойеға халыҡ шығрым тулды. Мин алып барҙым.*

*Үҙемдең һүҙемдә Аҫылгужаның тура һүҙле булыуы тураһында ла һөйләнем. «Китап» нәшриәтенең һикһән нисә йыллыҡ тарихында әҙипкә ҡарата ғүмерҙә булмаған гәзелһеҙлектең эшләнеүе, Аҫылгужаның уны бик ауыр кисереүе тураһында ла әйттем. Әйҙә, халыҡ белһен, нимә булғанын һорашып булһа ла белерҙәр. Бынан бер нисә көн элек эш урынында йоҡлап ултырған Аҫылгужа тураһында приемныйҙа ултырған бер «битһеҙ бәндәбикә» милицияға шылтыратып, Аҫылгужаны килеп алып киттәләр. Мәсхәрә!*

**2 март 2005 йыл, шаршамбы.**

**Ғәлим инеп сыҡты. Беҙҙең яҙыусылар араһында шәхси тормошонда уның һымаҡ юғалтыуҙарға тарығандар бик һирәк! Бәлки, юҡтыр ҙа.*

*Ләкин уның һымаҡ оптимистар ҙа һирәк. Бәлки, юҡтыр ҙа. Байлыҡ-дәүләттәре, һаулыҡ-гәйрәттәре булмаһа ла, Дәүләди булып йөрөй.*

**3 март 2005 йыл, кесаҙна.**

**Союзда йәштәр менән осрашҡанда беҙҙең йорттағы ике картинаға иғтибарҙарын йүнәлттем. Фойела Кузнецовтың «Допрос Салавата»-һы тора, минең кабинетта – Бабичтың ҙур портреты. Йорт менән танышыу йәшлектән башлана. Фойела ике таҡтаташ: һуғышта һәләк булғандар һәм 1937 йылда фажиғә ҡорбандары. Улар ҙа күбеһе йәштәр йәки ир уртаһындағылар: Афзал ағай Таһировтан башҡалары иллегә лә етмәгәндәр.*

*1937 йылдан һуң «Яҙыусылар союзы» ныҡ йәшәрә. Ир уртаһындағы быуындың алтын бағаналары ауҙарыла. Бындай фажиғәле йәшәреүҙәрҙе башҡаса Хоҙай күрһәтмәһен.*

*Асылда әҙәбиәттә йәш һәм ҡарт яҙыусы юҡ, талантлар һәм талантһыҙҙар ғына бар.*

**Хәҙер TV-ла йондоҙҙарҙы шул тиклем тиҙ, еңел яһайҙар. Йондоҙ яһау «хужалығы»ның исеме лә ниндәй имәнес бит: «Фабрика звезд!» Иҫ-аҡылдарың китер: йондоҙҙарҙы конвейер ысулы менән яһайҙар, кирбес урынына һуғалар. Бер нисә һынау турында еңеп сыҡҡан икән – йондоҙ әҙер! «Яңы йондоҙ» тоҡанды.*

*Ысын ижад донъяһында хәлдәр күпкә ҡатмарлыраҡ шул ул. Йондоҙҙар шиғриәт күгендә бик һирәк ҡабына. Шағир – шағир булып та, йондоҙ булмаҫҡа мөмкин. Ләкин ҡараңғы бүлмәне бер шәм булып, яныр яҡтыртыуы ла бик изге эш бит әле.*

**5 апрель 2005 йыл, шишәмбе.**

**Ҡайһы саҡта иртән «Маяҡ»тан дини тапшырыуға юлығам, донъяларым сафланып китә. Хәҙер «Исламдың рухи ҡиммәтәре»н тыңлап булмай, тура килмәй. Бик үкенесле.*

**Кеплер әйткән: Йыһан закондарына ҡағылғанда («Законы мироздания») Аллаға ҡағылғандай булам». Ғәжәп бит!*

*Һинең миллиард аҙғын балаларың, нисек түҙәһеңдер, Хоҙайым!*

*Уларҙың барыһы ла һиңә ғәзиз, барыһы өсөн һыҙланаһың.*

*Бер балам, бер ҡайғым иҫкә төшһә, йөрәгем ярыла. Миллион яраларға нисек түҙәһеңдер, эй, Тәңрем!*

**16 апрель 2005 йыл, шәмбе.**

**Кисә Йәштәр театрында «Йәштәр тауышы» тигән шиғри фестиваль үтте. Сығыш яһаным. Йәштәрҙең бер юлы 9 китабы сығыу – беҙҙең әҙәбиәт тарихында булмаған хәл. Иң мөһиме – араларында осраҡлы китаптар юҡ тиерлек. Әҙәбиәттең киләсәге – буласаҡ авторҙар.*

**3 май 2005 йыл, шишәмбе.**

**25 апрелдә «Нур»ҙа Тукай кисәһендә сығыш яһаным. 26-да «Актерҙар йорто»нда беҙ үткәрҙек.*

*Туҡайҙы баҙарҙа һатып йөрөүе үҙе фажиғә һымаҡ, әммә уны артабан дуҫтары-дошмандары нығыраҡ һатҡан. Быныһы – ҙурыраҡ фажиғә. Халҡы уны һатмаған, кешелек сифаттарын һаҡлаған халҡы шағирын да һаҡлап алып ҡалған. Хатта уҫал ҡарсыҡ та уны урамға сығарып ташламаған бит. Бөгөнгө көндә ни хәл булыр ине икән? Ни хәтле балалар аянысл ы яҙмышта. Балҡып торған тәтәй ҡалаларҙа күпме балалар тәтәйҙән, мәмәйҙән, әнкәйҙән, әпәйҙән мәхрүм. Ҡалдырмайыҡ уларҙы рәхимһеҙ урам хөкөмөнә, ташламайыҡ сабыйҙарҙы йыртҡыс баҙар ҡосағына. Мәрхәмәтле булайыҡ, бәлки, улар буласаҡ Туҡайҙарҙыр?!*

**ПТУ-лар яҙмышына Мәскәү ҡул һелтәй, барлыҡ мәғарифты беҙҙең бюджетҡа йөкмәтә. ПТУ-ларҙы ҡыҫҡартырғамы? Бик ҡатмарлы мәсьәлә. Оперативкала мәғариф министры Рәхмәтуллина аптырап һөйләй. Аҫҡын башлығы Насыров әйтә ти: «ПТУ-ны япһаҡ, беҙҙә төрмә асырға кәрәк», – тип. Бик дөрөҫ әйткән Зәки Ильяс улы.*

**1 июнь 2005 йыл, шаршамбы.**

**Был яҙмаларҙы етенсе яртыла, Алмата аэропортында, самолетта дауам итәм. Бында «Боинг»та оскайныҡ, әле лә шулай. Сәғәт таңғы 4-тә «Алмата» ҡунаҡханаһынан сығып киттек.*

*Ҡаҙаҡса һәйкәл «ескирткеш» тип атала икән. Бик матур табылған. Беҙҙеңсә «иҫкәртеү» рустың предупреждениеһына тура килә бит. Һәйкәл дә онотмаҫҡа иҫкәртә. Русса ла шул мәғәнәлә. Ҡаҙаҡ һүҙҙең ҡәҙерен белә торған халыҡ инде ул. Ораторлыҡ һәләте лә ғәжәп. Дәрәжә-түрәлекте лә бик баһалай, ҡәҙерләй беләләр.*

*Урамдағы яҙыуҙарҙа ла һүҙҙең ҡәҙерен беләләр. Ялтырауыҡ, юҡ-бар рәсемдәр юҡ. Аэропорттағы реклама һүрәттәрендә ҡаҙаҡса бик мәғәнәле һүҙҙәр яҙғандар: күркәм уй, өҙлөкһөҙ уй, ғәжәп идеялар, айҡын идеялар һ.б. Әле мин күргәндәре генә.*

*Ҡаҙаҡ TV-һында ла беҙҙе уйландырырлыҡ миҫалдар бар. Бик күп ҡарап та булманы. Ләкин, ҡунаҡ аҙ ултырыр, күп һынар, тигәндәр. Сит тормош күҙгә нығыраҡ ташланып барыусан. Мәҫәлән, татыу ғаиләне бик пропагандалайҙар. Йыр йырлағандағы күп клиптарҙа балалары менән ирле ҡатын, ирен ҡаршы алыусы ҡатын, эш менән дә, спорт менән дә, ҡыҫҡаһы, күп яҡлы зауыҡлы кешеләр пропагандала. Ололарҙың бик аҡыллы ҡараштары, йөҙҙәре, матур тәбиғәт күренештәре, халыҡсан йолалары, милли көнкүреш деталдәре һ.б. Улар күптер инде ул, беҙҙекеләр был йүнәлештә башҡаларҙың тәжрибәһен махсус өйрәнергә тейеш. Юғиһә, беҙҙең клиптарҙа ҡосаҡлашыу ҙа үбешеү, тоҙһоҙ, сөсө кадрҙар. Былар бит – йәш быуындың күңеленә иң ныҡ һеңә торған күренештәр. Бик аҡыллы файҙалана алырҙар ине.*

*Муҡағәли Муҡатановты, ҡаҙаҡтың XX быуаттағы иң көслө шағиры, тиҙәр. Бик нык эскән, эштән ҡыуылып йөрөгән. Етмешенсе йылдарҙа башҡорт әҙәбиәте көндәренә килгәндә ҡаҙаҡ шағирҙары уны күрһәтмәҫ өсөн йәшерепме, әллә милицияға бирепме торғандары тураһында бик көйәләнеп, әсенеп һөйләгәндәрен хәтерләйем.*

*Нәк ҡаҙаҡтың Алматала бик аҙ сағында Муҡағәли әйткән бит: Алмата – ҡаҙаҡтың астанаһы, урыстың бастанаһы (шулай микән, һәр хәлдә йәшәр йорто тигән һүҙ), уйғурҙың асханаһы.*

**22 июнь 2005 йыл, шаршамбы.**

**Милли батыр, бөйөк шәхес һәм уның тыуған ере. Ике төрлө бәйләнеш: 1) Батыр тыуған еренең исемен ала: Александр Македонский. Йәки берәй урындың атамаһы менән мәңгеләшә: Александр Невский, Дмитрий Донской. 2) Тыуған ере батырҙың, тарихи шәхестең, бөйөк ҡаһармандың һ.б. исемен ала, шуның исеме менән атала: Салауат районы, Ғафури районы, Ульяновск ҡалаһы, өлкәһе һ.б. Тәүгеһе, бәлки, тәбиғиерәктер. Икенсеһе күберәк совет дәүере күренеше.*

**30 июнь 2005 йыл, кесаҙна.**

**Кисәге ҡотороп яуған ямғырҙа тәбиғәттең ни тиклем бөйөк көс булыуына тағы ла нығыраҡ хайран ҡалдым. Шул тиклем һыу, ниндәй масса донъя буйлап күсеп йөрөһөнсө! Уның янында беҙ ни тиклем бәләкәсбеҙ. Бәләкәс һүҙенән дә бәләкәсерәк һүҙ табырға ине лә, тел осона килмәй. Ничтожество тип әйтке килмәй. Кеше улай уҡ меҫкен түгел бит. Ул да әллә ниндәй дәһшәттәр тыуҙыра ала.*

*Был ямғырҙа барыһынан бигерәк яландарҙағы көтөүселәрҙе уйланым.*

*Күк күкрәгәндә Зевстар иҫкә төшә. Боронғо диндәрҙең Аллалары мәжүсиҙәрҙең үҙҙәре һымаҡ дыуамал һәм бер ҡатлы.*

**13 июль 2005 йыл, шаршамбы.**

**Халыҡтың тарихи хәтере. Был сифат беҙҙең башҡорт халҡында бик көслө. Мәҫәлән, рус йәки татар, шулай уҡ башҡа байтаҡ халыҡ үҙенең бынан 200-300 йыл элек йәшәгән ҡаһарман шәхестәрен хәтерләп күпме йыр йырлай икән? Күп булһа, бер нисәүҙер. Мәҫәлән, руста Ермак тураһында («Ревела буря…»), «Варяг». Татарҙың бәйеттәрен атарға була. Ә башҡортта улар бихисап: Салауаттар, Байыҡтар, Тәфтиләүҙәр, Порт-Артурҙар һ.б. Башҡорт халҡы Шайморатовты йырлай, ә татар һуңғы һуғыш батырҙарынан кем тураһында йырлай?*

**6 сентябрь 2005 йыл, шишәмбе.**

**Юбилейҙарҙың иң матуры – унда юбилярҙың үҙенең булыуы. Халыҡ йыйылып та, юбиляр үҙе мәңге кире ҡайтмаҫлыҡ ергә йәп-йәш көйө киткән булһа, шунда үкенес.*

**26 сентябрь 2005 йыл, дүшәмбе.**

**Быуаттарға бер тыуа торған бөйөк шәхестәрҙең донъянан китеүе быуаттарға бер килә торған оло ҡайғыға – Ил, Ватан хәсрәтенә әйләнә. Мостай Кәрим менән бәхилләштек. 20-һенән 21-нә ҡарай төндә йөрәге шартлаған, туп-тура мәғәнәлә, урталай ярылған. «Йөрәге ярылып үлгән ат һымаҡ…», «Йөрәгемде яра урталай» – шағир үҙенең нисек китәсәген әүлиәләрсә алдан зирәк күргән.*

**28 октябрь 2005 йыл, йома.**

**К.Кинйәбулатова апайҙың кисәһендә 1995 йылда – бынан 10 йыл элек – «Нефтяник»та уның 75 йылын үткәргәндә өҫкә нисек сәхнәлә түбәнән ҡапыл ҡара бысраҡ һыу ишелгәнен, аҡ костюмым ҡапыл ҡап-ҡара булғанын хәтерләнем. Апайҙың яҙмышында ла бындай ҡара дауыл-ҡойондар аҙ булманы, әммә ул барыбер «Бәхет бар ул, бар ул, валлаһи!» тип йәшәне, мәғрифәтсе-шағирә халҡын аң-белемгә саҡырҙы, туғандарын ҡараны, журнал ойоштторҙо, тинем. Уның һәр саҡ юлға әҙер булыуы, байтаҡ юлдарҙы бергә үтеүебеҙ тураһында әйттем.*

**30 декабрь 2005 йыл, йома.**

**Барлыҡ диндәрҙе лә хөрмәт итәм. Һәр дин – Аллаға юл, иман йортона инер өсөн ишек. Ләкин һәр кеше үҙ диненә тоғро булырға тейеш. Һәр ишек ошо изге йортҡа илтә. Әммә ике ишектән бер юлы инеү мөмкин түгел. Бер юлы ике динде тотоп булмай ул.*

**1 ғинуар 2006 йыл, йәкшәмбе.**

**Бығаса иғтибар итмәгәнмен: «Дон Кихот» менән «Тихий Дон» – яңғыраштары ниндәй оҡшаш! Әҙәбиәттең «Дон Кихот»тан «Тихий Дон»ға тиклемге юлы. Дөйөм кешелек китаптары!!!*

**10 ғинуар 2006 йыл, шишәмбе.**

**Быйыл – эт йылы. Фәриҙәгә май шәм итеп яндыра торған бәләкәй генә балауыҙ эт биргәндәр. Этте яндырырға йәл. Ә бына ваҡыт бер ҙә аяп тормай: көндәребеҙҙе яндыра ла һүндерә, тоҡандыра ла һүндерә. Эт йылым да янып бөтөр, балауыҙ эт һаман ултырыр.*

**Боронғо китаптар әйтеүенсә, Аллаһ кешене үҙенә оҡшатып яратҡан. Аллаһтың ярҙамсылары – уның фәрештәләре, пәйғәмбәрҙәре, әммә ҡарарҙы тик Аллаһ ҡабул итә, ул хәл итә. Батшаларҙың, ил юлбашсыларының да яҙмышы яңғыҙ. Ниндәй генә аҡыллы кәңәшселәре – юлдаштары булмаһын, төп һүҙҙе, хәл иткес һүҙҙе Хужа әйтә!*

*Юлбашсының, ил етәксеһенең төп таянысы – уның үҙенең аҡылы менән уға бирелгән хакимлыҡ, ғәйәт ҙур көс, бөйөк мөмкинлектәр.*

*Былар барыһы ла уға Аллаһ тарафынан бирелә. Шуны ҡәҙерләй белергә тейеш даһи.*

**22 май 2006 йыл, дүшәмбе.**

**Бына, башҡортса китап аҙ, тип зарланыуҙар йыш ишетелә. Ерлек, сәбәп тә барҙыр. Кәрәкле баҫмалар етмәй. Әммә булғанын халыҡ уҡыймы һуң? Барын ҡәҙерләй беләбеҙме? Юҡ шул, юҡ. Башҡорттоң ундан бере(!) генә лә үҙебеҙҙең китаптарҙы, матбуғатты алһа, тираждар күпме булыр ине бит! Китаптар барып етмәгән урындар ҙа бар, әлбиттә. Әммә Өфөгә килгән ауыл башҡорттары китап алырға ашҡынып торамы?*

**3 июнь 2006 йыл, шәмбе. Стамбул.**

**Башҡорт юҡ ерҙә башҡорт эҙләгәнсе, башҡорт бар ерҙәрҙә башҡорттоң яҙмышын хәстәрләргә кәрәк бит.*

*Ошо сәфәргә (юл, ҡунаҡхана, ашау-эсеүҙәр, ҡунаҡ һыйлауҙар, театрҙарҙы арендалау, буш тамашалар һ.б.) киткән нисәмә млн. һумға манараһының тышы ҡойолоп бөткән Каруанһарайҙы балҡытып, яңыртып ҡуйырға йәки ҡайҙалыр мәктәп төҙөргә, йәки нисәмә башҡорт әҙибенең китабын сығарырға мөмкин булыр ине бит. Изге ниәттән дә эшләнер эштәрҙе алдан уйлап, иҫәпләп ҡарарға кәрәк шул. Бына ҡайҙа бушҡа яна халыҡ аҡсалары.*

*Шуныһы сәйер: Төркиәгә әле һигеҙенсе килеүем, әммә был сәфәрҙәргә бәйле бер шиғыр ҙа яҙғаным юҡ. Ике юлъяҙма яҙылды, ә шиғыр – юҡ!? Улар әллә юлъяҙмаға киткәнме?*

**14 июнь 2006 йыл, шаршамбы.**

*Өфө көнө, Рәсәй көнө һәм Салауат байрамы үтте. Бер көндө өс байрамды үткәрер өсөн көс тә, талант та кәрәк. Шөкөр, Өфө, Башҡортостан быға һәләтле. Байрамдарығыҙ күбәйеп китте, тип аҡыл өйрәтмәһендәр, Башҡортостан халҡы ҡасан эшләргә һәм ҡасан күңел асырға кәрәклеген үҙе белә.*

**21 июнь 2006 йыл, шаршамбы.**

**Бөгөн – йылдың иң оҙон көнө. Ул да үтеп бара. Бөгөнгө көн шуныһы менән иҫтәлекле буласаҡ: Рәми ағай буйынса дүртенсе – «Ҡайтыу» бүлеген тамамланым! Ҡулъяҙмамда 101 бит булды. Инде һуңғы ынтылыш – бишенсе бүлек ҡалды. Иң ҙуры буласаҡ, ләкин һуңғыһы икәнен белгәс, нисектер еңелерәк. Унан һуң тағы ла бер бүлек торһа, ҡыйынраҡ тойор инем. Хәҙер инде аҙаҡҡы алыш. Берәй аҙна-ун көн уҡырмын, фекерҙәрҙе тәртипкә килтерермен дә – алға, яҙырға тотонорға. Сентябрҙәргә, Алла бирһә, бәлки, бөтөрөрмөн, тип өмөтләнәм. Был һуңғы бүлеккә материалым күп, яҙылғандарҙы ла файҙаланырға мөмкин. Тик композицияһын уйларға, стилде һаҡларға кәрәк. Булғанын һыйҙырып бөтөрөүгә лә үҙе бер мәсьәләгә әйләнер әле.*

**Донъяла бөйөк асыштар юҡ, бөйөк аңлауҙар, донъяның әлегә тиклем асылмаған серҙәренә төшөнә барыу ғына бар. Кеше берәй яңы матдә йәки яңы тере йән эйәһе уйлап сығара алғанмы? Юҡ, әлбиттә. Кеше бит хатта үҙенең тырнағын да эшләй алмай. Асмай ул, ни бары таба, нығыраҡ аңлай ғына бара. «Прогресс» тигәндәре бына шул аңлау процессы инде ул. Уныһы ла Аллаһы Тәғәләнең әшкәртеүе буйынса эшләнә. Башына Тәңре һалған уйҙы, үҙем таптым, тип кеше үҙен бөйөккә һанап маһая. Ә асылда ул юғары көстөң ҡушҡанын үтәүсе генә. Шундай аҡылдарҙы биреп, Хоҙай кешелекте үҫтерә, уны һынай. Ә кеше бирелгән яҡшылыҡты – насарға, изге көстө ҡара яуызлыҡҡа әйләндерә.*

**Прозала, һәр хәлдә беҙҙә, бөгөн йыбанмағандар заманы. Яҙалар ҙа яҙалар. Әҫәр баш менән уйлап түгел, ултырып эшләнә. Һәләттән бигерәк түҙемлек, хатта әрһеҙлек һөҙөмтәһе.*

**29 июнь 2006 йыл, кесаҙна.**

**Рәми ағай тураһында яҙған дүрт бүлекте – 329 бит – баштан аяҡ уҡып сыҡтым. Уҡығансы күпме ваҡыт үтте, ә нисек яҙғанмын, нисек йырып сыҡҡанмын?! Үҙемә-үҙем аптырап та, бер аҙ һоҡланып та ҡуйҙым. Ҙур эш эшләнгән барыбер. Инде һуңғы талпыныштарға көс, илһам, зиһен һәм ваҡыт бирһен ине, эштең осона сығырға Аллаһ насип итһен ине! Хәҙер төп хәстәр – шул. Ваҡыт нык ҡыҫты.*

**13 июль 2006 йыл, кесаҙна.**

**Алпамыша һымаҡ батырҙар ҡатынының сәс толомона йәки атының ҡойроғона тотоноп зиндан-соҡорҙан сыҡҡан. Ә бит батырҙың бығауы ғына 70 бот булған, үҙенең ауырлығы күпме… Шулай булғас, шундай йөктө тартып сығара алғас, ул ҡатын-ҡыҙ ни тиклем ғәйрәтле булырға тейеш! Ҡатын-ҡыҙҙың бөйөклөгөн асыр өсөн ошо ғына образ да еткән бит!*

**3 сентябрь 2006 йыл, йәкшәмбе.**

**Кеше яҙмышы менән Аллаһ яҙмышының ниндәйҙер дәрәжәлә оҡшаш мәле – яңғыҙлыҡ. Ғаилә бар, ил-халыҡ бар һ.б. Ләкин кеше асылда яңғыҙ бит. Уның тик үҙе генә хәл итерлек хәл-мәлдәре. Үлем – мәңгелек яңғыҙлыҡҡа илтә. Кешенең иң яңғыҙ саҡтары – тыуғанда һәм үлгәндә.*

**17 октябрь 2006 йыл, шишәмбе.**

**Рәшит Назаровтың үлеме. Кисә тиҙ генә некролог әҙерләнек. Оперативка алдынан Илешевка күрһәттем. Риф Мифтахов, Лариса Абдуллина, мин Төрөмбәткә киттек. Халыҡ йыйылып көтөп тора ине. Өйөндә Даян тигән йәш кенә мулла тәһлил әйтте. Әлдә тәсбихемде алғанмын. Ишек алдында хушлашыу йыйынын район хакимиәте башлығы Ишемголов М.Б. алып барҙы. Мин, Риф, класташы, туғаны, музей етәксеһе һ.б. һөйләне. Юл буйынса томан ине. Митинг ваҡытында ҡап-ҡара булып ҡуйырып килгән һымаҡ. Баҡһаң, яҡында ғына өй яна башлаған икән. Зыяраттан ҡарап торҙоҡ: ялҡын күккә күтәрелде, ун минутта янып бөттө. Р. Назаровтарға ҡаршы йортта ла кеше йыйылып тора ине. Унда ла Талбазынан бер ауылдаштарын алып ҡайтҡандар икән. Беҙ зыяратҡа барғанда (Рәшитте күтәреп алып барҙылар), унда шул кешене ерләйҙәр ине. Зыяратта торғанда «Ашығыс ярҙам» ауылға сапты, унда бер ҡатын иҫһеҙ ята, тинеләр. Йыйында Рәшиттең Миҙхәт тигән класташы һөйләгәйне, шуның ҡатыны үлгән дә ҡуйған. Янған йорттоң күршеләре, бер күнәк һыу тотоп сыҡҡан булған, бахыр.*

*Бына шулай: Рәшитте ерләгән көндә Төрөмбәт ауылында бер юлы өс мәйет, бер янғын. Әллә ниндәй мистика. Ярай, ел-фәлән булманы. Хакимиәт етәксеһе урынбаҫары Владимир Исаевич Федоров та, ерле юҡтан килеп еткәндә машинам ватылды, ти. Әллә ниндәй шомло көн.*

**20 октябрь 2006 йыл, йома.**

**Митингтан һуң автобустарға халыҡты тейәп 158-се гимназияға – М. Кәрим исемендәге мәктәпкә киттек. 20-нән артыҡ яҙыусы булды. Ике ай ҙа уҡымағандар әле, шул арала байтаҡ эш башҡарып өлгөргәндәр. Бик һәйбәт концерт күрһәттеләр. Аҙаҡ Әлфиә менән мин сығыш яһаныҡ. Икенсе тапҡыр булам, һоҡланып бөтә алмайым, тинем. Царскосельский лицейҙан Пушкиндар быны күрһә, Петербургтан Өфөгә ҡасып килерҙәр ине, тип әйттем. Президентҡа, хөкүмәткә рәхмәт әйтергә, ҡәҙерләп һаҡларға кәрәк, тип һөйләнем. Бындай мәктәпте төҙөүе еңел түгел, уны рух менән, шиғриәткә, моңға, халыҡҡа һөйөү менән тултырыуы тағы ла ҡатмарлыраҡ, ә һеҙ ҡыҫҡа ғына ваҡытта шуға ирешкәнһегеҙ, тинем. Мәктәптәге 620 уҡыусыға бөгөн 20-нән артыҡ уҡыусы өҫтәлде, сөнки бында килгән яҙыусыларҙың барыһы ла Мостай Кәрим мәктәбенең уҡыусылары, беҙ мәктәптәштәр булып сығабыҙ, шулай булып йәшәйек – шундай теләктәр әйттем.*

**8 ноябрь 2006 йыл, шаршамбы.**

**Анау көндө телевизорҙан күлдә кәмә итеп ҡуйылған ап-аҡ яһалма аҡҡошҡа ғашиҡ булған бер ҡара аҡҡошто күрһәттеләр. Яһалма ҡош янында ул, бисара, бәләкәй генә. Үҙе ни эшләргә белмәй, сәбәләнеп тирәләй йөрөй.*

**9 ноябрь 2006 йыл, кесаҙна.**

**Лев Толстойҙың «Ильяс», «Кешегә күпме ер кәрәк?» тигән фәлсәфәүи хикәйәләренең нәк башҡорт тормошо йогонтоһонда тыуыуы һис кенә лә осраҡлы түгел. Беҙҙең халыҡтың йәшәү рәүеше, сабырлығы һәм талымһыҙлығы, йәшәйеште көнкүрештән, йәшәйеште көндәлек мәшәҡәттәрҙән юғары ҡуйыуы, шулай уҡ башҡорт өсөн ер мәсьәләләре бөйөк әҙиптең хикәйәләрендә барыһы бергә килеп төйнәлгән. «Башкиры… от которых Геродотом пахнет» тип Толстой ерле юҡтан әйтмәгән. Мәҫәлән, татар мөхите уны бындай әҫәрҙәр яҙыуға, моғайын, илһамландырмаҫ ине.*

**30 ноябрь 2006 йыл, кесаҙна.**

**Әллә ниндәй һүҙҙәргә килеп тап булаһың. Беҙҙең яҡта өмәселәр янынан үткәндә: «Һу әйҙә!» тип сәләмләй, теләк әйтәләр. Шуны аңламай, мәғәнәһенең тамырын белә алмай торғайным. Баҡырғаниҙа уҡыйым: «һу әйләп» – һу «кәйеф» тигәнде аңлата икән. Һу әйҙәп – кәйеф эҙләп, көтөп була, тимәк. Өмәселәргә «Һу әйҙә!» тип дәрт, кәйеф теләп үткәндәр икән. Ни тиклем борондан килгән һүҙ һаҡланып ҡалған.*

**26 декабрь 2006 йыл, шишәмбе.**

**Кешеләр һәм кейектәр. Элек «Хайуандар донъяһы» тапшырыуын һ.б. ҡыҙыҡһынып ҡарай торғайным. Хәҙер улар ҙа ялҡытты, сөнки кешеләр тормошонан нормаль хәлдәрҙе күрһәтеү юҡ, күберәк һуйыш-ҡырылыш та хайуандар тормошон бирәләр.*

**9 ғинуар 2007 йыл, шишәмбе.**

**Тормош тыныс һәм иркен булған һайын, күңел хафалыраҡ, уйланыуҙар – ҙурыраҡ. Көндәлек тормошта эштәге ығы-зығы, ағымдағы мәсьәләләр, төрлө кәңәшмәләр, рәсми ҡағыҙҙар шау-шыуында һәм туҙан-томанында күренмәгән глобаль һорауҙар һиллектә алға һерәйеп килеп баҫа. Бигерәк тә ил, республика, милләт яҙмышы, дәүләт именлеге, халыҡ мөлкәте ныҡ хафаландыра. Сөнки глобаль талау бара, был шарттарҙа күпселек әҙәм балаларының яҙмышы нисек булыр? Глобализация телдәрҙе йотоуҙан алда ерҙәрҙе йотмаҡсы. Мәсьәлә бына нисегерәк тора бит.*

**15 февраль 2007 йыл, кесаҙна.**

**Ҡайһы саҡта Мәскәү хәбәрҙәренән берәй яҡшылыҡ, һәйбәт яңылыҡ тураһында һөйләһәләр, аптырап ҡуяһың һәм ул яҡшы ваҡиға йыш ҡына Башҡортостанға бәйле була. Ғәҙәттә үҙәк яңылыҡтары берәй янғын, үлтереш, шартлау һ.б. «ЧП»-лар тураһында һөйләүҙән башлана. Улар өсөн «ЧП» – норма, ә әҙәмсә йәшәү, кешесә норма – «ЧП». Үлсәү миҡдарҙары төрлөсә.*

**10 март 2007 йыл, шәмбе.**

**«Шоңҡар»ҙағы «Силәбе башҡорттары» тигән мәҡәләнән ошо һандар башҡа күсәк менән тондорған һымаҡ: «1970 йылда үҙ милләтенең телен туған тел тип 91% башҡорт һанаһа, 1979 йылда – 77,7%, 1989 йылда – 72%, ә инде 2002 йылда ни бары – 43%». («Шоңҡар», 2007, № 1,32-се бит). 32 йылда туған телен белеүсе башҡорттар 48%-ҡа, йәғни яртылаш, һуңғы 13 йылда – 29%-ҡа кәмегән. Бынан һуң биш йыл үткән, ул арала 7-8%-ҡа кәмеһә, милләттең Силәбе яғында ни бары өстән бере башҡортса белә булып сыға түгелме? Был ҡот оскос һандарға комментарий кәрәкмәй, улар онкологик диагноз һымаҡ.*

**24 март 2007 йыл, шәмбе.**

**Хәҙер төрлө конкурстар күп үткәрелә. Матур кешеләр конкурстары бар. Иң матур кешеләр, минеңсә, туған тел уҡытыусылары. Күңелдәре матур, рухи донъялары нур бөркә. Балаларҙа иң бөйөк хазинаға – туған телгә, әҙәбиәткә һөйөү тәрбиәләй. Матур ғына түгел, батыр ҙа бит улар. Телде, рухты һаҡлаусылар. Донъя буйлап милләттәрҙең рухын тапап, телдәрен имгәтеп, «глобализм» тигән яу һөжүм итә. Был ҡара яуҙан телде һаҡлап ҡына һаҡланып була.*

*Еңеүселәр араһында ҡәләмдәшебеҙ Хәйҙәр Тапаҡовты күреүемә айырыуса шатмын. Ул әҙәбиәтте уҡытыусы ғына түгел, әҙәбиәтте ижад итеүсе һәләтле, уңған прозаигыбыҙ.*

*Сит өлкәнән уҡытыусыларыҙың ҡатнашыуы, улар араһында Ырымбур өлкәһенән яҡташтарымдың булыуы – минең өсөн икеләтә ҡыуаныс. Милләтеңә тоғро булыу, уға лайыҡлы хеҙмәт итеү – һәр кем өсөн ҙур яуаплылыҡ. Ә һин бына ситтә, Башҡортостандан*

*ситтә башҡорт булып ҡара! Бының ни тиклем ҡатмарлы икәнлеген яҡташтарым, бигерәк тә уҡытыусылар яҡшы аңлай. Милләтебеҙҙе һаҡлау өсөн изге эштәр эшләп йөрөй.*

**30 апрель 2007 йыл, дүшәмбе.**

**Кисен Ғ. Камал театрында Ғ. Ибраһимовтың 120 йыллығына арналған тантананы З. Р. Вәлиева асты, академик М. Усманов лекция һымаҡыраҡ телмәр тотто. Шунан һуң минең коллега Илфаҡ Ибраһимов һөйләне. Үҙенән һуң «Дружба народов» журналының редакторы А. Эбаноидзеға һүҙ бирҙе. Шунан миңә сират етте. Сәләм-теләктәр, үҙебеҙҙә эшләнгән эштәр, Ғ. Ибраһимовтың Башҡортостандағы тамырҙары, фажиғәле һәм ҡаһарман яҙмышы һ.б. тураһында һөйләнем. Илфаҡ үҙенең сығышында К.Тинчуринды ла иҫкә алғайны. Уның үҙәк губерналарҙың береһендә тыуғанын беләинем, әммә ҡайҙа икәнен төгәл әйтә алмайым. Яҡында Гөлсөм Иҫәнголова – Татарстандың билдәле сәхнә оҫтаһы – башҡорт ҡатыны ултыра. Ул да белмәй, яҡындағы ғалимдан һораны, К. Тинчурин Пенза өлкәһендә тыуған икән. Сығыш ваҡытында: «Мин талантлы драматург Кәрим Тинчурин тыуған Пенза яҡтарында була алғаным юҡ, шулай уҡ «Тамбов урмандары уртаһында уҫаҡ япраҡтары шаулауын» тыңлап үҫкән иҫ киткес шағир Һаҙый Таҡташтың тыуған ерҙәрендә йөрөргә лә әлегә насип булманы, шуға ла ул яҡтарҙағы татар уҡыусылары тураһында әйтә алмайым, ә бына Ғәлимйән Ибраһимовтың тыуған еренде татар балаларының рәхәтләнеп үҙ телендә уҡыуҙарын, мин әйтмәһәм дә, яҡшы беләһегеҙ, тинем. Беҙҙәге татарса «Ҡыҙыл таң», «Өмөт» газеталары, «Толпар» журналы татар донъяһындағы баҫмалар араһында иң ҙур тиражлылар. Беҙҙә Ғ. Ибраһимовҡа арналған саралар Өфөлә, Ауырғазыла, Стәрлетамаҡта үтте, уларҙа Ҡазандан ҙур төркөм ғалимдар, шулар араһынан Ғ. Ибраһимов исемендәге институттың директоры, Башҡортостан егете Ким Миңнуллин, Татарстандың халыҡ шағиры Роберт Миңнуллин ҡатнашты, тинем. Беҙҙә Ғ. Ибраһимов исемендәге премия бар, яҙыусы тураһында трилогия ла Башҡортостанда яҙылды, уның авторы Суфиян Поварисов ағай бөгөнгө кисәлә ҡатнаша. Бөгөнгө ғилми конференцияла бик күп Башҡортостан ғалимдары булды, тантанаға Ғ.Ибраһимовтың туғандары килде, тинем. Телмәремде ҡат-ҡат алҡышланылар. Аҙаҡ театрҙа банкет, ҡунаҡханала – йәштәргә.*

**1 май 2007 йыл, шишәмбе.**

**Кешелектең рухи донъяһы оло бер бина икән, уны төрлө милләттәр һалған, ул йорт төрлө халыҡтар көс һалып индергән өлөштәрҙән төҙөлгән. Был киҫәктәр тәржемә аша бер бөтөн булып теркәлә. Шунһыҙ һәр өлөш үҙ алдына йәшәйәсәк, бергә туплана алмаясаҡ. Ул өлөштәр айырым көйө лә ҡиммәтле, һәр береһе – үҙ милләтенең рухи таянысы. Ләкин уртаҡ хазина булып тупланһа, ул ҡиммәттәрҙең баһаһы тағы ла ҙурыраҡ. Ҡазанда ошолар хаҡында уйландым.*

**6 июнь 2007 йыл, шаршамбы.**

**Камчатканың вулканы атылғанда гейзерҙарҙы күмеп киткән. Ул матурлыкты күпме кешеләр, шул иҫәптән мин дә, күрә алмай ҡалды.*

*Күпме ихласлыктарҙы бысраҡлыктар күмеп китә, ҡәҙерләй алмай ҡалабыҙ. Гейзерҙарҙы яңынан асабыҙ, тиҙәр ҙә бит, имгәтелгән тойғоларҙы яңынан терелтеп ҡара!*

**8 июнь 2007 йыл, шаршамбы.**

**Кеше үҙ ғүмерендә өй һалырға, ағас үҫтерергә, бала тәрбиәләргә тейеш, тигән изге ҡағиҙә бар. Хәҙер күп осраҡта шуның киреһе килеп сыға: бәндә төҙөлгән йортто емерә, урмандарҙы ҡорота, сабыйҙарҙы ҡыра… Ҡайҙа барабыҙ?*

**21 июль 2007 йыл, шәмбе.**

**Ысын бөйөктәр һуңғы мәлдәренә тиклем үҙҙәренең зирәк зиһене менән яулаған бейеклектә ҡала. Ҡартлыкта ла улар ошо юғарлыктан тәгәрләп төшмәй: аҡылын, рухи дәрәжәһен һаҡлай. Мин Мостай Кәрим яҙмышында быға үҙем шаһит булдым. Ағай һуңғы көндәренә тиклем Мостай Кәрим булып ҡалды. Бөйөктәр ҡартлыктарына табан сәйер ҡылыктар ҡылырға, шаярып йәки үҙһүҙләнеп, малайланып йәки егетләнеп тә алырға мөмкин. Гетеның ҡартлык ғишҡы, Толстойҙың ғаиләһен ташлап сығып китеүе, Бетховендың һуңғы мәлдә йәшенле күккә йоҙроҡ күрһәтеүе… Ләкин былар – түбән төшөү түгел, рухтың һаман да азатлык, хөрлөк даулауы, гармонияға, матурлыкка, дөрөҫлөккә, иң юғары хәҡиҡәткә сарсауы, кешенең кешелек хоҡуктарын яклап баш күтәреүе… Олимп тауындағы Аллаларҙың бәхәс-бәрелештәре һымаҡ…*

**Еләк йыйыусы еләк күп булған һәр яңы урынға килеп сыҡкан һайын ҡыуанып йыя башлай. Ә бына ижадта хәлдәр башҡаса. Бында һәр тапҡаның өр-яңы булырға тейеш. Һәр өҙгән еләгеңдең башҡаларҙы ҡабатламауы, тик үҙенсә өлгөрөүе, тик үҙенсә тулышыуы зарур. Элекке тапҡандарыңа оҡшаш юлдар, яңғыраштар һ.б. йыш осрай, баяғыларынан һис тә ҡайтыш түгел дә һымаҡ. Ләкин һин өҙөргә тейешлеһе – был түгел. Шулай булғас, шырлыктар ярып булһа ла, алға, эҙләргә, табырға!*

**8 август 2007 йыл, шаршамбы.**

**Яҡташтарҙың Өфө менән бәйләнеше TV аша ныгына. Өй һайын «тәрилкәләр», айырым йорттарҙа 2-3 ерҙә элеп ҡуйғандар. Халык хәҙер алдындағы тәрилкәләге аш хаҡында ғына уйламай, рухи ризык биреүсе «тәрилкәләр» ҙә барлыкка килде. Ләкин ул һауыт аша бөгөнгө әҙәм балаһы, бигерәк тә йәштәр, әллә күпме ағыулы аҙыҡ ала, күңелдәр ағыулана, иман ҡаҡшай, әҙәп емерелә, кеше туған халкының намыҫ принциптарынан айырыла.*

**7 сентябрь 2007 йыл, йома.**

*Дағстан еренә килеп төшкәс, тауҙар иләндә тәүге күргәнем, әлбиттә, тауҙар булды. Икенсеһе – диңгеҙ. Өсөнсөһө – бөгөнгө көндө Рәсүл Ғамзатовтың зыяратына барыу буласаҡ. Дағстан минең өсөн өс бөйөклөктән башланасаҡ.*

**16 сентябрь 2007 йыл, йәкшәмбе.**

**Вулкан көн дә атмай. Туҡтауһыҙ атыр булһа, тирә-яғындағы күпме матдәне ул күккә осорорға тейеш була. Ижадтағы илһам урғылыуы менән дә шул уҡ хәл түгелме? Илһам атлыҡҡанда организмдағы күпме ресурстарҙы яндыра. Ҡайһы саҡта кеше бөтөнләй янып бөтөргә йәки зиһенгә зыян килергә мөмкин.*

**4 октябрь 2007 йыл, кесаҙна.**

**Етемдәр ниңә моңһоу була, бойоҡ бала була? Уларҙың ата-әсәһе менән бәйләнеше асылда теге донъя менән бәйләнеш бит. Ул күренеп тормай, әммә киткәндәрҙең, бигерәк тә ата-әсәнең теге донъялағы кисерештәре бында ҡалғандарға йоғонто яһамай тиһеңме ни? Тегендәгеләрҙең һағыш-хәсрәттәре бындағыларға һирпелмәй ҡалмайҙыр. Тегендәгеләр кисерештәрен тыйып торорға тырышһа ла, улар беҙҙең өсөн серле сиктәрҙе үтеп, ер өҫтөнә лә һибелеп, тереләрҙе һағыштарға һалалыр.*

**24 октябрь 2007 йыл, шаршамбы.**

**Путин Өфөгә килгәндә Пелагея тигән ҡатын «пенсия аҙ» тип уға зарланды. Шунан Президент арттырырға фарман бирҙе. Шул пенсионерка өндәшмәһә, ил башлығы бисараларҙың хәлен белмәгән булыр.*

**11 ноябрь 2007 йыл, йәкшәмбе.**

**Эльбрусты күреп булманы. Томан ҡаплаған. Ҡайсындың тыуған төйәгенә лә үтеп булманы. Юлға тау ишелеп төшкән – «обвал» тинеләр. Егеттәр әйтә, боевиктарҙан шыртлайҙар, тип. Ҡайсын Кулиев исемен бер бейеклеккә биргәндәр икән. Был көндәрҙә ул да кеше күҙенә күренмәйҙер, болот-томандар сорнағандыр. Нихәл итәһең, быларҙы күрергә насип түгел, күрәһең.*

*Эльбрусты күрмәһәм дә, томан эсендә лә барыбер Эльбрус булып ҡала. Ҡайсынға ла ҡасандыр юл бикле булған, уны ҡара шаршау ҡаплаған. Ләкин ул барыбер – Ҡайсын булып ҡалған. Бында шиғриәттәге «Ҡайсын бейеклеге»н нығыраҡ аңланым. Уны болот яба алмай, уның юлын бикләп булмай. «Не зарастет к нему народная тропа».*

*Бөйөктәр яндарына туплай. Сентябрҙә – Рәсүл Ғамзатов, ноябрҙә – Ҡайсын Кулиев. Ләкин уларға таянып ҡына, уларҙың йыйғанын көтөп кенә йәшәп булмай.*

**1 декабрь 2007 йыл, шәмбе.**

**Халыҡтарҙың яҙмышы ни тиклем ҡатмарлы, бәхеттәре һис кенә лә тигеҙ түгел. Ҡеүәтле дәүләт булып уйғырҙар күпме ҡомартҡылар*

*ижад иткәндә, рустар ил ҡороу түгел, ҡәүем булараҡ та ойошоп етмәгән тиерлек. Тарих уйғырҙарҙы нисек тарҡатҡан да рустарҙы ниндәй шөһрәтле империя бейеклегенә күтәргән. Урҙа булып донъяны «дер» һелкеткән нуғайҙарҙың хәле нуғайҙарҙан иҙелгән ҡаҙаҡтың, башҡорттоң, татарҙың хәле менән сағыштырырлыҡмы? Ләкин донъя ҡуласа, әйләндереп килтереп бер баҫа. Рус дәүләтен тарҡатырға теләүсе көстәр йылдан-йыл ныгыраҡ ярһый, тағы ла мәкерлерәк аҫтыртын эштәр алып бара.*

**12 декабрь 2007 йыл, шаршамбы.**

**Бәҫ-ҡырау ағастарҙы әкиәт донъяһына әйләндергән. Спорт майҙанында тимер селтәрҙәр бик зиннәтле, ажур шедевр һымаҡ. Пирамидаль тирәктәр сихри шәмдәлдәргә әйләнгән. Хатта кисә күҙгә лә эленмәҫ бер-ике сыбыҡтан торған ҡыуаҡ йораты ла әле хайран итерлек сәнгәт әҫәренә әйләнгән. Әйтерһең дә, илаһи көс үҙенең йылы тынын өрөп, шуға һалҡындың ҡөҙрәтен ҡушып, кешеләр ошо матурлыҡҡа һоҡланһын, ихлас гәжәпләнә белеүҙәрен яңыртһын, тип донъяны ошолай биҙәп ҡуйған. Йә илаһым, тыуған көнөмдәге тәүге аҙымдарымда ошо мөғжизә иләндә атлай алыуым өсөн мең-мең рәхмәт!*

*Был матурлыҡтар кескәй генә ел өрһә лә ҡойолоп төшәсәк. Ләкин галәмдә бер нәмә лә ғүмерлек түгел. Бына ошо мөғжизәләрҙе күреү бәхете, ошондай мәлдәр хаҡында һинең хәтирәләрең – улар ғүмерлек. Үҙең гәмһеҙ булып юғалтмаһаң, бер кем дә был хазинаны һинән тартып ала, талай-урлай алмаясаҡ. Тик үҙен ҡәҙерләп һаҡлай, ауыр саҡтарыңда күңелеңдә шулар менән йыуата бел.*

*Күңелеңде йыуата бел, өмөт-ышаныстарың менән таштарҙы вата бел. Иртәнсәк Кәүсәриә Шафиҡова һүҙҙәренә яҙылған «Бейейбеҙ-бейейбеҙ, ҡурайға ла бейейбеҙ…» тигән дәртле йырҙы бирәләр. Ундай ваҡытта Фәриҙә бейемәй түҙә алмай. Әле лә шулай булды, тыуған көнөм уның бейеүенән башланды. Ә мин Кәүсәриәнең ихтыяр көсө, йәшәү дәрте тураһында ошо йырҙы ишеткән һайын уйланмай ҡалғаным юҡ тиерлек. Һап-һау ир-егеттәрҙең мыжып-шыңшып йәшәүҙәре шундай яҙмыштар янында мәсхәрә инде.*

**26 декабрь 2007 йыл, шаршамбы.**

**Ҡамыр батыр. Ҡамырҙы батыр дәрәжәһенә күтәреүҙә, бәһлеүәндәр сафына баҫтырыуҙа халыҡтың икмәккә булған ниндәй оло хөрмәте.*

**28 ғинуар 2008 йыл, дүшәмбе.**

**Ҡарасәй-балҡар мифтарын Нальчикта бүләк иткәйнеләр, русса баҫмаһын. Күптән уҡырға ынтылһам да, ваҡыт булманы. Кисә ҡараштырып сыҡтым. Күп уртаҡлыҡтар. Һүҙлектәге һүҙҙәр барыһы ла тиерлек беҙҙәгесә. Тәре-крест тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр. Ирегет йәшенә еткәс, яурынына крест һүрәте төшөргәндәр. Тәре менән тәңре бер тамырҙан түгелме икән, тип элек тә уйланғаным бар ине. Яурынды «йән урын» тип аңлаталар ул китапта. Ихтимал. Ул саҡта янбаштың «йәнбаш» булыуы мөмкин.*

**6 апрель 2008 йыл, йәкшәмбе.**

**Йыһанда материяның ҡыҫылыу, ғәләмдәрҙең нөктәгә тупланыу, ҡара бушлыҡҡа әйләнеү һ.б. күренештәре. Ижадта ла ҡыҫылыу законы бар бит. Заманында бик ҡуҡырайып йөрөгән бәғзеләрҙең ижады буш ҡыуыҡ булып сыға, ҡыҫҡас, бер ни ҙә ҡалмай. Ҡайһы берҙә ваҡыт, йылдар ҡыҫҡандан һуң ижадтан берәй семтем нәмә ҡала икән, уныһы ла йыуаныс. Ә генийҙар үҙҙәренең әҫәрҙәрен шундай баҫым менән ҡыҫып ижад иткәндәр, улар ваҡыт ҡыҫымына бик үк бирешеп бармай. Ә илаһи ижадтар (Библия, Ҡөрьән һ.б.) ваҡыт ҡыҫымында бәләкәсәймәй, киреһенсә, олпатлана, бөйөкләнә бара.*

**2 июнь 2008 йыл, дүшәмбе.**

**Ағай-эне талашыр, атҡа менһә, ярашыр, тиҙәр. Эйе, шулай. Ләкин хәҙер йышыраҡ: «Яман менән яман талашыр, яҡшыға ҡаршы ярашыр» бит. Яуыздар тиҙерәк берләшә, изгеләр тарҡауыраҡ була.*

**Тау битенән шишмә менән бергә төшөп киләбеҙ. Мин туҡтап донъяға һоҡланып тора алам. Шишмә туҡтай алмай. Мин тауҙан төшөп, тауға кире менә алам. Шишмә кире менә алмай. Шулай булғас, үҙеңде бик булдыҡлыһыҙ, тип уйлама, әҙәм балаһы, Хоҙай биргән хазиналарыңдың ҡәҙерен бел.*

**11 август 2008 йыл, дүшәмбе.**

**Һин һәм һеҙ. Борон «Һеҙ» тип өндәшеү айырым кешегә ҡарата булмаған. Батшаға ғына түгел, Аллаһтың үҙенә лә «һин» тиҙәр һәм дөрөҫ әйткәндәр. Сөнки батша ла, Алла ла, ябай кеше лә, һәр береһе – берәр генә, берәү генә бит. Кеше ике йөҙләнә башлағас килеп сыҡмағанмы был «Һеҙ» тип өндәшеүҙәр? «Һин» түгел, «Һеҙ». Сөнки ул бәндә үҙендә ялағайҙы ла, алдаҡсыны ла, тоғроно ла, хыянатсыны ла һ.б., һ.б. берләштергән. Элек кеше нисек бар, шулай булған, үҙе булып ҡалған. Ике йөҙләнә башлағас, «Һеҙ»гә әйләнгән, ә «Һеҙ» булыуы еңел, «һин» булып ҡалып ҡара!*

**28 август 2008 йыл, кесаҙна.**

**Әҙәм балаһы ниңә шулай бик оҙаҡ үҫә, нисәмә йылдар буйына өлгөрә? Мал тыуыу менән аяғына баҫа, бер йылда тамам үҫеп етә тиерлек. Ә кеше ғүмеренең һәр миҙгеле нисәмә йылдарға һуҙыла. Был хаҡта уйланмаған кеше бармы икән?*

*Әле мин тағы ошо хаҡта уйлайым. Аллаһы Тәғәлә әҙәм балаһы ғүмерҙең һәр мәленең ҡәҙерен белһен, улай ғына ла түгел, һәр миҙгелдең ҡәҙерен нығыраҡ ҡәҙерләһен, тәрәндәнерәк аңлаһын өсөн шулай эшләгәндер, тим. Бала сағы бер көн генә булһа, ата-әсә балаһына һоҡланып та өлгөрмәҫ ине. Йәшлек бик ҡыҫҡа ғына ваҡыт араһында үтеп китһә, ни тиклем үкенесле булыр ине. Кешенең иң һыҙғанып эшләр сағы бик тар ваҡыт менән сикләнһә, күпме аҫыл эштәр эшләнмәй ҡалыр ине. Ҡартлыҡ тигәнең дә күҙ асып күҙ йомғандай ҡыҫҡа булһа, кеше тейешенсә уйланып ҡалырға ла өлгөрмәҫ ине бит.*

*Барыһы ла ниндәй камиллыҡта яратылған: уйнап ҡал, яратып ҡал, ижад итеп, төҙөп ҡал, уйлар уйҙарыңды уйлап ҡал. Барыһына ла әллә күпме ваҡыт бирелгән.*

**4 сентябрь 2008 йыл, кесаҙна.**

**Бәхетлеләр араһында иң бәхетлеһе – бәхетле әсә, балалары өсөн ҡыуаныусы әсә.*

**Бөтә кешеләргә лә тигеҙ талап ҡуйырға ярамай. Төрлө маркалағы машиналарҙан бер үк тиҙлек таптырмайҙар бит. Ат эшләгәндә һыйыр булдыра алмай һәм киреһенсә. Аттар ҙа бер төрлө түгел бит: сабаны бер төрлө, етеҙе бөтөнләй башҡаса.*

**Һәр заман үҙен өҫтөнөрәк күрә. Хатта бәләләрен дә, иң ҙур ауырлыҡтарҙы ошо быуын күтәрә һымаҡ тойола. Байҡап ҡараһаң, тарихта бөгөнгөнән хәтәрерәк хәлдәр аҙ булғанмы ни? Ә беҙ, бөгөнгө һымаҡ бола хәлдәр булмаған, тибеҙ.*

**16 сентябрь 2008 йыл, шишәмбе.**

**Кисә оперативкала Илешев сәйер бер хәл тураһында һөйләне. Түләүле мәҙәни саралар күрһәтеү буйынса беҙҙең республика илдә 52-се урында тора икән.*

*Беҙҙә нисек тә халыҡҡа бушлай ярҙам итеү, һис юғында, мәҙәни, ял сараларында бушлай юлдар табырға тырышыу – дәүләт сәйәсәте. Ләкин кешелеклелекте хәҙер Рәсәй хөкүмәте кире күренеш итеп һанай икән. Ябай халыҡҡа былай ҙа ҡыйын. Әммә, уны ныҡыраҡ талаған һайын, һин алдынғылар сафында булып сығаһың.*

**Ниһайәт, Аксаков премияһын алырға башҡорт яҙыусыһына ла сират етте. Быйылғы лауреаттар – Талха Ғиниәтуллин менән Ст. Куняев. Һайлау тыныс үтте.*

**6 октябрь 2008 йыл, дүшәмбе.**

**Төҙәтмәһеҙ генә закон бар микән? Закон сыға ла, уға төҙәтмәләр сығарыу башлана. Халыҡтың күңел Конституцияһындағы статьялар быуаттар буйына үҙгәрешһеҙ. Уларға төҙәтмәләр индереп, конъюнктура талаптарына көйләп булмай.*

**4 ноябрь 2008 йыл, шишәмбе.**

**Бишкектағы ҡунаҡхананың лифтында дүрт яҡтан да көҙгө. Кешенең үҙенә ҡарарға теләмәгән, үҙенән туйған саҡтары була. Бындай лифтта ҡарамай булдыра алмайһың.*

*Хәҙерге быяла ишектәр, янына яҡынайыу менән, үҙҙәре асылып китә. Теләһәң-теләмәһәң дә ҡосағына тартып алырға әҙер торған йомарт ҡатындар һымаҡ был ишектәр.*

**9 ноябрь 2008 йыл, йәкшәмбе.**

**Беҙҙә яңы традициялар, яңы байрамдар тыуа: Салауат йыйыны, шәжәрә байрамы һ.б. Башҡорт артыҡ йыш байрам итмәйме, тиеүселәр бар.*

*Ҡасан, нисек эшләргә, eң һыҙғанып тир түгергә, ҡасан күңел асырға аҡыл өйрәтеүҙәрҙең кәрәк саҡтары ла булалыр. Ләкин байрам итә белмәгән халыҡ – дәртһеҙ ул. Һабантуй үткәрер өсөн башта тир түгеп һабан һөрөргә кәрәк. Һабантуй һүҙендә башта һабан, шунан һуң ғына туй тора бит. Икеһе лә мотлаҡ. Туйҙары булып, һабан һөрөлмәһә, һабан һөргәс, туйы үткәрелмәһә, тормош камил түгел.*

**24 ноябрь 2008 йыл, дүшәмбе.**

**Элек халҡыма хат яҙа инем, хәҙер халҡым миңә хаттар яҙа. Депутат яҙмышы. Ҡабул итеү ваҡытында илап килеп ингән, илап сығып киткән ҡатындар. Күберәк балалары менән ятаҡта көн күреүсе уҡытыусылар. Торлаҡ мәсьәләһендә бер ҙә перспектива юҡ. Ярҙам итә алмауҙан гәрләнеүҙәр.*

**7 февраль 2009 йыл, шәмбе.**

**Сит илдә йәштәрҙе уҡытыу тураһында бик матур махсус дәүләт программаһы – был бик яҡшы эш. Йылды йәштәр инициативаһын яҡлау йылы тип иғлан итеү ҙә бик һәйбәт. Әммә йәштәр араһында төрлө инициативалар тыуырға мөмкин. Дөрөҫөрәге, йәштәрҙе һөзгөртөп тә, насар инициативаларға дәртләндереп тә була. Мәҫәлән, төрлө илдәрҙәге «ерән» һ.б. революциялар, ерәнгес ватыу-ҡыйратыуҙар иң башта йәштәрҙе ярһытып эшләнде бит.*

**Донъяны иҡтисади кризис «дер һелкетә», тип һөрән һалалар. Рәсәйҙәге бардакты аҡларға, һылтанырға тағы ла бер сәбәп табыла. Илебеҙҙә инде нисә йыл рухи кризис бара, бөйөк мәмләкәт матди яҡтан тарҡалыу ғына түгел, рухи яҡтан емерелә, был емереү әҙмә-әҙлекле эшләнә – был хаҡта тревога һуғыу кәрәк тә бит. Ләкин иҫкәртеүсе аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәрен юғарыла ишетергә лә теләмәйҙәр.*

*Кризис стихия бәләһе һымаҡ ҡағылһа, рухи тарҡалыу мәкерле рәүештә әҙмә-әҙлекле башҡарыла. Сценарийын Даллестар күптән эшләгән, ә хәҙер тормошҡа ашырыла.*

**15 февраль 2009 йыл, йәкшәмбе.**

**Ҡайҙа бара донъя?! Кисә ТВ-нан байҙарҙың эттәре ниндәй шарттарҙа йәшәгәнен күрһәтәләр. Хатта уларҙы Мендельсон музыкаһын уйнатып никахлаштыралар. Ниңә был мәсхәрәләрҙе ТВ-нан күрһәтәләр? Минеңсә, был байҙарҙы фашлау өсөн түгел, халыҡты мәсхәрәләү өсөн. Байҙар ана нисек йәшәй, ә һеҙ – ябай халыҡ – быдло, хайуандан да түбән.*

*Рәсәйҙең күпме кешеһе хәйерселектә. Элек ҡыйын хәлдә ауырлыҡтар баҫҡанда «Эт күрмәгәнде күрәбеҙ» ти торғайнылар. Хәҙер ябай халыҡ, тик үҙенең хәләл көсөнә таянып йәшәүселәр суперҡараҡтарҙың эттәре күргәнде күрә алмай, улар йәшәгән зиннәтле тормош уларҙың төштәренә лә инә алмай.*

**3 апрель 2009 йыл, йома.**

**Атайым менән инәйем. Бик бәләкәй саҡтарымда атайым минең өсөн ниндәйҙер изге миф, үҙенсә легенда һымаҡ ине. Инәйем дә: «Атайығыҙ бар саҡта... Атайығыҙ булһа...» тип гел генә әйтә, исемен изгеләштерә, уны хәтеребеҙҙән бигерәк хыялыбыҙға һеңдерә ине. Атайымды юҡһыныуым тағы ла нығыраҡ көсәйә торғайны. Йылдар барыбер үҙенекен итмәй ҡалманы. Атайым образын йылдар томалай, инәйем алға сыға, уға инаныу арта барҙы. Быны мин генә түгел, атайһыҙ үҫкән күпме тиҫтерҙәрем дә шуны кисергәндер, тип уйлайым.*

**Ата-әсәләре тукмаған, башы бәйләнгән малайҙы ТВ-нан ҡат-ҡат күрһәттеләр. Бала бик йәл, ундайҙарҙы яҡларға кәрәк, әлбиттә. Ләкин ил буйынса һуғыш заманындағы һымаҡ млн. етемдәр, берәҙәктәр, тормош төбөнә төшкән сабыйҙар. Улар хаҡында ләм-мим. Гүйә, был көнүҙәк мәсьәлә бөтөнләй юҡ. Ил хужалары башын ҡомға тыҡҡан страус һымаҡ.*

**11 апрель 2009 йыл, шәмбе.**

**Бөтә нәмәне үтескә алып була, ваҡытты ғына бурысҡа алып булмай. Аҡмулланың һүҙҙәре хәтергә төшә: «Яҡуттар табылалыр ваҡыт менән, ваҡыттар табылмайҙыр яҡут менән». Быны шулай икәнен олоғая килә генә аңлайһың.*

**5 июнь 2009 йыл, йома.**

**Бөгөн йөрәккә операция. Бишенсе яртыла уяндым. Ясин сыҡтым. Кисә Гүзәл менән Ғилман Ситдиҡовтар зәм-зәм һыуы, ике ҡалын том Ҡөрьән тәфсире килтерҙе. Ихлас рәхмәт уларға. Операция иҫән-һау ғына үтһен инде. Былай тынысмын.*

*Кисә Тамара Ғәниева менән һөйләшеп алдыҡ. Азамат Юлдашбаев аша поэмамды ебәргәйнем. Тамара «шикарно» тигән була. Бәлки, операция алдынан күңеле булһын, тип әйтәлер. Аҙағын бер-ике строфа менән яҡтыртып ҡуйырға ине, ти. Уйларға кәрәк. Бер строфа тыуған да һымаҡ:*

*Ялҡын ярһый, күҙҙе төтөн ҡырҡа,*
*Донъя тулған әсе томанға.*
*Йәшен һөртөп,*
*Абайланы Юлдаш:*
*Баҡса тулып, алма тумалған.*

Юҡ, икенсе юл былай була:

*Ялҡын ярһый, күҙҙе төтөн ҡырҡа,*
*Был мәхшәрҙә нисек тын алмаҡ?*

**17 июнь 2009 йыл, шаршамбы.**

**Көндәр бик-бик эҫе. Әллә шуғамы, бик көсләнеп китеп булмай. Былай һауығыу һәйбәт кенә барған һымаҡ. Кисә швтарҙы алдылар, зарланырлыҡ ерҙәре юҡ, Аллаға шөкөр.*

*Ҡайһығыҙҙың ҡулы йылы,*
*Бәйләйһе бар йөрәкте. –*

*Хәсән Туфандың һүҙҙәре бында йыш ҡына иҫкә төшөп ҡуя.*

*Йылы, хәстәрле ҡулдар бик күп был кардиодиспансерҙа. Һыҙлаған йөрәкте бәйләрлектәр. Ләкин шағирҙың һис кем күрмәҫ, һис кем таба алмаҫ яралары, ғүмерҙә тынмаҫ һыҙланыуҙары бар. Шул әрнеүҙәр шағирҙы шағир итәләр. Шул һыҙланыуҙар юҡҡа сыҡһа, шағир ҙа бөтәләр, ул һау-сәләмәт ҡәҙимге кешегә әйләнәләр.*

**20 июнь 2009 йыл, шәмбе.**

**Бөйөк Туҡайҙан һуң нимә үҙгәргән? Бабич вафат булғанға 100 йыл яҡынаяу, хәлдәр нисегерәк һуң? Ошо хаҡта ирониялы, хатта саркастик мәҡәлә яҙғы килә. Беренсе өлөшө – ирония. Туҡай: «Эй, Дума, Дума...» «Алһа мәскәүҙәр яҡаң..» «Китмәйбеҙ.» «Тел вә лөғәт алышып...» «Һоро ҡорттар...» «Һөйәлгәнһең – сатта бағанаға (хәҙер ҡатын-ҡыҙ сит ил тауары)һ.б, һ.б әллә күпме миҫалдар. Әйтерһең, бөгөн әйтелгән һоро ҡорттарға. Йәки М. Ғафури: «Баҙарға сыҡтым», «Юҡтырһың да, Алла», «Аурупа – Азия» һ.б. Әле прозаиктарға туҡталманым.*

*Бабич сатираһы. «Хәлебеҙҙән бер күренеш», «Йәшәһен ҡиммәтселек!» «Иблестән дә уҙған әҙәмдәр…»*

**15 июль 2009 йыл, шаршамбы.**

**Артыу һәм үҫеү – икеһе лә бер әһәмиәттә түгел. Демография мәсьәләләре элек вағыраҡ милләттәргә ныгыраҡ ҡағыла ине, хәҙер рус халҡы һ.б. ҙур этностар өсөн дә бик мөһим һәм хәүефле. Беҙҙең өсөн – башҡорт һымаҡ ике яҡтан ассимиляция һөжүменә дусар ителгән милләттәр өсөн бигерәк тә.*

*Ләкин артыу булып та – үҫеү юҡ икән, бынан ғына донъя бик үҙгәрмәйәсәк, милләттең киләсәк яҙмышындағы хәүеф һаман да һаҡланасаҡ. Артыу – һан, үҫеү – сифат. Төп талап – халыҡтың сифат яғынан: аң-белем, мәҙәниәт, һөнәр, сәйәси тәжрибә яғынан алға китеше, йәғни үҫеүе. Сифаты түбән ҙур һандар эшләй алмағанды ла сифаты юғары бәләкәй һандар эшләй ала. Быға миҫал итеп, иң беренсе, йәһүдтәрҙе атарға кәрәк. Артыу – күберәк биологик пландағы күренеш, бында социаль шарттар ҙа нык роль уйнай, әлбиттә. Үҫеү иһә – ижтимағи, интеллектуаль мәсьәлә, аҡыл, зиһен, үҙ бәҫеңде белеү, ҡәҙерләү һ.б. ҡатмарлы сифаттарҙың яңы кимәлгә күтәрелеүе менән бәйләнгән.*

*Һан – сифатҡа әйләнә, тигән хәҡиҡәт бында ла үҙ көсөн һаҡлай. Ләкин бының өсөн һан сифат менән түгел, сифат – һан менән етәкселек итергә тейеш.*

**5 сентябрь 2009 йыл, шәмбе.**

**Каруан килгән яғына кире боролһа, иң артта һөйрәлгән аҡһаҡ дөйә иң беренсегә әйләнә. Үҙгәртеп ҡороуҙар заманында шундай хәлдәр бик йышайҙы бит. Тамаҡ ярыусы булдыҡһыҙҙар «юлбашсы»ға әйләнде.*

# АКАДЕМИК ҒАЙСА ХӨСӘЙЕНОВ МЕНӘН

## БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ ҒИЛЕМЕ ХАҠЫНДА ӘҢГӘМӘ



***– Хөрмәтле Ғайса Батыргәрәй улы!***

***Һеҙҙең ғүмер юлығыҙ, шөкөр, оҙайлы (күҙ теймәһен – 85 йәш!), ижад юлығыҙ тағы ла байыраҡ, тармаҡлыраҡ, емешлерәк. Тормошоғоҙҙа хәтерләрлек, уйландырырлыҡ, фәһем алырлыҡ мәлдәрегеҙ ҙә, уртаҡлашыр тәжрибәгеҙ ҙә етерлек...***

– Ғүмер юлым тыуған илем тормошонан айырылмай.

Ауыр осорҙо ла, ауылдың 30-сы йылдарҙа гөрләберәк алған сағын да, Бөйөк Ватан һуғышының иң ауыр һәм хәтәр йылдарын да, унан һуң яйлап күтәрелеш, уңышлы үҫеш дәүерҙәрен дә кисерергә яҙҙы.

Ауыр йылдар мине, йәш кешене, нығыраҡ сыныҡтырҙы, үҙ ҡул көсөң менән йәшәргә, аҡты ҡаранан айыра белергә өйрәтте.

Үткән быуаттың 40-сы йылдары, Бөйөк Ватан һуғышы үтә йәшләй эшкә күнектерҙе: 13-14 йәшемдән һабан һөрҙөм, көнөн дә, төнөн дә тигәндәй колхоздың башҡа эшендә йөрөнөм. Мәктәптә уҡыу иһә минең өсөн үҙе байрам булды. Дәрестәрҙе тиҙ үҙләштерҙем, гел юғары билдәләр алдым. Бөтөн уй-хыялым белемгә тартылды. Тыуған ауылым мәктәбендәге уҡытыусыларым баһаһы дүрттән-биштән түбән булманы. Мәктәпте Маҡтау грамотаһы менән тамамланым.

Юғарыраҡ, тәрәнерәк белемгә өлгәшеү теләге мине 8-се синыфтан Өфө ҡалаһының ул саҡтағы 9-сы һанлы мәктәбенә алып килде. Артабан – Өфө педагогия институты. Уны ла юғары билдәләр менән тамамланым. Мәскәүгә юлландым. Бөтә Донъя әҙәбиәте институтында аспирантурала уҡыным. Мәскәү белеме миңә кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлау мөмкинлеген бирҙе, юғары фекерҙәр даирәһенә әйҙәне.

Мәскәүҙән Башҡортостаныма, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына эшкә ҡайтыуым, бында филология ғилеме өлкәһендә мауығып эшләүем, бер аҙҙан Алма-Атаға барып докторлыҡ дәрәжәһенә диссертация яҡлауым мине оло дипломлы ғалим итте. Тырыш хеҙмәтем, филология өлкәһендә йөҙөп эшләүем, фәнни китаптарым, матур әҙәбиәт менән дә мауығып китеүем академик тигән иң юғары исемде биреүгә нигеҙ булһа, матур әҙәбиәт өлкәһендә повестар, романдар яҙа башлауым, әҙәби-сәнғәти ғилем, белем миңә «Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы» тигән маҡтаулы исемде лә алып килде.

Әҙәбиәт эшен, сәнғәт ғилемен мин аҡыл, белем, һәләт дәрәжәһен һынау өлкәһе тип ҡарайым. Башыңда тәбиғи аҡылың, олуғ фекерләү һәләтең бар икән, ул һиңә фәндә, ғилемдә, матур әҙәбиәттә, хатта ки, мәғлүм дәрәжәлә, сәнғәттә лә хеҙмәт итеү мөмкинлеге бирә. Ижади хыялһыҙ матур әҙәбиәт юҡ, ғилми, махсус белемһеҙ оло исемдәргә, дәрәжәләргә өлгәшеп булмай.

Юғары белем алып, үҙем дә ысын мәғәнәһендә ҡәләм тибрәтә башлағас, матур әҙәбиәт һәм филология тигән ғилемдең төрлө тармағында тормош, ғилем, белем, сәнғәт һәләтем дәрәжәһен ҡапшай һәм һынай башлағас, үҙ мөмкинлектәремде асыҡланым. Ниндәй генә өлкәне алма, үҙ һәләткенәңде һынап ҡарамай, уны тейешенсә үҙең дә баһаламай тороп, олуғ ғалим да, ҡәләме йүгерек яҙыусы ла булып китеү бик икеле. Кеше үҙ һәләтен үҙе асырға һәм тейешле йүнәлешендә таныта, нигеҙләй барырға тейештер.

Мин, әҙәбиәтсе ғалим исемен йөрөтөүем менән бергә, тәжрибә туплағас, матур әҙәбиәт өлкәһендә лә көсөмдө һынап ҡараным: парсалар, хикәйәләр яҙҙым. Повесть, роман кеүек жанрҙарҙа ла үҙ һәләт-мөмкинлектәремде барланым. Бер ҡалын роман, повестар яҙҙым. Парсалар тигән махсус тапҡыр жанр менән мауығып киткеләнем. Туған әҙәбиәтебеҙҙә парса тигән тапҡыр һәм үтә фәһемле жанрҙы нигеҙләштерә алдым кеүек.

Парсаларым үҙемә иң ғәзиз һәм ҡәҙерле, аҡыл, ғилем тамсыларым булып күренә. Байтағын «афарин афоризмдар» тип тә атар инем.

Тормошто күҙәтеүсән һәр бер әҙәм үҙ ғүмерендә күпме тәжрибә туплай, донъяны үҙенсә аса һәм баһалай. Ғилемле әҙәбиәт кешеһе иһә аҡыл ҡеүәһен, тормош тәжрибәһен ҡәләм көсө менән ҡағыҙға теркәй. Уның фәһемлерәк яҡтарын ҡыҫҡа һәм тапҡырыраҡ итеп яҙа һәм айырым өлгөләрен баҫтырып та сығара. Халыҡ мәҡәлдәре кеүек яҙма афоризмдарым иң ғүмерлеһе булыр, яҙған булһа.

***– Башҡорт әҙәбиәтенең Бөйөк Ватан һуғышынан һуң йылдамыраҡ үҫеп китеүен ҡайһы йылдарҙаныраҡ һанайһығыҙ?***

– Башҡорт әҙәбиәтенең йылдамыраҡ үҫеше, минең ҡарашымса, 1955 йылдарҙан башлана. Был осорҙа айырыуса Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Әнүәр Бикчәнтәев, Зәйнәб Биишева, Ибраһим Абдуллин, Әкрәм Вәли, Нәжиб Асанбаев ижадтары ләүкеп ҡабынды, әҙәбиәтебеҙ үҫешен үткер тематика, жанрҙар төрлөлөгө балҡытып ебәрҙе. Бына, мәҫәлән, хәтерҙә нык ҡалғандарын иҫемә төшөрәм: Баязит Бикбайҙың «Аҡселән ташҡанда», Әнүәр Бикчәнтәевтың «Ҡарасәй юлы», Ғәли Ибраһимовтың «Бер полк кешеләре», Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романдары. Мостай Кәримдең «Ҡыҙ урлау» комедияһы, Ибраһим Абдуллиндың «Пьесалар» китабы, Сәғит Агиш әҫәрҙәренең ике томлығы, Афзал Таһиров әҫәрҙәренең өс томлығы, Ш. Бабичтың һайланма әҫәрҙәре, Рәми Ғариповтың «Таш сәскә»һе һ.б.

***– Ни өсөн беҙҙең әҙәбиәттә, нигеҙҙә, традицион рухтағы әҙәбиәт өҫтөнлөк итә? Был һәйбәтме, насармы?***

– Дөрөҫ әйтәһегеҙ, бөгөн традицион әҙәбиәт өҫтөнлөк итә. Нишләйһең, өлкәнерәк быуын яңыса яҙа алмай, ә йәштәребеҙ тапалған юлдан бара.

Мин быныӊ төп сәбәбен яңы заман яҙыусыларҙың ижади эҙләнмәүҙәренән, хәҙерге рус әҙәбиәтендә, Европа әҙәбиәтендә барған үҫеш-яңырыштарҙы күҙәтмәүҙән, модернистик яңы әҙәбиәт заманы килгәнен тоймауҙарынан, ижади ялҡаулыҡтарынан күрәм.

Был хәл – үҙ-үҙеңә, үткәндәге милли әҙәбиәт ҡаҙнаһына ғына һалышып ятыу әҙәбиәтебеҙҙең үҫеш-күтәрелеш дәрәжәһен төшөрә, түбән кимәлдәге әҙәбиәткә әйләндерә.

Хәҙерге заманда бөтә донъя әҙәбиәттәрендә модернистик яңы әҙәбиәт өҫтөнлөк итә, яңы жанр формалары алғы планға сыға. Бөгөнгө үҫеш этабыбыҙҙа Европа әҙәбиәте, яңы рус әҙәбиәтендәге модернистик тенденцияларға иғтибар итмәйенсә, үткән заманса яҙышыу милли әҙәбиәтебеҙҙең үҫешен тоткарлай, провинциаль әҙәбиәт түбәнлегендә ҡалдыра.

Йәш быуын яҙыусыларыбыҙ ҙа кисәге традицион әҙәбиәт нигеҙендә генә яҙыша икән, беҙҙең хәҙерге уҡымышлы, белемле, киң эрудициялы китап уҡыусыларыбыҙҙы үҙ әҙәбиәтебеҙҙән биҙҙерәсәк кенә.

Ә яҙыусы кешегә заманың менән бергә, хатта алға ҡарабыраҡ атлағанда ғына, яңы модернистик ағымдарҙы иҫтә тотоп эш иткәндә генә, Рәсәй, Көнбайыш Европа әҙәбиәттәре кимәлен яулаясаҡбыҙ, хәҙерге белемле, килемле башҡорт кешеләренең рухи донъяһын байытыуға, эстетик зауыҡтарын ҡәнәғәтләндереүгә өлгәшә аласаҡбыҙ.

Хәҙерге Рәсәй әҙәбиәте, Европа әҙәбиәте кимәленә өлгәшеү өсөн яҙыусыларыбыҙға интеллектуаль йәһәттән йылдам үҫеү, рухи күтәрелеш иң мөһим шарт. Үҙ әҙәби ҡаҙаныбыҙҙа ғына ҡайнашыуҙан тиҙерәк ҡотолорға кәрәк.

Беҙҙең башҡорт әҙәбиәтендә лә фантастик жанрҙар булһын, юғары интеллектуаль әҫәрҙәр ҙә тыуһын. Әҫәрҙәребеҙ рус теленә, Көнбайыш Европа телдәренә лә тәржемә ителһен. Шундай юлдар менән генә беҙ, башҡорт яҙыусылары, хәҙерге бөтә донъя әҙәбиәте кимәлен яулай алырбыҙ.

Беҙҙең хәҙерге башҡорт интеллигенцияһының күпселеге юғары интеллектуаль кимәлле. Тимәк, матур әҙәбиәтебеҙ ҙә шул кимәлдә булырға тейеш.

***– Быныӊ өсөн, мәҫәлән, иӊ беренсе сиратта Зәйнәб Биишеваның, Мостай Кәримдеӊ, Һеҙҙеӊ иӊ яҡшы әҫәрҙәрҙе Европа, Азия телдәренә тәржемә итеү бик мөһимдер. Заманында тәржемәселәр әҙерләү, тәрбиәләү эшебеҙ юлға һалынып килә ине бит...***

– Заман башҡа – заң башҡа, ти бит халҡыбыҙ. Ә замандан артта ҡалырға һис ярамай. Тимәк, тәржемәселәр әҙерләүҙе яңынан тергеҙеү, һүҙҙән эшкә күсеү төп бурыс хәҙер.

***– Ғайса Батыргәрәй улы, Һеҙ төрлө йүнәлештә, төрлө жанрҙарҙа, әҙәбиәттең теорияһы, тарихы менән дә шөғөлләнгән, текстология***

***өлкәһендә лә емешле эшләгән, фәнни экспедицияларҙа йөрөгән кеше.***

***Бындай төрлөлөктөң кире яҡтары юҡмы?***

– Минең әсәйем бала сағымдан төрлө эшкә, төрлө йомошҡа ҡуша торғайны. Мин, уның ҡушыуы буйынса, Ағиҙел буйы ҡырсын талдарын киҫеп алып ҡайтып, ҡаҙ, тауыҡ оялары үрә торғайным. Ауыл балаһына төрлө һөнәр эштәренә егеләргә тура килә. Былар төрлө яҡлы үҫешергә ярҙам итә, сыҙамлылыҡ, егәрлелек һыҙаттарын тәрбиәләй. Бындай сынығыу миңә ғилем өлкәһендә өҙлөкһөҙ эшләй алырға ныҡ ярҙам итте.

Мин бала саҡтан хыял донъяһында йөҙә инем, уйымда бөтә ғаләмде гиҙә инем. Уй-хыялдар миңә ҡанат ҡуйҙы, тырышлығым менән ауырлыҡтарҙы еңә алдым. Кешеләргә игелегем, тиҫтәнән артыҡ юғары фәнни кадрҙар әҙерләүем абруйымды күтәрҙе. Мин хәҙер күңелемдән, үҙемдең фәнни мәктәбем бар, тип әйтә алам. Уҡыусыларым мин һалған фәнни традицияларҙы үҫтерә, киңәйтә бара.

Фәнни эштә лә, хыялды тормошҡа ашырыуҙа ла егәрлелек кәрәк. Егәрлелек ел тирмәндәрен дә әйләнергә мәжбүр итә, ти әҙиптәр.

Атаҡлы яҙыусыларыбыҙ тормошо һәм ижады тураһында махсус биографик китаптар яҙғанда уларҙың күп яҡлы булыуҙарына хайран итә инем. Мәҫәлән, Ризаитдин Фәхретдинов, Дауыт Юлтый, Сәйфи Ҡудаш, Мостай Кәрим һәм башҡалар. Был шәхестәр мине төрлө йүнәлештә системалы эшләүгә дәртләндерҙе.

Әхиәр Хәкимовтың «Ғайса Хөсәйеновҡа» тигән бағышлау шиғырында шундай юлдар бар:

*Күпһенмәйек оҙаҡ йәшәгәнде,*
*Үкенмәйек иртә киткәндәргә,*
*Ҡыуанайыҡ дуҫтар шатлығына,*
*Яҡты моралына еткәндәргә.*

Ижади берлектә һәм дуҫлыҡта йәшәү, – минеңсә, ижадсының рухи киңлегенең һәм йәшәү иркенлегенең бер һыҙаты ла ул.

***– Һеҙҙең ижад донъяһын, фәнни эшмәкәрлегегеҙҙе, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтындағы хеҙмәтегеҙҙе, ғилми етәксе булараҡ бик күптәрҙе фән юлына төшөрөүегеҙҙе, төпсөрлө текстолог булыуығыҙҙы, археографик экспедицияларҙа арымай-талмай даими ҡатнашыуығыҙҙы – барыһын-барыһын да иңләп-буйлау мөмкинме икән?! Быларҙы күҙалларға тырышыу ғына ла еңелдән түгел. Һеҙҙең шул тиклем дә емешле эшләй алыуығыҙ бик күптәргә, бигерәк тә йәштәргә, иҫ китмәле өлгө ул. Һеҙҙең әле лә ижади ҡомарығыҙ һүрелмәгән. Һүрелмәһен дә! Һеҙҙе хөрмәт иткән, яҙғандарығыҙҙы көтөп алған уҡыусыларығыҙҙы ҡыуандырып, оҙаҡ-оҙаҡ ижад итергә яҙһын.***

***Күркәм юбилейығыҙ менән!***

**Әңгәмәне Фәнил КҮЗБӘКОВ ойоштorҙо.**

# Ғ. Б. ХӨСӘЙЕНОВ ҺӘМ БАШҠОРТ ФОЛЬКЛОРИСТИКАҺЫ

Башҡорт филологияһының аҡһаҡалы, билдәле ғалим һәм яҙыусы Ғ. Б. Хөсәйеновтың оҙайлы һәм күп яҡлы эшмәкәрлеге тураһында уның юбилейҙары айҡанлы байтаҡ мәҡәләләр яҙылды. Бигерәк тә шәхестең 75 йәшенә арналған мәҡәләләр йыйынтығы (ҡара: Башҡорт ғилеме: БР ФА академигы Ғ. Б. Хөсәйеновтың 75 йәше уңайынан әҙерләнгән мәҡәләләр йыйынтығы. Өфө: Ғилем, 2004. 540-се б.) әҙип һәм ғалимдың фән һәм ижади бейеклектәре тураһында ентекле бәйән итә. Унда филология фәндәре докторҙары Р. Т. Бикбаевтың, Ғ. С. Ҡунафиндың, Р. Н. Байымовтың, М. В. Зәйнуллиндың, крайҙы өйрәнеүсе В. В. Сидоровтың мәҡәләләре айырыуса иғтибарға лайыҡ. Һәр автор Ғайса Батыргәрәй улының XX быуат башҡорт гуманитар фәндәр өлкәһенә тос өлөш индереүенә, уның күп яҡлы энциклопедист ғалим булыуына, үҙ фәнни мәктәбен булдырған педагог, егәрле ижадсы булыуына һ.б. күп ыңғай сифаттарына баҫым яһай.

Коллегаларыбыҙҙың дөрөҫ билдәләүенсә, Ғайса Батыргәрәй улы, киң профилле гуманитар белгес булараҡ, әҙәбиәт ғилемен дә, археографияны ла, текстологияны ла, тел ғилемен дә, этнологияны ла, фольклор ғилемен дә үҙ итте. Әлбиттә, ғалимдың тәү сиратта әҙәбиәт белгесе булыуын һәм ғилми мираҫының яртыһынан күбеһен аталған өлкәлә эшләгән хеҙмәттәре тәшкил итеүе бәхәсһеҙ. Шул уҡ ваҡытта Ғ.С. Ҡунафин уны «текстология, айырыуса археография ише тармаҡтарына фәнни нигеҙ һалыусы, биобиблиография тармағын үҫтереүгә ҙур иғтибар биреүсе» тип дөрөҫ билдәләй.

Ғалимдың эшмәкәрлеген ентекле өйрәнгән тикшеренеүселәрҙең һәр береһе Ғ.Б. Хөсәйеновтың «фольклористика өлкәһендә лә күп хеҙмәт күрһәтеүен» әйтеп үтә.

Әлеге мәҡәләлә ғалимдың башҡорт халыҡ ижадын өйрәнеү йүнәлешендәге хеҙмәттәрен айырып ҡарау маҡсат итеп ҡуйыла.

Хәҙерге заманда шәхестең эшмәкәрлеген өйрәнеүҙе биобиблиографик белешмәләр ныҡ еңеләйтә. Әлеге осраҡта ла эш шул белешмәне алып (ҡара: Академик һәм яҙыусы Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов: Биобиблиография. Өфө: Ғилем, 2000. 195-се б.), ғалимдың фольклор



*Алматала үткән Бөтә Союз төркиәтселек конференцияһы ваҡытында Медеу тау-саңғы ял комплексына сәйәхәт мәле.*

Ә. ВАХИТОВ, Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ, Р. ШӘКҮР.

1976 йыл, сентябрь.

ғилеме өлкәһендәге баҫмаларын ҡарауҙан башланды. Ул бүлек 20 берәмекте тәшкил итә һәм башҡорт, рус, инглиз телендә сыҡҡан хеҙмәттәрҙе айырып биреүҙән ғибәрәт. Хронология тәртибендә бирелгән белешмәнең әйтелгән бүлектәге тәүге эштәргә иғтибарҙы йүнәлтәм: «Әкиәттәге оло хәҡиҡәт», «Совет Башҡортостаны» газетаһының 1965 йылғы 24, 26 октябрь номерҙарында сыҡҡан. Башҡорт тылсымлы әкиәттәре буйынса кандидатлыҡ диссертацияһы яҙған һәм әле лә ошо өлкәлә эшен дауам иткән кеше булараҡ, мине мәҡәләнең исеме ныҡ ҡыҙыҡһындырҙы, һәм шунда уҡ уның менән танышыу теләге тыуҙы. Әлдә китапхана үҙебеҙҙә, шуға күрә теләкте шунда уҡ тормошҡа ашырыу мөмкинлеге бар. Ғалимдың фольклор ғилеме буйынса хеҙмәттәре теҙмәһенең беренсе юлында торған был мәҡәләнең исеме «Әкиәттә ошо (оло түгел – **Х. Г.**) хәҡиҡәт» булып, ул Мостай Кәримдең «Көнсығыш әкиәттәре циклы»н өйрәнеүгә арналған булып сыҡты. Халыҡ шағирының әйтелгән темаға мөрәжәғәт итеүен Ғайса Хөсәйенов былай тип аңлата: «Шағирҙы бигерәк тә Шәхрәзәдәнең ҡанһыҙ хәлиф Шәхрийәргә мең дә бер кисә буйына һөйләгән әкиәттәре рәүешендә ойошҡан «Мең дә бер кисә» китабы – ғәрәп, фарсы, һинд халыҡтарының өс йөҙләп әкиәттәрен үҙ эсенә алған бөтә донъяға атаҡлы ҡомарткыһы ныҡ йәлеп итә. Айырата күп әкиәттәрҙең ҡанһыҙ һәм мәрхәмәтһеҙ батша һәм хакимдарҙың баш-баштаҡлыҡтарын хөкөм иткән сюжеттары, афоризм булып яңғырарлыҡ ғибрәтле һәм хикмәтле хикәйәттәре ылыҡтыра». Циклды ғалим «шәреҡтең мәшһүр дастандары – Фирҙәүсиҙең «Шаһнамә», Низамиҙың һәм Науаиҙең «Хәмсә» кеүек классик поэмаларына ла туғандаш» тип һыҙыҡ өҫтөнә ала һәм шуларҙағы һымаҡ, шағир әҫәрендә ил хакимдары – хандар хаҡында, яҡшылыҡ менән яманлыҡ көрәше тураһында бәйән итә, тип билдәләй. «Йылмайыу» исемле беренсе әкиәт-поэмаға айырым туҡтап, анализ биреп үтә. Поэма-әкиәт ябай ғына фабулаға ҡоролоп, унда дошман

яуынан ҡамалған баш ҡалалағы хәлдәр тураһында бәйән итеlә. Хандың ҡанһыҙлығынан һалдаттар тамам биҙерәп, уға буйһонмай, яуға күтәрелергә теләмәй. Шул ваҡыт һылыу ҡыҙ итеп һынландырылған өмөт ғәскәрҙе яуға күтәрә һәм дошманды ҡыйрата. Ошондай ғибрәтле хәл «хикмәтле бер хәҡиҡәт» итеп бирелә. «Бирелеш формаһы менән ул әкиәт икән, еткерер айышы менән ул хәҡиҡәт», – ти Ғайса Хөсәйенов. Быны автор үҙе лә таный:

*Был, әлбиттә, иҫке әкиәт,*
*Әкиәттә ошо хәҡиҡәт:*
*Әгәр мәхрүм булһаң өмөттән,*
*Вәғәҙәләр, янау, өгөттәр*
*Ҡомдан ишкән арҡан кеүектәр.*
*Йылмайыуҙан көслө әмер юҡ,*
*Ул әмерҙә янау, йәбер юҡ.*

Артабан ғалим ошо юҫыкта «Сер» әкиәт-поэмаһын ҡарай ҙа шундай һығымталарға килә: «Йылмайыу» әкиәт-поэмаһы композицион яҡтан «уймаҡтай» ғына 17 бүлектән ойошҡан, әммә һәр бүлек үҙе бер бөтөн картинаны хәтерләтә, ә үҙе, дастандарҙағы кеүек, кескәй генә циклик киҫәктәрҙән тора. Ә инде хан монологтарынан торған өс бүлек әкиәттәрҙәге өслөлөк принцибына оҡшаш. «Сер» әкиәт-поэмаһы иһә «көнсығыш поэтикаһының бәйет формаһындағы пар юллы өс строфанан ойошҡан 24 кескәй бүлектән ғибәрәт… әҫәрҙең стиленә әкиәттәрҙәгесә баш башлашып, ҡабатлашып, үҙенсә бөтмөш хас» тип, М.Кәримдең яңы осорҙа боронғо формаларға таянып, көнсығыш поэтикаһын оҫта ҡулланып әҫәрҙәр тыуҙырыуын ғалим юғары баһалай һәм: «Әҫәр формаһы менән боронғо булһа, мәғәнә айышы менән бөп-бөгөнгө» тип әһәмиәтен күрһәтә, йәғни халыҡ шағирының фольклорға таянып ижад итеүенә һоҡлана һәм хуплай.

Артабан мәҡәлә шағирҙың Бөйөк Ватан һуғышы темаһына арнап яҙылған «Ҡара һыуҙар» поэмаһы тураһында. Ғалим уны «хәтәр яу мәлендә дошман алдында теҙ сүгеп, ер ҡорто урынына иҙелеп үлгән ҡурҡаҡ йәндең бахыр яҙмышы һәм уны яу ҡырында батырҙарса һуғышып, хәбәрһеҙ юғалған һөйгән йәрем тип, йөрәк түрендә күпме йылдар ҡәҙерле хистәр, ғазап ҡатыш өмөттәр һаҡлап килгән сабыр һәм ғорур тол ҡатын сыҙамлығы хаҡындағы фажиғәле хикәйәт» тип халыҡ ижады жанры менән атай һәм унда әкиәт персонаждары Мәскәй әбей – үлемде, Сәмреғош йәшәүҙе символлаштыра.

«Йылдар төпкөлөнән ғәжәп бер поэтик сара: әкиәт поэтикаһын төпсөүгә бер сара» мәҡәләһе башҡорт әкиәтенең поэтикаһын өйрәнеүгә ғалимдың берҙән-бер, әммә етди аҙымы була. «Һаран батша сәйәхәте» исемле башҡорт әкиәтенең композицияһы тикшеренеүсенең иғтибарын йәлеп итә, сөнки «был әкиәттең сюжеты, тылсымлы әкиәттәрҙең күбеһенә

хас булғанса, мажаралы түгел, бәлки, башлыса хикмәтле, сәйер сюжетлы»)[1] (ҡара:«Совет Башҡортостаны», 1972 йыл, 17 февраль.) Ысынлап та, әкиәттә батшаның сәйәхәте тураһында һүҙ барһа ла, төп иғтибарҙы батшаға осраған кешеләрҙең (ҡыҙ батша, итексе, мәзин, егет) ғибрәтле хәлдәре, уларҙың һорауҙарына табылған яуаптар йәлеп итә, йәғни Ғайса Хөсәйенов әйткәнсә, «әкиәт сюжет-композиция үҙенсәлеге яғынан урап тағатылыр дүрт йомғаҡтан ғибәрәт. Был әкиәттә төп яуапты табыр – йоҙаҡты асыр өсөн тылсым асҡысын дүрт мәртәбә борорға кәрәк». Асҡыстың һәр боролоуы – бер өгөт-нәсихәт: 1) мөхәббәт ғүмере – бер миҙгел, ул ике килмәй; 2) бер ҡыҙҙы яратыу көсө генә уны әжәлдән аралап тора; 3) кеше ҡайғыһынан көлмә, үҙеңә лә төшөп илауың бар; 4) ҡолағын гел һелкетеп торған эшлекһеҙ егеттең аяныс хәле үҙенән: ялҡаулығынан, тиҫкәрелегенән.

Ғалим иғтибар иткән, ғәрәп, фарсы әкиәттәрендә киң таралған был поэтик сара башҡорт материалында һирәк осрай һәм тағы ла «Бәхет эҙләгәндә» әкиәтендә бар, йәнә «Ҡыҙбатыр менән Ҡырбатыр» (Алдар менән Зөһрә) эпосының нигеҙенә һалынған.

Ғалим үҙенең был мәҡәләһе менән башҡорт фольклористикаһының ғилми яҡтан төплө өйрәнелергә тейешле ҙур жанрҙарының береһе әкиәттәрҙең поэтикаһына иғтибар итергә саҡыра һәм былай ти: «Бына беҙ башҡорт халыҡ ижады поэтикаһының әллә нисәмәшәр ҡатлы һандыҡтарының бер ҡапҡасын ғына аса бирепҡараныҡ... Фольклорсыларыбыҙ ошо ғәжәп поэтик һандыҡтарҙы берәм-берәм һәм ныҡлабыраҡ аса башлаһа, халҡыбыҙ рухының байлығы, гүзәллеге тағы ла балҡыбыраҡ күренер ине». Шулай тип тамамлай Ғайса Батыргәрәй улы мәҡәләһен һәм, аҡыллыға ишара тигәндәй, тиҙ арала ҡайһы йүнәлештә эшләргә юл күрһәтә.

«Бер легенданың тамырҙарын юллап» (ҡара: «Совет Башҡортостаны», 1971 й., 6 октябрь) мәҡәләһе лә ғалимдың тыуған ауылының исемендә булып («Үтәгән»), башҡорттарҙың ер һатыу замандарына барып тоташа һәм донъяға билдәле «Һыйыр тиреһе ҙурлығы ер һатыу» мотивына бәйле. Башҡорттар араһында киң билдәле был легенданың нигеҙендә тарихи реаллек ята һәм Белорет районының Байым, Ашҡаҙар буйындағы Бүжәк, Ишембай районындағы Ярбишкаҙаҡ ауылдары уны үҙ ауылдары менән бәйләйҙәр, йәғни һүҙ барған деталь башҡорт ерҙәрен хәйләләү юлы менән осһоҙ хаҡка тартып алыуҙы һөйләүсе художестволы символ төҫөн ала. Ғөмүмән, мотивтың «2500 – 3000 йылға яҡын тарихы бар», – ти ғалим һәм уның төрлө донъя халыҡтары (урыҫ, һинд, төрөк, ирланд, серб, швед һ.б.) фольклоры

[1]*Марат Минһажетдинов иһә һүҙ барған әкиәтте саф көнкүреш әкиәттәре төркөмсәһенә индерә һәм “тормош-көнкүреш әкиәттәренең был төркөмсәһендә хәл-ваҡиғаларҙың логик ағышы менән тамамланышына күрһәтеү — уларға һалынған идея-тематик фекерҙе асыуҙың төп формаһы булып тора. ...был типтағы сюжеттарҙа... ғибрәт йәки фәһем биреү ҙә ярылып ятмай" (ҡара: М.Минһажетдинов. Ҡәләмендә ҡөҙрәт бар. 200 — 201-се бб.) тигән фекерҙә тора.*

өсөн хас булыуын билдәләп үтә. Әлеге мәҡәләһе менән иһә ғалим «композиция, сюжет, структура формаларын тарихи-сағыштырма һәм типологик планда тикшереүгә әһәмиәт» бирергә саҡыра.

Әле өҫтә һүҙ барған мәҡәләләргә ентеклерәк туҡтаныҡ, сөнки, 70-се йылдарҙа газетала сыҡҡан әйбер булараҡ, танышырға теләгән һәр кеше уларҙы таба алмауы ихтимал.

Ғалимдың халыҡ ижады өлкәһенә иғтибары, моғайын, 1968 йылда, институттың планына ярашлы, профессор Әхнәф Ибраһим улы Харисов етәкселегендә «Башҡорт халыҡ ижады» серияһының томдарын баҫмаға әҙерләү йүнәлешендә ҙур эш башланып, 1977 – 1980 йй. (Ә. И. Харисов ҡапыл вафат булғандан һуң – **Х. Г.**) аталған эштең етәксеһе итеп тәғәйенләнгәс, тағы ла артҡандыр. Ул «Бәйеттәр» томына билдәле фольклорсы М.М. Сәғитов менән берлектә инеш мәҡәлә яҙыуҙа, «Башҡорт халыҡ ижады. Эпос. Өсөнсө китап.» (1981), «Башҡорт халыҡ ижады: совет осоро. Әкиәттәр, риүәйәттәр, хәтирәләр, сәсәндәр ижады» (1982) томдарын редакторлауҙа һәм баҫмаға әҙерләнгән һәр том буйынса фекер алышыуҙа әүҙем ҡатнашып, серияның донъя күреүенә билдәле өлөш индерә.

Артабан, хронология буйынса килһәк, билдәле ғалимыбыҙ Салауат Галиндың юбилейы айҡанлы яҙылған мәҡәләләргә туҡтап тормаһаҡ, сиратта Ғайса Хөсәйеновтың башҡорт фольклористикаһының шулай уҡ мөһим аспекттарын өйрәнеүгә арналған мәҡәләләренең береһе – «Башҡорт ҡарыһүҙҙәре» (ҡара: «Ватандаш», 1998. № 8. 106 – 110-сы бб.). Исеменән күренеп тороуынса, мәҡәлә шулай уҡ башҡорт фольклорсылары иғтибарынан һаман ситтәрәк ҡала килгән бер йүнәлеште яҡтыртыуға йүнәлтелгән. Башҡорт халыҡ ижадында, ғалимдың раҫлауынса, «ҡараһүҙҙәр» төркөмөнән уның «ҡарыһүҙ» тигән боронғораҡ бер тармағы бар. Әгәр «ҡараһүҙ» боронғолоҡтоң дөйөм төшөнсәһен аңлатһа, «ҡарыһүҙ» халҡыбыҙҙың боронғо инаныстары, мифик ҡараштары мәғәнәһенә эйә, ә «ҡарһүҙ» фольклорыбыҙҙың сәсмә әҫәрҙәре, халыҡ прозаһы төшөнсәһен бирә» («Ватандаш». 1998. № 8. 106-сы б.). Был өлкәнең тейешенсә өйрәнелмәүен Ғайса Батыргәрәй улы совет осоронда «был төпкөл ҡатлам»дың тыйылыуы менән аңлата. Шул уҡ сериянан уның «Фольклорҙың боронғо жанрҙары» («Ватандаш», 1998. № 7. 86 – 90-сы бб.). мәҡәләһе лә билдәле. Унда тикшеренеүсе халыҡ ижадының боронғо төрҙәренән «ҡараһүҙ», «ҡарһүҙ», «әйтеш», «ауаҙа» хаҡында яҙа һәм уларҙың «алғыш», «ҡарғыш», «теләк», «ҡобайыр», «һамаҡ» кеүек жанрҙарын да ситтә ҡалдырмай. Ошо урында Р.Т. Бикбаевтың һүҙҙәре иҫкә төшә: ул (Ғайса Хөсәйенов – **Х. Г.**) гел яңылыҡҡа ынтыла, ул филология өлкәһенең күп йүнәлештәрендә беренсе һүҙҙе әйтте, ул беренсе археография экспедицияһын ойошторҙо, текстология буйынса, әҙәбиәт буйынса тәүге монографияларҙы яҙҙы (Академик һәм яҙыусы Ғайса Батыргәрәй улы Хөсәйенов: Биобиблиография. Өфө: Ғилем, 2000. 20-се б.). «Беренсе», «пионер» һүҙенә ул фольклор ғилемендә лә эйә булды: өҫтә әйтелгәнсә, беренселәрҙән булып айырым бер әкиәт сюжетының поэтикаһын махсус өйрәнде, айырым бер легенданың

тарихи тамырҙарын аҡтарҙы, бәйет жанры тураһында коллегаһы М.Сәғитов менән берлектә тәүге ғилми һүҙҙе әйтте, «Башҡорт ҡарыһүҙҙәре» (мифтар) тураһында беренселәрҙән булып махсус мәҡәлә яҙып баҫтырҙы («Ватандаш», 1998. № 8. 106 – 110-сы бб.).

XXI быуат башында башҡорт фольклорсылары иңенә тағы яуаплы ҙур эш йөкмәтелә: 36 томда планлаштырылған «Башҡорт халыҡ ижады» тупламаһының киңәйтелгән баҫмаһы өҫтөндә ҙур эш башлана. Өлкән йәштә һәм эштәре үтә тығыҙ булыуға ҡарамаҫтан, Ғайса Хөсәйенов үҙҙәренә күрше бүлектең темаһынан ситтә ҡалмайынса, редколлегия составында эшләргә ризалыҡ бирә. Эш процесында уға хатта ҡайһы томдарҙың (VII, VIII тт.) автор-төҙөүселәренең береһе сифатында ҡатнашырға ла тура килә. Ә 2009 йылдан ул һүҙ барған серияның баш редакторы итеп тәғәйенләнә.

Ғайса Батыргәрәй улының башҡорт фольклор ғилеменә индергән өлөштәре араһында тағы бер мөһим пункты: билдәле фольклорсы-ғалимдар Берйән Байымов менән Розалиә Солтангәрәева уның мәктәбенән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Берйән Байымов баҡыйлыҡҡа күсте, әммә уның хеҙмәттәре бар, уларҙы ҡулланалар, исеме китаптарында йәшәй.

Филология фәндәре докторы Розалиә Әсфәндиәр ҡыҙы иһә бөгөнгө көндә бик уңышлы, емешле эшләгән фән кешеһе генә түгел, йәмәғәт эштәрендә лә әүҙем ҡатнашҡан, исеме республикала ғына түгел, унан ситтә лә яҡшы билдәле шәхес.

Ғайса Хөсәйеновтың тырышлығы менән күп томлы «Башҡорт халыҡ ижады» серияһының китаптарында (VII, VIII томдарҙа – **Х. Г.**))донъя күреп, ғилми әйләнешкә индерелгән текстарҙың исемлеге: «Ҡорҡот ата» (№ 5), «Уғыҙ хикәйәте» (№ 7), «Сура батыр» ҙың (№ 26) йыйылма текстары, ғәрәп дастаны «Ләйлә менән Мәжнүн» (№ 8) иҫке төркисәнән башҡортсаға ауҙарылған, «Мөйтән бей» (№ 19) ҡулъяҙмаһын фольклор бүлеге мөдире Ә. Сөләймәновҡа тапшырған, «Иҙел менән Яйыҡ» (№ 1) тексының тәнҡитле вариантын төҙөгән, «Аҡай яуы» (№ 17), «Ҡараһаҡал яуы» (№ 18) тарихи хикәйәттәрен, шулай уҡ матбуғатта «Ҡоблан батыр» («Ағиҙел», 1995. № 9. 150 – 161-се бб.) , «Мәсем хан» («Ватандаш», 1998. № 8. 91 – 105-се бб.) ҡобайырҙарының текстарын әҙерләп, беренсе булып ташҡа баҫтырған.

Башҡорт филология фәндәренең аҡһаҡалы Ғайса Хөсәйеновтың эшләгән эштәре, яҙған хеҙмәттәре тураһында ҙур бер монография яҙырға булалыр. Әле беҙ уның фольклор ғилемендәге эшмәкәрлеген күрһәтергә тырыштыҡ. Ғөмүмән, Ғайса Батыргәрәй улының хеҙмәттәре башҡорт филология фәндәренең алтын фондын тәшкил итһә, белгестәрҙең ҡулынан төшмәгән өҫтәл китабы булһа, уның егәрлелеге, фиҙакәр хеҙмәте, фәнгә тоғролоғо – йәштәргә матур үрнәк!

**Гөлнур ХӨСӘЙЕНОВА,**
**Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының**
**фольклор ғилеме бүлеге мөдире.**

# ФӘН АЗАМАТЫ ИЛ АЗАМАТТАРЫ ТУРАҺЫНДА

Күренекле ғалим һәм әҙип Ғайса Хөсәйенов – үҙенең ижади һәм фәнни тикшеренеүҙәре менән башҡорт әҙәбиәтенә һәм ғилеменә ҙур өлөш индергән, башҡорт әҙәбиәте тарихын өйрәнеү өлкәһендә үҙенең фәнни мәктәбен булдырған оло шәхес. Тиҫтәләгән ғилми хеҙмәттәре, тәнҡит-биографик очерктары булһынмы, әҙәби күҙәтеүҙәре, теоретик мәҡәләләре, йылъяҙмалары, лирик-философик эсселары, парсалары – былар барыһы ла әҙип ижадының күп яҡлы икәнен дәлилләй. Авторҙың «Ил азаматтары» исемле китабындығы баш һүҙендә Аҫылғужа Баһуманов әйткәнсә: «Филология аҡһаҡалының әҙәбиәт тарихын һәм ғилемен, әҙәби тәнҡитте һәм тарихи прозаны үҫтереүгә индергән өлөшө ифрат та тос, уны ҡапылда баһалауы ла ауыр»[1].

Художестволы әҙәбиәт ғилемендә үҙен парсалар оҫтаһы итеп таныҡан әҙип очерк жанрына ла үҙ өлөшөн индерҙе. Очерк хаҡында авторҙың күрәҙәлек итеп әйткән һүҙҙәре лә бар: «Тикшерелмәгәне менән художестволы очерк – үҙе бер донъя».

Авторҙың 1998 йылда донъя күргән «Ил азаматтары» китабы тарихи повестарҙан, тарихи портрет очерктарҙан тора. Әгәр ҙә тарихи әҫәрҙәрҙә Иҫәнгилде батыр, Пугачев фельдмаршалы Бәҙәрғол Юнаев, рудасы Исмәғил Тасимовтарҙың тормошо һәм көрәш юлы һүрәтләнһә, «Тарихи портреттар» бүлегендә иһә йөҙәрләгән ил азаматтары араһынан егерме икеһенең әҙәби-тарихи һыны кәүҙәләндерелә. Әҙип халыҡҡа аҙ билдәле тарихи шәхестәрҙе, улар тураһында мәғлүмәттәрҙе йәмәғәтселеккә еткереүҙе маҡсат итеп ҡуя. Бында беҙ Ҡараһаҡал, Батырша, Кинйә, Ҡаранай тигән батырҙар, кантондар нәҫеле Ҡыуатовтар, Буранбай сәсән һ.б. арҙаҡлы шәхестәр менән танышабыҙ. Авторҙың ниндәй генә очеркын алма, әҙәби әҫәр һымаҡ уҡыла, ҡыҙыҡ һәм мауыҡтырғыс. Әҙип үҙенең яҙмаларын юҡҡа был жанрҙың бер үҙенсәлекле формаһына индереп, әҙәби портрет очерктары тип атамай. Сөнки бында үҙе күҙәтеүсе лә, тарихсы ла, ғалим да, яҙыусы ла. Һәр бер шәхес яҙмышын, уның хәрби эшмәкәрлеген, ҡаҙаныштарын, еңеүеңелеүҙәрен ул төрлө хәл-ситуацияларға ҡуйып, тәрән һәм төплө күҙәтеүҙәре аша, тарихи сығанаҡтарға таянып, художестволы дөйөмләштереүгә килә.

[1] *Хөсәйенов Ғ. Б. Ил азаматтары. Тарихи шәхестәр тормошо. — Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 1998. — 8-се бит.*

Ҡараһаҡал тураһында үҙ заманында легендалар сығарылған, йырҙар йырланған, бәйеттәр ҙә әйтелгән. Әҙиптең «Ҡараһаҡал» исемле очеркында Ҡараһаҡалдың хәрби эшмәкәрлеге бәйән ителә. Автор үҙе әйткәнсә, Ҡараһаҡал батырҙың шаҡтай серле һәм ғибрәтле шәхесен, ҡатлаулы ғүмер һәм яу юлдарын күпмелер белмәй тороп, XVIII быуаттағы Башҡортостан тарихын, уның героик һәм трагик биттәрен, көрәш майҙанына сыҡҡан яугирҙарын, ниһайәт, милли ғорурлығыбыҙ Салауат Юлаевты тыуҙырыуға килтергән социаль-тарихи шарттарҙы, героик традицияларҙы аҙағынаса төшөнөүе ҡыйын.

Ғайса Хөсәйенов очеркында ике төп ваҡиғаны, йәғни 1740 йылдың 10 августындағы һәм 1740 йылдың февраль урталарындағы хәл-ваҡиғаларҙан башлап, тәүге Ырымбур губернаһының генерал-лейтенант князь Василий Алексеевич Урусов менән бәйләп һүрәтләй.

Әүәлдән үк ҡанһыҙлығы менән яманаты сыҡҡан был түрәнең ихтилалда ҡатнашҡан яу башлыҡтарына, баш күтәреүселәргә ҡарата ҡот осҡос яуызлығын тасуирлай автор. Майҙанға йыйылған халыҡ алдында Ҡараһаҡалдың иң яҡын яу ярандары башҡорт Йыһанғол Иҫәкәевты, Яныш Исмәғилевты, Ҡарабаш Уғлыйәновты, Яҡуп Ҡасимовты, татар Ҡаптырҙы, сыуаш Максимовты ҡаҙыҡҡа ултыртып үлтертә. Баш күтәреүселәрҙең күбеһен шулай язалау – башҡорт тарихының иң фажиғәле ҡара биттәренең береһе ул. Автор кенәз Урусов, генерал Соймонов бойороғо менән эшләнгән былдай ҡот осҡос язаларҙың А.С.Пушкиндың «Пугачев тарихы» әҫәрендә ҡәһәрләнеүен, был хаҡта Мамин-Сибиряктың да үҙәк өҙгөс әрнеү менән ләғнәтләп яҙып үтеүен билдәләй.

Ә 1740 йылдың 10 февралендәге ваҡиғала иһә Тырнаҡлы волосының Мөхәммәт ауылында Йәрмөхәммәт ҡарттың өйөндә йыйылған күп кенә старшиналарҙың, батырҙарҙың кәңәшмәһе тасуирлана. Әҙип, был кәңәшмәнең әһәмиәтен юғары баһалап, тарихтағы бер бәләкәй ҡоролтайға тиңләй. Кәңәшмәне алып барған Әйле волосы старшинаһы Алан Ейәнғол халыҡты яуға күтәреү, ғәскәр туплау кәрәклеген, ил-йортҡа баш булыр хан табыу ихтыяжын әйтеп хан исеменән яуға әйҙәгән Ҡараһаҡал менән таныштыра. Ул Солтангәрәй-Ҡараһаҡалдың бик уҡымышлы һәм диндар, тәҡүә әҙәм булыуын, хажилығын һөйләй, уны үҙе күреп белеүен, батырлыҡтарын, аҡыллылығын дәлилдәр менән үҙенсә раҫлай. Хандың үҙе артынан ярҙамға ҡаҙаҡ һәм ҡалмыҡтарҙы ла эйәртә аласағына ышандыра.

«Ҡараһаҡал – алыштарҙа ал бирмәҫ батыр, һүҙ ярыштарында ҙур ғилем эйәһе, хатта «аҫыл заты» менән хан булып танылған уҙаман». Уның төрлө илдәр гиҙеүен, бик күп телдәр белеүен, үткер илсе – дипломат булыуын бәйән итеп: «Яҙмыш елдәре уны көтөүсенән аяныс ҡолға, ҡолдан ғәййәр батырға, батырҙан затлы ханға тиклем күтәреп төшөрөп өйөрөлтөп йөрөткән», – ти ул.

Очеркта Ҡараһаҡалдың рухи донъяһы тулы сағылыш таба. Быны беҙ ҡоролтайға йыйылған түрәләр, батырҙар алдындағы сығышында



*Ауылдар буйлап фольклор экспедицияһында: Ғ. ХӨСӘЙЕНОВ, Ә. ВАХИТОВ, Н. ШОҢҠАРОВ, Ә. ХАРИСОВ.*

күрәбеҙ. Уның ил хәстәре менән йәшәүе, халҡының ирекле тормошо өсөн янып йөрөүе, етди ҡарашы ғәскәр алдындағы телмәрендә лә сағыла. Үҙен Солтангәрәй хан итеп таныштырғандан һуң, халыҡ ышанысы менән ҡоролтайға йыйылған башҡорт түрәләре Ҡөрьән үбеп, анттар биреп, Ҡараһаҡалды хан итеп күтәрә.

Тарихсы, телсе Әкрәм Бейеш, тарихтағы сығанаҡтарға таянып, ихтилал башланғанға тиклем Ҡараһаҡалдың шәхси тормошо һәм эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәттәрҙең тарихта аҙ һаҡланғанын үҙенсә дәлилләй. Шуныһы ла мәғлүм: ул ялланған эшсе булып Себер юлындағы Барын-Табын һәм Ҡара Табын волосында йәшәгән. 1739 йылда ҡаҙаҡтарға бер нисә тапҡыр тотҡондарҙы һатып алыр өсөн барған, Себер юлындағы волостар буйынса махсус сәфәр ҡыла, бер нисә тапҡыр буласаҡ ихтилалдың етәкселәре менән осраша. Килтерелгән факттар Миңлеғол Юлаев (Ҡараһаҡалдың) башҡорт төркөмдәренең ҡулында уйынсыҡ түгел икәнен иҫбатлай. Ул – халыҡ көрәше етәкселәренең береһе.

Ғайса Хөсәйенов Ҡараһаҡалдың төп сығышын һәм уның 1740 йылдағы яуҙы ойоштороу моментын тарихи сығанаҡтарға таянып, үҙенсә фаразлай. Бында Р. Игнатьевтың бай ғына архив материалдары нигеҙендә яҙылған «Ҡараһаҡал – Башҡортостандың ялған ханы» мәҡәләһендә башҡорт батырының шәхесе һәм тормошо күҙаллана. Шулай уҡ П.И.Рычковтың «Ырымбур тарихы» тигән китабында Ҡараһаҡалдың бер ниндәй ҙә хан улы түгеллеге, ҡаҙаҡ та булмауы, бәлки, бер башҡорт икәнлеген иҫбат итеүе телгә алына. Ҡараһаҡал яуҙарын үҙ күҙе менән күргән был рус тарихсыһы башҡорт батырын йәшләй тыуған яҡтарынан сығып китеп, Урта Азия, Кубань, Волга буйҙарын күп ҡыҙырыуын һәм шунда ҡалмыҡ тайшаһы Солтангәрәйҙең яҙмышын

белеп, шуны аҙаҡ үҙе итеп танытыуын раҫлай. Ғәмәлдә, ҡалмыҡ ханы Ҡонташлы улы Солтангәрәй үҙ атаһынан Волга буйындағы ҡалмыҡтарға ҡасҡан була һәм шунда кемдәрҙер тарафынан үлтерелә. Ә үлгән йә үлтерелгән хан-батша урынына ялған хан-батшалар пәйҙә булыуын автор тарихта киң таралған ялған Дмитрий, Петр III батша, Пугачевтар менән бәйләй, артабан Ҡараһаҡал ихтилалының сәбәптәрен, тарихи шарттарын төплө анализлай. Яуҙа уның ойошторо у һәләте, халыҡтың уға ҡарата ышанысы, восстаниела ҡатнашыусыларҙың тоғролоғо һүрәтләнә.

Шулай итеп, Ҡараһаҡал башҡа яу башлыҡтарынан күпкә айырылып торған. Берҙән, алда әйтеп үткәнсә, заманы өсөн бик уҡымышлы кеше, оҫта дипломат, батыр һәм сәсән. Икенсенән, уның төрлө халыҡ, йорт-ерҙәр менән бәйләнеше көслө. Өсөнсөнән, «Ҡараһаҡал – нисектер үтә йылғыр, үҙен һис ҡулға төшөртмәç һәм үҙ абруйын ниндәй хәлдә лә һаҡлап ҡала алыр таҫыллы ир».

«Батырша мулла» очеркында автор 1755 – 1756 йылдарҙағы башҡорт ихтилалының идеологы һәм етәксеһе Ғабдулла Ғәлиев тураһында һүҙ алып бара.

Очерктың инеш өлөшөндә ҡыҫҡаса Батыршаның Шлиссельбург утрауындағы яманаты сыҡҡан ҡот осҡос таш төрмәлә 5 йыл ултырыуы һәм аҡыл етмәçлек тәүәккәллеккә баҙнат итеүе, бығаса бер кем дә ҡасып ҡотола алмаған даръя уртаһындағы таш ҡапсыҡтан ҡулы, аяғы бығаулы көйө ҡасырға уйлауы, әммә һаҡсылар менән алышҡанда һәләк булыуы ҡыҫҡаса бәйән ителә.

Батыршаның төрмәлә батшаның үҙенә төбәп яҙып ҡалдырған хаты очеркта төп функция үтәй. Сөнки әҙип Батыршаның тасуирлап яҙған хаты аша параллель рәүештә уның образын ошо осор ваҡиғаларында художестволы үҫтереп, тулы асырға ынтылған.

Ҙур-ҙур түрәләрҙән уҙып, аҡ батшаға барып юлыҡмаған был табаҡ-табаҡ хат дәүләт архивтарында һаҡланып, быуат аша беҙҙең көндәргә килеп еткән. Автор был хаттың XVIII быуат уртаһының ҡиммәтле бер яҙма ҡомартҡыһы ғына булып ҡалмауын, шул үткән замандың тарихын, халҡыбыҙҙың көнкүрешен, уйҙарын, теләктәрен йәнле итеп хикәйәләгән ҙур әҙәби-тарихи бер әҫәр икәнен дәлилләй.

Очеркта Батырша башҡорт халҡының аһ-зарҙарын яҡшы аңлаған, башҡорттарҙың ирекле һәм етеш тормошта йәшәүе өсөн ниндәй сәйәси, иҡтисади шарттар тыуҙырылырға тейешлеген аңлаған шәхес булараҡ күҙаллана.

Әҙип Батыршаның әкиәт батырҙарындай көрәш майҙанына сығыу фактын шулай һынландыра: «Ошондай бөткөһөҙ ыҙа-яфаларҙан халыҡтың сабырлығы бөтөп, үс-асыуы ҡабара бара. Урал буйҙарында йәнә ҡара болоттар ҡуйыра. Бер саҡма саҡ,ҡыҙған һауа ҡапыл дөрләп китер кеүек. Бына шул мәл уҡ-һаҙаҡ түгел, ҡауырый ҡәләм алып көрәш майҙанына Батырша сыға»[2].

[2]*Шунда уҡ. — 271-се бит.*

Батырша, халыҡты яуға күтәрергә саҡырып, атаҡлы өндәмәһен яҙа һәм яҡын шәкерттәре арҡылы уны, сапҡындар ебәреп, Башҡортостандың һәр тарафына тарата. Ҡазан татарҙары, шулай уҡ ҡаҙаҡтар менән ныҡлы бәйләнеш урынлаштыра. Яуыз түрәләрҙән ыҙа-яза сигеүҙән түҙемлектәре тамам бөткән халыҡ, Батыршаның өндәмәһендә ҡасан баш күтәрергә тәғәйен көндө көтөп тә тормаҫтан, стихиялы рәүештә күтәрелеп сыға.

Был ҡуҙғалышты автор ниндәйҙер йыһат характерында түгел, ә иҙелгән халыҡ массаһының иҙеүселәргә, батша түрәләренә, һатлыҡ старшиналарға ҡаршы көрәше төҫөндә һүрәтләй. 1755 йылдың август айында иһә ихтилал Бөрйән волосын, Урал аръяғын ҡаплап ала, оҙаҡламай Тамъян, Үҫәргән, Түңгәүер, Ҡыпсаҡ волостарына ла йәйелә. Баш күтәреүселәр Әүжән-Петров, Йылайыр ҡәлғәләренә һөжүм итә, Покров заводын ҡыйрата.

Артабанғы ваҡиғалар барышында Батыршаның йомшаҡ һәм сикләнгән яҡтары, ҡаршылыҡлы ҡараштары беленә. Мәҫәлән, башҡорт халҡы азатлыҡ көрәшенә күтәрелгәндә, көтмәгәндә Батырша ҡаушап ҡала, ҡурҡыуға төшә һәм үҙ башын һаҡлап ҡалыу өсөн шәкерттәре менән ҡасып китә. Был уның ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы сәйәси шәхес булыуы тураһында һөйләй. Уның бындай ҡылығы бер нисә тапҡыр ҡабатлана. Әгәр ҙә ул беренсе тапҡыр, восстаниеға етәкселек итеү урынына, үҙен көтөп торған ҡоралды яҡташтарын ташлап ҡасһа, икенсе тапҡыр ғаиләһенә хыянат итеп, уларҙы яттар ҡулына ҡалдыра, һуңғы хәл-ситуацияла шәкертен дә ташлап ҡаса.

Үҙенең көтөлмәгән ҡылығын аҡларға теләүен Батырша Әбей батшаға яҙған хатында ла аҡлап булаша. Батыршаның табаҡ-табаҡ яҙған хатының башынан аҙағынса лейтмотив булып уҙған бер идея бар – ул башҡорт халҡының аһ-зарҙарын яҡшы аңлаған шәхес булыуында, уның үҙ ирке, хоҡуҡтары өсөн көрәшен яҡлауында асыҡ күренә. Батыршаның 1755 йылғы ихтилалдағы тарихи роле ошо ихтилалдың идеологы һәм ойоштороусыһы булыуында.

Ғөмүмән, Ғайса Хөсәйенов очеркында Батыршаның ҡатмарлы характерын, аныҡ хәл-ваҡиғаларҙа, ауыр һәм фажиғәле яҙмышын психологик яҡтан тәрән асып бирә алған.

Әҙиптең «Кинйә абыз» очеркында иһә 1773 – 1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында башҡорттарҙың азатлығы өсөн көрәшкән арҙаҡлы идеолог, Пугачевтың уң ҡулы, баш атаман Кинйә Арыҫлановтың хәрби эшмәкәрлеге һүрәтләнә. Автор, тарихи сығанаҡтарға таянып, ҡаһарман образын ышандырырлыҡ итеп аса. Документтарға нигеҙләнеп, Кинйәнең исемен тәү башлап 1754 йылда купчий ҡағыҙ, ер һатыу мәсьәләһенә бәйләнгән булыуын иҫбатлай. (Кинйә Арыҫланов иләү исеменән вәкил булып йөрөй.) Икенсе документтарҙан күренеүенсә, Кинйә Арыҫланов Нуғай юлының бер нисә иләү волость башлыҡтары һәм иң абруйлы старшиналары араһында Ырымбур губернаторы Д. В. Волковтың фармандары буйынса башҡорттарҙың ер

эшкәртеү, иген игеү мәсьәләләре менән мәшғүл. Йәғни, ил ағаһы дәрәжәһенә эйә булараҡ, ҙурыраҡ административ эштәр менән дә шөғөлләнә. Губернатор исеменә Кинйә ҡулы менән яҙылған бер хатта башҡорттарҙы ҡыҫыу, хоҡуҡтарын сикләү, ер-һыуҙарын тартып алыу, артыҡ һалымдар, хәрби хеҙмәттәр менән йөҙәтеү кеүек ҙур сәйәси, хоҡуҡи, иҡтисади мәсьәләләр күтәрелә.

Авторҙың фаразлауынса, Екатерина II батшабикәнең указы буйынса 1767 йылда ойошторолған яңы закондар төҙөү комиссияһына Өфө өйәҙе башҡорттарынан наказдар әҙерләүҙә, Нуғай юлынан иң уҡымышлы һәм иң абруйлы старшиналарҙың береһе булараҡ, Кинйә Арыҫланов ҡәтғи һәм тура йөкмәткеле тәҡдимдәр индереүе менән сыҡҡан. Наказдарҙа ер-һыу, хоҡуҡ, аҫабалыҡ, һалым, хәрби хеҙмәт мәсьәләләре ҡуйылған.

Шулай итеп, 1773 – 1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы осорона Кинйә Арыҫланов ир уртаһына еткән, оло ғилемгә эйә, ҙур тәжрибә туплаған аҡһаҡал, ил ағаһы. Автор юҡҡа ғына «ил ағаһы» тип баҫым яһап әйтмәй, сөнки артабанғы ваҡиғаларҙа уның ойоштороу һәләте, оҫта етәксе сифаттары асыла.

Очеркта шулай уҡ дәүләт архивында һаҡланған, Кинйәнең дуҫы һәм теләктәше Әлибай Мырҙағоловтың уға төбәп яҙған хаты миҫалға алыныуы Пугачев тарафынан төҙөлгән хәрби советта Кинйә Арыҫланов иң ышаныслы һәм абруйлы заттарҙың береһенә әйләнгәнен дәлилләгән факт булып тора.

Әҙиптең художестволы дөрөҫлөк менән тасуир ителгән һуғыш картинаһында ла Кинйә Арыҫлановтың ни дәрәжәлә оҫта етәксе булыуы, көтөлмәгән хәлдәрҙә айыҡ аҡыл менән эш итеүе асыҡ сағыла. Уның был һуғыштарҙағы ролен нигеҙле баһалап, автор былай ти: «Әгәр Кинйә Арыҫланов ғәскәрһеҙ ҡалған Пугачевты йәшереп ҡотҡарып ҡалмаһа һәм яңынан ғәскәрле итмәһә, аҙаҡ ярты Рәсәйҙе үтеп сыҡҡан өҙлөкһөҙ яу һуғышлы оло рейд булыр инеме лә Пугачев бөйөк шәхестәр рәтенә күтәрелер инеме икән?!» Очерк сәсәндәрҙең Кинйә Арыҫлановҡа арналған бәйете менән тамамлана.

XVII – XVIII быуаттарҙа дауам иткән төрлө халыҡ хәрәкәтенең иң юғары нөктәһе булған 1773 – 1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы еңелеү менән тамамлана. Башҡортостанда ижтимағи тормоштоң тағы ауырыраҡ яңы осоро башлана – кантонлыҡ осоро. Кантон системаһы башҡорттоң бөтә тормошон ауыр хәрби хеҙмәт шарттарына ҡуя. XIX быуатта һәм XX быуат башында башҡорттар хаҡында яҙған этнограф Д. П. Никольский, тарихсы В.И. Филоненконың кантон заманын «иң ҡара осор» тип атауҙары юҡҡа түгел.

Кантонлыҡ осоро башҡорт халыҡ поэтик ижадында ла сағылыш тапмай ҡалмаған. Халыҡ йырҙарында, бер яҡтан, рәхимһеҙ, яуыз кантондарға ҡарата нәфрәт сағылһа, икенсе яҡтан, ил-йорт хәстәрен күргән, халҡының мәнфәғәттәрен ҡайғыртҡан ғәҙел кантондарға хөрмәт, маҡтау һүҙҙәре ишетелә.

«Ҡеүәтле кантондар» очерктар серияһын Ғайса Хөсәйенов ана шундай ғәҙел, ҡеүәтле кантондар династияһына арнай. Улар иһә бер нисә быуын: Ҡыуатов, Өмөтбаев, Азаматов, Төрөмбәтов, Солтанов, Сыртланов, Тәкәев һәм Дәүләтшиндар.

Ҡыуатов кантондар очеркы серияһында Үҫәргән ырыуынан данлыҡлы Ҡыуатовтарҙың бик уҡымышлы һәм ғәҙел булыуҙарын дәлилләп, ырыу-ҡәбиләләрен ололап, аҫыл заттарының исемдәрен һәм яҡшы эштәрен баһалап, автор «Үҫәргән тәуарихы», «Үҫәргән шиғри шәжәрәһе» ҡомартҡыларына ла мөрәжәғәт итә, уларға бағышланған йырҙарҙы уңышлы файҙалана.

Ҡыуатовтарҙың кантонлыҡ осоронда төрлө кимәлдәге түрәләр, төрлө чиндағы хәрби кешеләр үҫеп сығыуын, улар араһынан кантон башлығы, кантон ярҙамсыһы, поход старшинаһы булыуҙары, был исемдәрҙе хәләл көс менән ғүмер буйы хеҙмәт арҡаһында алыуҙарын бәйән итә.

«Ҡыуат старшина» очеркында төп герой аныҡ хәл-ваҡиғалар аша аҡыллы һәм оҫта етәксе, хәстәрлекле ил ағаһы, үҙ халҡының ысын патриоты булараҡ һүрәтләнә. Уның шулай уҡ оҫта сәйәсмән булыуын автор ышандырырлыҡ итеп күрһәтә: «Ҡыуат старшина йәшәгән Кесе Урҙа менән Урта Урҙа араһына сығып, ырыуҙаштарын эҙләү, бәйләнеш булдырыу ғәмәлдәрен күрҙе, уларҙың арҙаҡлылары менән осрашып, ырыу-ара бағлаштарҙы юлға һалышты, хатта ҡырғыҙ-ҡайсаҡ ир-егеттәре, башҡорттар менән берләшеп, Яйыҡ сик һыҙығының Разбойний редутына, Орскиҙан үрҙә ҡалмыҡ редутына ике тапҡыр сапҡын яһаны, казак отрядтарын ҡыйратып, бер көтөү һыйыр малы, бүтән улъя алып ҡайтты»[3].

Тыуған иленә ҡайтҡандан һуң бер нисә йылдан уға старшина вазифаһын яңынан йөкмәтеүҙәре – халыҡ тарафынан уға ҡарата ышаныс һәм ихтирам күрһәтеүгә тағы бер дәлил ул.

«Буранғол кантон» очеркында һүҙ Ҡыуат старшинаның кинйә улы Буранғол тураһында бара. Бында Буранғолдоң хәрби етәксе булараҡ образы кәүҙәләнеш таба.

Был очеркты тарихи-героик очерк тип атарға мөмкин. Сөнки бында 1812 – 1815 йылдарҙағы Ватан һуғышы сәбәптәре, Буранғолдоң үҙ башҡорт атлылары менән Мәскәү янынан Парижға барып еткән хәрби яу юлы ошо һуғыш картиналары аша ентекле һәм тулы асыла. Геройҙың хәрби оҫталығы, үҙенең батырҙарын ҡайғыртыуы, көрәшкә рухландырыуы, халҡы өсөн борсолоуҙары асыҡ күҙаллана.

«Ҡаһарман кантон» очеркында Буранғолдоң улы, атаһының юлын дауам итеүсе Ҡаһарман тураһында һүҙ бара. 1812 йылғы Ватан һуғышынан һуң Ҡаһарман 9-сы кантонда атаһына ярҙамсы – кантон урынбаҫары вазифаһын башҡара. Автор Ҡаһармандың образын асыр өсөн мөһим тарихи осрашыуҙарға, уның яҙмышында булған ике губернатор

---

[3] *Шунда уҡ. — 373-сө бит.*

(генерал-губернатор Эссен Петр Кириллович һәм граф Сухтелен Павел Петрович) һәм император Александр 1-гә бәйләп улар менән булған диалогтар аша, Ҡаһармандың улар менән осрашҡандан һуң тыуған тәьҫораттары аша бирелә. Уҡымышлы Ҡаһарман кантон халҡының белемле булыуы өсөн күп эштәр башҡара. Ике губернатор ҙа уның кантон эштәре буйынса тәҡдимдәрен, башҡорт балаларын гимназияларға, университеттарға ебәреп уҡытырға кәрәклеге хаҡындағы үтенестәрен хупларға мәжбүр. Улай ғына түгел, махсус ҡарар сығартып, Ҡазан гимназияһында, университетында уҡыр башҡорт балалары өсөн 20 һум стипендия тәғәйенләтә, йыл һайын ҡаҙнанан 12 мең һум аҡса бүлдертә. Ҡаһарман кантондың ғилем-белем бирҙереү буйынса тырышлыҡтарының, ҡыйыу башланғыстарының оло баһаға эйә булыуын автор шул заманда сыҡҡан «Оренбургские ведомости» тигән газетаһынан түбәндәге юлдарҙы миҫалға килтерә: «Мысли его, инициатива Куватова Кагармана должны были служить колыбелью башкирской цивилизации. Замысли были обширные, а результаты мизерные. Только 50 мальчиков-башкир были отправлены в Москву и Казань и другие города для обучения разным ремеслам…»[4].

Ҡаһармандың белемгә булған һөйөүен дәлилләп, әҙип уның һуңғы француз яуынан ҡайтып, ике иркен ҡуш йорт һалдырып, береһен ҡунаҡ өйө, икенсеһен китапхана иткәнен бәйән итә. «Китапхана тигәне бер музейға, ҡалаларҙағы салонға оҡшабыраҡ китте: стена буйлап быялалы шкафтар, ҡупшылап эшләнгән китап кәштәләре. Улары күбеһе күн сәхтиән тышлы ҡалын ҡулъяҙма һәм баҫма китаптар менән тулды. Араларында үҙе Көнбайыш Европанан алып ҡайтҡандары ла, хажға барыусылар бүләк иткәндәре, үҙе йәрминкәләрҙән һатып алғандары ла бар»[5].

Ҡаһарман кантондың сәсәндәр тотоуы ла тарихҡа билдәле. Бүтән кантондарҙан күрмәксе үҙҙәренә йыр сығартыр, данлатыр өсөн түгел, халыҡтың борондан килгән һүҙ маһирлығын ололағаны, һәләтлеләрҙе танығаны, күңел зауҡы өсөн. Маҡтанырға, маҡталыуға хаҡлы булһа ла, Ҡаһарман кантондың үҙенә махсус көй сығартҡаны мәғлүм түгел, ти автор быға бәйле.

Яуҙашы, атаҡлы ҡурайсы Буранбай сәсәндең Ҡаһарманға дуҫ-әшнә булыуын уға бығышлап сығарған йыры дәлилләй.

*Урал буйҡайы ла, ай, ер икән,*
*Ҡосам тиһә, ҡуйыны киң икән,*
*Урал буйҡайҙарын, ай, иңләгән,*
*Ҡаһарман да кантон, һин икән.*

Әҙиптең сираттағы «Таһир кантон» очеркында геройҙың образы уның уйҙары, монологы аша асыла. Башҡа кантондарҙан айырмалы рәүештә, автор Таһир кантондың Рәсәй батшаларына хеҙмәт итеүен,

[4]Шунда уҡ. — 400-се бит.
[5]Шунда уҡ. — 401-се бит.

кордондарҙа, яу-походтарҙа, кантондың күҙгә күренмәҫ һанһыҙ эштәрендә губернатор фармандарын үтәп, тормошоноң данһыҙ-ниһеҙ үтеүен яҙа. Уның тураһында Башҡортостан дәүләт үҙәк архивында һаҡланған шәхси формуляр исемлегенән башҡа мәғлүмәттәр юҡлығына баҫым яһай. Халыҡ хәтерендә исеме лә ҡалмаған, йыр ҙа сығарылмаған, исмаһам. Күрәһең, ни маҡтар, ни яманлар яҡтары булмағандыр, вазифаһын мыштым ғына башҡарғандыр, ти ул.

Әҙәбиәтебеҙ, мәҙәниәтбеҙ тарихында баһалап бөтмәҫлек хеҙмәт күрһәткән Мифтахетдин Аҡмулла, Зәйнулла Рәсүлев, Зәки Вәлиди Туған, Фәтхелҡадир Сөләймәнов, Әбүбәкер Диваев һ.б. шундай арҙаҡлы шәхестәребеҙ, уларҙың шәхси тормошо, ижади эшмәкәрлеге хаҡында ғалимдарыбыҙ, яҙыусыларыбыҙ тарафынан яҙылған мәҡәләләр әленән-әле башҡорт әҙәбиәтендә, матбуғат биттәрендә донъя күреп тора.

Ғайса Хөсәйеновтың «Аҡмулла – сәсән шағир» очеркында сәсәндең тормошо һәм шиғриәте күҙаллана. Автор бында үҙе күҙәтеүсе лә, тарихсы ла, ғалим-яҙыусы ла ролендә сығыш яһай. Сәсән-шағирҙың яҙмышын автор ҡобайырҙары, йырҙары, туған халҡына күңел шифаһы – дарыу булған, тура һүҙле, йырау, сәсәндәр менән тиңләй. Шиғриәтен йүгерек толпар менән сағыштырып, туған халҡының ғына түгел, күрше ҡәрҙәш халыҡтарҙың рухи хазинаһын байытыуына баҫым яһай.

Әҙип Аҡмулланың һикәлтәле ауыр юлдар гиҙеп һәм төрлө хәлдәргә юлыҡҡан үтә тынғыһыҙ һәм драматик биографиялы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала. Уның тормош юлын әҙип осорҙарға бүлеп өйрәнә. Тәүге осор – шәхес булып формалашыу йылдары. Бында сәсәндең автобиографияһына ҡағылышлы бай мәғлүмәттәр бирелә. Ошо мөхиттә Аҡмулланың донъяға ҡарашы, этик, эстетик фекерҙәре, шиғриәте бөрөләнә, тәү тамырҙарын ебәрә.

Аҡмулла халыҡ араһында илгиҙәр тормошон тәүҙә тау яғы башҡорттарында балта оҫтаһы сифатында башлай, ҡышын балалар уҡыта, һуңынан ҡаҙаҡ далаларына сығып китеп, тулыһынса уҡытыусылыҡ менән шөғөлләнә. Халыҡты уҡырға, ғилемгә арнап яҙған шиғырҙары, уҡымышлылығы, тура һүҙлелеге, сәсәнлеге өсөн халыҡ уға ятап исем ҡуша: «Аҡмулла» (Аҡмулла – ҡаҙаҡса, тура, ғәҙел һүҙле, аҡыллы кеше). Ул исемдең аҙаҡтан Мифтахетдин Аҡмулланың шағирлыҡ исем-псевдонимы булып китеүенә баҫым яһай автор. Троицкиҙан йөҙ саҡрымдар арыраҡ ҡаҙаҡ ауылында Аҡмулланың уҡытып йөрөгәнендә, берәүҙең йыназаһында Иҫәнгилде тигән бер ҡаҙаҡ байы менән әйтеше, артабанғы ваҡиғаларҙа (Өфөлә булғанда) күренекле башҡорт әҙиптәре Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев һәм Ризаитдин Фәхретдин менән осрашыуы, үҙ-ара шиғыр әйтеш ярышын үткәреүе, артабан Аҡмулланың тынғыһыҙ ғүмеренең фажиғәле рәүештә Миәс ҡалаһынан йыраҡ түгел, байҙар яллаған кешеләр тарафынан аяныслы өҙөлөп ҡалыуы һүрәтләнә.

Автор шағир тормошоноң һәм ижадының был йылдарын ҡаҙаҡлыҡ

осоро тип һанай. Аҡмулла тура һүҙле, йор теле менән ҡаҙаҡ гизайҙары араһында оло ихтирам яулаһа, дөрөҫлөктән ҡоттары оҫкан һәм ҡырын эштәре, боҙоҡ ҡылыҡтары өсөн шағирҙың әсе теленә эләккән ҡаҙаҡ байҙары, түрәләре уны ят бауыр, истәк (башҡорт) тип ҡаҡҡан, күрә алмаған.

Ғайса Хөсәйенов, шағирҙың поэзияһына туҡталып, төплө, ҡыҙыҡлы, шул уҡ ваҡытта ентекле күҙәтеүҙәр яһай. Был күҙәтеүҙәр фәлсәфәүи һығымталарға бай, төрлө сағыштырыуҙар менән нығытыла. Нәсихәттәренә туҡталғанда ла автор, уның традицион нәсихәттәре лә үҙенсә, Аҡмулласа, ти. Улар асылда, формаһы менән генә традицион, йөкмәткеһе менән яңыса, мәғрифәтсә. Сәсәндең үҙе иҫән сағында донъя күргән «Дамелла Шиһабетдин хәҙрәтенең мәрҫиәһе» (1882, Ҡазан) әҫәренә айырыуса иғтибар итә һәм был әҫәрҙе ғалим үҙ заманының башҡорт-татар мәғрифәтселегенең поэтик декларацияһы, ҡыҫҡаса шиғри энциклопедияһы тип юғары баһалай, ҡараңғылыҡты ярып үткән яҡтылыҡ менән сағыштыра.

Очеркын тамамлап, Ғайса Хөсәйенов былай ти: «Башҡорт халҡының мәғрифәтсе шағиры Мифтахетдин Аҡмулланың ҙурлығы – традицион яҙма поэзияны күктән ергә төшөрөүҙә; абстрактлыҡтан реаллеккә, милли ерлеккә ҡуйыуҙа; әҙәбиәттең идея-эстетик йөкмәткеһен, поэтикаһын халыҡсанлыҡ менән һуғарыуҙа. Ниһайәт, халыҡсан-демократик яңы башҡорт әҙәбиәтенә нигеҙ ташы һалып, шуның бер поэтик мәктәбен тыуҙырыуҙа. Уға милли төҫ һәм интернациональ рух өҫтәп, поэзияһы менән күрше ҡәрҙәш әҙәбиәттәргә лә йоғонто яһарлыҡ дәрәжәгә күтәрелеүендә. Аҡмулла шулар менән ҙур. Шулар менән бөйөк!»

Авторҙың шулай уҡ арҙаҡлы шәхстәрҙең береһе, милләтебеҙҙең мәғрифәтсеһе, дин әһеле, философы һәм табибы Зәйнулла Рәсүлев («Шәйех Зәйнулла хәҙрәт»), атаҡлы ғалим һәм дәүләт эшмәкәре, 1917–1920 йылдарҙа Башҡорт милли хәрәкәтенең арҙаҡлы етәксеһе Әхмәтзәки Вәлиди («Вәлиди Туған ғалим»), халҡыбыҙҙың донъя күләмендә дан ҡаҙанған атаҡлы ғалимы, төрки халыҡтарының этнографияһы, фольклоры, төрки телдәре һәм әҙәбиттәре өлкәһендә күренекле белгес булған Фәтхелҡадир Сөләймәнов («Фәтхелҡадир Сөләймәнов – Абдулҡадир Иман») һ.б. тарихи портреттарында хәл-ваҡиғалар, тарихи факттар документаль дөрөҫлөгөндә асыла, уларға фәҡәт тормошсан йәнлелек, һүрәтләнеш, художестволы кәүҙәләнеш сифаттары ҡушыла. Шуға ул портреттар тере һындар, хәл-ваҡиғалар, күренештәр рәүешле күҙ алдына баҫа.

Шуның менән Ғайса Хөсәйенов әҙәбиәтебеҙҙә тарихи портрет һәм тарихи очерк жанрҙарын нығытып, уларҙың артабан үҫешенә этәргес көс бирҙе.

**Фирҙәүес ЮНЫСОВА,**
**филология фәндәре кандидаты.**

# ПОЭТИК ОҪТАЛЫҠ, ТАҺЫЛЛЫҠ ӨЛГӨҺӨ

Әҙәбиәт донъяһында сағыштырмаса аҙ дәүер эсендә мәңге онотолмаҫлыҡ эҙ ҡалдырған таланттар күп. Кемдер берәү әллә күпме яҙыпяҙышып та танылыу ала алмай, ә икенсеһе тәүге әҫәре, берәгәйле бер китабы менән үк уҡыусы күңеленә хуш килеп, уның иғтибарын һәм ихтирамын яулап ала.

– Ниндәй китаптар шәп?

– Зиһенгә һәм күңелгә һеңгәне.

– Ниндәйҙәре йәнә шәберәк?

– Һинең үҙеңде уйланырға мәжбүр иткәне, – тип яҙғайны күренекле ғалим һәм әҙип Ғайса Хөсәйенов үҙенең бер парсаһында.

Уның үҙенең ниндәй генә китабын алып уҡыһаң да, ғилми булһынмы ул, әҙәбиме, уның зиһенгә һәм күңелгә һеңерлек икәнен дә, уйланырға мәжбүр иткәнлеген дә тәүге биттәренән үк күрәһең һәм тояһың. Был әҙәбиәтсе ғалимдың хеҙмәттәре үҙҙәре – иҫ киткес бай, серле бер донъя. Хеҙмәттәрҙең тематик даирәһенең шаҡтай киңлеге, фекерҙәренең тәрәнлеге, фәлсәфилеге һоҡландыра, уларҙың авторына ҡарата хаҡлы рәүештә заманыбыҙҙың энциклопедист ғалимы, фәнебеҙҙең ысын корифейы тигән һүҙҙәрҙе ҡулланырға мөмкинлек бирә. «Илһамланып яҙған әҫәрең бүтәндәрҙе илһамландыра алһа ғына шәп», – тип юҡҡа ғына яҙмайҙыр әҙип үҙе.

«Әҙәбиәтсе-ғалим, ғәҙәттә, әҙип кеше лә. Ғ. Хөсәйенов үҙ ижадында ғалимлыҡ һәм әҙиплек, әҙәби тәнҡитселек һәм яҙыусылыҡ һәләттәрен бергә ҡушып һәм ҡушарлап»[1] алып барыусы һирәк таланттарҙың береһе. Ул атаҡлы ғалим ғына түгел, төрлө жанрҙағы күп һанлы әҙәби әҫәрҙәр авторы ла. Үҙен парса оҫтаһы итеп таныҡан әҙип ярым әҙәби, ярым ғилми-популяр стилдәге тәрән философик уйланыуҙарға, ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәргә ҡоролған күп төрлө парсалары менән башҡорт прозаһының бәләкәй жанрҙарына ҙур өлөш индерҙе, беҙҙең әҙәбиәттәге яңырған был жанрға граждандлыҡ хоҡуғы бирҙе. Парсаларында ғалим-әҙип ысынбарлыҡты, фәнни төшөнсәләр менән эш итеп, ғилми фекерләү аша һүрәтләй. Ләкин шул уҡ ваҡытта һәр нәмәнең айышы ябай тел менән уҡыусыға аңлайышлы итеп, ярым тасуири еткерелә.

Ғайса Хөсәйенов парсаларын, ғәҙәттә, берәй исем аҫтына берләштереп, төркөмдәргә бүлеп биреүсән. Төркөмдәрҙең йөкмәткеһе күп

[1]*Бикбаев Р.Т. Ғайса Хөсәйенов // Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Алты томда / Баш мөх. Ғ.Б. Хөсәйенов. Т.6. Хәҙерге әҙәбиәт / Яуаплы мөх. Р.Н. Байымов. — Өфө, 1996. — Б. 352.*

яҡлы һәм күп төрлө тормоштоң, икһеҙ-сикһеҙ ҡатмарлы донъяның ниндәй ҙә булһа хикмәттәрен асыуға йүнәлтелгән. Парсалар ысын мәғәнәһендә «тормош көҙгөһө»нә әүерелә. Унда тарих, кеше, ғүмер, әҙәп-әхлаҡ, дин, фән, донъялағы серле күренештәр, мөғжизәләр һәм башҡа күп төрлө нәмәләр хаҡында уйланыуҙарға, күҙәтеүҙәргә, фараздарға урын бирелә.

«Кеше», «Ғүмер», «Әҙәп-әхлаҡ», «Фән», «Дин», «Философия» тигән ҙур-ҙур төркөмдәр, исемдәре үк әйтеп тороуынса, кешенең рухи донъяһын, тормош, йәшәйеш хаҡындағы уй-хистәрен, уға философик ҡараштарын асып биреүгә нигеҙләнгәнен аңлата. Улай ғына ла түгел, был әҫәрҙәрҙә авторҙың донъяға ҡарашы, кеше, ғүмер, әҙәп-әхлаҡ, фән, дин, философия тураһындағы ҡараштар системаһы тулы сағылыш таба. Уҡыусы алдында автор, гүйә, бөтә күңелен, уй-тойғоларын, донъяға үҙ ҡараштарын тормошҡа бәйләп, картиналы итеп асып һала. Әҙип шәхесен белеү йәһәтенән парсаларҙың, бигерәк тә «Донъя» (Өфө, 2000) китабының, әһәмиәте ғәйәт ҙур, тип әйтергә була. Был әҫәрҙәрҙең һәр береһе фәһемле һәм ғибрәтле. Хикмәт өсөн генә түгел, уҡыусыларына үҙенсә һабаҡ өсөн, фәһем итеп һөйләй автор.

Ғайса Хөсәйенов парсаларында матурлыҡ, тормоштағы төрлө мәлдәр, тормоштоң үҙе, донъя хаҡында, ҡайһы бер ғәжәп хәлдәр, серле парадокстар тураһында күҙәтеүҙәр ҙә, уларға авторҙың ҡараштары ла, асылын төрлө яҡлап аңлатырға тырышыу ҙа бар. Башҡорт халҡына бәйле ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр күп бында. Төрлө тарихи факттар әҙәби фәлсәфә менән аралашып, хикәйәләү, әңгәмә рәүешен ала.

Автор тыуған йорт, тыуған ауыл, тыуған яҡтарҙы тыуған ил образдарынаса үҫтерелгән парсалар аша мәрйендәй теҙеп, образлы тасуирлай. Тәү ҡарашҡа ябай ғына булған һәр нәмәнән, тәбиғәттең, беҙҙе ураҡкан донъяның һәр тамсыһынан күпме сихри серлелек, йәм таба.

Парса – ул бөгөнгө әҙәбиәтебеҙҙә яңыса яңғыраш алып үҫеп, нығынып барыусы, традициялары менән урта быуаттар шәреҡ әҙәбиәтенән үк килгән жанрҙарыбыҙҙың береһе. Әҙәбиәтсе ғалим Ким Әхмәтйәнов үҙенең «Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге»ндә парсаны «фекер бөтөнлөгө менән характерланған кескәй әҫәр» тип аңлатҡайны. Парса оҫтаһы Ғ. Хөсәйенов үҙе әйтеүенсә, «әҙәби парсаның нигеҙендә ниндәйҙер бер тос ҡына деталь ятыуы шарт. Ул деталь матур миниатюр картина тыуырлыҡ поэтик кристаллдар менән солғанырға тейеш»[2]. Парсала ниндәйҙер бер фекер күргәҙмәле картина, тамаша аша күҙ алдына баҫтырыла, ғибрәтле миҫал, дәлил менән нығытылып барыла. Аҙаҡта төп фекерҙең айышы еткерелә, асылы асыла.

Парса һүҙе беҙгә фарсы теленән килеп ингән. Әгәр һүҙлектәргә күҙ һалһаҡ, унда «парса» һәм «парча» тигән һүҙҙәргә тап булабыҙ. «Парса» ғиффәтле, динле мәғәнәләренә тура килһә, «парча»һы киҫәк, өлөш тигәнде аңлата. Шуға ла беҙ жанр булараҡ ҡараған парса фарсы телендәге «парча»нан исем алған, тиһәк, дөрөҫөрәк булыр. Ҙур эпик жанрҙар менән сағыштырып, йәнәш ҡуйғанда, парсалар ысынлап та бер бәләкәй киҫәкте, ярсыҡты ғына хәтерләтә. Проза жанрҙары араһында

[2]Хөсәйенов Ғ.Б. Ижад серҙәре. – Өфө, 1995. – Б. 93.

парса – иң-иң ҡыҫҡа жанрҙарҙың береһе. Күләм яғынан улар төрлө-төрлө: бер һөйләмдән алып бер абзацҡаса, абзацтан бер-ике биткәсә. Тик уларҙың тамамланған бер бөтөн фекер аңлатыуы бик мөһим. Бер дөйөм исем аҫтында ваҡ-ваҡ бер нисә парса бирелеп, фекер береһенән икенсеһенә үҫтерелә-үҫтерелә барып, һуңғыһында төйнәлеп ҡуйылыуы ла мөмкин. Мәҫәлән, Ғ. Хөсәйеновтың «Һаулыҡ – ҙур байлыҡ» циклына ингән парсалары шундай формала яҙылған («Ватандаш». 1997, №2, 3).

Парсаларҙың сәсмә формалағыһы ла, шиғри проза менән яҙылғандары ла, ҡатнашы ла бар. Форма яғынан бик ҡыҫҡа һәм ыҡсым ғына булыуға ҡарамаҫтан, парсаларҙың йөкмәткеһе эсендә ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр, тос фекерҙәр ята. Ғ.Б. Хөсәйеновтың бындай әҫәрҙәрен уҡығанда авторҙың аҡыллы кәңәш эйәһе лә, оҫта күҙәтеүсе-әңгәмәсе булыуы ла, донъяла күпте күреп, күпте белеп өлгөргән аҡһаҡал икәнлеге лә асыҡ тойола.

Уҡыған-ишеткәндәрен, күргән-белгәндәрен бергә туплап, әҙип үҙе һайлаған проблемаларға төрлө яҡлап, төрлө фән күҙлегенән ҡарай. Ул үҙен бер үк ваҡытта философ, аҡһаҡал, филолог, педагог һәм психолог та итеп таныта. Тормоштоң ҡайғы-шатлығына, бөтә ығы-зығыһына ҡарамай, һәр ваҡыт кеше булып ҡалыу мөһим икәнлеген дәлилләй күп әҫәрҙәр, уларҙы төрлө ғибрәтле хәлдәр тулыландыра. Үҙ ғүмерендә күпте күрергә өлгөргән әҙиптең күҙәтеүҙәре, ҡараштары ҡыҙыҡлы һәм фәһемле. Бына миҫал өсөн тағы «Шулай түгелме?» тигән кескәй генә бер парса. Автор бында үҙенең тормошта маҡталыуға ҡарағанда киреһен күберәк ишетеүе, көндәлек эштә маҡташып йөрөп булмауҙың тәбиғи булыуы тураһында һүҙ ҡуҙғата ла, көнсөлдәргә ишара яһап, «Буш ағасҡа ҡағылмайҙар, емешле ағасты ғына һелкетәләр түгелме?» тигән риторик һорауы менән парсаны тамамлап ҡуя.

Ғ. Хөсәйенов парсалары халыҡ ижадының йәки боронғо әҙәбиәттең төрлө жанрҙарын үҙ эсенә алыуҙары менән бай һәм башҡаларҙыҡынан күпкә айырмалы. Уларҙағы хикмәт, хикәйәт, нәсихәт, көләмәс, таҡмаҡ, легенда һәм башҡа формалар әҫәрҙәр стиле менән бергә үрелеп, композицион бер бөтөнлөк тыуҙыра, тартмалы композиция өлгөләрен барлыҡҡа килтерә.

«Хикмәте» тигән парсала, мәҫәлән, алтын-көмөш ҡәҙере, «үҙең тапҡан ҡәҙерле, сәйнәп йотҡан тәмле» булыуы тураһында һөйләй ҙә автор, һүҙҙәрен алтын-көмөш табып та, уны ҡаҙып-сүпләргә йыбанып, бының өсөн осһоҙ ғына хаҡҡа кешеләр яллап һемәйеп ҡалған дәрүиш тураһындағы хикмәт менән нығытып ҡуя. Артабан хикмәт айышынан тағы фекер үҫеп китә, уны ҡеүәтләп һәм асыҡлап икенсе, зөбәржәтле ҡабырсаҡ эҙләп һыуға сумыусы ике балыҡсы хаҡындағы хикмәт бирелә. Уның асылы төшөндөрөлгәс, фекерҙәр йәнә ялғанып, йөкмәтке логикаһына ярашлы сираттағы хикмәт килә. Өс-дүрт ҡатын алып та һис балаһы булмаған хандың түлһеҙ-мәнһеҙ зат икәненә төшөнгән йәш бисәһе, хәйләләп, ул-вариҫ табып бирә, ил-көн киләсәген һаҡлап ҡала. «Эштең асылы атында түгел, затында, исемендә түгел, есемендә. Быны белһә, йәшәү башы бары әсә белер» тигән кинәйәле мәғәнә хикмәтте генә түгел, бөтә парсаны йомғаҡлап бөтөрөп ҡуя.

Бындай парсалар көнсығыш прозаһындағы «Тутыйнамә», «Бәхтиәрнамә», «Мең дә бер кисә» кеүек тартмалы композицияға ойошҡан классик әҫәрҙәрҙең традицияларын дауам иттереүҙең матур өлгөһө лә булып тора. Әҫәрҙәрҙең айырым баш аҫтында бүлектәргә берләшеп, үҙенә күрә циклдар төҙөү башланғысы ла, Мәхмүт Ғәлиҙең «Нәһж-әл Фарадис»ы кеүек урта быуаттар әҫәрҙәренән үк килә.

Парсалар ҙа, автор әйтмешләй, тормоштоң, донъяның үҙе шикелле, төрлө-төрлө: әңгәмә лә, бәхәс тә, диспут та, тапҡыр фекерҙәр теҙмәһе лә бар. Бындай алым менән эш итеү авторға бик тә отошло. Уҡыусы тәүге юлдарҙан уҡ ябай тел менән аңлайышлы итеп бирелгән ҡатмарлы төшөнсәләр, күренештәр донъяһына сума. Ул автор уйҙары артынан битараф эйәреүсе, уның фекерҙәрен тыңлаусы ғына түгел, үҙе лә уйлана, әңгәмәләшә, кәрәк икән, бәхәсләшә ала.

Парсаларҙың теленә килгәндә, авторҙың телмәре телеп һалынған, тиергә мөмкин. Уның йүгерек ҡәләме аҫтында һәр һөйләм, һәр һүҙ уйнап тора, тапҡыр мәғәнәгә эйә. Мәҡәл-әйтемдәрҙең йәтеш ҡулланылышы парсаларҙы афористик ижадҡа яҡынайта. Ҡайһы бер парсалар тотошлай әйтемдәрҙән, хикмәтле һүҙҙәрҙән туҡылған. Мәҫәлән, «Яманлыҡ менән яҡшылыҡ», «Хаҡтыр», «Әхлаҡи әйтемдәр», «Белем багажы», «Афарин афоризмдар» парсалары шундайҙарҙан. Бер ыңғай кәңәш-төңәш, өгөт-нәсихәт тә бик урынлы уларҙа.

Тәү ҡарашҡа, әҫәрҙәрҙең сюжеты юҡ. Уларҙы хикәйәләүгә ҡоролған тип әйтеп булмай. Был парсалар бигерәк тә уй-фекерҙәр йомғағын хәтерләтә. Бында эске сюжет, фекер ағышы көслө. Парсалағы уй-фекер йөкмәтке буйына үҫтерелә-үҫтерелә барып, мөһим һығымтаға килтерелә, хикмәте сығарыла. Әҙиптең төп маҡсаты уҡыусыла фекер уятыу, мөһим мәсьәләләргә, проблемаларға уның иғтибарын йүнәлтеү, уйланырға мәжбүр итеү. Бер үк ваҡытта һәр кешенең үҙ фәлсәфәһе, үҙ ҡараштары булыуҙы ла иҫтән сығармай автор.

Ғ. Хөсәйенов үҙ ижад процесында Гете, Бальзак, Гюго, Стендаль, Флобер, Пушкин, Л. Толстой, Ф. Достоевский, А. Чехов, Р. Роллан, А. Моруа һ.б. шундай классиктарҙың ижад тәжрибәһенә таянып эш итеүсән, үҙенең ҡараштарын, фекерҙәрен бөйөк әҙиптәрҙән цитаталар менән нығытыусан. Уның бөтә ғилми, әҙәби, ижтимағи эшмәкәрлеген күҙ уңында тотоп, шуны әйтеп була: һоҡланып яҙған, үрнәк итеп алған ер йөҙөндәге бөйөктәрҙән ғалим-әҙип үҙе һис тә ҡалышмай. Аҡыл һәм йөрәк тәжрибәһе артҡан һайын, әҙиптең тәрән философик уйланыуҙары, әйтер һүҙҙәре мәғәнәлерәк, фәһемлерәк була бара.

**Гөлнара АБДРАФИҠОВА,**
**филология фәндәре кандидаты,**
**Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының**
**өлкән ғилми хеҙмәткәре.**

# «Ағиҙел» архивынан



*Шәйехзада БАБИЧ һәм Ғәзиз ӘЛМӨХӘМӘТОВ (алда ултыралар) йәш ижадсылар менән.*

*1916 йыл.*



*Әмир ЧАНЫШ, композиторҙар Солтан ҒӘБӘШИ, Александр КЛЮЧАРЕВ.*

*1933 йыл.*



*Хәким ҒИЛӘЖЕВ, Назар НӘЖМИ, Иван СОТНИКОВ, Сәйфи ҠУДАШ (алғы рәттә, уртала) китапханала осрашыуҙан һуң.*

*1964 йыл.*



*Ҡабарҙа-Балкар халык шагиры Ҡайсын Кулиев дуҫы Мостай Кәримде 60 йәше менән ҡотлай.*

*1979 йыл.*



*«Ағиҙел» редакцияһы коллективы 1980 йыл лауреаттары менән.*



*«Ағиҙел»селәр журнал лауреаттары менән. Лауреаттарыбыҙ: КПСС-тың Илеш район комитетының беренсе секретары, Социалистик Хеҙмәт Геройы Тәлғәт РАХМАНОВ, яҙыусылар Фәрит ИСӘНҒОЛОВ, Наил ҠОТДОСОВ, Таңсулпан ҒАРИПОВА, Сабир ШӘРИПОВ, шағир Тимер ЙОСОПОВ.*

*1982 йыл, декабрь.*

## АЯНЫСЛЫ ҒҮМЕР

*(Дауыт Юлтыйҙың тыуыуына – 120 йыл)*



Дауыт Юлтый (Дауыт Ишембай улы Юлтыев) 1893 йылдың 6 (18) апрелендә элекке Һамар губернаһы Быҙаулыҡ өйәҙе Йомран-Табын волосына ҡараған *(хәҙерге Ырымбур өлкәһе, Иванов районы)* Юлтый ауылында тыуған. Ғаиләләре ишле – алты ул, бер ҡыҙ бала – булғанлыҡтан, Дауытҡа бик йәшләй эшкә егелеп тамаҡ туйҙырырға тура килә. Атаһынан уҡый-яҙырға өйрәнә, әҙәбиәткә һөйөү ҙә уның аша күсә. Ауылдарында асылған мәҙрәсәлә уҡый, белемен китаптар аша тәрәнәйтә. Иҫтәлектәренән белеүебеҙсә, ул ваҡытта шәкерттәр Мәжит Ғафури, Туҡай, Аҡмулла шиғырҙарын дәфтәрҙәренә күсереп йөрөтәләр, Сәғит Рәмиев шиғырҙарын яттан беләләр. Дауыт уҡыуын артабан Сорокин мәҙрәсәһендә дауам итә. Унан аҙаҡ ҡаҙаҡ далаларында мөғәллим булып йөрөп тәжрибә туплағандан һуң, тыуған ауылына уҡытыусы булып ҡайта. Тап ошо осорҙа ул ижадҡа ылыға. Тәүге шиғырҙарында мәғрифәтселек мотивтары сағыла, кешелектең уртаҡ яҙмышы, бәхете кеүек төшөнсәләргә мөрәжәғәт иткәнендә милли тойғолар, гуманистик асылы ярылып ята. Халыҡтың иҙелеүен, мохтажлыҡта йәшәүен күреп әрней шағир йөрәге. Артабан уның ижады тәбиғәт һәм мөхәббәт лирикаһында асыла.

1914 йылдың көҙөндә ул армия сафына алына. Был ваҡытта илдә Беренсе донъя һуғышы ҡубып, Дауыт оҙаҡламай фронтҡа оҙатыла. Өс йыл буйына ут эсендә йөрөү уның ижадына ла йоғонто яһамай ҡалмай. 1916 йылда Украинала яҙылған «Сумка» шиғыры һуғышҡа ҡаршы протест булып яңғырай. Дауыт Юлтыйҙың ғәрәсәтте һүрәтләгән ошо уҡ йылда яҙылған «Ҡан баҙары» шиғыры революцион рухтағы көслө әҫәр булараҡ билдәле. Һуғыштың кемдәр файҙаһына барыуын, Ватан исеме менән һалдатты ут эсенә ҡыуыусыларҙың ысын йөҙөн фашлау дәрәжәһенә күтәрелә.

«Төнгө йырҙар» шиғырындағы символдар аша илгә инҡилап яҡынлашыуын тойҙорта.

Дауыт Юлтый Февраль революцияһынан һуң частарҙа хәрби комитеттар төҙөү, һалдаттар араһынан делегаттар һайлап, төрлө йыйылыштар үткәреү шикелле сәйәси эштәргә ылыҡтырыла.

Октябрь инҡилабын Дауыт Юлтый һалдат булып Полтава ҡалаһында ҡаршылай. 1918 йылдың февралендә тыуған яҡтарына – Туҡсоранға ҡайтып, Совет власын нығытыу эшенә тотона. Советтарҙың Быҙаулыҡ өйәҙенең I съезында, Ырымбур губернаһының I съезында делегат булараҡ ҡатнаша. 1919 йылдың мартынан Беренсе революцион армияның политбүлегендә хеҙмәт итә башлай. Ҡыҙыл Армияның татар-башҡорт частары өсөн сығарылған «Ҡыҙыл йондоҙ» хәрби газетаһында башта секретарь, аҙаҡ мөхәррир була. Ошо йылда ул Коммунистар партияһы сафына инә. Һуғыш мәлендә уға әҙәби ижад менән шөғөлләнергә форсат булмай, гәзит эшенә күскәс кенә ул әүҙем яҙыша башлай. «Ирек тауышы», «Атлан, батыр!» шиғырҙары, бер нисә нәҫере тап ошо ваҡытта ижад ителә.

Мәктәп йылдарында Дауыт Юлтыйҙың ижады менән тап ошо һуңғы шиғыры аша таныштыҡ.

*Атлан, батыр, атҡа, тот һөңгөңдө,*
*Әйҙә, саптыр яуға – дошманға!*
*Сәс гәйрәтең дошман сафтарына,*
*Ауаздарың ашһын асманға!*

Дәрт менән һуғарылған, яу ораны булып яңғыраған был юлдар бөгөнгө көндә лә йөрәктә ялҡын тоҡандырыр ҡөҙрәткә эйә.

Илдә тыныслыҡ урынлашҡас, Дауыт Юлтый мөхәррир, Башҡортостан хәрби комиссариатының мәктәптәр бүлегендә инструктор ҙа, республика дәүләт драма театрының әҙәби консультанты ла, РКСМ өлкә комитетының нәшриәт бүлеге мөдире лә булып эшләй.

Тәүге шиғри йыйынтығы 1921 йылда Стәрлетамаҡта донъя күрә. Унда газеталарҙа агитация урынына яҙған «Нигә табынайым?», «Атлан, батыр!», «Эй, ирекле наҙлы һеңлем…», «Әйҙә, эшкә» кеүек үҙ заманы өсөн әһәмиәтле шиғырҙар тупланған. Шул ваҡытта китапта нур, ҡыҙыл сәскә кеүек романтик биҙәктәр менән сыбарланаған йәки риториканан торған әҫәрҙәре лә бар. М. Ғафури китапҡа яҙған рецензияһында совет әҙәбиәтенең тыуа башлаған йылдарына хас булған был күренеште тәнҡитләй, романтик образдарҙы тормош менән бәйләй алмауын күрһәтә.

Дауыт Юлтыйҙың 1922 йылда яҙылған «Шәрәф» поэмаһы яңы кеше образының ҡуйылышы һәм реалистик нигеҙе менән әһәмиәтле.

1922 йылда Дауыт Юлтый Стәрлетамаҡтан Өфөгә күскәс, «Йәш

юҡһыл» газетаһында шиғырҙарын баҫтыра башлай. Уның ижадында яңы заманды кәүҙәләндереүҙә реалистик тенденцияларҙың көсәйеүе күҙәтелә, әммә романтик рух та юғалмай.

1924 йылда уның «Ҡомартҡыларым» исемле китабы баҫыла.

Дауыт Юлтый 1925 йылдың көҙөндә Мәскәүгә Ҡыҙыл профессура институтына уҡырға килә. Тормошондағы был үҙгәреш уның рухи үҫешенә лә, ижадына ла ифрат ҙур йоғонто яһай.

Дауыт Юлтыйҙы «Бәләкәй Ҡотош» хикәйәһе аша ла беләбеҙ. Әҫәр 1919 йылда яҙылған һәм «Үткәндәгеләр» тигән китабына ингән. Тормошто реалистик планда һүрәтләүе, эпоханың мөһим ваҡиғаларын оҫта дөйөмләштереүе менән был хикәйә әҙәбиәттә лайыҡлы урын алды. Уның тағы ла «Тимеркәй фәлсәфәһе», «Хәлкәй артист», «Өмәт» хикәйәләре, «Әлимә йәки Мырҙаш ҡарт туйы» повесы – яңы ысынбарлыҡты сағылдырырға ынтылыш юлында тыуған ижад емештәре. Әйтергә кәрәк, повесть үҙ заманында баҫылмай, уҙған быуаттың 60-сы йылдарында ғына донъя күрә.

Дауыт Юлтый – башҡорт драматургияһының тыуыу һәм формалашыу инештәренең береһе. 1920 йылда Туҡсоранда хәрби комиссар һәм кантком секретары булып эшләгән осорҙа ул «Ҡарағол» пьесаһын яҙа. XVIII быуат аҙаҡтарындағы һәм XIX быуат баштарында Башҡортостанда кантонлыҡ осорондағы ижтимағи мөнәсәбәттәр күрһәтелгән был әҫәрҙә халыҡтың ирекkә ынтылышы асыҡ сағыла. Дауыт Юлтыйҙың «Тирмәндә», «Һин кем?», «Табылған Марат», «Йәнтүрә», «Аҡшан батыр», «Урланған Көнһылыу», «Маҡтымһылыу» пьесаларын һанап китеү ҙә уның ни хәтлем емешле эшләүен күрһәтә. Ғөмүмән, башҡорт совет драматургияһының реалистик йүнәлеш алыуы Д. Юлтыйҙың теоретик мәҡәләләре, ижады менән тығыҙ бәйләнгән.

Дауыт Юлтый тиһәк, телгә уның «Ҡан» романы килә. Беренсе донъя һуғышының империалистик асылын, уның кешелеккә килтергән фажиғәләрен күрһәтеү үҙәккә ҡуйылған был әҫәр башҡорт әҙәбиәтенең алтын фондына ингән.

Әҙиптең ғүмере 1937 йылда аянысլы өҙөлә: ул нахаҡтан ғәйепләнеп, атып үлтерелә.

**Гөлназ ҠОТОЕВА,**
**филология фәндәре кандидаты.**

## «Ни күрһәм дә — Алаш өсөн күргәнем,
## Миңә бәхет — халҡым өсөн үлгәнем!»

«Ни күрһәм дә – Алаш, йәғни ил өсөн күргәнем (башҡортсаһы – «алас»), Миңә бәхет – халҡым өсөн үлгәнем!» – тип йәшәгән ҡаҙаҡ шағиры Мағжан Йомабайулы Ҡаҙағстандың Петропавловск өйәҙе Һарыайғыр волосы Һаҫыҡкүл ауылында 1893 йылда хәлле ғаиләлә донъяға килгән. Уҡырға-яҙырға өйрәткән беренсе уҡытыусыһы Ахиетдин Аҡанов исемле башҡорт булған. Мағжандың атаһы улының уҡыуға һәләтен күргәс, 1905 йылда уны ысыул-ы жәдин, йәғни яңы ысул буйынса уҡытҡан Ҡыҙылъяр мәҙрәсәһенә ебәрә. Бында буласаҡ шағир фарсы, ғәрәп, төрки телдәрен, әҙәбиәт өйрәнә. Тәүге шиғырын да 1909 йылда ошо мәҙрәсәлә ижад итә.

Ҡыҙылъярҙағы уҡыуын тамамлағас, Мағжан Йомабайулы 1910 йылда Өфөнөң мәшһүр юғары мосолман уҡыу йорто булған «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Бында ул Ғәлимйән Ибраһимов менән таныша. 1912 йылда уның ярҙамы менән Ҡазанда «Сулпан» исемле тәүге шиғыр йыйынтығы нәшер ителә.

Мағжан Йомабайулы, «Ғәлиә» мәҙрәсәһен тамамламайынса, ҡаҙаҡ уҡымышлылары Миръяҡуп Дулатов, Әхмәт Байторсонов башлатҡан «Ҡаҙаҡ» гәзите менән хеҙмәттәшлек итә.

1913–1917 йылдарҙа ул Омск ҡалаһында уҡытыусылар институтында уҡый. Революция йылдарында Алаш-Урҙа партияһына инә һәм хөкүмәт эшендә ҡатнаша. Ҡаҙағстан хөкүмәтенең Мәғариф комиссияһы ағзаһы була.

1922 йылда ул ваҡыттарҙа ҡоролған Төркөстан Республикаһы хөкүмәтенең Ҡырғыҙ-Ҡаҙаҡ Белем Комиссияһында эшләй, «Сулпан» менән «Сана» («Аң») журналдары, «Аҡ юл» гәзиттәрен сығарыуҙа ҡатнаша. Шул йылдарҙа Ырымбурҙа уның тарафынан яҙылған «Педагогика» исемле ғилми хеҙмәте, Ҡазанда һәм Ташкентта шиғыр китаптары донъя күрә.

Синыфтар теорияһы күҙлегенән 1924 йылда ижадына байҡау яһалғас, уны беренсе тапҡыр милләтселектә, индивидуализмда ғәйепләйҙәр. Бынан һуң ул Мәскәүгә, Әҙәбиәт институтына, уҡырға инә. Уҡыу йылдарында ул «Көнсығыш нәшриәте»ндә лә эшләп йөрөй. Ҡаҙағстанға ҡайтҡандан һуң ике йыл самаһы ваҡыт үткәс, 1929 йылда, уны, нахаҡҡа ғәйепләп, Бутырка төрмәһенә ябалар. Яҙыусы Максим Горький ярҙамы менән 1935 йылда иреккә сыға. Ҡыҙылъярға ҡайтып, уҡытыусы булып

эшләй. 1937 йылда Алматыла тәржемәселек менән шөғөлләнә. Бер йылдан һуң яңынан ҡулға алына һәм атып үлтерелә.

Мағжан Йомабайулы, мәшһүр ҡаҙаҡ шағиры Абайҙан һуң, ҡаҙаҡ шиғриәтен үҫтереүгә, шиғырҙар формаһын төрләндереүгә тос өлөш индерә. Башҡа халыҡ шағирҙары ижадын ҡаҙаҡсаға тәржемә итә. Уның тарафынан немецтарҙан Иоганн Вольфганг Гете, Генрих Гейне, рустарҙан Афанасий Фет, Василий Жуковский, Михаил Лермонтов, Максим Горький, ғәрәптәрҙән Әбү Фирас, Әл-Мәғәрри һәм башҡаларҙың әҫәрҙәре тәржемә ителә. Ул тарихҡа ла мөрәжәғәт итә. Уның лирик шиғырҙары ла байтаҡ. Революциянан һуң дәүерҙә символизм йоғонтоһон да кисерә. Әҙәбиәтселәр билдәләүенсә, Мағжан Йомабайулының ижадында Көнсығыш һәм Көнбайыш әҙәбиәттәре ҡаҙаныштары сағыла.

Әхмәтзәки Вәлиди «Бөгөнгө Төркөстан һәм уның яңы тарихы» исемле хеҙмәтендә Мағжан Йомабайулының ижадын юғары баһалай. Түбәндә тәҡдим ителгән «Алыҫтағы бауырыма», «Төркөстан» һәм «Мир Тимерҙең һүҙе» шиғырҙарының ҡаҙаҡса һәм төрөксә сәсмә тәржемәһен баҫтыра.



**Мағжан**
**ЙОМАБАЙУЛЫ**

## *Алыҫтағы бауырыма*

*Алыҫта ауыр газап сиккән бауырым,*
*Ҡыуарган гөлсәсәктәй кипкән бауырым.*
*Ҡамаган ҡалын яуҙың уртаһында*
*Кул итеп күҙҙең йәшен түккән бауырым.*

*Алдыңды ауыр ҡайгы баҫкан бауырым,*
*Ғүмер буйы яфа сиккән яттан бауырым.*
*Тексәйгән, йөрәге таш яуыз йәндәр*
*Тереләй тиреҥ тунап ятҡан бауырым.*

*Йә, Хоҙай, түгел инеме ни алтын Алтай*
*Анабыҙ беҙҙе тапҡан, аҫау тайҙай?*
*Итәгендә йөрөгәйнек уйнап-көлөп,*
*Йөҙөбеҙ түгел инеме ни яҡты айҙай?!*

*Аласа алтын ашыҡ атманыҡмы,*
*Тибешеп бер түшәктә ятманыҡмы?*
*Алтай анабыҙҙың аҡ һөтөнән*
*Бергә имеп, бергә тәмен татманыҡмы?*

*Торманымы ағып беҙҙең өсөн мөлдөр булаҡ,*
*Сылтырап, сылт-сылт итеп тауҙан ҡолап?*
*Бик шәп итеп осҡан ҡоштай сыҡҡан ҡойон,*
*Теләгәндә менер инек толпар-бураҡ!*

*Алтайҙың алтын көнө иркәләтеп,*
*Килгәндә юлбарыҫтай, яңы ир етеп*
*Аҡ диңгеҙ, Ҡара диңгеҙ аръяғында,*
*Бауырым, мине ташлап, барҙың китеп!*

*Мин ҡалдым – йәш балапан ҡанат ҡаҡмай,*
*Осам тип ынтылһам да, йәмен тапмай.*
*Йүн һелтәр, юл күрһәтер йән булманы,*
*Яуыз яу ҡуйыр ине микән мине атмай?!*

*Ҡурғаштай йәш йөрәккә уғы батты,*
*Гонаһһыҙ таҙа ҡаным һыуҙай аҡты.*
*Ҡанһырап, илем һаҡлап, иҫтән яҙҙым,*
*Ҡараңғы зинданға көсләп япты...*

*Күрмәйем кисә йөрөгән ҡыр-сайҙы ла,*
*Көндөҙ – көндө, төндә көмөш нурлы айҙы ла,*
*Арҙаҡлап, ысын ебәктәй арайға урап,*
*Үҫтергән алтын анам Алтайҙы ла.*

*Йә, Хоҙай, айырылдыҡмы ҡалын төптән,*
*Ҡурҡмайынса һибелеп яуған уҡтан?!*
*Төрөктөң юлбарыҫтай йөрәгенән,*
*Ысынлап ҡурҡҡан ҡолдай яуҙан бүккән?!*

*Талпынып ирекка ынтылган төрөк йәне*
*Ысынлап та ауҙымы, бөтөп хәле?!*
*Ут һүнеп йөрәктәге, ҡорономо*
*Ҡайнаған тамырҙағы ата ҡаны?!*

*Бауырым! Һин ул яҡта, мин был яҡта,*
*Ҡайғынан ҡан йотабыҙ. Беҙҙең атҡа*
*Лайыҡ микән ҡол булыу? Кил, китәйек*
*Алтайға, ата мираҫ алтын тәхеткә!*

## *Төркөстан*

*Төркөстан – ике донъя ишеге ул,*
*Төркөстан – ир төрөктөң бишеге ул,*
*Тамаша Төркөстандай ерҙә тыуган*
*Төрөктөң Тәңре биргән насибы ул.*

*Борон Төркөстанга Туран тиелгән,*
*Туранда ир төрөгөм тыуып үҫкән;*
*Турандың тәкдире бар тулкынланган,*
*Башынан күп тамаша көндәр үткән,*

*Турандың тарихы бар утлы елдәй,*
*Зыулаган ҡалын үрттәй күккә үрләй.*
*Турандың ере менән һыуы ла ят,*
*Диңгеҙҙәй тәрән ауыр уй биргәндәй.*

*Турандың икһеҙ-сикһеҙ сүле ҡалай.*
*Диңгеҙҙәй ҡәмәре күп күле ҡалай.*
*Турандың даръя аталган үҙәндәре*
*Ташыша, күлде баҫкан селе ҡалай.*

*Турандың тауҙары бар күккә ашкан.*
*Мәңгегә башын ап-аҡ сәстәр баҫкан.*
*Бауырында иркә болаҡтар ага уйнап,*
*Яралып тауҙан аҡкан һалҡын ҡаран.*

*Сүлдәр бар елдә күрмәҫ һап-һары ҡом,*
*Ҡәберҙәй һис бер өн юҡ, мәңге тып-тын.*
*Булырмы йән-яныуар сикһеҙ күлдә?*
*Һары ҡомда уйнай пәрей менән ен.*

*Турандың диңгеҙ ҡәҙәр күлдәре бар,*
*Сайҡалган икһеҙ-сикһеҙ диңгеҙ Арал;*
*Бер ситтә хәсиәтле Ыссыҡ-күлдең*
*Бауырында донъя күргән төрөк күк-ял.*

*Борон Оксүс, Яҡсарт – Жәйхун, Сәйхун*
*Төрөктәр был икәүгә даръя тигән;*
*Изге булган шул ике һыу ягаһында*
*Табырһың хәсиәтле бабаң ҡәберен.*

*Турандың Тянь-Шаньдай тауы ҡалай.*
*Пар килмәҫ Тянь-Шаньга тауҙар ҡалай.*
*Ирекһеҙ ир төрөктө иҫкә алырһың*
*Күккә ашҡан Хан Тәңрегә ҡарай-ҡарай.*

*Балхашты бауырына алған Тарбағатай.*
*Юталы, ер кендеге Памир, Алай.*
*Ҡаҙығорт хәсиәтле тау булмаһа,*
*Туранда Нух кәмәһе туктар ҡалай.*

*Турандың ере лә ят, иле лә ят,*
*Ҡойондай баштан үткән көнө лә ят,*
*Туранды теүәленсә бәйләп торған*
*Борон заман хан Афрасияб.*

*Әжәлдән ер түгел ул ябайҙарҙан,*
*Белерһең, тарихты асһаң, Туран ягын.*
*Туранга хәсиәтле ҡомар булған*
*Борон Кейхөсрәү менән Зөлҡәрнәйен.*

*Туранга ер йөҙөндә ер еткәнме?*
*Төрөккә әҙәм затта ер еткәнме?*
*Киң аҡыл, утлы гәйрәт, йүгерек хыял*
*Турандың ирҙәренә ир еткәнме?*

*Тыуманы әҙәм затта Сыңғыҙҙай ир,*
*Зирәк, тәрән уйлы, булат батыр.*
*Сыңғыҙҙай арыҫландың тик аты ла*
*Әҙәмдең йөрәгенә йөрьәт бирер.*

*Сыңғыҙҙан Сығтай, Уктай, Жужи, Түле.*
*Атаға тартып тыуған бары бүре.*
*Сыңғыҙҙың яу башлаған ике күҙе*
*Юлбарыҫ Сүбидәй менән күк-ял Жебе.*

*Турандың бейҙәре бар Тарағайҙай,*
*Шул бейҙән тыуған Тимер уттай уйнай.*
*Ут сәсеп ер йөҙөнә Аҡһаҡ Тимер*
*Ялт итеп үтә сыҡҡан ялағайҙай.*

*Туранды маҡтамайым төплө тәккә,*
*Уныһыҙ аҡ Туран таныш ҡалай ситкә:*
*Серләшкән өйҙә ултырып асман менән*
*Белгес аҙ еткән йүгрек Олоғбәккә.*

*Аҫыл ҡан хәсиәтле төрөк ҡаны*
*Шул ҡандан Ибн Сина Әбү Ғәли;*
*Муллығы белеменең сихыр тиерлек,*
*Донъяла бындай әҙәм тыуҙымы әле?*

Төрөктөң кем кәм иткән музыкаһын?
Фараби тыуыҙ телле думбыраһын
Сирткәндә туҡһан туғыҙ төрләндереп,
Йыбанып кем тыймаған күҙҙең йәшен?

Туранда төрөк уйнаған, оҡшап утҡа,
Төрөктән башҡа ут кеүек йән тыуғанмы?
Күп төрөк инсе алыр өсөн таралғанда,
Ҡаҙаҡҡа ҡара сағараҡ ҡалған юҡмы?

Арыҫлан илгә ватан булған Туран.
Туранда ҡаҙағым да ханлыҡ ҡорған.
Ҡаҙаҡтың ҡашҡа юллы Ҡасим ханы
Турандың изге ерен биләп торған.

Ғәҙел хандар әҙ булыр Назарға тиң.
Аласҡа Ишем хандың юлына тиң.
Тәүкәләй аҡыллы хан ҡорған икән
Башына Күлтүбәнең ҡоролтайын.

Был Туран әжәлдән үк Алаш ере.
Туранһыҙ тарҡалмаған Алаш сире.
Турандың тупрағында тыныслыҡ тапҡан
Аластың арыҫланы Аблай ире.

Турандан Һары Арҡаны бүләк тимә.
Төркөстан алты Алаштың булған иле.
Турандың тупрағын ҡосоп ятыр
Кисәге ирҙең ире күк-ял Кине.

Һағындырһа, кем эҙләмәҫ тыуған илен?
Толпар ҙа һағынмаймы тыуған ерен?
Арҡаның арҙаҡлыһы – ҡалын Алаш,
Туран да белә, белһәң һинең ерең.

Ҡырҙағы Тянь-Шань менән Памир, Алай,
Көтәләр күптән һине ҡарай-ҡарай.
Кине менән Абылайҙың юлын ҡыумай
Яланға йәйелеүҙән мәғәнә ҡалай?

Борон Оксус, Яҡсарт – Жәйхун, Сәйхун
Төрөктәр был икәүгә даръя тигән;
Изге булған шул ике һыу яғаһында
Табырһың хәсиәтле бабаң ҡәберен.

## Аҡһаҡ Тимер һүҙе

Йыһан тигән ни нәрҫә?
Асыҡ ҡулдың бер усы,
Бер уста ла күп тәңре
Булыу кәрәк юҡ ине.

Тәңре күктең тәңреһе
Күкрәһен, күген биләһен,
Ер тәңреһе Тимер мин,
Еремә тәңре теймәһен.

Күк тәңренең тәңреһе
Тоҡомо юҡ, заты юҡ,
Ер тәңреһе Тимерҙең
Тоҡомо төрк, заты ут.

## Ҡайын

Ҡайғылы ҡайын!
Аяныс яйың.
Шыбырлайһың,
Дерелдәйһең,
Иңкәйәһең,
Геүелдәйһең,
Ыжғырыҡ ел
Һуҡҡан һайын.
Ыжғырыҡ аяҙ.
Булғандай аҙ,
Ҡар ҙа баҫҡан
Кәбәнгә оҡшап.
Һөйәккә үтер
Һыуыҡ ҡосаҡ...
Ҡасан, ҡайын,
Етә, ти, яҙ?
Һыуға ҡаныл,
Япраҡ ярып,
Көн булырмы
Сайҡалдырып,
Йылы ел менән
Сайҡалдырып,
Ҡош тауышына
Ҡолаҡ һалып...
Ҡайғылы ҡайын!
Ҡалын вайым
Баҫҡан һине,

*Яҙҙы уйлап,*
*Тор ыжғырыҡ*
*Буран уйнап...*
*Йәшеңде бирһен*
*Бер Хоҙайың.*

## ***Йәш һылыуға***

*Мин аҡынмын – ағынмын,*
*Сылтырайым, һөйәмен.*
*Мин аҡынмын – ялҡынмын,*
*Сәсрәп күккә тейәмен,*
*Ҡарағат күҙең мөлдөрәп,*
*Күп ҡарама, йәш һылыу,*
*Сылтырап, һыйпап, һөйгән булып,*
*Ағып китә ағын һыу.*
*Алма иренең әлберәп,*
*Һөйсө, һөй, тип ялынма.*
*Утлы уйынсы дуҫ булып,*
*Яҡынлашма ялҡынға.*
*Мин аҡынмын – ел йүгерек,*
*Жыуылдайым, осамын.*
*Мин уйынсы күбәләк,*
*Күренгән гөлдө ҡосамын.*
*Бөрлөгән битең һорланып,*
*Елгә ышанма, йәш бала,*
*Шыбырлар, китер урланып,*
*Ысын йәре уның һары дала.*
*Күбәләккә, кил, тимә,*
*(Әлһерәү шулай ни кәрәк?)*
*Китер осоп башҡаға,*
*Балыңдан татһа күбәләк.*
*Мин аҡынмын – йырлайым,*
*Йөрәккә йүгерек ел керһә.*
*Мин аҡынмын – илайым,*
*Йөрәккә ауыр сир керһә.*
*Яңлышырһың, иларһың,*
*Ҡосаҡлама билемдән.*
*Йәш тәнеңде уйлармын,*
*Һөйҙөрмәсе телеңдән.*
*Йәш фәрештәм, һылыу ҡыҙ,*
*Һөймәсе, һөймә, һорайым.*
*Мин – аҡынмын, туктауһыҙ*
*Йырлайым да илайым.*

## Ҡаҙаҡ азаматы

*Берәүенә – һин тәңрем, тип табына.*
*Берәүенә – мин ҡолоң, тип бағына.*
*Берәүенә – саҙаҡа бир, тип ялына.*
*Берәүенә – ҡойроҡ булып тағыла.*
*Һәр саҡ бахыр хыял ҡыуып сабына.*
*Һәр саҡ төҫһөҙ бер һор(о) нәмә ябына.*
*Ҡаҙағы – ҡуй, артынан уның ағыла.*
*Азаматҡа ҡунаҡлыҡ ҡуй табыла.*

## Мин кем?

*Арыҫланмын, һәйбәтемә кем сыҙар?*
*Юлбарыҫмын, миңә ҡаршы кем торор?*
*Күктә – болот, ерҙә – елмен геүләгән,*
*Ер иркәһе ерҙең йүнен кем һорар?*
*Күктә көнмөн, күпкә нурым сәсәмен.*
*Күңелгә алһам, хәҙер ҡарышҡа ашамын.*
*Сите, төбө күк диңгеҙмен ҡара-күк,*
*Илһамланып: һелкенеп, сайҡалып, ташамын.*
*Ялҡынмын мин, килмә яҡын – яныырһың.*
*Толпармын мин, саңыма етмәй ҡалырһың.*
*Күл булһын күк, емерелһен ер, ҡайғым юҡ,*
*Күҙ ҡыры менән көлөп кенә ҡарармын.*
*Мин үлмәйем, минеке лә үлмәгән.*
*Наҙан әҙәм үлем югын белмәгән.*
*Үҙем батша, үҙем ҡаҙый, үҙем бей.*
*Ҡалай иҫһеҙ, ни ҡылдың тип тетрәгән?*
*Миһырбанмын – һигеҙ йәннәт ҡулымда.*
*Ҡәһәрләнһәм – тамуҡ тейер ҡулыма.*
*Юҡ яҡыным яратҡандай, яңғыҙмын.*
*Минме эйелер илһеҙ әҙәм улына?*
*Үҙем – тәңре, табынамын үҙемә.*
*Һүҙем – Ҡөрьән, бағынамын һүҙемә.*
*Боҙоусы ла, төҙөүсе лә үҙем мин.*
*Инде, иҫкелек, килдең үлер мәлеңә!*

**Ҡаҙаҡсанан башҡортсаға**
**Әхәт СӘЛИХОВ тәржемәһе.**

## МИҺЫРБАНҺЫҘЛЫҠ

*Әҙәм балаһының аң даирәһе киңәйә барып, ул үҙе йәшәгән мөхитте шәхси мәнфәғәттәренә яраҡлаштырыу кеүек оҫталыҡҡа етешеү менән, кешелек цивилизацияһы һәм тирә-яҡ мөхит араһында тәүге ҡаршылыҡтар барлыҡҡа килә. Йәғни үҙе тәбиғәт балаһы булған аҡлы йән эйәһе – кеше үҙенә тереклек итеү өсөн шарттар тыуҙырған, нәҫелен дауам иттерергә мөмкинлек биргән тәбиғәт менән иҫәпләшергә кәрәк икәнлекте тамам инҡар итеү юлына баҫа. Быға миҫал итеп ҡасандыр Һинд-Ҡытай ярымутрауында бик ҙур ҡаланың (исеме хәтерҙән сыҡҡан) таш ҡапсыҡҡа әүерелеп, йән эйәһе йәшәрлек рәт ҡалмағас, уны ташлап китергә мәжбүр булыуын килтерергә мөмкин.*

«Экологик именлеккә беҙ ниндәйҙер шикле маҡсат менән түгел, ә аңлы рәүештә ынтылабыҙ, сөнки үҙебеҙҙең һәм яҡындарыбыҙҙың ғүмере тап шул мөхиттең именлегенә бәйле, — тине БР Президенты Рөстәм Хәмитов Дәүләт Йыйылышы—Ҡоролтайға 2013 йылға мөрәжәғәтендә. —Тирә-яҡ мөхиттең именлегенә хоҡуҡ — граждандарҙың төп конституцион хоҡуҡтарының береһе. Ошо хоҡуҡты ғәмәлгә ашырыу — киләсәк быуындар алдындағы бурысыбыҙ». Артабан республика башлығы беҙ йәшәгән мөхиткә айырыуса зыян килтергән сығанаҡтарҙы атап үтте: сафтары йылдан-йыл ишәйә барған автомобиль транспорты, таҙартыу ҡоролмалары эштән сыҡҡан сәнәғәт предприятиелары, йөҙҙәрсә гектар урманды юҡ иткән янғындар, теләһә ҡайҙа ташланған, эшкәртеү технологиялары ҡулланылмаған көнкүреш ҡалдыҡтары, ауыл хужалығы ерҙәренең төрлө сәбәптәр арҡаһында күпләп эрозияға бирелеүе һ.б. 2013 йылды «Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы» тип иғлан итеп, Рөстәм Хәмитов билдәләнгән сараларҙы ғәмәлгә ашырыуҙа яһалма экономиялауға юл ҡуймаҫҡа, хоҡуҡ һаҡлау органдарына эшмәкәрлекте киңерәк йәйелдерергә саҡырҙы.

**Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау сараларын билдәләү һәм раҫлау буйынса йыл башында БР хөкүмәтендә ойоштороу ултырышы булып үтте, унда түбәндәге эш йүнәлештәре билдәләнде:** *1) экологик хәлде күҙәтеүҙә заманса алымдар ҡулланыу; 2) сәнәғәт предприятиеларының тирә-яҡ мөхиткә мөнәсәбәтен ыңғай яҡҡа үҙгәртеү; 3) экологик*

*эшмәкәрлеккә эшҡыуарҙарҙы йәлеп итеү; 4) халыҡтың экологик мәҙәниәтен күтәреү, 5) ижтимағи хәрәкәттәр менән тығыҙ хеҙмәттәшлек урынлаштырыу.*

Ултырышта сығыш яһап, БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы министры Илдар Һаҙыев быйыл тармаҡ коллективы тарафынан үткәреләсәк саралар планы менән таныштырҙы. «Башҡортостанда 2013 йыл «Иртәгәбеҙҙе һаҡларбыҙ!» тигән саҡырыу аҫтында үтәсәк», — тине министр һәм биш бүлекте эсенә алған документтың ойоштороу, хоҡуҡи-норматив база булдырыу, төрлө идара итеү һәм ижтимағи даирәләрҙең хеҙмәттәшлеген тәьмин итеү кеүектәре менән бергә халыҡтың экологик белемен, мәҙәниәтен күтәреү кеүек айырыуса мөһим роль уйнаған пунктына ла туҡталды. Һуңғыһына ултырышты алып барыусы вице-премьер Эрнст Исаев та баҫым яһаны, сөнки билдәләнгән сараларҙың барыһы ла һуңғы сиктә ошо проблемаға килеп тоташа. Граждандарҙың экологик мәҙәниәтен күтәреү йәһәтенән күреләсәк сараларҙан ҡалалар һәм райондар, предприятиелар, белгестәр һәм ваҡытлы баҫмалар кимәлендә — төрлө конкурстар; конференциялар, съездар, «түңәрәк өҫтәл»дәр, махсус күргәҙмәләр ойоштороуға өмөт бағлана.

Хөкүмәт ултырышында БР мәғариф министры Әлфис Ғаязовтың да сығыш яһауы — иғтибарға лайыҡ күренеш, сөнки «экология» төшөнсәһе менән йәш быуын тап мәктәптә таныша. Министрҙың хәбәренә ҡарағанда, һуңғы ике йылда Башҡортостан уҡыусылары экология буйынса Бөтә Рәсәй олимпиадаһында үҙҙәренең юғары белемен күрһәткән. 2000 йылдан бирле үҫмерҙәр өсөн «Экорост» гәзите нәшер ителеүен дә Әлфис Ғаязов ыңғай күренештәрҙең береһе тип баһалай. Шул уҡ ваҡытта министр, экологик тәрбиә мәктәп менән генә сикләнергә тейеш түгел, тип иҫәпләй һәм быға дәлил итеп экологияны уҡытыу менән генә балаларҙа ныҡлы экологик мәҙәниәт барлыҡҡа килмәүен атай.

## Менделеев таблицаһымы ни!

Илебеҙҙә экологик хәл «Рәсәй Федерацияһында тирә-яҡ мөхиттең торошо һәм уны һаҡлау тураһында» дәүләт докладында йыл һайын донъя күрә килә. «Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау» (10.01. 2002); «Етештереү һәм ҡулланыу ҡалдыҡтары» (24.06.1998); «Рәсәй Федерацияһында урындағы үҙ идараны ойоштороуҙың төп принциптары тураһында» (06,10. 2003) кеүек федераль закондар был өлкәлә эшмәкәрлекте закон рәүешенә һалған төп документтар иҫәпләнә. «Республикала тирә-яҡ мөхит ҡот осорлоҡ уҡ булмаһа ла, ҡатмарлы килеш ҡала, — тип дауам итеlә БР Президентының йыллыҡ мөрәжәғәтендә. — Атмосфера һауаһында йөҙәрләгән химик матдә бар. Газ таҙартыусы ҡеүәттәрҙең яртыһынан күберәге 20 йылдан ашыу файҙаланыла һәм һеҙөмтәлелеге бик түбән». Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығында былдай хәлгә түбәндәгесә, әйтергә кәрәк, ниндәйҙер дәрәжәлә урынлы аңлатма бирәләр. Республикала экологик хәл, шул иҫәптән

атмосфера һауаһы ла, уның ресурс-сәнәғәт потенциалына бәйле, сөнки Башҡортостан — Рәсәйҙең сәнәғәт яҡтан ныҡлы үҫешкән төбәктәренең береһе. Уның тәбиғәт байлыҡтарына байлығы айырыуса совет осоронда тау-мәғдән, нефть сығарыу-эшкәртеү, нефть химияһы һәм химия сәнәғәттәренең йылдам үҫеүенә килтерҙе. Сәнәғәт тармағының хәҙерге структураһы беҙ йәшәгән мөхиткә техник йоғонтоһон көсәйтә, һәм был тәңгәлдә автомобиль транспорты, яғыулыҡ-энергетика комплексы кеше һаулығына хәүеф менән янаған төп факторҙарҙан иҫәпләнә. Атмосфераны «байытҡан» зарарлы матдәләрҙең 70 процентын нефть эшкәртеү, нефть химияһы һ.б. сәнәғәт предприятиелары тәшкил итеүе — быға кире ҡаҡҡыһыҙ дәлил. Бөгөн беҙҙә, БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, һулаған һауаны ағыулаусы 4 меңдән ашыу предприятие һәм ойошма бар. Республика башлығы мөрәжәғәтендә телгә алыныуынса, ҡеүәттәрҙең 20 йылдан ашыу файҙаланылыуы һәм ошоғаса бер ҡасан да яңыртылмауы тармаҡ етәкселәренең ғәмһеҙлеге, граждандарҙың хәүефһеҙ тирә-яҡ мөхиткә хоҡуғы кеүек конституцион һығымтаға ҡул һелтәп ҡарауы тураһында һөйләй. Ә бит тармаҡ, айырыуса яғыулыҡ-энергетика комплексы, табышты мул ала.

Атмосфера һауаһының сифатын күҙәтеү буйынса Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Туймазы, Благовещенск һәм башҡа ҡалаларҙа урынлашҡан 20 стационар пост уны 27 бысратыусы матдә буйынса тикшереп тора. Йыл дауамында тупланған ағыулы матдәләр йыйылмаһын кеше һаулығына зыян килтермәй торған күләмгә (ПДК — предельно допустимая концентрация — **ред.**) бүлеп, атмосфераның бысраныу индексы иҫәпләп сығарыла. Күп йыллыҡ күҙәтеүҙәргә ҡарағанда, Өфө — атмосфера һауаһы ныҡ ҡына ағыуланған ҡалалар исемлегендә. Мәҫәлән, 2011 йылда баш ҡаланың индексы 7,5 ПДК булған. Стәрлетамаҡ ҡалаһында был күрһәткес 12-гә етһә, Туймазыла — 6,7, Благовещенск, Салауат ҡалаларында — 4. Индекс 14-кә еткәндә, белгестәр фекеренсә, кеше һаулығы өсөн зарарлы иҫәпләнә. Тармаҡ министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, һуңғы 20 йыллыҡ күҙәтеүҙәр атмосфераға сәнәғәт предприятиелары сығарған ағыулы матдәләрҙең ике тапҡыр кәмеүен күрһәтә һәм ул хәл иткес дәрәжәлә сәнәғәт предприятиеларының кәмеүе йәки тулы ҡеүәтенә эшләмәүенә бәйле. Әммә Өфө ҡалаһының — төньяҡ, ә Стәрлетамаҡ, Салауат, Ишембай ҡалаларының көньяҡ сәнәғәт предприятиеларының (ә унда тап беҙ телгә алған нефть эшкәртеү объекттары урынлашҡан) һауаны ағыулауына зарланып, мөрәжәғәт итеүселәрҙең артыуы тирә-яҡ мөхитте һаҡлау закондарының тупаҫ боҙолоуы дауам итеү хаҡында һөйләй. Республика башлығы мөрәжәғәтендә «экологик эҙемтәләр һәм үҙҙәренең эшмәкәрлеге тураһында йәмәғәтселеккә ялған информация биреүсе ҡайһы бер сәнәғәт предприятиеларының «ябыҡ» эш итеүе лә борсомай ҡалмай» тигән фекер яңғырауы быға өҫтәмә дәлил булып тора.

Ағыулы матдәләрҙең зарарлы йоғонтоһон кәметеү, йәшәгән мөхиттең именлеген һаҡлау өсөн БР Хөкүмәте тарафынан ҡабул ителгән «БР биләмәләрендә ҡатмарлы һауа шарттарында тирә-яҡ мөхитте бысратыусы зарарлы матдәләр сығарыуҙы көйләү тәртибе» тураһында ҡағиҙә бар. Уға ярашлы һауаны ағыулаусы матдәләрҙе кәметеү маҡсатында сәнәғәт предприятиелары менән үткәреләсәк саралар планын яраштырыу буйынса эш алып барыла. Был айырыуса һауа шарттарының ҡатмарлашҡан осорона ҡағыла. РФ-ның Башҡортостан буйынса тәбиғи хәлде күҙәтеү идаралығы менән берлектә атмосфераны химик ҡатнашмалар менән «байытыусы» предприятиелар исемлеге лә төҙөлгән.

Республика халҡының экологик яҡтан именлеген тәьмин итеү өсөн Йәмәғәт хәүефһеҙлеге ведомство-ара советы ултырышында ҡабул ителгән ҡарар буйынса эре предприятиеларҙың зарарлы матдәләр бүлеүсе сығанаҡтарына автоматлаштырылған датчиктар ҡуйыу һауа сифатын тәүлек әйләнәһенә күҙәтергә мөмкинлек бирәсәк. Күрелгән сара сәнәғәт предприятиелары өсөн дә уңайлы, сөнки атмосфера һауаһын кем зарарлағаны тәғәйен асыҡланһа, ғәйепте башҡаларға япһарырға урын ҡалмаясаҡ. Әйткәндәй, проект Стәрлетамаҡ ҡалаһында 2009 йылда уҡ һыналып, юғары һөҙөмтәлелеген раҫлаған күҙәтеү датчиктары ҡаланың торлаҡ кварталдарында эшләй, улар «Сода», «Каустик» акционер йәмғиәттәренең зарарлы урындарына ла ҡуйылған. Ләкин, белгестәр фекеренсә, хәүефле сығанаҡтарға таҙартыу ҡоролмалары ҡуйыу туҡталып, хатта эшләгәндәренең дә һөҙөмтәлелеге ҡәнәғәтләндерерлек түгел.

## Автомобиль һәм... конституцион хоҡуҡ

Атмосфера һауаһына һәм тәбиғәткә зыян килтереүҙә һуңғы йылдарҙа Башҡортостанда 1 миллион берәмектән ашып киткән автомобиль транспорты торған һайын ҙур өлөш индерә. Ирекһеҙҙән БР Президентының йыллыҡ мөрәжәғәтендә телгә алынған «тирә-яҡ мөхиттең хәүефһеҙлегенә хоҡуҡ» һуңғы йылдарҙа ямғырҙан һуң бәшмәктәй үрсегән автомобиль паркы тарафынан боҙола бит, тигән урынлы фекер тыуа. «Һуңғы өс йылда автомобиль транспортының атмосфераға ағыулы матдәләр сығарыуы һиҙелерлек артты, һауаға йөҙҙәрсә химик берләшмә сығарыла» — Республика башлығы шундай борсолоу белдерҙе. Аҙналар буйы ҡар яумаған көндәрҙә Өфө урамдарындағы ҡарҙың зәңгәрһыу-ҡара төҫкә инеүенә ҡарап, унда машина торбаһынан сыҡҡан ауыр металдарҙың күпмелеген самаларға мөмкин ине. Ә ул ағыулы матдәләрҙең кеше үпкәһенә эләккәнен туранан-тура үлсәп тә булмай. Хәйер, ҡайһы бер мәғлүмәттәр бар. «Рәсәй Федерацияһында тирә-яҡ мөхиттең торошо һәм уны һаҡлау» тураһындағы докладта Башҡортостан автомобиль транспортынан иң ныҡ ағыуланған төүге ун төбәк исемлегенә индерелгән. Беҙҙә йылына 333,5 мең тонна «автомобиль төтөнө» сығарыла. Сағыштырыу өсөн: Мәскәү ҡалаһы — 913,6 мең, Мәскәү өлкәһе — 749,9 мең, Краснодар крайы — 478 мең, Свердловск

өлкәһе — 423,8 мең һ.б. Тармаҡ министрлығының мәғлүмәттәре буйынса, автомобиль транспортының атмосфера һауаһын ағыулауы көнүҙәк проблема булып ҡала. Мәҫәлән, һуңғы 25 йылда еңел һәм ауыр автомобилдәрҙең атмосфера һауаһына зарарлы матдәләр сығарыуы 35 проценттан 64-кә етеп, сәнәғәт предприятиеларын уҙып киткән. Тиҙ йөрөшлө транспорттың тирә-яҡ мөхитте бысратыуына сик ҡуйыу комплекслы саралар күреүҙе талап итә, ти тармаҡ белгестәре. Мәҫәлән, заманса юлдар селтәре төҙөү, транспорт ағымдарын отошло билдәләү, юғары сифатлы бензин йәки альтернатив яғыулыҡ файҙаланыу, электр транспортын үҫтереү һ.б. Автотранспорттың ағыулы сығанаҡтарын кәметеү, әлбиттә, тармаҡ министрлығының ғына хәстәре түгел, ул ведомство-ара эшмәкәрлек талап итә. Яҡын арала Башҡортостанда был проблеманы хәл итеү буйынса 2020 йылғаса иҫәпләнгән маҡсатлы программа эшләү күҙ уңында тотола.

Альтернатив яғыулыҡ, әлбиттә, иң элек — тәбиғи газ. 2000 йылдан беҙҙә тәбиғи газ яғыулығында эшләгән автомобилдәр 53 тапҡырға артыуға ҡарамаҫтан, ул республика юлдарында хәрәкәт иткән машиналарҙың 7 проценты ғына — 80 меңдән ашыу. БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы мәғлүмәттәренә ярашлы, автомобиль транспортын газ яғыулығына көйләү буйынса ярайһы эш башҡарыла. Газ баллондарында эшләгән транспортты яғыулыҡ менән тәьмин итеү өсөн 100-ҙән ашыу станция ойошторолған, машиналарҙы газ файҙаланып эшләүгә ҡороу өсөн тиҫтәләгән техник үҙәктәр эшләй. Газ баллоны ҡоролмаларын әҙерләү буйынса Рәсәй һәм Италия тауар етештереүселәре әүҙемлек күрһәтә. Яҡын арала газ яғыулығының бензинды алмаштырыусы сығанаҡҡа әүерелеүе ихтимал, һәм ул атмосфераны углерод окисы, метан булмаған углеводородтар, азот оксиды һәм башҡа ауыр матдәләр менән бысратыуҙы һиҙелерлек кәметәсәк.

Халыҡ күп йәшәгән ҡалаларҙа еңел һәм ауыр машиналарҙың һулар һауаны ағыулауҙағы өлөшө предприятиеларҙыҡынан бер ҙә ҡалышмай. Баш ҡалала ул, мәҫәлән, — 62, Стәрлетамаҡта — 47, Салауатта 29 процент тәшкил итһә, сәнәғәт предприятиелары күп булмаған ҡалаларҙа тиҙ йөрөшлө транспорт атмосфера һауаһына зыян килтереүсе беҙҙән-бер сығанаҡҡа әүерелә: Ишембайҙа, мәҫәлән, уның өлөшө — 94, Бөрөлә — 96, Баймаҡта хатта 97 процент тәшкил итә! Республикала автомобиль паркының йыл һайын 5 процентҡа арта барыуы проблеманың киләсәктә тағы ла ҡырҡыулашыуына ишара итә, тиҙәр министрлыҡта.

Әлбиттә, Башҡортостанда автомобиль транспортының тирә-яҡ мөхиткә, халыҡтың һаулығына емергес йоғонтоһон кәметеү буйынса саралар хәстәрләнмәй түгел. Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып, беҙҙә этиллы бензин һәм юғары көкөртлө дизель яғыулығы файҙаланыу тыйылған. Һөҙөмтәлә атмосфераға ҡурғаш берләшмәләре сығарыуға сик ҡуйылып, көкөртлө ангидрид бүленеү һиҙелерлек кәмегән. Гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхитте күҙәтеү буйынса, Башҡортостан

идаралығы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, атмосфера һауаһын ауыр металл ҡалдыҡтары менән ағыулау ҡырҡа аҙайған.

Еңел һәм ауыр автомобилдәрҙең халыҡ йәшәгән урындарға кире йоғонтоһон кәметеү өсөн М-5 һәм М-7 кеүек федераль автомобиль юлдарын киңәйтеү, урап үтеү өсөн юлдар төҙөү дауам итә. Мәҫәлән, Өфө ҡалаһын аэропорт менән тоташтырған 15 километр юл яңыртылған. Дим районына, Зубово ауылына һәм Өфө аэропортына боролған юлдар киңәйтелеп, транспорт көсөргәнешлеге шаҡтай йомшарған. Таш кисеү (Каменная переправа — **ред.**) янында Ҡариҙел йылғаһының ике ярын тоташтырған күпер сафҡа инеү менән автомобилдәр йәнәш йөрөй алған өр-яңы трасса эшләй. Силәбе ҡалаһына илткән юлға сығыу өсөн Өфө аэропорты яғынан урау кәрәкмәй. Шулай уҡ баш ҡаланы төньяҡтан урап үтеп, М-7 трассаһына сығыу өсөн яңы юл файҙаланыуға тапшырылды. Тимер юлдар араһынан үткән Өфө-Шакша магистрале лә М-7 федераль юлына алып сыға. Баш ҡаланың нефть эшкәртеү предприятиеларында евро-3 һәм евро-4 стандарттарына яуап биргән мотор яғыулығы етештерелеү ҙә ыңғай баһаға лайыҡ, ә яҡын арала евро-5 талаптарына ярашлы яғыулыҡ эшләп сығарыу күҙ уңында тотолоу иһә экологик хәлде арыуландыра төшөр, тигән өмөт уята.

## Йылға-күлдәр әлдә түҙә

Республика башлығының йыллыҡ мөрәжәғәтен артабан уҡыйыҡ. «Һыуҙарға килгәндә, былтыр уларҙың сифаты, дөйөм алғанда, яҡшырҙы, — тиелә унда. — Ләкин күп кенә һыу ятҡылыҡтары «бысратылған» һәм «бик ныҡ бысратылған» булып ҡала». Башҡорт халҡының йырҙарында, легендаларында быуаттар буйы данланған, республиканың «йөҙөк ҡашы» һаналған Ағиҙел йылғаһында зарарлы ҡушылмалар теләһә ҡайһы нормаларҙы ашып китеүе йәмәғәтселек өсөн сер түгел. «Йылға элекке йылдарҙа Стәрлетамаҡ ҡалаһының «Сода» производство берекмәһе кеүектәрҙең хужалыҡ мәнфәғәттәрендә ҡулланылған һыуҙарҙы таҙартмай ағыҙыуы арҡаһында ныҡ бысранғайны, — ти Рәсәй Федерацияһы Тәбиғәт ресурстары министрлығының Ағиҙел һәм Урал йылғалары һыу объекттары мониторингы буйынса федераль дәүләт учреждениеһы бүлек мөдире Әхтәм Ғәббәсов. — Төрлө химик матдәләр йылғаның үҙәнендә төпкә төшөп ятып ҡалды. Бөгөн Ағиҙел предприятиеларҙың бысратыуынан бигерәк шул ваҡытта тороп ҡалған ҡалдыҡтарҙан арына алмай. Был — бер. Икенсенән, ер аҫтынан нефтен, газын һурып алғандан һуң, уның урынына тоҙло һыу ҡыуылғаны күптәргә билдәле. Ә бит ул һыу бер ҡайҙа ла китмәй, бер нисә йыл үткәс, ер аҫты юлдары аша шишмә-ҡоҙоҡтарҙан ер өҫтөнә ҡалҡып сыға.

Йәмғиәтебеҙ тирә-яҡ мөхитте, шул иҫәптән йылға-күлдәрҙе һауыҡтырыу мөмкин түгеллеге менән килеште шикелле, сөнки күптәр бында үҙ ғәйебен һиҙә, һәм шуға күрә йылға-күлдәрҙең зарарлы матдәләр менән ағыуланыуы тураһында саң һуғыу ғына түгел, хатта ауыҙ

асып һүҙ әйтергә лә теләмәй. Тармаҡ министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 2011 йылда һыу ятҡылыҡтарына торбалар аша ағыҙылған ҡалдыҡ һыуҙар 471,39 миллион кубик метрға етеп, бер йылда 38,89 миллион кубик метрға артҡан. Йылға-күлдәргә файҙаланылған һыуҙарҙың аҙыраҡ ағыҙылыуы һәм күберәк таҙартылыуы арҡаһында һыу ятҡылыҡтарына химик матдәләр ҡушылыу кәмегән.

2012 йылдың март аҙаҡтарында ваҡытлы матбуғатта, Учалы тау-байыҡтырыу комбинатында үткәрелгән ултырышта билдәләнеүенсә, көньяҡ-көнсығыш райондарҙа йылға-күлдәрҙең химик ҡушылмалар менән бысраныуына юл ҡуйылыуы тураһында ҡыҫҡа ғына хәбәр күренеп ҡалды. Ләкин ул йәмәғәтселек ҡолағына эленмәне лә. Республикала күп тармаҡлы нефть химияһы булыу ниндәйҙер дәрәжәлә сәнәғәт йоғонтоһона дусар ителгән һыуҙарҙың 90 процентының «Ағиҙел йылғаһына ағыҙылыуы уның кристалдай саф булыуына өмөтләнергә урын ҡалдырмай, ти тармаҡ белгестәре. Шул уҡ ваҡытта һыу ятҡылыҡтарында сифаттың башҡа төрлө күп факттарға, мәҫәлән, яуын-төшөмгә, тупраҡ ҡатламына һ.б. бәйлелеген дә онотторға ярамай». Салауат, Стәрлетамаҡ, Өфө кеүек сәнәғәт предприятиелары күп тупланған ҡалаларҙа торбаларға ағыҙылған һыуҙың сифаты буйынса көсөргәнешлек әле лә һаҡлана. Нефть сығарылған урындарҙа йылға-күлдәрҙең өҫкө ҡатламында нефть продукттары ҡатнашмалары ике — өс ПДК-нан артмай, ә ауыр металлдар (цинк, никель, кобальт) буйынса — нормала, хатта унан да түбән, тип ышандыра БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы. Ә бына марганец ҡатнашмаһы иһә ҡайһы бер урындарҙа, мәҫәлән, Прибельский ҡасабаһында, Өфө, Стәрлетамаҡ ҡалаларында 3—13 ПДК тәшкил итә. Һыуҙа марганецтың тупланыуы хужалыҡ мәнфәғәтендә файҙаланылған һыуҙарға ғына бәйле түгел, ул тәбиғәт шарттарынан да килә.

Тәбиғи һыу ресурстарын һаҡлау буйынса күрелгән урыҡ-һурыҡ саралар экологик именлекте тәьмин итеүҙә төп предприятиеларҙың әүҙемлеге ниндәйҙер дәрәжәлә артыуы хаҡында һөйләй кеүек. Әммә хужалыҡ маҡсаттарында файҙаланылған һыуҙарҙы таҙартыу ҡоролмаларын яңыртыу, нефть химияһы һәм тау-мәғдән сәнәғәтендә локаль таҙартыу ҡоролмаларын киңерәк ҡулланыу, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ предприятиеларында биологик таҙартыу ҡоролмаларын яңыртыу зарурлығы кеүек мәсьәләләр көн үҙәгендә тора.

Гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхитте күҙәтеү буйынса Башҡортостан идаралығы мәғлүмәттәренә ярашлы, күҙәтеү алып барылған йылға-күлдәрҙә һыуҙың сифаты һуңғы 15 йылда үҙгәрешһеҙ ҡала, йәғни 3-4 класс талаптарына яуап бирә. Был йәһәттән һыу ятҡылыҡтары ныҡ һайыҡҡан 2010 йылды иҫкәрмә рәүешендә иҫкә алырға мөмкин: Салауат, Стәрлетамаҡ, Өфө, Дүртөйлө ҡалаларының нефть химияһы предприятиеларынан һәм биологик таҙартыу ҡоролмаларынан 11 урында һыу сифаты ысынлап та ярайһы боҙолоуға юл ҡуйылған. Ләкин, министрлыҡ белгестәре фекеренсә, быны йылға-күлдәрҙәге һыуҙар ныҡлы бысранды, тип ҡабул итергә нигеҙ юҡ.

Дөйөм алғанда, һыу хужалығы проблемаларының күпселеге хәл ителеүҙә РФ Тәбиғәт ресурстары министрлығы тарафынан әҙерләнгән «2012 — 2020 йылдарҙа Рәсәй Федерацияһының һыу хужалығы комплексын үҫтереү» федераль программаһына ҙур өмөт бағлана. Программаның хаҡы ла рекордлы — 300 миллиард һум! Сығымдарҙың шулай уҡ төбәктәр ҡаҙналарынан һәм инвесторҙар тарафынан да бүленеүенә лә иҫәп тотола.

Һуңғы бер нисә йылда ер аҫты һыуҙарының төпкә китеүе арҡаһында йылға-күлдәрҙең бик ныҡ һайығыуы документты әҙерләүселәрҙең иғтибарынан төшөп ҡалыуы, әлбиттә, үкенесле. Был проблеманың яҡын киләсәктә тағы ла үткерерәк ҡалҡып сығасағы бик ихтимал, сөнки ул, экологияны Ер шары кимәлендә өйрәнеүсе белгестәр фекеренсә, иң элек климат үҙгәреү менән бәйле. 2011 йылда хатта йыш яуған көслө ямғырҙар ҙа йылға-күлдәрҙә һыу кимәленең күтәрелеүенә булышлыҡ итмәне. «Һуңғы йылдарҙағы ҡоролоҡ йылғаларҙа һыу кимәленең ике-дүрт метрға түбәнәйеүенә, эсәр һыуҙың аҙайыуына алып килде, — ти Ә. Ғәббәсов. — Ғалимдарҙың фекеренсә, 2015 йылда һыу ятҡылыҡтары тағы ла нығыраҡ һайығыуы ихтимал. Тимәк, уның сифаты ла насарая барасаҡ, сөнки предприятиелар ағыҙған һыуҙар арта барған һайын, ҡатнашмала химик матдәләр ҙә күберәк табыласаҡ». Был хәлде өлөшсә һуңғы осорҙа күлдәргә, һыу ҡултыҡтарына ташҡын һыуҙар инеп тулмауы менән дә аңлатырға мөмкин. Ошо һәм башҡа сәбәптәр арҡаһында күлдәрҙең күпселегендә һыу ҡатламының йоҡарыуына бәйле һаҙлыҡтар барлыҡҡа килде, балыҡтар тонсоғоп үлде, ахыр килеп, һыуҙың сифаты боҙолдо.

## Күпме сеймал әрәм була!

«Көнкүреш ҡалдыҡтарына мөнәсәбәт проблемаһы йылдан-йыл киҫкенләшә, — тип билдәләнде БР Президентының йыллыҡ мөрәжәғәтендә, — ғәмәлдә беҙҙә уны ҡайтанан эшкәртеү системаһы юҡ. Ҡалдыҡтар элекке йылдарҙағыса полигондарға сығарыла, ә уларҙың (экологик) торошо хаҡында әйтергә лә түгел». Көсөргәнешле проблемаға етди мөнәсәбәт зарурлығын былтыр БР Дәүләт Йыйылышы — Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев та күтәреп сыҡты. Өфө районының Рус Юрмашы ауылы эргәһендә көнкүреш ҡалдыҡтары полигоны төҙөүгә ҡаршы сығыштарҙы «Вести Башкортостана» яңылыҡтар программаһында бер нисә тапҡыр күрһәттеләр. Республикала, йән башына иҫәпләгәндә, йыл һайын 250 — 300 килограмм көнкүреш ҡалдығы «етештерелеп», был масса йыл һайын 10 процентҡа арта бара. Ғәжәп түгел, сөнки хәҙерге сауҙала тауарҙарҙы төрөп биреү ғәмәле киң таралған. 2011 йылда, мәҫәлән, республика халҡы сүплектәргә 2 миллион тонна көнкүреш ҡалдыҡтары оҙатҡан. Ә йылға һәм күл буйҙарында, урман аҡландарында ял итеүселәрҙән һуң һибелеп ҡалған һөт, һут, тәмәке ҡаптары, бушаған шешәләр, һөйәк-һаяҡты иһә бер

кем дә иҫәпләмәгән. Элекке кеүек көнкүреш ҡалдыҡтары полигондары төҙөү урынына, хәҙер уларҙы айырып йыйыу, сорттарға бүлеү һәм зарарһыҙландырыу саралары ҡулланып эшкәртеү файҙалыраҡ. «Үҫешкән илдәр күптән инде көнкүреш ҡалдыҡтарын ергә күмеүҙән эшкәртеп, икенсел сеймал итеп файҙаланыуға күсте, — тине Рөстәм Хәмитов йыллыҡ мөрәжәғәтендә. — Беҙҙә иһә ҡалдыҡтарҙың 15 проценты ғына файҙаланыла. Был тармаҡта эшҡыуарлыҡ башланып ҡына тора». Артабан республика башлығы көнкүреш ҡалдыҡтарын эшкәртеүгә бизнес әһелдәрен ныҕыраҡ йәлеп итергә саҡырып, был йәһәттән Германия тәжрибәһенә һылтанды.

Көнкүреш ҡалдыҡтарын йыйыу һәм эшкәртеү менән республикала — 123, шул иҫәптән Өфөлә 35 предприятие шөғөлләнеп, был эш башлыса Өфө, Нефтекама, Стәрлетамаҡ, Октябрьский ҡалаларында алып барыла. Етештереү һәм ҡулланыу ҡалдыҡтары менән эш итеүҙе яйға һалыу һәм һаҡсыл тотоноу иҫәбенә сеймал һ. б. материалдарҙы экономиялау, икенсел сеймалды эшкәртеп, яңынан файҙаланыу өсөн 2011 йыл аҙағында «2011 — 2020 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһында ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын файҙаланыуҙы камиллаштырыу» программаһы ҡабул ителгән. Тармаҡта аныҡ система булдырыуҙы күҙ уңында тотҡан был документ район һәм ҡалалар хакимиәттәренә ҙур мәшәҡәттәр йөкмәтә. Биләмәләрҙе таҙа тотоуҙың генераль схемаһын эшләү, мәҫәлән, программа маҡсаттарының иң мөһимдәренән иҫәпләнә. Документҡа ярашлы урындағы үҙ идаралар аҙыҡ-түлек һ.б. көнкүреш ҡалдыҡтарын айырым йыйыуҙы ойоштороrға бурыслы. Аҙыҡ-түлек ҡалдыҡтары, мәҫәлән, артабан күмергә ебәреләсәк йәки унан компост эшләнәсәк, ә башҡалары сорттарға айырыласаҡ. Программаның финанс яғы ла иҫәпләп сығарылған — 7,5 миллиард һум.

Маҡсатлы республика программаһы — «2004 — 2010 йылдарҙа һәм 2015 йылға тиклем БР экологияһы һәм тәбиғәт ресурстары»на ярашлы, тәбиғәтте һаҡлау талаптарына яуап биргән 36 ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигоны төҙөлөп, файҙаланыуға тапшырылған. Был объекттар төрлө милек формаһындағы предприятиеларға: мәҫәлән, 15-е — «Тәбиғәт» дәүләт-унитар предприятиеһына, 6-һы — яуаплылығы сикләнгән ширҡәттәргә; 15-е муниципаль предприятиеларға ҡарай. Ҡалдыҡтар мәсьәләһен отошло хәл итеү йөҙөнән 2011 йылдың 18 ноябрендә БР Хөкүмәтенең «2011—2020 йылдарҙа Башҡортостан Республикаһында көнкүреш ҡалдыҡтарын урынлаштырыу һәм файҙаланыуҙы камиллаштырыу» тигән маҡсатлы программаһы ла бар. Уға ярашлы, Өфө, Стәрлетамаҡ, Нефтекама, Сибай ҡалаларында, район үҙәктәрендә ҡалдыҡтарҙы сорттарға айырыу һәм икенсел продукция етештереү буйынса эре полигондар төҙөү ҡарала. Ҡалдыҡтарҙы алыҫ урындарҙан ташыу өсөн махсус станциялар ҙа файҙаланыласаҡ.

Өфө районында ошондай ҡалдыҡтар түгелгән 12 полигон бар, тик уларҙы эшкәртеү, утилләштереү менән шөғөлләнеүсе предприятиелар юҡ. Рус Юрмашында «Башинвестрезерв» ширҡәте, Федоровка

һәм Самохваловка ауылдарында унитар предприятие көнкүреш ҡалдыҡтарын аҙнаға бер йыйып алып, Черкассы ҡасабаһы янындағы полигонға илтә.

Экологик көсөргәнешлекте йомшартыу маҡсатында, Өфө район советының 2012 — 2017 йылдарға иҫәпләнгән махсус программаһы буйынса, Жуково ауыл советы ултырағының Сергеевка ауылында ла полигон төҙөлә. Рус Юрмашы һәм Николаевка ауылдары эргәһендә тағы ла ике объект төҙөү ҡаралып, граждандарҙың көслө ризаһыҙлығы арҡаһында, Рус Юрмашы янында полигон төҙөү идеяһынан баш тартырға тура килде. Әлбиттә, төҙөлөшкә ҡаршы сыҡҡан ауыл халҡының ризаһыҙлығы аңлашыла, сөнки экологик яҡтан уңайлы шарттарҙа йәшәү хоҡуғы РФ Конституцияһында (42-се статья) нығытылған.

Ошоно иҫәпкә алып, былтыр 4 майҙа БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы Өфө һәм Иглин районды хакимиәттәре менән берлектә йылына 100 мең тонна көнкүреш ҡалдығы эшкәртеүгә иҫәпләнгән полигонды Иглин районының Еленино ауылынан өс саҡрымда төҙөү тураһында ҡарар сығарған.

Әйткәндәй, көнкүреш ҡалдыҡтарын эшкәртеү буйынса заманса предприятие төҙөү мәсьәләһе бер нисә йыл элек БР Президенты кимәлендә Япония фирмалары вәкилдәре менән дә тикшерелеп, был хаҡта электрон һәм ваҡытлы матбуғат саралары ла хәбәр иткәйне. Нилектәндер, оҙаҡ ҡына был эшмәкәрлектең дауамы булманы. Сергеевка ауылындағы полигон ысынлап та япон технологияһы буйынса ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтарын газ ярҙамында иретеп эшкәртеүсе тәүге предприятие булмаҡсы.

## Тәбиғәтте һаҡларға... кешенән

Кешелек цивилизацияһының хәҙергеһе барлыҡҡа килгәндән башлап туплана килгән экологик көсөргәнешлекте тыуҙырған сәбәптәр үрҙә һанап сыҡҡандар менән генә сикләнмәй. Эрозия яғынан хәүефле ауыл хужалығы ерҙәренең 5,5 миллион гектарға етеүе, һуңғы йылдарҙа йышайған урман янғындары һ.б. уны тағы ла көсәйтә. Ҡайһыһын ғына алып ҡарама, кеше эшмәкәрлеге һөҙөмтәһе икәнлегенә шик ҡалмай, һәм был, кеше үҙенең хәүефһеҙ тирә-яҡ мөхиткә конституцион хоҡуғын әҙәм балаһынан һаҡларға тейеш, тигән һығымта яһарға этәрә. Бының өсөн ни эшләргә кәрәк һуң? Һорауға өлөшсә яуапты РФ Хөкүмәте Рәйесе Дмитрий Медведевтың быйыл 9 ғинуарҙа үткәргән экологик кәңәшмә материалдарынан табырға мөмкин: 1) иҫкергән законадарҙы яңыртырға; 2) көнкүреш ҡалдыҡтарын яңы технологиялар ҡулланып эшкәртергә өйрәнергә; 3) экологик зыянды кәметеү буйынса йоғонтоло саралар күрергә; 4) экологик күҙәтеүҙең һөҙөмтәлелегенә өлгәшергә. Өсөнсө пунктты ғәмәлгә ашырыу йәһәтенән, һис шикһеҙ, компетентлы даирәләр вәкилдәре менән экологик яҡтан хәүефле предприятиеларҙа әленән-әле рейдтар үткәреү юғары һөҙөмтә бирер ине, әммә был турала ни өсөндөр тармаҡ министрлығы сараларында иҫкә алынмаған.

Автомобиль транспортының атмосфераға ағыулы матдәләрҙе күпләп сығарыуын сикләү буйынса, әлбиттә, йәмғәтселек фекерен өйрәнеү зарур, сөнки ентекле уйланмаған, граждандар тарафынан яҡлау тапмаған ҡарарҙың бөтөнләй кире һөҙөмтә биреүе ихтимал. Ләкин шуны шикләнмәй әйтергә мөмкин: автомобиль транспорты тәбиғәт өсөн генә түгел, ғөмүмән, кеше именлеге өсөн дә хәүефле сығанаҡҡа әйләнде. 2012 йылда, мәҫәлән, юл-транспорт фажиғәләрендә, РФ Президенты Эске эштәр министрлығында еткергән мәғлүмәт буйынса, 28 мең кеше һәләк булған! Ә ғәриппләнгәндәре иһә — биш тапҡырға күберәк. Ошо күҙлектән ҡарағанда, автомобиль утлы ҡоралдан ҡайһы яғы менән кәм йәки артыҡ? Шул уҡ ваҡытта юлдарҙы киңәйтеп асфальт түшәлгән урамдарҙың тиҫтәләрсә квадрат метрға артыуы үҙе үк экологик хәлдең көсөргәнешләнеүенә юл аса.

Көнкүреш ҡалдыҡтарын эшкәртеү буйынса Германия тәжрибәһе, әлбиттә, беҙҙең өсөн Киевҡа йәйәүләп барыуға тиң. Ошо йәһәттән бер йыл самаһы элек йәш немец эшҡыуарының «Комсомольская правда» гәзитендәге түбәндәге һүҙҙәре иҫкә төшә. «Мин Өфөгә килһәм, тамам иркенләйем, — тигән ул. — Сөнки көнкүреш ҡалдыҡтарын айырып йыйыу, һыуҙы самалап тотоноу кәрәкмәй». Был һүҙҙәр аңлатмаға мохтаж түгел — урыҫҡа яҡшы булған немец өсөн үлемгә тиң, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәр.

Әлбиттә, «игелек йоҙроҡло булырға тейеш». Экологик мәҙәниәт тәрбиәләү, йәмғәтселектең аңына һеңдереү өсөн «сыбыртҡы» ысулы ла, «прәник», тә берҙәй кәрәк. «Көнкүреш ҡалдыҡтары ташлаған өсөн — 5 мең һум штраф!» тигән яҙыу-иҫкәртеү әҙәм балаһын һәр ерҙә эҙәрлекләмәй тороп, экологик мәҙәниәт үҙенән-үҙе генә барлыҡҡа килмәйәсәк. Әгәр автомобиль хужаһы машинаһын шәхси гаражына түгел, теләһә ҡайҙа ҡуя, теләһә ҡайҙа йыуа, кемдәрҙер үҙе йәшәгән мөхитте сүп-сар урынына әүерелдерә, башҡа санитар-гигиена талаптарын боҙа, ғөмүмән, ҡырағайҙарса эш итә икән, проблемалар, киреһенсә, күбәйәсәк кенә. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, һуңғы йылдарҙа йәмғәтселектең экология менән ҡыҙыҡһыныуы, әгәр был уның үҙенә шәхсән ҡағылмай икән, ҡырҡа кәмене.

«Кеше аяғы баҫҡан ерҙән тәбиғәт сигенә», — тигән күренекле академик Николай Доллежаль. Фекерҙе раҫлау өсөн хәҙерге ҡалаларға, уларҙың тирә-яғына күҙ һалыу ҙа етә: ҡасандыр ағастар үҫкән, сәскәле туғайҙар булған урындарҙа тәүлек әйләнәһенә көнкүреш ҡалдыҡтары «етештереү» менән мәшғүл булған кешеләр ғүмер сигә. Ә бит һуңғы йылдарҙа үтә лә актуаль булып киткән климат үҙгәреү ҙә, компетентлы белгестәр фекеренсә, — кеше эшмәкәрлеге емеше. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был фекер улар тарафынан төрлө дәлилдәр менән бәхәс тыуҙырмаҫлыҡ итеп раҫланған. Шундай ҡаршылыҡлы хәл: XXI быуат цивилизацияһы тәбиғәт менән низағҡа инеп, үҙенең именлегенә оло хәүеф тыуҙыра.

**Мәхмүт ХУЖИН.**

**Мөнир ВАФИН**

**Пародиялар**

## *Йәшлек – йәшлек инде*

Йәшлек йәшлек инде, нимә тимә,
Шәрбәт кенә тимен бар ерен.
«Алмалары» бар алманан татлы,
Йәш ҡыҙҙарҙа ғына йәш ирен.

Ҡәҙим Аралбай

*Йәшлек йәшлек инде – нимә тимә,*
*Татлы тиеп йөрөнөм бар ерен.*
*Асыш яһаным: ҡарт ҡыҙҙарҙа – ҡарт,*
*Йәш ҡыҙҙарҙа ғына йәш ирен.*

*Йәшлек – йәшлек инде, тиеп йөрөнөм,*
*Йәштәр күргән һайын күҙ ҡыҙа.*
*...«Алмалары» ләкин ҡортло ине,*
*Ҡап-ҡарт ирен ине йәш ҡыҙҙа.*

## *Шиғыр зыяраты*

Һеҙҙе белмәйем, минең күңел,
Гүйә, шиғыр зыяраты.

Илдус Фазлетдинов

*Ғәҙәттә, тыуырға кәрәк*
*Ҡасандыр үлер өсөн.*
*Минең  тыумаған шиғырҙы*
*Етә абортлар көсөм.*

*Тыумай үлгән шиғырҙарҙың*
*Юҡ һаны, юҡ сираты,*
*Һеҙ нисектер, минең күңел, –*
*Шиғырҙар зыяраты.*

## *Өйрәнеү*

Йәшәргә – тик йәшәп өйрәнәбеҙ,
Яратырға – бары яратып.

Фәндиҙә Харрасова

*Өйләнергә өйрәнмәксе булып,*
*Атай шулай бер саҡ өйләнгән.*
*Әсәй шунан мине алып ҡайтҡан –*
*Тыуҙырырга шулай өйрәнгән.*

*Үҫә-үҫә генә, йәшәй-йәшәй*
*Мин өйрәнеп алдым йәшәргә.*
*Тонна-тонна аҙыҡ серетә-серетә*
*Өйрәнептәр киләм ашарга.*

*Эшләй-эшләй эшкә өйрәнәмен,*
*Йоҡлай-йоҡлай – серем итергә,*
*Үлә-үлә өйрәнелер инде*
*Был донъянан бер саҡ китергә...*

## *Шиғыр кәрзине*

Ҡартлыҡта шуға һөйөнәм:
Әлдә шағир булғанмын.
Ризыҡ кәрзине шикелле,
Шиғыр менән тулғанмын.

Рауил Шаммас

*Әлдә шагир булганмын бит,*
*Дәрәжәле, маҡтаулы.*
*Ризыҡ кәрзине шикелле,*
*Шигыр менән туп-тулы.*

*Әммә ризыҡ кәрзинендә*
*Аҙыҡтың бар төрлөһө:*
*Бар тиҙ боҙола торганы,*
*Бар оҙон гүмерлеһе.*

*Бар ҡатҡаны, күгәргәне,*
*Хатта ки ҡорт төшкәне.*
*Ашарга яраҡһыҙ ҡалып,*
*Сүп һауытҡа күскәне.*

*Кәрзинемдә ниндәй аҙыҡ?*
*Шул һорау йәнде телә.*
*Үҙем белмәйем, кәрзиндән*
*Ашаған ғына белә...*

## *Ҡыштар еткән*

Ҡыштар еткән, ай-йылдарҙы,
Гүйә, ҡарҙай ырғытам.

Радик Хәкимйәнов

*Ҡыштан ҡасып, йылы яҡҡа*
*Оса ул ҡоштар ғына.*
*Килеп еттем көтмәгәндә*
*Ғүмерем ҡыштарына.*

*Ғүмер-ҡыштан ҡотолам тип,*
*Мин ҡарҙарҙы ырғытам.*
*Ҡарҙар, үткән ай-йылдарҙай,*
*Осалар тотам-тотам.*

*Салғы тотоп кемдер килде.*
*(Ҡасып булмай уларҙан.)*
*Бары тик өс аршин ерҙе*
*Әрсей алдым ҡарҙарҙан.*

## *«Күстәнәсле» ҡапсыҡ*

Юл ғазабын, мәшәҡәтен уның
Үҙем менән йөрөтәм ҡапсыҡта.

Фәрит Суфияров

*Юлдар гиҙәм, юлдар гиҙәм.*
*Минең юлдар ал да гөл.*
*Һәр саҡ уңған, тик ваҡ юлдар*
*Көтә мине алда гел.*

*Юл ғазабын, мәшәҡәтен*
*Һалып йөрөйөм ҡапсыҡҡа.*
*Ташлап ҡалдыраһы ла бит,*
*Һаҡлайым кәрәк саҡҡа.*

*– Ғазап, мәшәҡәт ҡапсығың, –*
*Һорағыҙ, – ниңә? Ниңә?*
*Улар пародиясыға,*
*Мине  тәнҡитләүсегә.*

## Уйлап сығарам

Ялан тәпәй атлайым ерҙә –
Үпһен үлән, тип барам.
Үбәм тип ҡағылмай үлән,
Беләм – уйлап сығарам.

Ел дә сәсемде һыйпай, тип
Үҙем уйлап сығарам.

Нәжибә Әминева

*Битемде ҡояш үпһен тип,*
*Ҡояшҡа ҡаршы барам.*
*Үбәм, тиеп төшмәй ҡояш,*
*Беләм – уйлап сығарам.*

*Итәктәремде күтәреп,*
*Һыуҙарға кереп барам.*
*Тәндәремде йылға наҙлай –*
*Тағы уйлап сығарам.*

*Ҡосағына ҡыҫып алды,*
*Наҙлы күҙҙәргә ҡарайым.*
*Аптыраған, был юлыһы*
*Нимә уйлап сығарайым?..*
*Бала көтәм: ҡыҙ булырмы,*
*Әллә ул булыр микән?*

## Дәүләтенә күрә – ғаиләһе

Ғаилә – дәүләттең нигеҙе. Шул уҡ ваҡытта һәр ғаиләне дәүләттең кескәй генә сағылышы тип иҫәпләргә лә була. Ә шулай ҙа дәүләт төрҙәре күберәк, уның ҡарауы, ғаилә төрҙәре һанаулы, буғай. Ғөмүмән, ғаилә – һәр дәүләттең күҙәнәге, тип тә әйтергә мөмкин. Үкенескә ҡаршы, һәр дәүләт үҙендә йәшәгән ғаиләләрҙе тиң хоҡуҡлы итә алмай. Әйтәйек, боронғо Римда ҡолдар ғаилә ҡороуҙан мәхрүм ителгән. Ә бына Рәсәйҙә ҡоллоҡ күҙәтелмәһә лә, крепостной крәҫтиән хәле Римдағы ҡолдоҡонан ауырыраҡ булған. Эйе шул, ғаиләле крәҫтиәнгә һаҡсы ла, күҙәтеүсе лә ҡуйыуҙың хәжәте юҡ. Ғаиләһен туйҙырыу өсөн крәҫтиәнгә ҡолдан да күберәк эшләргә тура килгән.

Беренсе һығымта: Рәсәй ғаиләһе – дәүләттең иң ҡәһәрле, килемле байлығы. Ғаилә тураһында Рәсәй классиктары аҙ яҙманы. Лев Толстойҙың «Анна Каренина»һын уҡып ҡына ла күпте аңларға мөмкин. Ысынлап та, баҫҡыстың иң юғарыһында торған бай ғаиләләрҙә лә «илай белгәндәр» икән дә баһа! Илау менән генә сикләнмәгәндәр, хатта паровоз тәгәрмәсе аҫтына ла ташланғандар. Шуныһын да әйтергә кәрәк: тәгәрмәс аҫтына ыҙа сиккән сабаталы крәҫтиән ҡатыны ташланмаған. Ә Пушкиндың Дубровскийы үҙ крәҫтиәндәре менән килешеп, татыу донъя көткән, бәлки, шуға күрәлер ҡыҫырыҡланған, юҡҡа сығарылған. Дөйөмләштереп әйткәндә, Рәсәй классиктары крәҫтиәндәрҙең Рим ҡолдарынан да ауырыраҡ йәшәгәнлеген күрмәгән, һиҙмәгән, сөнки классика киләһе быуындар өсөн тырыша: йәнәһе, Рәсәй берҙәмлектә йәшәгән алдынғы йәмғиәт булған. Ярай, етеш шартта йәшәгән классик хәйерселекте һүрәтләй алмаған, ти. Бына шулай: Рәсәйҙә Виктор Гюго тыуманы, ә шулай ҙа ул гавроштар иле булып ҡалды.

Ә бына Бөйөк Октябрь инҡилабы Рәсәй һоро ҡорттарының кәрәген биреп, эшсе һәм крәҫтиән өсөн тиңлек, ғәҙеллек, ирек яуланы. Тик шуныһы ла асыҡланды: ирек менән ғәҙеллекте винтовка менән яулайҙар икән. Винтовкалар иһә барыһына ла бирелмәне, күпселеккә етмәне. Юҡ, совет системаһы тубыҡланыуҙы талап итмәне, ә үҙ эшмәкәрлеген алҡыштарға күмеүҙе, туҡтауһыҙ эшләүҙе талап итте. Тигеҙлек, ғәҙеллек өлгөһөн бар ғәләмгә күрһәтеү маҡсатын ҡуйған Советтар Союзы баҫҡысһыҙ йәмғиәт төҙөргә хыялланды кеүек. Ә маҡсатҡа ниндәй юл менән ирешеү башланды? «Легендар Блюхер рейды» тураһында һәр кем белә, сөнки ул үткән юлдағы башҡорт ауылдары шыпа яланғас ҡалып, 1921 йылғы йотта халҡының күпселеге аслыҡтан үлде. Ялан яғы крәҫтиәндәре игенен ер аҫтында йәшерә алһа, тау башҡорттары малдарын ер аҫтына күмә алмаған.

Тигеҙлек, ғәҙеллек, хөрриәт! Ысынлап та, был һүҙҙәрҙе көн-төн ҡабатлаһаң,

үҙеңде ирекле тояһың кеүек, етмәһә, эргәңдә дәртләндереүселәр ҙә булһа. Совет власы ғаилә эсендә лә ғәҙеллек урынлаштырҙы, һәр кем үҙ хоҡуғын алды. Совет етәкселеге яңы дәүләт төҙөү дәүләт өсөн ҙур юғалтыуҙар зарурлығын уйлап та ҡараманы. Был турала оҙаҡ һөйләргә мөмкин. Ә ғаилә көнкүреше? Ул эш хаҡына бәйле, сөнки Советтар дәүеренда башҡа килем сығанаҡтары тыйылғайны. Социализмдың девизы ла шаҡ ҡатырлыҡ: «Кем эшләмәй – шул ашамай». Был һүҙҙең хурлыҡлы яңғырағанын да әйткеләнек: «Ашау өсөн йәшәйбеҙ, йәшәү өсөн ашайбыҙ». Совет дәүеренең сер асҡысы бына ошонда. Совет кешеһе үҙе йәки ғаиләһе өсөн эшләмәй, ул йәмғиәт өсөн эшләй, сөнки марксизм шулай ҡуша. Совет йәмғиәте үтә сәйер йөкмәткеле булды, синыфтарһыҙ, йәғни баҫҡыcһыҙ йәмғиәт тип аталды, ә баҫҡыс иһә батша заманындағынан да хәтәрерәк булып сыҡты. Бында ла сер: боронғо Мысырҙағы кеүек, бөйөк фирғәүендәрҙән башланған баҫҡыс. Эште «бөйөк Ленин» башланы, ә «ябай механизатор» Горбачев тамамлап ҡуйҙы. Аңлашыла, әлеге «тигеҙлек» бәләһе. Совет баҫҡысының урта өлөшөнән бер миҫал килтереп китәйем. Минең алдымда яңы ғына сыҡҡан китап: «Свод законов и нормативных правовых актов Башкортостана», (XXI том, 63-се бит). Коммуналь хужалыҡ комиссары Чупринин донъя ҡуйғас, ғаиләһенә бына тигән ихтирам күрһәтелгән: 1400 һум ярҙам, ҡатынына – ай һайын 500 һумлыҡ ғүмерлек хаҡлы ял.

Был хәл 1941 йылда булған. Олатайым колхоз ойоштороу өсөн алты һыйыр, алты екке аты һәм башҡа ҡиммәттәрен тапшырыуға ҡарамаҫтан, һуғыш аҙағында аслыҡтан үлде, ярҙам көтөр урыны булманы. Колхозсы баҫҡыстың иң түбән баҫҡысында булды.

Социализм осорон һурәтләү еңел түгел. Ғаиләләрҙе ҡаҡшатыу башланды, күбеһе бер-бер артлы эскелеккә һалышты. Эскелек күренешен ҡыҫҡаса һурәтләү мөмкин дә түгел. Бөйөк Ватан һуғышынан элек ауылдағы эскеселәргә барыһы ла бармаҡ төртөп күрһәтһә, хәҙер эсмәгән кешегә бармаҡ төртәләр. Эскелек дингә ҡаршы көрәштә лә оҫта файҙаланылды.

Ә шулай ҙа эскелектең төп сәбәбе – өмөтһөҙлөк. Өмөтһөҙ – шайтан. Тимәк, һәр эскесе – шайтанға тиң. Ә өмөтһөҙлөк ҡайҙан? «Колхоз» тигәнең бер кемгә лә үҙ хеҙмәтенең һөҙөмтәһенән файҙаланыу форсатын бирмәне. Ә иң ғибрәтлеһе – һәр колхозда етәксе ролендә эш һөймәгәндәр. Ни өсөн? НЭП осоронда эшһөйәрҙәр тиҙ арала хужалыҡтарын тейешле кимәлгә күтәрә алды, ә эшһөймәҫтәр тауыш ҡуптарҙы. Колхоз ойоштороу мәлендә нәҡ шулар Сталиндың «әүҙем ярҙамсыларына» әүерелде. Һөҙөмтәлә эшһөйәрҙәр төшөнкөлөккә бирелде, ә өмөтһөҙ ҡараштар араҡы шешәһенә төбәлде. Бөйөк Ватан һуғышы эскелеккә яңы «һулыш» бирҙе. Фронттағы «йөҙ грамм»ға өйрәнгәндәр ҡайтҡас та шул уҡ ғәҙәтен дауам итте, етмәһә, һуғыш күпселеккә өмөтһөҙлөктән башҡа бер ни ҙә бирмәне.

Сер түгел, эскелекте етәкселек хупланы. Хәтеремдә, һуғыштың тәүге йылында мин олатайыма эйәреп магазинға барҙым. Һатыуҙа һабын да, шырпы ла юҡ, ә араҡы бар, шешә менән түгел, мискә менән килтерелгән. Шешәләр фашист танкыларына ҡаршы көрәштә кәрәк икән. Араҡыны сүмес менән һәр кемдең үҙ һауытына һалып бирәләр. Дүрт йәшемдә мин араҡы тәмен татыным, сәсәнем, ҡарттар көлдө.

Эсегеҙ, иҫерегеҙ! Был һүҙ ҡысҡырып әйтелмәне, ә үтәлде. Сөнки Екатерина II әйткән: «Эскесене тыңлатыу еңел, эскесе теләһә ниндәй теләгеңде үтәй».

Белеме өс кластан артмаған И. Сталин был хаҡта яҡшы белгән, һөргөндә саҡта өйрәнгән.

Эскелектең иң беренсе сифаты – ғаиләне ҡаҡшатыу, хатта юҡҡа сығарыу. Атаһы эскесе булған ғаилә ас-яланғас, әсәһе эскесе булған ғаилә бөтөнләй эштән сыға. Ысынлап та, большевизм ғаиләһеҙ йәмғиәт ҡороу юлына баҫты. Етәкселәр араһында ла сағыу миҫалдар аҙ түгел. Тик шуныһын да әйтеү мотлаҡ: ғаиләләргә ҡаршы көрәш һәр ерҙә тормошҡа ашырылманы. Әйтәйек, Кавказда өмөтһөҙлөккә юл асылманы, ғаилә лә ҡыҫымға алынманы. Урта Азияла мосолманлыҡты тыйыу уңышһыҙ булды, ғаиләләр ҙә донъяһын әүәлгесә алып барҙы. Балтик буйында, ғөмүмән, СССР-ҙың көнбайыш өлөшөндә, халыҡты, ғаиләне ҡыҫыу самалы булды. Ә бына Урал-Волга араһында «шайтан бейеүе» күҙәтелеп, урыҫ ауылдары тамам эскелеккә бирелде. Уның һөҙөмтәләрен һәр кем белә. Ваҡытлы уңыш өсөн державаны күп йылдарға артта ҡалдырыу – Сталиндан элгәре хакимдарҙың тактикаһы. Был йәһәттән Иосиф Виссарионович барыһын да уҙҙырҙы. Әлеге көндә лә уны күккә күтәреүселәр етерлек. Сталин китте, ә эше менән эскеселәр ҡалды.

Тәүге Сталинһыҙ көндәрҙе һүрәтләү ҡыйын түгел. Ғибрәтле хәл: Сталин үлгән – кемдер шатлыҡтан эсә, юғалтыу тойғандар ҙа эсә – ҡайғынан. Хужалыҡтар емерек. Һуғыш үткән урындарҙа ғына түгел, һәр ерҙә. Төҙәтеү эштәре башланды.

Ә шәхси хужалыҡтар, торлаҡ? Ремонт эштәре башланды, ә халыҡта аҡса бөтөнләй юҡ. Өмәләр заманы килде, һәр эш тип әйтерлек өмә ярҙамында үтәлде. Ә өмә аҙағы – эскелек. Өмәләр бигерәк тә ауылдарҙа ҡыҙҙы, ремонт эштәре, утын әҙерләү, мал һуйыу һ.б. эштәр өмә ярҙамында алып барылды. Ауылдағы барлыҡ эш араҡыһыҙ йәки әсегән балһыҙ эшләнмәне. Ә ғаилә? Ҡатындар эш хаҡына эскән ирҙәрен әрләне, өмәләрҙән иҫереп ҡайтҡан өсөн маҡтаны. Ауылдарҙа «өмәселәр» тип аталған төркөмдәр барлыҡҡа килде. Тора-бара улар араһында буйҙаҡтар күбәйҙе. Ундайҙарға ғаиләнең кәрәге юҡ.

Н. Хрущев заманында ҡала ғаиләләре нисек йәшәне? Мин эшләгән цехта бына тигән бригадир бар ине. Ул өс балаһы һәм ҡатыны менән «времянка» тип аталған мал ҡураһында аҡса түләп йәшәргә мәжбүр булды. «Гостинка»нан бер бүлмә эләккәс, тегенең шатлығы эсенә һыйманы, балаларының һөйөнөсөн тәмәке тартҡанда оҙаҡ итеп һөйләне. Был замананың үҙенсәлеге – әлеге «хрущеба» һүҙе урынһыҙ ҡулланыла, сөнки ул ваҡытта фатир алыу ожмахҡа инеүгә тиң һаналды. Тап ошо заманда аҙыҡ-түлеккә ҡыҫынҡылыҡ килде, «дефицит», «блат» һүҙҙәре барлыҡҡа килде. Араҡыны талонһыҙ ҙа алып була ине.

Колхоздар игенселек һәм малсылыҡ сеймалын тейешле күләмдә етештерә алманы, ә шәхси хужалыҡтар эшен Хрущев туҡтатты. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙҙең ил етәкселәренең һәр береһе үҙенә генә хас етешһеҙлек «тапты». Бар эштә лә «белгес» булып алған Никита Сергеевич үҙе теләп китмәне, ҡыуылды. Ә бына Л. Брежнев дәүере ғаилә өсөн әллә ни ҡыҫынҡылыҡ килтермәне, киреһенсә, совет халҡы «дәүләт тәьминәте»нең ни икәнлеген аңланы. «Үҫешкән социализм» бүләк иткән Леонид Ильичҡа рәхмәттәр яуҙы, бигерәк тә беренсе категорияла тәьмин ителгән ҡалаларҙан. Тәмле лә, туйғансы ла ашанылар. Мәскәүҙәрҙе ҡарғағандар күбәйҙе, эйе, Мәскәүгә колбаса һатып алырға йөрөүселәр күбәйҙе. Әйтергә кәрәк, нефть долларҙары иҫәбенә тамаҡ туйҙырыу бик шәп булды, ә ауыл хужалығы ныҡ аҡһаны. Иртәгәһен ишәк ҡайғыртҡан – быныһы Брежнев замананының девизы. Ҡартлыҡ – шатлыҡ түгел, ә Леонид Ильич үҙенә алмашсы эҙләмәне, Кремль халҡы ҡартайҙы.

Горбачев-Ельцин осоро илебеҙҙе таяҡ тыҡҡан ҡырмыҫҡа иләүенә оҡшатты, һәр кем хафаланды. «Юғарыла»ғыларҙың булдыҡһыҙлығымы, әллә «яңылар» көслө булып сыҡтымы – кем генә белһен, ә «совет ғаиләһе» төшөнсәһе юҡҡа сыҡты. СССР етәкселеге дәүләт мәнфәғәтен ғаиләнекенә ҡарағанда үтә юғары, өҫтөнлөклө күрҙе. Эйе, был сәйәсәт яһалма нигеҙгә ҡоролдо, шуға күрә ныҡлығын да тиҙ юғалтты.

«Суверенитетты күпме теләйһегеҙ, шул тиклем йотоғоҙ!» – тине Рәсәйҙең тәүге президенты Б. Ельцин. Был фекерҙе ул үҙе булған һәр ҡалала, хатта Стәрлетамаҡта ла ҡысҡырып әйтте. Ул һүҙ кемдәргә төбәлгәйне? Айырым төркөмдәр өсөн генәме? Әммә саҡырыуҙы һәр кем ишетте. Мәскәүҙәге «Дай порулить!» тип ҡысҡырған төркөм барыһынан да көслөрәк булып сыҡты, сөнки ситтән килгән долларҙарға таянып эш итте.

Бына шулай, дәүләт-ғаилә дилеммаһы өҫтөндә тағы бер шәүлә күренде, йәғни Мәскәүҙәге аҡсалы төркөм. Уларҙы яҡлаусылар төбәктәрҙә лә бик тиҙ табылды, аҡса «һуғыусылар» осоро килде. «Барыһы ла – ихтыяждан, барыһы ла – көрәш аша» фәлсәфәһе һәр кемгә мәғлүм булды. Ҡайһы бер ғаиләләр гигант комбинаттарҙы, хатта тотош сәнәғәт тармаҡтарын ҡулдарына төшөрҙө. Миллионлаған ғаиләләр иһә тамаҡ туйҙырыу хәстәренә тарыны. Ельцин осоро тарихҡа инмәне, сөнки ул үҙе лә ваҡ фигура икәнлеген аңлағайны инде. «Һоҫасылар» ваҡыты килде. Нишләйһең, «челноктар осоро» имәнесле: донъяның сеймалға иң бай иле миллиондарса ҡул һуҙып, һораныусылар тыуҙырҙы. Бына тигән педагог йәки мәҙәниәт эшмәкәре, ғаиләһен туйҙырыу өсөн, йөксө, табыусы, һатыусы ролдәрен бер үҙе атҡарырға мәжбүр булды.

Әлбиттә, бар халыҡ тауар артынан йүгерә алмай. Ҡайһы бер предприятиелар эш хаҡын аҙыҡ-түлек йәки башҡа кәрәк-яраҡ менән бирергә мәжбүр булды, «бартер» киң хоҡуҡтар алды. Шулай ҙа Башҡортостан етәкселеге йүнселлек күрһәтеп, халыҡ мәнфәғәте өсөн саралар күрҙе. Йәмәғәт транспортында бушлай йөрөү күптәр өсөн еңеллек – эшкә йөрөүселәр байтаҡ, ҡайһы бер хужалыҡтар трамвай-троллейбуста йөрөү хаҡын да түләй алмай ине. Рәсәй халҡы мыҫҡыл ителеп, күптәрҙең тыны ҡыҫылған мәлдә, ҡайһы бер заттарҙың шатлыҡтары эстәренә һыйманы.

Яҡташым, Ишембай районы Сәлих ауылынан мәҙәниәт хеҙмәткәре Сәфәр ағайҙың бер йыры иҫемә төштө:

*Ҡыуып етербеҙ, уҙып китербеҙ*
*Американы – яҡын йылдарҙа.*

Эйе шул, ауылға ҡайтҡан саҡтарымда Сәфәр ағайҙан көлөп тә маташтым. Ул миңә аҙ-маҙ аңлатты: был мыҫҡыллауҙың бер төрө икән. Партия ойошмалары етәкләгән колхоздар АҠШ-ты нисек уҙа алһын? Агитация менән генә тамаҡ туйҙырыу мөмкин түгел. Бына Ельцин төркөмө – миллионерҙар, миллиардерҙар иҫәбе менән Американы уҙыу маҡсатын ҡуйҙы. Тик шуныһы ғәжәп: миллионерҙар күпләп тыуҙы, ә иң байҙары «теге яҡҡа» ҡасты. Уҙып ҡара, тәгәрәп ятырһың. Күптәр ысынлап та тәгәрәне. Кеше заттары тураһында түгел һүҙ, ҡеүәтле хужалыҡтар. Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы «Авангард» заводы совет заманында көн-төн туҡтамай эшләне, Вьетнам халҡына АҠШ-ты үҙ еренән ҡыуырға ярҙамлашты. Ракеталар өсөн дары яғыулығы етештерә ине был завод. Ельцин осоронда иһә бөтөнләй туҡтап ҡалды, Америка завод эшселәренән үсен шулай

алды, ә Ельцинды миҙал менән бүләкләгәндәр, тип һөйләнеләр. Бер нисә мең кеше эшһеҙ ҡалды, ә ғаиләләр хәлен һорашыу – урынһыҙ. Завод халҡы интекте, ғаиләләр «диета»ға күсте. Эйе, ундай «диета»ны врач кәңәш итмәй, кеҫәләге «хәл» ҡуша. Ҡайһы берәүҙәр Американы «иномарка»ларҙа елдереп уҙырға уйланы, әммә уҙа алманы. Хәҙер хәйерселәр иҫәбе менән беҙ Американы бөтөнләй артта ҡалдырҙыҡ, был йәһәттән Б. Ельцин Сталиндан да уҙҙырҙы, буғай. Бигерәк тә ауыл халҡы ни эшләргә белмәне.

Аптыраашта ҡалған халыҡ холҡон аңлау ҡыйын түгел, эскеселеккә һабышыусылар күбәйҙе. Һәр дәүер үҙ геройҙарын таба, тиҫкәре геройҙар заманы тыуҙы. Урлашыу-алдашыу оҫталары өҫкә ҡалҡты. С. Мавроди кеүек алдаҡсылар бер кемдән дә өркмәй эш итте, һәр ғаиләнең тип әйтерлек кеҫәһенә инде. Минең алда ла, ғаиләмдең биш ваучерын ҡайҙа ҡуйырға, тигән һорау тыуҙы. Тормош иптәшем оҙаҡ уйлап торманы, «Восток» банкының ышаныусылары күбәйгәйне, «абруй» яулаған көндәре ине. Банк үҙе лә «ышаныслы» кешеләрҙе һайлап ала белде: Стәрлетамаҡ филиалына етәксе итеп коммунист, Социалистик Хеҙмәт Геройы Ф. Машкинды тәғәйенләне. Банктың эштәре унды, аҙаҡ тунды. Бына ошо уңышлы көндәрендә хәләл ефетем «Восток»ка барған. Тик һәр ваучер өсөн ун мең һум түләү мотлаҡ икән. Ҡатын түләгән, хатта банк директорына рәхмәт тә әйткән. Уңышлы, ҙур еңеү тойғоһо менән ҡайтып инде. Шулай, көтә-көтә арып, илап та алырһың. Теге ваучер ҡағыҙҙары әле лә кәштәлә ята.

Минеңсә, Рәсәй капитализмы тураһында һөйләгән музей кәрәк, уның Башҡортостандағы филиалына директоры итеп юғалған Р. Ҡадировты ҡуйыу яйлы булыр, сөнки «шәп мөдир» буласаҡ. Бына шулай, миллионерҙар, миллиардерҙар иҫәбе артҡан һайын, артта ҡала бирәбеҙ, сөнки һәр ҡалын кеҫәле үҙ юлына һөйрәй. Б. Абрамовичтарҙың беҙҙе ҡайҙа һөйрәүе билгеле. Музей алдына һәйкәлдәр ҙә ҡуйыр инем, ике тинтәккә: Горбачев һынын – ишәккә, ә Ельциндыҡын дөйәгә оҡшатып. “Ни өсөн дөйә?» тигән һорауға яуабым шул: ул осорҙа күптәр ғаиләләрен туйҙырыу өсөн, дөйә кеүек, сит илдәрҙән тауар ташыны.

**Ишғәле НУРҒӘЛИЕВ.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

## Аҡ таптар хаҡында

Уҙған 2012 йыл Франция императоры Наполеон илбаҫарҙарын Рәсәй биләмәһенән ҡыуып сығарыуға 200 йыл тулыу йылы итеп илебеҙҙә киң билдәләнде. Бородино яланында ике армия араһындағы генераль алыш реконструкцияланып, унда беҙҙең бер нисә энтузиаст, көслө рухлы егеттәребеҙ, ошо һуғышта ҡатнашҡан башҡорт казактарын һынландырып, уңышлы сығыш яһаны. Киң мәғлүмәт саралары: Интернет, телевидение, ваҡытлы матбуғатта ошо юбилейға арналған бик күп материалдар донъя күрҙе. Беҙҙең төбәктә тарих фәндәре кандидаты, доцент Ф. М. Сөләймәнов, тыуған яҡты өйрәнеүсе, Сибай ҡалаһының почетлы гражданы Р. И. Үтәғолов тарафынан әҙерләнеп, Сибай ҡала типографияһында нәшер ителгән «Һаҡмар һәм Яйыҡ азаматтары» исемле китап та әҙәбиәт һөйөүселәр иғтибарына лайыҡ. Башҡорт халҡы 1812 йылғы Ватан һуғышына Рәсәй империяһы биләмәләрендә йәшәгән урыҫ булмаған ҡәүемдәр

араһында иң күп яугир оҙатып, уларҙың оло батырлыҡтар күрһәтеүе, Париж ҡалаһына беренселәрҙән булып бәреп инеүе менән ғорурлана. Шуны ла әйтергә кәрәк: был һуғышта ҡатнашҡан 28 башҡорт полкының данлы юлы ныҡлап өйрәнелмәгән әле.

«Родина» тип аталған Рәсәй тарихи журналында (2012, 10-сы һан, 131 – 133-сө биттәр) Ҡазан ҡалаһынан тарих фәндәре кандидаты Хәлим Абдуллиндың «Татары в Отечественной войне 1812 года и в заграничных походах» исемле мәҡәләһе баҫылып сыҡты. 1812 йылғы Ватан һуғышы тарихын әҙме-күпме белгән кешене, минеңсә, был мәҡәләлә килтерелгән тарихи «факттар» ышандыра алмай. «1812 йылдың сентябрендә Ҡазан ҡалаһында генерал-майор Д.Н.Булыгин етәкселегендә ополчение ойоштоpола: йәйәүле батальон – командиры подполковник Н.Н.Чичаев; атлы полк командиры иһә майор Л. С. Григорьев була, – тип хәбәр итә Абдуллин. – Атлы полк күбеһенсә татар һыбайлыларынан торған». Автор татар улан полкының хәрби юлын бик ентекләп тасуирлай, һуғышсыларының фотоларын килтерә.

«Ағиҙел» журналының даими уҡыусыларына мәғлүм: урман түңгәүере ырыуы вәкиле, билдәле яҙыусы Яныбай Хамматов «Төньяҡ амурҙары» романы өсөн материал йыйғанда ике тапҡыр Ҡазан ҡалаһында була. Лобачевский исемендәге Ҡазан дәүләт университеты архивында, ниндәй эш менән йөрөгәнен әйткәс, уны архивҡа индермәй маташалар. Республика Дәүләт архивында яҡташыбыҙ Н. Ф. Славиндың Ҡазанда ойошторған ополчениеға арналған бәләкәй генә брошюраһынан башҡа мәғлүмәт таба алмай. 3000 йәйәүле һәм 300 һыбайлынан торған ополчение Ҡазанда һәм Өфөлә йәшәгән урыҫтарҙан ойошторолоп, араларында бер нисә мосолман фамилиялы кешеләр ҙә була.

Ошо факттарҙы дәлилләп, Я. Хамматов ополчение командиры генерал-лейтенант Толстойҙың император Александр I исеменә яҙған ялыуының күсермәһен килтерә. Унда Ырымбур губернаһының граждан губернаторы Наурузовтың һәләтһеҙлеге, Өфө һәм уның тирәһендәге ауылдарҙа йәшәгән урыҫтарҙы Ҡазанда ойоштороласаҡ ополчениеға ебәреүҙе һуҙыуы тураһында яҙылған була.

Я. Хамматовтың ҡунаҡханалағы бүлмәһенә татар яҙыусыһы Мирсәй Әмир килә һәм ике туғандаш халыҡтың дуҫлығын нығытыу йәһәтенән уның буласаҡ әҫәрендә «татар-башҡорт полктары» тип яҙыуын үтенә. Яҙыусының, әгәр «татар-башҡорт полктары» тип яҙһам, мине Өфөгә аяҡ та баҫтырмаясаҡтар бит, тип әйтеүенә Мирсәй Әмир: «Өфөләге фатирыңды алмаштырып, Ҡазанға күсеп килерһең», – тип яуаплай.

Х. Абдуллиндың мәҡәләһендә тарихи ысынбарлыҡҡа тап килмәгән факттар байтаҡ. Рәсәй империяһының көньяҡ-көнбайыш сигендә йәшәгән Ҡырым татарҙарынан ойошторолған Евпаторий, Перекоп, Симферополь «татар» атлы полктары тураһында хәбәр ителә. Башҡортостанды төйәк иткән мишәрҙәрҙе, типтәрҙәрҙе татар этносына индереп, ике типтәр һәм ике мишәр полктарының һуғышта үткән юлдарына ҡыҫҡаса байҡау яһай. Ә бит ул йылдарҙа мишәр менән типтәрҙәр айырым халыҡ һаналып, 1939 йылда халыҡ иҫәбен алғанда ғына татар булып киткәндәр.

Башҡорт халҡының үткәнен өйрәнгән Америка тарихсыһы Элтон Донелли «Завоевание Башкирии Россией в 1552 – 1740 годах» (1995 йылда «Ватан» корпорацияһы тарафынан нәшер ителгән) тип аталған китабында, «Башҡорт халҡы үҙ тарихын ҡәләм менән түгел, ә ҡылыс менән яҙған» тигән. Халҡыбыҙ

үҙенең азатлығын, ерен, динен һаҡлап һәм яҡлап, ғәмәлдә үҙен ҡол рәүешенә килтергән Рәсәй империяһы мәнфәғәттәре өсөн күпме ҡан түккән, меңәрләгән аҫыл ир-азаматтарын юғалтҡан?! Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уға ғына хас баҫалҡылыҡмы, әллә битарафлыҡ һөҙөмтәһеме – 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан бөтә башҡорт полктарының ойошторолоуы, хәрби юлы, яугирҙарының батырлығы, юғалтыуҙары тураһында тикшеренеүҙәр, «бармаҡтан һурып» түгел, ә тарихи мәғлүмәттәргә нигеҙләнеп, ныҡлап алып барылмай шикелле, аҡ таптар бик күп әле.

Күп милләттәштәребеҙ Әнүәр Әсфәндиәровтың «Киске Өфө» гәзитенең «Башҡорт ҡамусы» рубрикаһында сыҡҡан «1812 йылғы Ватан һуғышы ордены кавалерҙары» мәҡәләһендә үҙҙәренең ауылдаштарының, бәлки, туғандарының да исемендәрен күреп, ғорурлыҡ тойғоһо кисергәндер. Ғалимға оло рәхмәт әйтәһе генә ҡала.

Ғәмле, рухлы һәм заңлы, мөмкинлектәре булған милләттәштәребеҙ Сибай аҡһаҡалы Рамаҙан ағай Үтәғоловтан үрнәк алып, был эшкә дәррәү тотонорҙар, тип ышанғы килә.

2014 йылда Францияла Рәсәй армияһының Парижды яулап алыу эпопеяһын реконструкциялау планлаштырыла. Унда барасаҡ егеттәребеҙ меҫкен сүрәтендә йөрөмәһен, уларға ысын матди ярҙам да ойошторолһон ине. Ил төкөрһә, күл була, тигән бит халҡыбыҙ.

**Тәлғәт СОЛТАНОВ.**
**Сибай ҡалаһы.**

## Яңыса урын тапты

Ҡыйғы район гәзите редакцияһында хәтһеҙ йылдар хеҙмәт итеп, хаҡлы ялға сыҡҡас, нисек ваҡыт үткәрергә белмәй эс бошоп йөрөгәндә, «Ағиҙел» журналының уҙған быуат аҙаҡтарында нәшер ителгән һандарына юлыҡтым да уларҙы ҡыҙыҡһынып уҡырға тотондом. Ҡайһы берәүҙәр: «Был кеше бик артта ҡалған икән», – тип уйлауы ихтимал. Хикмәт унда түгел, сөнки матур әҙәбиәт бер ҡасан да иҫкермәй. Һәр быуын уны үҙенсә яңыртып уҡый, йәшәйешкә баһа бирә, фәһем ала. Үткән заманһыҙ киләсәк булмай, тарих тыумай. Дөрөҫөн әйткәндә, был һандарҙағы һәр әҫәр, шиғыр, хикәйә йөрәгемдә яңыса урын тапты. Йәшерен-батырын түгел, унда исемләнгән шағирҙар һәм әҙиптәр – мин күреп-танып белгән шәхестәр. Ғәлим Хисамов, мәҫәлән, беҙҙең төньяҡ-көнсығыш төбәктә «Совет Башҡортостаны» гәзитенең үҙ хәбәрсеһе булып эшләп киткәйне, хәҙер романдар ижад итә. Орлоғо уңдырышлы тупраҡҡа япты, күрәһең. Мин уға уңыштар теләп ҡалам.

Нажиә Игеҙйәнова – яҡташыбыҙ, Ҡыйғы районы Абзай ауылы ҡыҙы, өҫтәүенә минең уҡыусым да. Танылған шағир Тимер Йосопов та беҙҙең яҡтарҙың һыуын эсеп үҫкән, шиғриәткә беҙҙең редакция аша үтеп инде. Хәтерҙә, ул тәүге шиғырын «Тимербай Йосопов» имзаһы менән яҙғайны. Ул саҡтағы район гәзите редакторы Зиннәт ағай Вәлиев: «Шағирҙың исеме ҡатлы-ҡатлы булмай ул» тип, «бай»ын һыҙып ташланы. Ошо мәлдән башлап шиғриәттә Тимер Йосопов исемле шағир пәйҙә булды.

Өфөлә КПСС өлкә комитеты курстарында уҡып йөрөгәндә, Тимер Йосоповтың Актерҙар йортонда үтәсәк шиғриәт кисәһенә саҡырыу ҡағыҙы бирҙеләр.

Мин унда шатланып барып ултырҙым. Сара матур ғына барған арала залдан бирәү һорай һалды:

– Тимер ағай, шиғырҙы көн дә яҙаһығыҙмы, әллә илһам килгәндәме?

– Ҡустым, шиғыр кирбес түгел, уны көн дә шапылдатмайҙар, – тип яуапланы шағир. (Борон ауыл ерендә кирбесте ағас ҡалыпҡа шапылдатып һуға торғайнылар, шуны күҙ уңында тотҡандыр инде.) Отҡор яуаптан һуң залдың алҡыштарға күмелгәне әле лә онотолмаған.

Форсат тейгәндә шуны ла әйтәйем: Яныбай Хамматовтың «Иҙел башы» романында күрһәтелгән персонаждар бөтәһе лә тиерлек беҙҙең замандаштар, улай ғына ла түгел, Башҡортостандың балҡып янған йондоҙҙары ине. Арыҫлан Мөбәрәков, Заһир Исмәғилев, Рәғиҙә Янбулатова, Мәғәфүр Хисмәтуллин һ.б. – барыһы ла беҙ күреп белгән шәхестәр. Халыҡ театрҙары фестивале уҙыр алдынан Арыҫлан ағай Мөбәрәков Ҡыйғы башҡорт халыҡ театры әҙерләгән спектаклде шымартырға, «ҡалыпҡа ултыртырға» килеп йөрөй торғайны. Беҙ уның менән иркен аралашып йәшәнек. Халыҡсанлығы, ябайлығы менән айырылып тора ине. Уның ярҙамы менән театр Баязит Бикбайҙың «Ҡарлуғас» драмаһын сәхнәләштереп (режиссеры – Мөхтәсим Лоҡманов), Сыуашстандың баш ҡалаһы Чебоксарҙа ойошторолған Бөтә Рәсәй фестивалендә уңышлы сығыш яһап, лауреат исеменә лайыҡ булды.

Мин заманында оҙон-оҙаҡ йылдар район мәҙәниәт бүлегенә, йәмәғәт башланғысында мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренең район профсоюз ойошмаһына етәкселек иттем. Сер түгел, ул саҡтарҙа республика күләмендә семинарҙар, айлыҡ курстар, профсоюздың республика комитеты пленумдары ойоштorola торғайны. Унда яҙыусылар, артистар менән булған осрашыуҙар әле лә хәтеремдә, ара-тирә ҡыҙыҡ хәлдәр ҙә килеп сыға торғайны.

Актерҙар йортонда ойошторолған бер осрашыуҙы композитор Заһир Исмәғилев үҙе алып барҙы. Тамаша шыма ғына барған бер мәлдә командировканан яңы ҡайтып төшкән Рафаэль Сафин залға һуңлап, ашыҡ-бошоҡ килеп инде. Заһир ағай уны шунда уҡ туҡтатып, һүҙ бирә һалды. Р. Сафин киң итеп тын алды ла шиғыр уҡырға тотондо, ләкин бер аҙҙан ыҡ-мыҡ итте лә туҡтап ҡалды. Онотто, ахырыһы, ә «шпаргалка»һы булмай сыҡты. Аптырағас, ҡыйын хәлдән сығыу юлын эҙләне һәм: «Әллә йырлайым микән?» – тине. Эштең ниҙә икәнен һиҙеп ҡалған З. Исмәғилев: «Фәни-ил (Ишморатов булһа кәрәк), йәһәт кенә баяныңды алып сыға һал! Рафаэль, йырлайым, ти бит», – тип ҡысҡырҙы. Баянға эйәреп йырланған йыр былай матур ғына сыҡты. Дәррәү ҡул саптыҡ.

Р. Сафиндың Ҡыйғыға һуңғы ҡайтыуында уның менән осрашыу район мәҙәниәт йортонда ойошторолдо. «Ҡыр ҡаҙҙары» шиғырын уҡығанда, һәүәҫкәрҙәр уны аяғүрә баҫып тыңланы. Ошонан һуң яҡташыбыҙҙы башҡаса күрмәнек. Мәрхүмдең кәүҙәһе тыуған тупрағында ерләнеүен һуңынан ғына ишетеп белдек. Ауыр тупрағы еңел булһын инде! Иншалла.

## Батыр даны юғалмай

Әйткәндәй, журналдарҙы тешем-тырнағым менән йәбешеп уҡый торғас, Сәғит Әлибаевтың Бөйөк Еңеүҙең 50 йыллығына арналған «Онотолмаҫ йылдар шаңдауы» (1995, 4-се һан) исемле яҙмаларына юлыҡтым. Унда Башҡорт атлы дивизияһы яугирҙарының илбаҫар дошманды батырҙарса ҡыйратыуы хаҡында

һүҙ бара. Улар гитлерсыларға, хатта Гитлерҙың үҙенә, тотош фашизмға полный Ҡиәмәт көнө тыуҙырҙы, тип яҙа автор. Баҡһаң, унда исемдәре онотолоп барған, быға тиклем бер ҡайҙа ла телгә алынмаған Ҡыйғы районы яугирҙары ла бар икән. Һуғышсылар менән бергә ут эсенә инергә әҙер торған политработниктар телгә алына. Ғилемхан Хәсәновтың (Йонос ауылы), Закир Ҡәйүмовтың (Үрге Ҡыйғы), капитан Хәким Уйылдановтың (Туғыҙлы) дошман менән аяуһыҙ алышыуҙары асыҡланды.

Ә бына Ислам Рахманғолов (Үрге Ҡыйғы) үткән алыштарҙа ауыр, мөһим махсус заданиелар үтәй торған булған. Яраланған командирын алмаштырып, отделениены тотҡарһыҙ алға әйҙәгән, дошманды яйлы, уңайлы бейеклектәрҙән, тәрән окоптарынан һөрөп сығарып, дивизияның алға табан хәрәкәтен еңеләйткән. Ул наградаға ла лайыҡ булған. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, яҡташтарыбыҙға тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайтырға насип булмаған, һуғыш яланында ятып ҡалғандар. Ерләнгән төбәктәре генә билдәле, ә исемдәре тарих төпкөлөндә күмелеп ҡалды. Уларҙың данлы исемдәрен халыҡҡа ҡайтарыу – эҙәрмәндәрҙең бурысы.

… Бер саҡ шәхси таксиҙа Силәбе өлкәһе Златоуст ҡалаһына китеп барам. Таксист егеттең Ислам Рахманғоловтың ейәне булыуын һиҙенепмелер, һорай һалдым.

– Марс, фамилияң нисек әле?

– Рахманғолов, – тип яуаплай таксист.

– Ә бынан күп йылдар элек һуғыш яланында ятып ҡалған яугир Ислам Рахманғолов һиңә кем була?

– Олатайым. Ләкин беҙ уның тураһында бер ни ҙә белмәйбеҙ. Атайым да белмәй ине. Олатайым һуғышҡа киткәндә ул тыумай ҡалған…

Ислам Рахманғолов сығышы менән Салауат районы Ахун ауылынан. Ҡыйғы ҡыҙы Гөлбаныу Сафина менән өйләнешеп, татыу тормош ҡоралар. Уларҙың ике улдары – Афзал (1932) менән Әзүл (1935) донъяға килә. Кесе улдары Аданис 1942 йылда, атаһы һәләк булырҙан бер йыл алда, тыуып өлгөрә. Уларҙың «атай!» тип өндәшер кешеһе булмауы һис тә ғәжәп түгел, балалыҡ йылдарын, йәшлеген, бәхетен һуғыш урланы шул.

Гөлбаныу инәй бик йәшләй тол ҡалып, улдарын ифрат ауыр шарттарҙа үҫтерә, әммә бирешмәй, еңеү хаҡына балаларын аяҡҡа баҫтырҙы. Афзал – тракторсы, Әзүл менән Аданис водитель һөнәрен үҙләштерҙе. Үҙҙәренә алмашҡа алты бала үҫтерәләр. Шулай итеп, Ислам Рахманғоловтың ейәндәре бөгөнгө ауыр замандарҙа тырышып-тырмашып донъя көтә.

1943 йылдың ноябрендә һәләк булған кавалерист Ислам Рахманғоловтың кәүҙәһе Гомель өлкәһе Волхошинка ауылы эргәһендә ерләнә.

**Марсель САБИРЙӘНОВ.**
**Ҡыйғы районы.**

## Китаптың исем туйы

Беҙҙең Әбйәлил – әҙәби ижадҡа маһир, сәсән телле кешеләргә ифрат бай район ул. Шуларҙың бөтәһенең иң яҡшы әҫәрҙәренән альманах туплап нәшер иткәндә ниндәй яҡшы булыр ине, тигән фекерҙе өс йыл элек билдәле шағирыбыҙ Әсхәл Әхмәт-Хужа әйткәйне. “Йәйғор” әҙәби ойошмаһы был идеяны күтәреп

алып, йыйынтыҡ төҙөү бурысын тағы бер билдәле яҡташыбыҙ Гөлшат Әхмәтҡу-жинаға йөкмәтте. Һәм ураулы-мәшәҡәтле юлдар үтеп, был китап, ниһайәт, ойошманы үҙ ҡурсауы аҫтына алған район хакимиәтенең мәғлүмәт бүлеге начальнигы Ленизы Сәғәҙиеваның ярҙамы менән Аҫҡар типографияһында донъя күрҙе.

Күптән түгел район үҙәк китапханаһында “Әбйәлил – ул беҙҙең һөйгән ил” альманахының исем туйы менән бергә “Ҡышҡы йәйғор” исемле ҙур шиғриәт байрамы үтте. Уны китапханасы Рәхимә Мусина ойоштороҙо һәм алып барҙы. Уҡыу залының шығрым тулы булыуы күптәр өсөн был мөһим ваҡиға икәнлеген һөйләй ине. Ленизы Камил ҡыҙының тантаналы тәбрик һүҙҙәре сараны баштан шатлыҡлы тулҡындарға көйләне. Уның артынса уҡ алып барыусы минән яңыраҡ яҙған “Әбейҙәргә ни етмәй?” шиғырымды уҡыуымды һораны. Баҡһаң, бының сәбәбе лә булған икән: “әбейҙәргә лә ижади мөхит, фекерҙәштәр кәрәк” тип, уртаға 70 – 90 йәшлек инәйҙәр сығып теҙелде. Улар – альманахтың “Сәсәндәр ижады” бүлегенә ингән авторҙар икән. Иң ҡыҙығы шунда: инәйҙәр – Ҡырҙастан Мәфтуха Мусина, Һәйетҡолдан – Вәсилә Садиҡова, Үтәгәндән – Хәнифә Әбүбәкерова, Рыҫҡужанан Фатима Һибәтова – барыһы ла Үтәгән ауылы ҡыҙҙары, бер туған булмаһалар ҙа, апайлы-һеңлелеләр. Бувылдар тип аталған араның ҡыҙҙарына Хоҙай йәлләмәй сәсәнлек һәләте биргән! Уларҙың тәрән мәғәнәле ижады күңелдәрҙе әсир итте, айырыуса 87 йәшлек Мәфтуха апайҙың “Шиғыр яҙа әбейҙәр” тигән шаян шиғырын, Хәнифә апайҙың ошо сәсәндәргә арнап яҙған йор таҡмаҡтарын тамашасылар алҡышҡа күмде. Инәйҙәрҙең тағы бер һеңлеһе – Ишкилде ауыл клубы мөдире Мөслимә Мәсәлимова самауыр менән бейеү бүләк итте.

Гөлшат Әхмәтҡужина үҙенә ҡуйылған бурысҡа яуаплы ҡарап, ауылдар буйлап йөрөп йыйып, 67 авторҙың шиғри, прозаик, публицистик әҫәрҙәрен туплаНы. Ул баш һүҙҙә тағы 20 яҡташыбыҙҙы һанап, уларҙың төрлө сәбәптәр арҡаһында альманахҡа инеүҙән баш тартыуына үкенес белдерә. Бынан тыш, киң күңелле әбйәлилдәр Сәләх Кулибай, Яныбай Хамматов, Сажиҙә Сөләймәнова, Агиш Ғирфанов кеүек Әбйәлилдә эшләп киткән әҙиптәргә лә, Рамазан Өмөтбаев, Зиннур Нурғәлин, Ким Әхмәтйәнов, Шакир Бикҡолов, Рәмил Ҡол-Дәүләт кеүек данлыҡлы яҡташтарыбыҙға ла, Өфөлә йәшәүсе йәш талантларыбыҙ Гөлназ Ҡотоева, Гөлдәр Бүләкбаева-Биргәнова, Гөлнара Хәлфетдинова, Земфира Әбүшахманова һәм башҡаларға ла китаптан урын бирҙе. Ошо сама шағир-яҙыусылары булған һәм ошондай оло проектҡа тотонған тағы берәй район бармы икән?! Әллә тағы “нимә сыҡһа ла, шул әбйәлилдәрҙән сығамы”?

Әбйәлилдәр, был альманахтан тыш, һәр береһе айырым китап нәшер итеү менән дә шөғөлләнә. Һуңғы арала йыйынтыҡтарын ҡулға алып ҡыуанған Мәүлиә Сафиуллина, Гөлдәр Бүләкбаева, Фатима Һибәтова, Азамат Усманов, Файза Мәғәсүмова, мин үҙем китапханаға бүләк итеп, тыуған яҡты өйрәнеү бүлеге етәксеһе Венера Мәһәҙиева төҙөгән “Автор тәҡдим итә…” күргәҙмәһен тағы ла тулыландырҙыҡ. Әйткәндәй, Магнитогорскиҙа йәшәгән Азамат менән Файзаның шиғырҙары Ҡазанда нәшер ителгән Силәбе әҙиптәренең уртаҡ “Дуслык тирмәсендә” йыйынтығына ингәндәр. Һәүәҫкәр композитор ҙа булған А. Усмановтың яңы йырҙары кисәбеҙҙе тағы йәмләндереп ебәрҙе.

– Шағирҙар һәр ваҡыт бер-береһенә мохтаж. Үҙе ижад иткән кеше генә икенсе ижадсыны дөрөҫ аңлай, ялҡмай тыңлай ала. Сөнки улар икеһе лә, башҡа

берәү ҙә булдыра алмағанса, шиғри һүҙҙең бәсен, тәмен тоя белә, – тип дөрөҫ әйтте Рәхимә Мөхитдин ҡыҙы. Беҙ нәҡ ошондай байрамдарҙа бер-беребеҙҙең ижады менән танышабыҙ, яңы шиғырҙарын тыңлап кинәнәбеҙ, үҙ-ара кәңәштәр бирешә beләбеҙ. Был юлы күптән арабыҙҙан юғалып торған йә яңы килеп ҡушылған шағирҙар – Мәҙинә Йәғәфәрова, Айһылыу Хәсәнова, Илгиз Истамғәлин, Мәүлиә Сафиуллина, Нуриҙә Илһамова, Рәйес Батталовтар һүҙ алыуы ҡыуанyслы булды. Рәйестең төпкөл ауылдан инвалид коляскаһында килеп етеүен геройлыҡҡа тиңләргә булыр ине.

Альманах оҙаҡ эшләнде. Ҡайһы берәүҙәр, уны күрә алмай, арабыҙҙан китеп барҙы. Апайлы-һеңлеле Хәлилдән Маһинур Дәүләтҡолова менән Байымдан Римма Таһирова тураһында бер туғандары Роза Таһированың хәтирәләрен тыңлап, мәрхүмәләрҙе иҫкә алып киттек. Шиғырҙарына үҙе көйҙәр яҙған Маһинур апайҙың улы Хәлил Зиянбирҙин, ейәндәре башҡарыуында йырҙар тыңланыҡ. Шулай уҡ алдараҡ вафат булған “йәйғорсылар” Мөнирә Кашапова, Роберт Ғимранов, Мазафар Абдуллин, Булат Мөлөковтарҙың әҫәрҙәре лә йыйынтыҡта лайыҡлы урын алһын өсөн тырышҡан тормош иптәштәре, туғандары ихтирамға лайыҡ.

Сараны ойоштороусылар альманахты нәшер иткән типография коллективын да (етәксеһе – Рәсимә Мостафина) саҡырып отто. Берҙән, 550 битлек был ифрат ҡалын китапты бер ниндәй автоматикаһыҙ, ҡул көсө менән эшләп ултырған ҡыҙҙарҙың үҙҙәренә төбәп рәхмәт һүҙҙәребеҙҙе еткерә, бүләгебеҙҙе бирә алыу мөмкинлеге булһа, икенсенән, улар төпкөл ҡараңғы бүлмәлә бәләкәй генә эш хаҡына ниндәй сауаплы, кешеләр өсөн шатлыҡлы эш башҡарып ултырыуҙарын аңланылар.

Кисәнең аҙағында һуңғы осорҙа етәксеһеҙ ҡалған “йәйғорҙар” бер тауыштан ойошманы етәкләүҙе ике тиҫтә йыл самаһы район гәзитендә “Йәйғор” әҙәби битен алып барған, һәр береһенең ижадын үҙенең биш бармағы кеүек белгән Рәхимә Мусинаға ышанып тапшырҙылар. Китапхана директор вазифаһында яңы эш башлаған Илүзә Шәйәхмәтова әҙиптәрҙе дуҫлыҡты өҙмәҫкә, әҙәби сараларҙа әүҙем ҡатнашырға саҡырҙы.

**Флүрә НИЗАМОВА.**
**Әбйәлил районы, Хәлил ауылы.**

## «Хәтер күпере» яраларҙы яңыртты

Шағирә Әлфиә Әсәҙуллинаның «Ағиҙел» журналында (5-се һан, 2012 йыл) баҫылған «Хәтер күпере» поэмаһын уҡығандан һуң, әҫәрҙән айырыла алмай, оҙаҡ уйланып ултырҙым. Ул үҙенең ҡартатайы тураһында ғына түгел, минең олатайым тураһында ла яҙған, тигән фекергә килдем. Минең олатайым да һуғыштың тәү көнөнән үк һуғышҡа алынып, 1942 йылда яраланып ҡайтҡан. Ә бер аҙ һауыҡҡас, үҙе теләп яңынан һуғышҡа китә һәм Курск дуғаһында һәләк була. Минең өләсәйем дә олатайымды ғүмер буйы көттө. Шағирә әҫәрендә донъялағы иң ҡәһәрле, иң ҡан ҡойғос, мәрхәмәтһеҙ һуғыш тураһында, үҙе шунда ҡатнашҡан кеше һымаҡ итеп, ундағы ваҡиғаларҙы бермә-бер һүрәтләй. Улай ғына ла түгел, ул милли геройыбыҙ Шайморатов генерал дивизияһының батырлыҡтарын да уҡыусыны ышандырырлыҡ итеп тасуирлай алған. Шулай уҡ

поэмала тарихи ваҡиғалар, колхоз төҙөү йылдары, һуғышҡа тиклемге ауыл хәлдәре, кеше яҙмыштары оҫта һүрәтләнгән. Шағирә ҡәһәрле һуғыш михнәттәрен, уның миллиондарса ҡорбандарын, емерелгән яҙмыштарҙы, фашизмды иҫкә төшөрөп кенә ҡалмай, киләһе быуынды был хаҡта бер ҡасан да онотмаҫҡа саҡыра. Шул уҡ ваҡытта беҙҙең хәҙерге тормоштоң тағы ла ғәмһеҙерәк булыуы, аҡса, байлыҡ артынан ҡыуыусы кешеләрҙең тормош ҡиммәттәрен бер тингә лә ҡуймай яуызлыҡтар ҡылыуы, битарафлыҡ йәнәш булыуы тураһында һәммәбеҙҙе иҫкәртә:

*Ғүмер буйы аңлай алмам*
*Һуғыш көҫәүселәрҙе.*
*Бер-береһенә асыу һаҡлап,*
*Юҡҡа үсәүселәрҙе.*
*Тыныслыҡҡа тынғылыҡ юҡ.*
*Тыныслыҡмы тын ҡура?*
*Әлләме «ҡалын кеҫәләр»*
*Мәкерле «уйын» ҡора?!*
*Ата-баба яулағандың*
*Ҡиммәте мәллә кәмей?!*
*Донъябыҙҙы баҫып бара*
*Наркомания, хәмер...*
*Тәмәкене борлаталар*
*Завод мөрйәһе төҫлө.*
*Кеше үҙенә туҡтауһыҙ*
*Ҡәбер ҡаҙыған төҫлө...*

Ғөмүмән, бындай ҙур темаларҙы үҙенә һыйҙырған әҫәрҙе поэма-эпопея тип атарға ла булыр ине.

Әлфиә Әсәҙуллина беҙҙең быуын яҙыусылары араһында тәүгеләрҙән булып һуғыш, тыныслыҡ темаларын күтәргән күләмле әҫәр ижад иткән. Ул минең һымаҡ үткән быуат уҡыусыһы өсөн дә, хәҙерге мәктәп уҡыусылары өсөн дә, киләһе быуындар өсөн дә хәтерҙә мәңгелеккә уйылып ҡалырлыҡ, һәр кемде уйландырырлыҡ, илатырлыҡ һәм киләсәккә ышаныс уятырлыҡ тәрбиәүи әһәмиәтле поэма яҙырға тәүәккәлләгән икән, быға ысын йөрәктән һөйөнөргә һәм ҡәләмдәшкә уңыштар теләргә генә ҡала.

**Римма ҒӘЛИМОВА.**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

### Асҡында – әҙәбиәт көндәре

Асҡын районында Яҙыусылар берлеге рәйесе урынбаҫары Ф. Ғөбәйҙуллина етәкселегендә бер төркөм ҡәләм оҫталары Башҡорт әҙәбиәте көндәре уҙғарҙы. Яҙыусыларҙы район сигендә үк икмәк-тоҙ менән ҡаршы алдылар.

Район хакимиәте башлығы Фларит Усманов ҡабул итеп, делегацияны төбәктең тарихы, бөгөнгөһө һәм киләсәккә пландары менән таныштырғас, яҙыусылар өс төркөмгә бүленеп, ауылдарға таралды.

Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Ринат Камал, Фәниә Ғәбиҙуллиналар Ҡарткисәк, Солтанай, Упҡанкүл, Петропавловка, Ҡыйғаҙы, ә Ҡәҙим Аралбай, Дилә Булгакова, Зөфәр Вәлит һәм Айгиз Баймөхәмәтов Иҫке Ҡаҙансы, Мөтәүбаш, Ҡышлауйылға, Баҙансат, Яңы Ҡаҙансы, Ирек Кинйәбулатов, Рәшит Шәкүр, Әнисә Таһирова, Мөхәммәт Закировтар төркөмө Табаҫҡытамаҡ, Үршиҙе, Солтанбәк, Үрмияҙ, Күбияҙ ауылдарына һәм 1-се Асҡын урта мәктәбе уҡыусылары янына йүнәлде.

Әҙиптәр, яҙғы каникул осоро булыуға ҡарамаҫтан, мәктәптәрҙә, кисен ауыл клубтарында сығыш яһаны. Һәр урында яҙыусыларҙы ихлас ҡаршыланылар, ҡайҙа ла осрашыуҙар мәктәп уҡыусыларының, һәүәҫкәр артистарҙың номерҙары менән аралаш барҙы.

Өсөнсө көндә Өфө ҡунаҡтары 1-се урта мәктәптә «Һаумы, әкиәт!» байрамында, «Василек» балалар баҡсаһында, 2-се урта мәктәптә әҙәби кисәләр уҙғарҙы, район башҡорттары ҡоролтайының Таныш һәм Балыҡсы ырыуҙары йыйынында ла илһамлы һүҙ әйтте.

### Драматургтың ижад кисәһе

Дүртөйләнең Мәҙәниәт һәм техника һарайында драматург, прозаик, һәүәҫкәр композитор Мөҙәрис Мөсифуллиндың ижад кисәһе уҙҙы. Әҙипте район хакимиәте башлығы Р. Хәйруллин, «Тулҡын» әҙәби берекмәһе етәксеһе Р. Хафизов, ҡала һәм райондың учреждениелары, йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре, Өфөнән – БР Яҙыусылар берлеге идараһынан Ф. Ғөбәйҙуллина, «Ағиҙел» журналы редакцияһынан С. Шәрипов, БДУ профессоры Т. Килмөхәмәтов ҡотланы. Байрамды М. Мөсифуллиндың йыр-көйҙәре, уның күп яҡлы ижад биографияһын сағылдырған телекадрҙар биҙәне, сәхнә әҫәрҙәренән өҙөктәр уйналды.

### Китапханалағы осрашыуҙар

Зәки Вәлиди исемендәге Республика милли китапханаһында яҙыусылар менән осрашыуҙар йыш була.

Яңыраҡ Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе Риф Тойғонов, шағирҙар Ирек Кинйәбулатов, Рәмил Йәнбәк һәм Сергей Янаки менән әҙәби кисә уҙғарылды. Осрашыуҙа ҡала китапханалары хеҙмәткәрҙәре әүҙем ҡатнашты. Прозаиктар Әмир Әминевтың, йәнә Сабир Шәриповтың ижад кисәләре лә илһамлы ойошторолдо.

### Хәтер кисәләре

Башҡортостан Яҙыусылар берлегендә арабыҙҙан иртә киткән билдәле шағир Марис Нәзировтың хәтер кисәһе уҙғарылды. Сараны идара рәйесе Риф Тойғонов асып, М. Нәзировтың шиғриәттә һәм йәмәғәт тормошонда яҡты эҙ ҡалдырыуы хаҡында һөйләне. Ә филология фәндәре докторы, профессор Рәйеф Әмиров, шағирҙар Марат Кәримов, Ирек Кинйәбулатов, Мөхәммәт Закиров, «Мираҫ» (Татарстан) журналының баш мөхәррире Илфаҡ Ибраһимов, композитор Алик

Лоҡманов, «Башҡортостан» радиотелекомпанияһы хеҙмәткәре Хәлисә Мөхәмәҙиева, «Китап» нәшриәте мөхәррире Гөлшат Абдуллина һәм башҡалар мәрхүм ҡәләмдәшебеҙ хаҡында йылы хәтирәләр менән уртаҡлашты. Шулай уҡ саҡмағоштар – район гәзите мөхәррире Фәнис Әмирханов һүҙ алды, сәхнә оҫталары Луиза Ишморатова, Гөлзәмиә Ситдиҡова, Илмира Сәләхова, Фидан Бикмурзин һ.б. М. Нәзиров шиғырҙарына йырҙар башҡарҙы.

***

Башҡортостан Яҙыусылар йортоноң конференц-залында күренекле урыҫ шағиры, «Бельские просторы» журналының беренсе мөхәррире Юрий Андриановтың (тыуыуына 60 йыл тулыу айҡанлы) тормошона һәм ижадына арналған хәтер кисәһе уҙҙы.

Кисәлә шағирҙың бик күп ҡәләмдәштәре һәм хеҙмәттәштәре: Ҡ. Аралбай, Н. Грахов, Ә. Әминев, К. Йыһаншин, И. Кинйәбулатов, Т. Ғәниева, А. Докучаева, С. Чураева, С. Янаки һәм башҡалар һүҙ әйтте.

Улар шағирҙың әҙәби мираҫына юғары баһа биреп, артабан уның һайланма әҫәрҙәрен һәм уның хаҡында иҫтәлектәр китабын сығарыу хаҡында тәҡдимдәр яһаны.

Һуңынан мәрхүмдең ҡатыны Мария Александровна, ҡыҙы Анастасия яҙыусыларға оло рәхмәт белдерҙе, Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе Риф Тойғонов уларға сәскәләр гөлләмәһе бүләк итте. Юбилей сараһын шағирә Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина алып барҙы.

### Йыр тамашаһы

Хөсәйен Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Сәйҙә Ильясованың, нигеҙҙә, башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарған ижад тамашаһы булды.

Кисәлә шағирҙар Ирек Кинйәбулатов, Гөлфиә Юнысова, йырсының остаздары Флүрә Килдейәрова, Елена Мороз, йәшерәк быуын сәхнә оҫталары Урал Мортазин, Миңлеғәфүр Зәйнетдинов, Әлфиә Кәлимуллина, Гүзәл Үмәрғәлина, Эльмира Юлдашева, Рәмил Ғәйзуллин етәкселегендәге республиканың халыҡ музыка ҡоралдары милли оркестры сығыш яһаны.

### Дәүләт флагы – вулкан һыртында!

Күренекле яҙыусы, сәйәхәтсе Камил Йыһаншин Көньяҡ Американан йөрөп ҡайтты:ул Аргентиналағы Аконкагуа вулканына күтәрелде. Донъялағы иң бейек вулкан ул Аконкагуа. Өфө эшҡыуары Эмиль Жданов менән улар Аргентина менән Чилиҙы тоташтырған автотрассанан башлай сәфәрҙәрен. Тау ҡырластарынан ике табан ғына һыйырлыҡ утыҙ саҡрым араны өс мулға әйберҙәрен артмаҡлап уҙалар. Сәфәрҙә уларҙы аҡ шторм ҡаршылай. Биш мең метрҙан бейектәрәк кислород әҙәйә, ун биш градуслы һыуыҡтар ыҙалата. Вулкандың түмәләсенә артылырҙан алда өс тәүлек ҡар ҡаплаған палаткала көн күрәләр...

Интуристарҙың сәфәре нәҡ Сыбаркүл метеориты донъя шаулатҡан ваҡытта уҙа. «Аргентина кешеләре республикабыҙҙы, Өфөнө юҫыҡлап белмәйҙәр, бары тик Уралды ғына картанан таныйҙар, – ти ҡәләмдәшебеҙ. – Әлбиттә, мин уларға Башҡортостаныбыҙ, баш ҡалабыҙ хаҡында һөйләнем. База лагерында иһә ҙур бағанаға бик күп эре ҡалаларҙың исеме яҙылған таҡтасыҡтар ҡағылғайны, шулар эргәһенә «Өфө» тигән күрһәткес беркеттем, вулкан һыртына Башҡортостан Республикаһының дәүләт флагын ҡаҙаным!»

### Ҡотлайбыҙ!

Башҡортостан Республикаһы Президенты Указына ярашлы, балалар һәм үҫмерҙәр өсөн әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендәге Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премияһы «Һайланма әҫәрҙәр, II том» китабы өсөн яҙыусы **ӘЛИБАЕВ Сафуан Әфтәх улына (Сафуан ӘЛИБАЙҒА)** бирелде.

Оҙаҡ йылдар «Ағиҙел» журналы редакцияһында бергә эшләгән ҡәләмдәшебеҙҙе оло наградаға лайыҡ булыуы айҡанлы ихлас күңелдән тәбрикләйбеҙ!